# Ағиҙел

**Өфө,**
**декабрь**
**2012**

**12(1076)**

ӘҘӘБИ-НӘФИС ҺӘМ ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ ЖУРНАЛ
ЛИТЕРАТУРНО-ХУДОЖЕСТВЕННЫЙ
И ОБЩЕСТВЕННО-ПОЛИТИЧЕСКИЙ ЖУРНАЛ

Ойоштороусылары:

Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте,
Башҡортостан Яҙыусылар берлеге,
Редакция коллективы.

Учредители:

Правительство Республики Башкортостан,
Союз писателей Республики Башкортостан,
Коллектив редакции.

1923 йылдың март айынан башлап сыға.
Башҡорт телендә айына бер тапҡыр баҫыла.
Издается с марта 1923 года.
Выходит один раз в месяц на башкирском языке.

АҒИҘЕЛ ● АГИДЕЛЬ

***Баш мөхәррир***

Әмир ӘМИНЕВ

***Мөхәрририәт:***

Мөхәмәт БАҒЫШАЕВ,
Рауил БИКБАЕВ,
Наил ҒӘЙЕТБАЕВ,
Ҡамилә ДӘҮЛӘТОВА
Рәмил ЙӘНБӘК *(баш мөхәррир урынбаҫары)*,
Марат КӘРИМОВ,
Фәнил КҮЗБӘКОВ *(бүлек мөхәррире)*,
Ноғман МУСИН,
Риф ТОЙҒОНОВ,
Ғайса ХӨСӘЙЕНОВ,
Рәшит ШӘКҮР,
Сабир ШӘРИПОВ *(бүлек мөхәррире)*,

***Редакция хеҙмәткәрҙәре:***

Гөлназ Ҡотоева *(яуаплы сәркәтип)*,
Мәхмүт Хужин *(бүлек мөхәррире)*,
Юлай Янбаев *(баш мөхәррирҙең хужалыҡ эштәре буйынса урынбаҫары)*,
Гүзәлиә Тутаева *(корректор)*,
Рәйсә Ҡамалетдинова, Айһылыу Мофазалова *(компьютерҙа йыйыусылар)*,
Роза Шәйнурова *(компьютерҙа нәшергә әҙерләүсе)*,
Зөлфиә Биктимерова, Рима Нәзифуллина *(бухгалтерҙар)*.

Журнал Элемтә, мәғлүмәт технологиялары һәм масса коммуникациялары өлкәһендә күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттә 2009 йылдың 14 августа теркәлде.
Таныҡлыҡ ПИ № ФС77-37206.

---

Журнал редакцияла компьютерҙа йыйылды һәм биттәргә һалынды.
Баҫырға ҡул ҡуйылды 06.12. 2012. Офсет ҡағыҙы. Форматы 70х100 1/16.
“Times” гарнитураһы. Офсет ысулы менән баҫылды.
Шартлы баҫма табаҡ 15,6. Иҫәп нәш. табаҡ 18,1.
Тиражы 3 350 экз. Һатыуҙа хаҡы ирекле. Заказ № 2.0217.12.

---

**Беҙҙең адрес:** 450001, Башҡортостан Республикаһы,
Өфө ҡалаһы, Октябрь проспекты, 2, 4-се ҡат.
«Ағиҙел» журналы редакцияһы.
**Наш адрес:** 450001, Республика Башкортостан,
г.Уфа, проспект Октября, 2, 4-й этаж.
Наш адрес в Интернете: Agideljurn@mail.ru.
http://agidel-rb.ru.

---

Баҫма Матбуғат һәм киң мәғлүмәт коммуникациялары буйынса федераль агентлыҡтың финанс ярҙамында сығарылды.
Выпуск издания осуществлен при финансовой поддержке Федерального агенства по печати и массовым коммуникациям.

---

Башҡортостан Республикаһының «Өфө полиграфкомбинаты» дәүләт унитар предприятиеһында баҫылды.
(450001, Өфө ҡалаһы, Октябрь проспекты, 2).
Отпечатано в Государственном унитарном предприятии Республики Башкортостан «Уфимский полиграфкомбинат».
(450001, г.Уфа, пр.Октября, 2).

---

Банкыла беҙҙең реквизиттар: журнал «Агидель» ИНН 0274014887
р/с 40602810200830000004, к/с 30101810600000000770
филиал ОАО «Урало-Сибирский» банк г.Уфы, БИК 048073770

**© «Ағиҙел», 2012 (12,1076)**

# БЫЛ ҺАНДА:

ШИҒРИӘТ

**Факиһа Туғыҙбаева.** Тормош ағасы. Ш и ғ ы р ҙ а р. ........................5
**Мөхәммәт Закиров.** Дауылдарҙы тыйыу файҙаһыҙҙыр… Ш и ғ ы р ҙ а р. ........................................................................18
**Ҡамса Мортазин.** Иҫерткес мәл. Ш и ғ ы р ҙ а р. ............................23

СӘСМӘ ӘҪӘРҘӘР

**Гөлнур Яҡупова.** Ҡатындар. Т р и л о г и я. Кесе йыһан – Оло йыһан. Өсөнсө китап. Аҙағы. ............................28

СӘХНӘ ӘҪӘРҘӘРЕ

**Йыһат Солтанов.** Сөйөмбикә һылыу. Д р а м а - х р о н и к а. .........102

ЖУРНАЛ УҠЫУСЫЛАР ИЖАДЫ

**Земфира Сәхипова.** Р о б а ғ и ҙ а р. ..............................................143
**Зөфәр Сабирйәнов.** Ҡоштоң пар ҡанаттары. Ш и ғ ы р ҙ а р. .......145
**Фәрит Яҡшығолов.** Рухи көсөм. Ш и ғ ы р ҙ а р. ........................148

*“Ағиҙел”гә – 90 йыл*

Нәфис әҙәбиәт: хыял, ысынбарлыҡ, тормош талабы.
**Фәнил Күзбәков.** Дәүер көҙгөһө лә, дәүер һулышы ла – әҙәбиәт *(Таңсулпан Ғарипова һәм Фәрзәнә Аҡбулатова менән әңгәмә.)* .....149

БЕҘҘЕҢ КАЛЕНДАРЬ

**Әхмәт Сөләйманов.** Тауҙар хәтле эштәр башҡарғанда *(Әнүр Вахитовтың тыуыуына – 80 йыл).* ....................................163

“АҒИҘЕЛ” ЖУРНАЛЫНЫҢ 2012 ЙЫЛҒЫ ЛАУРЕАТТАРЫ

“АҒИҘЕЛ” ЖУРНАЛЫНЫҢ 2012 ЙЫЛҒЫ ЙӨКМӘТКЕҺЕ

ӘҘӘБИ-МӘҘӘНИ МӨХИТ

# В НАШЕМ НОМЕРЕ:

ПОЭЗИЯ

**Ф. Тугузбаева, М. Закиров, К. Муртазин.** *Стихи.*

ПРОЗА

**Г. Якупова.** Женщины. Трилогия. Малая Родина — Большой мир. Третья книга. *Окончание.*

СЦЕНИЧЕСКИЕ ПРОИЗВЕДЕНИЯ

**З. Султанов. Сююмбике.** *Драма-хроника.*

ТВОРЧЕСТВО ЧИТАТЕЛЕЙ ЖУРНАЛА

**З. Сахипова, З. Сабирьянов, Ф. Якшигулов.** *Стихи.*

*«Агидель» — 90*

*Художественная литература:*
*мечта, реальность, требование жизни.*

**Ф. Кузбеков.** Литература — это зеркало и дыхание эпохи *(интервью с Тансулпан Гариповой и Фарзаной Акбулатовой).*

НАШ КАЛЕНДАРЬ

**А. Сулейманов.** Весомо его наследие *(80 лет со дня рождения Анура Вахитова).*

ЛАУРЕАТЫ ЖУРНАЛА «АГИДЕЛЬ» ЗА 2012 ГОД

СОДЕРЖАНИЕ ЖУРНАЛА «АГИДЕЛЬ» ЗА 2012 ГОД

ЛИТЕРАТУРА, КУЛЬТУРА...

---

**Телефондар:**
Баш мөхәррир — 277-76-88 (факс)
Баш мөхәррир урынбаҫары һәм яуаплы сәркәтип — 274-89-65
Баш мөхәррирҙең хужалыҡ эштәре һәм подписка буйынса урынбаҫары —292-77-60 (факс)
Шиғриәт һәм сәнғәт, тәнҡит, публицистика бүлектәре —277-87-73
Проза бүлеге — 277-87-50
Бухгалтерия — 277-78-90 (факс)

● Редакция фекере авторҙар фекере менән тап килмәҫкә лә мөмкин.
● Редакцияға килгән ҡулъяҙмалар рецензияланмай һәм кире ҡайтарылмай.
● Журналда сыҡҡан яҙмаларҙы күсереп баҫҡанда «Ағиҙел»дән алынғанлығын күрһәтеү мотлаҡ.
● Нәшриәт ғәйебе менән киткән етешһеҙлектәр өсөн редакция яуап бирмәй. Улар хаҡында 223-76-62 телефоны менән хәбәр итергә кәрәк.



**Фаҡиһа**
**ТУҒЫҘБАЕВА**

# ТОРМОШ АҒАСЫ

Академик
Нияз Абдулхаҡ улы
Мәжитовҡа бағышлайым.

**Инеш**

*Ҡоромаһын,*
*Ҡоромаһын*
*Тормош Ағасы!*
*Һыуҙар бөтһә,*
*Һуғарырмын*
*Һуңғы йәшем тамғансы.*

*Ерҙең ете ҡаттарына*
*Тамырҙары киткәндер,*
*Күктең етенсе ҡатында*
*Игеҙәге — күктәлер.*
*Боронғолар белеп тапҡан*
*Йәшел Тормош ағасын,*
*Уйлап ултырам шуны мин,*
*Олоғайып ҡалғастын.*

*Хыялмы ул йә ысынмы —*
*Унда минең ни эшем?!*

---

*Фаҡиһа Туғыҙбаева (1950) — Бүздәк районы Ҡаңны-Төркәй ауылынан. БДУ-ның филология факультетын тамамлай. Төрлө матбуғат баҫмаларында эшләне. Республиканың Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты.*

*Үҙенең барлығы менән*
*Бирә ул Йәшәү көсөн.*
*Ерҙең ете ҡаттарына*
*Тамырҙарға тотоноп*
*Төшәм фәлсәфә алырға,*
*Әйтерһең дә, мин — Алып.*

## Алпамыша

*I*

*Халҡымдың саф хыял сикһеҙлеге:*
*Әкиәттә — алтын аҡыл, фекер.*
*Һинең менән дуҫ булышыу — бәхет,*
*Алпамыша,*
*Шуға күңелем көр!*

*Тау-таштарҙы ярып тыуғанһың һин,*
*«Әсәй!» — тиеп тәүләп яр һалғанда,*
*Донъя үҙе кесерәйеп ҡалған,*
*Һин бәһлеүән булып яралғанда.*

*Ҡояш һыйған оло күңелеңә,*
*Тауҙы яра утлы ҡараштарың.*
*Дошманыңды ғәжәп еңеп йәшәү —*
*Бик ғәҙәти,*
*Ябай алыштарың.*

*Алыштарың мал бирештән түгел,*
*Йән бирештән — шундай ҡәтғи йолаң.*
*Сөнки ереңә һин йәндәй кәрәк,*
*Сөнки халҡыңа һин ғәзиз улан...*
*Алпамышам,*
*Донъялыҡтан үҙҙың...*
*Ваҡыт бер кемде лә аямай шул.*
*Хушлашманыҡ, дуҫым,*
*Ирәмәлдә*
*Әйләндең дә ҡуйҙың ҡаяға шул!*

*Ер әйләнгән саҡта күсәрендә,*
*Мөғжизәләр тылсым бүләк итә.*
*Алпамышам,*
*Мин бит көтәм һине,*
*Иреклекте һөйгән халҡың көтә.*

*Ҡая булып ялдар итеп алъас,*
*Халҡым теләгенән терелерһең.*
*Һине көтөп көлгә ҡалып ҡуйһам,*
*Ейәнемә, зинһар, ҡул бирерһең.*
*Исем ҡуштыҡ уъа Батыр тип беҙ,*
*Алпамышам,*
*Булһын тиеп һинең йәндәй дуҫың.*
*Сабый Батырыма*
*Һинең хаҡта*
*Һөйләгәнем минең*
*Барһы ла ысын!*

*II*

*Күкте терәп тормай бер батша ла,*
*Алпамыштар күкте терәп тора.*
*Ергә батҡанда ла аяҡтары,*
*Бөйөк күңелдәре юъарыла.*

*Ҡулдарына быъау һалъанда ла,*
*Ҡолдар итеп булмай тик уларҙы,*
*Йәшәү утын, урман-далаларҙы*
*Һаҡлай алпамыштар, һауаларҙы.*

*Ҡул-аяҡтар талыу ъына әле*
*Йәнең талыу түгел — аъыу түгел.*
*Тормошомда шундай азаматтар:*
*Донъяларым тулы, тиеп уйлай күңел.*

*Халҡым рухы — бейек йондоҙло күк,*
*Алпамыштар уны терәп тора.*
*Ышанмаһаң миңә, эй, уланым,*
*Сал тарихтан һора, ныҡлап һора!*

## Уралтау

*I*

*Океан шашҡан, ташҡан, ҡоторонъан,*
*Ҡоторһа ла, бер көн ҡороъан.*
*Төбөндәге тауҙар ҡалҡып сыҡҡан —*
*Тормош фараздаръа ҡоролъан.*
*Минең дә бар ҡатъи дәлилдәрем —*
*Мин ышанам Урал батыръа:*
*Насип булъан барлыҡ тәбиъәткә*

*Урал батыр тапҡан йәншишмәнең*
*Тере тамсыларын татырға:*
*Ҡоштар ҡанатланған,*
*Йәнлек сапҡан...*
*Донъяға йән ингән — йәшәргән.*
*Һулыш ала алтын, көмөшө лә,*
*Йәшәү моңо килә йәшмәнән.*
*Бөтә нәмә тере —*
*Йән биргәндә,*
*Урал һөйәгенән тау ҡалҡа:*
*Бар тормошҡа симфония булып*
*Һыҙылып ҡына алһыу таң ата.*
*Донъялағы иң оҙон тау ныҡлы:*
*Дала итәгенән юл ала,*
*Мәңгелек бер сер булып бар ғаләмгә,*
*Төньяҡ ҡотопта ул юғала.*
*Ҡитап ҡына түгел,*
*Уралтауҙар*
*Раҫлай бөгөн шиғри дәлилде:*
*Ул бит иле —*
*Тимәк, йәне, тимен,*
*Күпме ҡәүем, күпме халыҡтарҙың,*
*Урал һаҡлай күпме дәүерҙе!*
*Азияны Европа менән*
*Кем ҡушһын, ти, Урал ҡушмаһас?*
*Тотош ҡитғаларҙы дуҫлаштыра,*
*Ә был түгел бары ҡуш ағас!*
*Абдулла ла Солтан — ир-уҙаман*
*«Урал» йырын йырлай ҡаяла.*
*Урал батыр!*
*Башҡорт бөгөн дә бит*
*Һинең аҡылыңа таяна:*
*Кешелекле булсы, кеселекле,*
*Ауыр саҡтарҙа ла замана!*
*Онottормаҡ һине ҡәһҡәһәләр,*
*Ҡәһәрҙәрем төшмәй, мин — сабый,*
*Ҡояшты ла йотор ине Ҡатил:*
*Һаман боронғоса ауырый...*
*Урал батыр!*
*Йәшәүеңде тоям:*
*Мәңге ҡайтаһым юҡ һүҙемдән,*
*Һинең һулыш килә тәбиғәттән,*
*Һинең һулыш килә Иҙелдән.*

*II*

*Урал затынан бер Урал —*
*Заманының улланы,*
*Ышандырлас капиталға,*
*Улa өмөт бағланы.*
*Бағланы ул бағлауын да,*
*Тик эш башы башkала.*
*Хаk тцләргә тейеш була,*
*Тауынан таш алһа ла.*
*Алтын өҫтөндә йәшәп тә,*
*Ҡайҙа, ти, уға алтын?*
*Рудник тцгел, алалмай ул*
*Икмәк-тоҙлоk эш хаkын.*
*Һура бирә kомһоҙланып*
*Ҡәһkәһәләр ер kанын,*
*Һура улар тәмләп-тәмләп*
*Уралдың хатта аңын.*
*Алтын бәҙрәф — kатилдарҙа,*
*Ғәрләнәлер алтын да.*
*Урал һуйып ашап kуйҙы*
*Иң һуңғы бер атын да.*
*Бала аҙ, тип яр һалалар —*
*Милли мәктәп ябыла.*
*Тороп kалды тик бер Урал*
*Емерек ауылында.*
*Тороп kалды һаkлар өсөн*
*Әулиәнең kәберен,*
*Эсендәге йән әрнеце*
*Бирҙе уға әмерен:*
*«Уралтауҙың һин — хужаһы,*
*Ныkлы тор аяғыңда,*
*Батырҙан kалған мираҫ бит*
*Һинең тирә-яғыңда!*
*Һин ул тейеш тергеҙергә*
*Емерек нигеҙҙәрҙе.*
*Ваkыт һынай илдәрҙе лә,*
*Ваkыт һынай ирҙәрҙе!»*
*Урал батыр заты — Урал,*
*Ҡапитал kан ялатыр...*
*Ялатһа ла, һин һатылма,*
*Шунда булырһың батыр!*
*Йәшәцгә мәҙхиә булып*
*Байрам килер — таң атыр!*

## *Арҡайым ҡояшы*

*Ай-һай, эҫе!*
*Ҡояш ҡурып бара,*
*Йылы етмәй ләкин кешегә.*
*Күңел йылылығы етмәгәндә,*
*Селләлә лә мөмкин өшөргә.*
*Ҡайһы йәйәү,*
*Ҡайһы ылау менән*
*Арҡайымға килә бәндәләр,*
*Күңел йылылығы етмәгәндә,*
*Аяғыңдан йыға бәләләр.*
*Ауырыуҙан дауа тапмаҡ булып*
*Күпме инсан бында йыйыла.*
*Боронғоса, юҡ, йыйынға түгел,*
*Ғажиз булып килә йылыға.*
*Йән яраһын кемдер баҫмаҡ була,*
*Кемдер баҫмаҡ тәне яраһын;*
*Яҡынайта бит ул, эй, Арҡайым,*
*Саҡрым менән саҡрым араһын;*
*Йөрәк менән йөрәк араларын*
*Яҡынайта бара Арҡайым,*
*Бар бәләләр сыға тарҡаулыҡтан.*
*Арҡайымға тағы ҡарайым:*
*Ул — түңәрәк,*
*Гүйә, боронғоноң*
*Донъялары булған түңәрәк:*
*Һәр кем йәшәгән бит түрҙә генә,*
*Ятмағандар ерҙә тәгәрәп...*
*Табынған бит һәр кем көн нурына:*
*Ерҙәге бер ҡояш — ҡаласыҡ*
*Яҡты уйҙар менән ғүмер иткән,*
*Бар ғаләмгә булған ул асыҡ...*
*Сихырсылар, алдаҡ тылсымсылар*
*Арҡайымда тыуған, әйтерһең,*
*Бармаҡтары кәкре үҙҙәренә —*
*Бөтөрөп булмай күңел кәкреһен.*
*«Минең ҡалам! Энергия алам!*
*Алам — бирәм!» — Алтын аҡсаһы!*
*Ҡояш нуры рәнйеп уҫкәртәлер:*
*Ер йөҙөндә күпме алдаҡсы?!*
*Ҡояш беҙгә шуға әрнегәндер:*
*Өтөп кенә бара, хәл ҡалмай.*
*Мин дә гонаһлылыр бер ҡатлыҡтан,*
*Йәшәй белмәйем шул алданмай.*
*Арҡайымда ваҡыт туҡтамаған!*

*Усаҡтары, гүйә, һүнмәгән:*
*Күңел бөтөнәйә,*
*Таштарынан*
*Ҡөс алайым тиеп һөйәлһәм.*
*Йәнгә рәхәт*
*Арҡаларҙан елдәр*
*Ҡағып киткәндә лә арҡамдан.*
*Кендек ҡаным бында тамған тойғо*
*Арта ғына бара артҡандан.*
*Эй, Арҡайым!*
*Һинең тыңәрәктә*
*Иркенәйә бара йыһаным...*
*Йәшәү тамырымды һиндә астым —*
*Тораташтың кесек уйсанмын.*

## Башҡорт ҡалаһы

I

*Мең биш йөҙ йәш Башҡорт ҡалаһына,*
*Ғали ғалим шәһәр асҡысын*
*Табыр өсөн, быуаттарҙы ҡаҙып, —*
*Боронғолоҡ, әйҙә, аңҡыһын, —*
*Һаман төпкә ҡуя баҫҡысын.*
*Нияз аға алып инде мине*
*Баш ҡалаға —*
*Ғалим илһамлы!*
*Ул — бәхетле,*
*Гүйә, башында — таж:*
*Батшамы ул, әллә бер ханмы?*
*Ҡылабыҙ беҙ боронғоға бер хаж.*
*Нияз аға һөйләй:*
*«Тыныслыҡта*
*Йәшәр өсөн ҡорал ҡойғандар.*
*Ғаилә ҡороп, бәпес үстергәндәр:*
*Киләсәкте уйлап йәшәгәндәр*
*Борондан уҡ беҙҙең туғандар.*
*Алтын-көмөш тәңкә менән бергә*
*Алтын аҡыл — беҙгә аманат;*
*Башҡорт ҡалаһынан кешелеккә*
*Ҡалмаған бит бөртөк яман ат,*
*Торһалар ҙа уны гел талап.*
*Ғәрәбстан уны, хөрмәт итеп,*
*Донъя картаһында билдәләй.*
*Испания, алыҫ Италия,*
*Франция ла «Башҡорт ҡалаһы» тип*

*Ҙурлай уны, күреп илдәрҙәй.*
*Йыраҡ ҡитъаларға каруан-каруан*
*Ташығандар күпме хазина?!*
*Һаман табыла бит алтын-көмөш —*
*Ҡала тупраҡтарын ҡаҙ ғына! —*
*Сал тарихты һөйләй ҡаҙылма!»*
*Ҡатлы-ҡатлы балсыҡ стеналар,*
*Йәшәү серен һаҡлай һәр ҡаты.*
*Семәр-биҙәкле лә көршәктәрҙә*
*Бал-май булғандыр, тим, бик татлы:*
*Туғандарым затлы, талантлы.*
*Башҡорт ҡалаһының балсығына*
*Әкиәти моңдар һеңгәндәй,*
*Кемдер ҡапыл өҙләп ебәрерҙәй —*
*Беҙҙең тыңлағанды белгәндәй,*
*Кемдер күктән сәләм биргәндәй —*
*Алыҫтарҙа ялтлай нәжәғәй.*
*Тарих ғали йәнәптәрҙә*
*Нияз аға*
*Ҡунаҡ итә күңеле булғансы,*
*Күңелкәйем минең тулғансы ла —*
*Беҙҙән ҡурҡып,*
*Изге ҡомартҡыға*
*Ҡулын һуҙмай ҡасты «һунарсы».*
*Ерем төрөп һаҡлаған был ҡала —*
*Сихри билдә:*
*Халҡым ғүмере*
*Армыт-армыт оҙон буласаҡ бит!*
*Мәңгелекте һаҡлар балсығынан*
*Яҡты нурҙар төшә күңелгә...*
*Ер өҫтөнә сыҡтыҡ.*
*Ә нур-балҡыш*
*Ер өҫтөнә урғый төптәрҙән.*
*Тарих ҡына ғали йәнәбенең*
*Алтын аҡылдары бик тәрән.*
*Эҙләп тапҡан хәләл балсығы ла*
*Булып ҡуймаһын, тим, мин әрәм...*
*Нияз аға!*
*Һин батшаһың, гүйә,*
*Әруахтарға сәждә ҡылғанда...*
*Ә һин ғалим бары:*
*«Бында музей*
*Булырға бит тейеш!» — тиеп*
*Ҡултамғаңды йөҙ ҡат ҡуйғанда.*

II

*Ҡешелекте, гүйә, башлағандар!*
*Мин-минлеге, ай-һай, байҙарҙың.*
*Арттыралар улар үҙҙәренең*
*Һуҡыр бер тин торған баҙарын —*
*Их, таҙҙарҙан булмай таҙарынып.*
*Башҡорт ҡалаһының урынына*
*Ымһыналар — имеш, ер етмәй.*
*Замансалап йорт һалырға, тиме?!*
*Фәхешхана төҙөп тә ҡуйырҙар,*
*Оятһыҙлыктарын да сер итмәй.*
*Әруахтарҙы ҡуша цементлаһа*
*Бай абзыҡай — ят та ул инде!*
*Уңға ҡараһаң да, һул яҡҡа ла —*
*Тик шуларға ҡалған көн инде!*
*Даун ауырыуына һәйкәл кеүек*
*Ҡайһы йорттар — «бигерәк заманса».*
*Йәшел доллар кумә йәшеллекте,*
*Башҡорт ҡалаһында саф аҡса*
*Ята бирә,*
*Йәшәү мәғәнәһен асалмайса...*
*Илдән ҡот ҡаса.*

## Алтын болан

*Алтын болан инә төштәремә,*
*Сабып бара, имеш, тауҙарҙан,*
*Сапҡанында төшә алтын балҡыш,*
*Эҙләп тапҡан мине ҡайҙарҙан?*
*Ул атлыға миңә:*
*Һикереүе —*
*Шатлыҡ йыры! Эҙе — төҙ генә.*
*Алтын туғандарын өйөр менән*
*Эйәртеп ул алған үҙенә.*
*Алтын болан инә төштәремә,*
*Музейҙа мин уны күргәйнем.*
*Пшеничнюк[1] менән, гүйә, бергә*
*Ҡурғандарҙы асты көрәгем.*
*Тарихи ҙа олуғ башҡорт иле —*
*Иге-сиге юҡтыр еренең!*
*Ҡурғанында ҡоромаған тормош:*
*Болан серем итә — күр, күҙем!*
*Хыялдарын ҡушып яһағанда*

---

[1]*Пшеничнюк — билдәле археолог.*

*Шау алтындан ъына боланын,*
*Ҡиләсәккә илсе ҡалдырьанын*
*Уйлаъандыр сармат бабайым...*
*Өфөһөнән оса Эрмитажъа,*
*Эрмитаждан болан — Луврьа.*
*Ер шарын ул, эй, әйләнеп елә —*
*Һоҡланмаъан юҡтыр ъорурьа.*
*Утта янмай, һыуҙа батмай талант:*
*Ижад емештәре — кәрәмәт!*
*Бөгөнгөгә — илһам саҡматашы,*
*Бар кешелек әйтә мең рәхмәт!*
*Сабый бала кеүек,*
*Боланҡайҙың*
*Белмәгәне яҡшы атомды...*
*Быуаттан ул һикерә быуаттарьа,*
*Юҡ, ҡойолмай уның алтыны.*
*Алтын болан инә төштәремә,*
*Илем ырыҫына юрайым.*
*Сырамыта ъалим минең йөҙҙә*
*Сармат бабайымдың сырайын.*

## ***Даһи Рәссам***

*Шүлгәнташҡа инер алдынан мин*
*Йылъаһында алдым ҡойоноп:*
*Гонаһтарым булһа,*
*Күҙ йәшендәй*
*Аъын һыуҙа китһен йыуылып.*
*Сәләм бирҙем тупһа таштарында,*
*Яъымлы бер ауаз саҡырҙы*
*Ҡаты һайын серләрәк таш өйгә,*
*Рәссамдыр ул?*
*Рәссам, ахыры!*
*Күңел күҙем менән эҙләп таптым*
*Оҫтаханаһын мин хужаның.*
*Усаҡ дөрләй...*
*Таш ҡаҙанда ҡайнай*
*Буяу микән?*
*Эйе, еҫе килә...*
*Сәләм биреп түргә уҙамын.*
*Галереяһына алып инде*
*Нәзәкәтле сибәр уҙаман:*
*Ижадсы ла, һүрәттәре кеүек,*

*Ихлас булъан икән ул заман!*
*Аңлатты ул миңә эштәренең*
*Мәъәнәһен, ысын асылын:*
*— Таш өйөңдөң тәҙрәһе юҡ, тимә!*
*Ҡешеләрҙең күҙе асылһын!*
*Ҡараңъыла таба белһәләрсе*
*Яҡтылыҡты!*
*Ниндәй үкенес:*
*Нисә быуат сыраҡ йә шәм тотоп*
*Инә минең янъа үткенсе!*
*Һүрәттәрҙең буяуҙарын ҡырып*
*Алып сыъа көндөң нурына,*
*Тикшерергә, имеш.*
*Уның һайын*
*«Мамонттар»ым минең ҡырыла.*
*Буяуҙамы хикмәт?!*
*Тере йәнде*
*Яратыуҙан килә һәр асыш.*
*Ғәзиз дуҫым ине мамонттар ҙа,*
*Тоъро ине ажар юлбарыҫ.*
*Матурлыҡты минән өйрәнергә*
*Таш өйөмә килә күп ъалим.*
*Гармонияларҙы боҙмаҫ өсөн,*
*Ҡеше булһа икән мөъәллим!*
*Йән типкәнен тойоп ҡат-ҡатында,*
*Мин ҡәҙерләй беләм һәр ташты.*
*Һыуҙың йәнен, ер һулышын тыңлап*
*Йәшәй белгән инсан-ижадсы...*
*Хужа тотторъанда саф йөрәген,*
*Өрөп һүндерҙем мин сыраъым:*
*Ташта ҡалъан серле һүрәттәрҙән*
*Ҡөндәй яҡтырҙы бит ян-яъым.*
*Тәү тормоштан килгән Рәссам китте*
*Тыуыр таңъа атлап артабан.*
*Эй, аҡылым!*
*Ҡомпьютеръа түгел,*
*Уның аҡылына арҡалан!*
*Мин һөйләштем шулай Әруах менән,*
*Ҡан хәтерем оҙон — быуаттар.*
*Тәү Рәссамды мин таныъан кеүек,*
*Ул да исемемде ҡабатлар:*
*— Шаъирә-ә-ә-ә!*

## Һомайғош канаттары

*Күк батшаһы Самрау — ғәзиз атаң,*
*Ҡояш — назлы әсәң, Һомайғош.*
*Һин ташлама беҙҙе, һин ташлама —*
*Шатлыҡтарҙан күккә һыймай ос!*
*Таң шаңдағы — һинең ҡанатыңдыр,*
*Бәхет ҡошо, тиҙәр, шуға ла,*
*Һин — әсәйһең барлыҡ әсәйҙәргә,*
*Һин — яҡты көн яңы тыуғанға.*
*Эй, Һомайым!*
*Күпме быуат йәшәп,*
*Талмай бер ҙә алтын ҡанатың.*
*Таң төҫөндә ҡан төҫө лә бар шул,*
*Ләкин таңға һәр саҡ йән аттым.*
*Һары таңдан һыуҙар ташыным мин,*
*Сафлыҡ эсһен тиеп ғаиләм:*
*Һау-сәләмәт йәшәр балаларым —*
*Ни татлыраҡ ерҙең тәменән?!*
*Һары таңдан эшем башланым мин,*
*Иртәләгән кеше гел уңа.*
*Эйе, уңдым,*
*Ялан тәпәй менән*
*Баҫҡан саҡтарҙа ла ҡар-туңға.*
*Һары таңдан сыҡтым сәфәрҙәргә*
*Аҡбуҙатҡа ғына атланып:*
*Үҙем тапҡан рухи хазинаны*
*Кешеләргә бирҙем шатланып...*
*Эй, Һомайым!*
*Күктәреңә алһаң,*
*Алып оссо йәнем ал таңда.*
*Һөйәктәрем мәңге тоғро ҡалыр*
*Тарихи ҙа олуғ Ватанға.*
*Күрешермен Вәлидиҙәр менән,*
*Таныр ырыуҙашым Бабич та —*
*Ҡорҙарына алыр.*
*Рухым, йәнем*
*Улар менән күптән таныш та.*
*Яҡты донъяларҙың һәр сәғәте,*
*Ҡәҙерҙәрен белһәң, тарихи.*
*Донъяныҡы донъялыҡта ҡала,*
*Шулай ти бит халҡым, ул — даһи.*
*Эй, Һомайым!*
*Тормош ағасының —*
*Шәжәрәмдең төбө бик тәрән,*

*Юғалмамын!*
*Күккә алырға һин*
*Килһәң дә бер — асыҡ тәҙрәм.*

## *Ете шиғыр*

*(Тамамланыш)*

*Бағышланым һиңә ете шиғыр,*
*Арнарға ла мөмкин ете мең,*
*Эй, тарихи Башҡортостан — илем,*
*Күңелемә һалдың етди моң.*
*Иге-сиге юҡ бит киңлегеңдең,*
*Дөрөҫлөктө һөйләй карталар:*
*Иртыштарҙан алып Тубылғаса*
*Ер-ҡырҙарың мине тарталар.*
*Ҡаяларың бейеклеккә әйҙәй,*
*Далаларың саҡыра офоҡҡа.*
*Офоҡ арттарында яңы офоҡ —*
*Шул ирeклек минең холоҡта.*
*Ҡурғандарға зыярат ҡылам һаман —*
*Ҡала йәшәй ҡурған эсендә,*
*Эй, тарихи Башортостан — илем,*
*Ҡәүемдәрең көсө — көсөмдә.*
*Һәр саҡрымың ҡалған хәтеремдә —*
*Ут, һыу, һауа кеүек тәбиғи!*
*Быуат сылбырҙарын нығытамын:*
*Яҙам дастан, яҙам робағи.*
*Күпме батша ҡыйратһа ла һине,*
*Ваҡыт ташҡын булып баҫһа ла,*
*Фараз ғына түгел, ысынбарлыҡ —*
*Башҡорт атлы һинең баш ҡала.*
*Ерҙең етмеш ете ҡаттарында*
*Ятҡанда ла күмелеп хәҡиҡәт,*
*Тыйғанда ла уны хакимлыҡтар,*
*Көлгәндә лә тиеп: әкиәт,*
*Мин йәшәйем, тимәк, ул — бөгөнгөм,*
*Ҡан тамырым*
*Алыҫ бабамдарҙың*
*Ҡан тамырҙарына тоташҡан.*
*Быуат-быуат күҙ нурҙары һеңгән —*
*Мәмерйәләрҙә лә аҙашмам.*
*Бағышланым һиңә ете шиғыр,*
*Ейәндәрем арнар ете мең,*
*Эй, тарихи Башҡортостан — илем,*
*Күңелемә һалдың етди моң.*



**Мөхәммәт**
**ЗАКИРОВ**

# ДАУЫЛДАРҘЫ ТЫЙЫУ ФАЙҘАҺЫҘҘЫР…

## *«Бородино» панорамаһында*

*Ике йөҙ йыл артҡа сиккәнмен дә*
*Ҡарап торам, гүйә, тын ҡалып.*
*Күҙ алдымда ғына Бородино —*
*Мәңге үтмәй торған сынбарлыҡ.*

*Һәр тарафта — күҙ иңләмәҫ киңлек,*
*Офоҡтарҙың тоноҡ күкһеле.*
*Генералдар менән ставкаһында*
*Кутузовтың күренә аҡ һыны.*

*Бүленмәҫ саф булып, эскадрондар*
*Йомолалар французға табан.*
*Беҙҙең янда бесәнле йорт-ҡура,*
*Текә ялҡын йортон ялмаған.*

*Ысынлығы менән аптырата*
*Бүрәнәләрҙәге тере ҡуҙ.*
*Үҙәнлектән ары — легиондар —*
*Һөжүм итә француз.*

---

*Мөхәммәт Закиров (1950) — Ҡариҙел районы Дәүләт ауылынан. БДУ-ны тамамлағас, оҙаҡ йылдар ваҡытлы матбуғат баҫмаларында эшләне. Яҙыусылар союзы ағзаһы.*

*Француздың былдай ҡаршылыҡҡа*
*Осрауы фәҡәт тәүге ҡат.*
*Юҡҡамы ни, менеп аҡ атына,*
*Алға әйҙәп оса Бонапарт.*

*Бит юғиһә, кейәү булып та ул*
*Килә алыр ине Мәскәүгә.*
*Батша һеңлеләре — Катерина, Анна*
*Ҡулын кире ҡаҡты, йә, Тәүбә!*

*Ә ул, бәлки, сынлап яратҡандыр —*
*Мөхәббәте кире ҡағылған.*
*Хоҙай уны шулай бар иткән шул —*
*Еңеүҙәргә фәҡәт табынған.*

*Ҡыҙарып байыуына төшөп бара*
*Наполеондың һүнәр ҡояшы.*
*Ставканан, шуны раҫлап, ахыры,*
*Кутузовтың күренә аҡ башы.*

## ***Переделкино***

**I**

*Уҙған быуат хөкөм һөрә:*
*Ҡул теймәгән, билләһи.*
*Шәп китап яҙырға бында*
*Тынлыҡ, тиҙәр, илаһи.*

*Ижад йорто ике ҡатлы:*
*Баҫҡаның йомшаҡ үлән.*
*Кемдәр эҙенә баҫып мин*
*Икенсе ҡатҡа менәм?..*

*Ҡайсаҡ, ҡарап портреттарҙы,*
*Тап булам таныш йөҙгә...*
*Көтөүләп фотоға төштөк —*
*Тарихҡа индек беҙ ҙә...*

**II**

*Һуҡмаҡ — асфальт. Күперсек — таш,*
*Эскәмйәләре — иҫке.*
*Ағас башына ҡараһаң,*
*Кәпәсең төшәр төҫлө.*

*Флигелдарҙы һәр тарафтан*
*Йәшереп тора урман.*
*Бөйөктәр баҫҡан һуҡмаҡҡа*
*Таңдарҙа сыҡҡан булам.*

*Артыҡ һуңға ҡалып килдем,*
*Иртәрәк килгән булһам?*
*Төндәр ултырып, Рәмигә*
*Хат яҙған бынан Туфан.*

*— Мәғәнәле Рәми дуҫыма! —*
*Шулай башлаған уны.*
*Йәш Рәми рухы ул хатта,*
*Туфандың оло йәне.*

***

*Мине кәмә алмай эт булырҙар:*
*Унда ниҙер — ожмах, тамуҡмы?*
*Ни булһа ла, төшөп етте, тигәс,*
*Ялҡын ялмар минең ҡабыҡты.*

*Халыҡ аңға килеп өлгөргәнсе,*
*Шырпы һымаҡ янып бөтөрмөн.*
*Мәңге һалҡын ҡәберҙе мин ташлап,*
*Күк ҡатына осоп китермен.*

*«Былай ярамай», — тип ахыр сиктә*
*Буш соҡорға балсыҡ өйөрҙәр.*
*«Эх, үлгәс тә аҡыл инмәне бит», —*
*Һүгенгеләп ҡайтып китерҙәр.*

## Көнбағыш

*Тирә-йүнде һөйөндөрә*
*Һәм үҙе лә һөйөнә.*
*Ҡояштан күҙ алалмаған*
*Башы түбән эйелә.*

*Яҙмышына буйһонамы —*
*Сәскәһе ҡойолғанға?..*
*...Ғүмер сәскәһен ҡоймайса*
*Һин емеш биреп ҡара...*

## *Азатлык*

*Донъянан һәм үҙ-үҙенән*
*Бар алғанын кире ҡайтара.*
*Елкәндәрҙең һынған мачталары*
*Тулҡындарҙа һәлмәк сайҡала.*

*Аҡ күбеккә батып кире сигенә,*
*Ташлана ла тулҡын ярҙарға...*
*Дауылдарҙы тыйыу файҙаһыҙҙыр,*
*Кәрәк аңларға...*

***

*Шаяраһың матурлығың менән:*
*Уйҙарымды гелән бутайһың.*
*Үрелергә үрмә гөлдәр булып —*
*Мин юғалттым, буғай, юғалтаһын.*

*Керпек тирбәлешең, һүҙең наҙын*
*Күңелемдә ҡабат яңыртам.*
*Ниҙәр уйлаһаң да минең хаҡта,*
*Асыулана алмам — яратам.*

***

*Ҡайтмаҫ кире шатлыҡ, ҡыуаныстар:*
*Юҡтан ғына һөйөнгәндәрем.*
*Был донъяла үҙ-үҙемде белмәй*
*Хөр  бәхеткә төрөнгәндәрем.*
*Улай иткән, былай иткән булып,*
*Аҡ бәхеттәр юрағандарым.*
*Ҡайсағында шулай бер сәбәпһеҙ,*
*Күңелем тулып, илағандарым.*
*Ямғырҙан һуң ҡояш көлгән һымаҡ,*
*Йәмгә тулы донъя сафлыҡтары.*
*... Сабый сағым илай миндә бөгөн —*
*Керпегемә һарҡый шатлыҡтары.*

***

*Донъяларҙа берҙән-берем,*
*Һинең күҙҙәргә бағам.*
*Себерҙәрҙә япа-яңғыҙ*
*Эшләп йөрөйһөң, балам.*

*Ниндәй яҡынлыҡ, матурлыҡ*
*Күҙеңдә, ҡарашыңда.*
*Уҙһын көнөң үҙеңә тиң*
*Сәскәләр араһында.*

*Һөймәгәндәр һөйкәлмәһен,*
*Яратһын — яратҡаның.*
*Таңдарың көлөп атһындар,*
*Талмаһын ҡанаттарың!*

## *Дүрт юллыҡтар*

***

*Ваҡыт үтеп, онотола тора*
*Тормоштоң бер әсе һабағы:*
*Мәжлес күңеллерәк булған һайын,*
*Ҡыйынырак була аҙағы.*

***

*Ҡайсаҡында күңел, әйтерһең дә,*
*Дауылланған диңгеҙ хәлендә.*
*Доға ҡылалмаҫлыҡ ул хозур ҙа,*
*Ҡурҡыныс та шундай мәлендә.*

***

*Беҙ ниндәй ил? Фәлән йылға, тиеп*
*Киләсәккә пландар ҡорабыҙ.*
*Үлгәндәрҙе терелтәһе түгел, —*
*Иҫәндәрҙе үлтерә торабыҙ.*

***

*Байҙар тамам ҡоторҙолар:*
*Фатир ғына — өсәр.*
*Бер саҡ ул да ер аҫтына*
*Бер нәмәһеҙ төшәр.*

***

*Табын гөрләй — ҡарттар йәшәргәндәр!*
*Шаян һүҙле һәр кем, йыр-моңло.*
*Ваҡыт-ваҡыт, бүлеп шау-шыуҙарҙы,*
*Урынлашҡандай ҡәбер тынлығы.*



## Ҡамса МОРТАЗИН

### *Иҫерткес мәл*

*Иҫерткес мәл, Хоҙай тапҡан әмәл,*
*Йөрәктәрҙән өҙә өндәрҙе.*
*Меңенсе ҡат яңы донъя асам —*
*Таң ҡурғандай яҡты көндәрҙе.*

*Аҡ ҡайындар һый кулдәген кейгән,*
*Ап-аҡ алъяпҡыслы муйылдар.*
*Ә сирендәр зәңгәр кұҙен асҡан:*
*Кұҙ теймәһен — ниндәй һылыуҙар!*

*Аһ, илаһи көткән һылыу ҡунаҡ —*
*Һандуғаҫҡай ҡунды тирәккә.*
*Шул һандуғас, һөйөү теле булып,*
*Мәңгелеккә кұсте йөрәккә.*

### *Уралтау*

*Купме тапҡыр ҡар ҡаплаған*
*Олпат башын Уралдың?!*
*Купме тапҡыр тубәһендә*
*Ҡара һөрөм уралды?!*

---

*Ҡамса Мортазин (1966) Учалы районының Мулдаш ауылында тыуған. Силәбеләге Аҡмулла исемендәге әҙәби берекмә етәксеһе, филология фәндәре кандидаты, Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре, Силәбе өлкәһенең Ҡадир Даян, Ғәлимов Сәләм исемендәге премиялары лауреаты.*

*Теҙ сүкмәгән баһадирҙай,*
*Башын терәп күктәргә,*
*Урал торған дауылдарҙа*
*Терәк булып күптәргә.*

*Ер шарының уртаһында,*
*Ҡупмаһын, тип, ҡабат яу,*
*Донъяларҙың именлеген*
*Һаҡлап тора Уралтау.*

## Апай монологы

*Ерҙә күпме генә йәшәһәм дә,*
*Үткән юлым бары аҙ һымаҡ.*
*Алышына ғүмер миҙгелдәре,*
*Күкрәп кенә килгән яҙ һымаҡ.*

*Йәйҙәремдә күпме йәйләһәм дә,*
*Наҙҙарынан ғына туйманым.*
*Һайрар һандуғасын оҙатһа ла,*
*Күңелгенәм йырын ҡуйманы.*

*Ҡыр ҡаҙҙары күккә һауаланы,*
*Ҡанаттарын елпеп яй ғына...*
*Сәстәремдә — ҡырау, йөрәгемдә —*
*Яҡты яҙҙар уйған уй ғына.*

## Мәңге иҫемдә

*Ай күрҙе лә ҡояш алды*
*Яҡты һыныңды.*
*Тарих ҡояш итеп тойҙо*
*Ҡайнар тыныңды.*

*Шиғырҙарың доға кеүек*
*Беҙҙең күңелдә.*
*Илгә ҡылған изгелегең*
*Халыҡ телендә.*

*Табынабыҙ, Салауат батыр,*
*Һинең исемгә.*
*Азатлыҡ тип яу сабыуың*
*Мәңге иҫемдә.*

## Күл буйҙары

*Күл буйҙары иҙрәп уйға сумған,*
*Һығылғандай нәфис тауыштар.*
*Ут-йәшенле йәйҙең хәтерҙәрен*
*Шыбырлайҙар кеүек ҡамыштар.*

*Көҙгө елдәр тарай башҡайҙарын,*
*Һығылдырып, һары талдарҙың.*
*Әйтә төҫлө улар: "Ҡайҙа, йәйҙәр,*
*Күл буйҙарынниңә ҡалдырҙың?"*

*Күл өҫтөндә тик тулҡындар ғына —*
*Мөлдөр-мөлдөр, гүйә, күҙ йәше.*
*Томан баҫҡан көҙгө иртәләрҙең*
*Һалҡын елдәр генә серҙәше.*

## Һөйләшеү

*— Ниңә генә һандуғастай*
*Өҙгөләнә был күңел?*
*— Йән-дуҫтарҙан айырылыу,*
*Ай-һай, еңелдән түгел.*

*— Ниңә диңгеҙҙәй ярһына,*
*Тулҡынлана был йөрәк?*
*— Һуҡмаҡтарҙы үтер өсөн*
*Уға тауҙай дуҫ кәрәк.*

*— Ниңә генә башҡынайым*
*Ут булып яна икән?*
*— Күктән йондоҙ атылғанда*
*Ут булып тама икән.*

## Уйҙарым

*Уйың әгәр миңә ҡайтһа, Рәми,*
*Ҡешелек тип яныр инем,*
*Илһөйәргә аҫыл йырҙарымдан*
*Тере һәйкәл ҡойор инем.*

*Аҡмуллабыҙ рухы ҡайтһа әгәр,*
*Ерҙә илсе булыр инем;*
*Диңгеҙ кеүек шаулы илкәйемдә*
*Иман нурын сәсер инем.*

*Мостай йәне ҡайтһа әгәр миңә,*
*Утты, һыуҙы кисер инем;*
*Ватан өсөн дуҫлыҡ күперҙәрен*
*Таштан, уйҙан төҙөр инем.*

*Тик ҡайтмаһын инде еребеҙгә*
*Ел-дауылдың ҡотһоҙ туйҙары.*
*Ташламаһын, әйҙәп торһон ине*
*Ирәмәлгә мине уйҙарым.*

## Ҡарағайҙар

*Ҡарағайҙар, төҫ ташламай,*
*Ҡыштарын тын торалар.*
*Гүйә, улар хаҡ мосолман:*
*Сабыр кәңәш ҡоралар.*

*Бурандарҙа маңлайҙарын,*
*Йөҙҙәрен йәшермәйҙәр.*
*Йәйге селләлә һығылмай,*
*Ҡояштан йәшенмәйҙәр.*

*Яҙмыштары — ҡаяларҙа,*
*Һығыла ҡайырҙары...*
*Урал ташына ереккән*
*Ҡарағай тамырҙары.*

## Һин ғәйепле түгел!

*Ҡайҙа ғына ҡалды балаларҙың*
*Яңғырап та торған тауышы?*
*Ҡайҙа икән ҡалды сыңыр-сыңыр*
*Урман ярған аттар тауышы?*

*Ҡайҙа икән хәҙер тимер аттар —*
*Иген иңләп сапҡан мәлдәре?*
*Ҡайҙа ҡалды йәйен яҡташтарҙың*
*Ҡаҙан аҫҡан дәртле саҡтары?*

*Туҙҙырылған ҡоштар төйәгендәй*
*Ер шарының ожмах ояһы.*
*Әүәлгеләй ихлас гөрләүеңде,*
*Әйтсе, ауылым, нисек йыяһы?*

*Юҡ, ауылым, һин ғәйепле түгел*
*Шишмәләрең һыҡрап тороуға,*
*Донъяларға ниҙәр булды, тиеп*
*Ҡайындарың сеңләп тороуға.*

## *Хат*

*Был юлы ла ҡайта алманым шул,*
*Зинһар, ғәйепләмә, әсәйем!*
*Ҡоштай осоп илгә ҡайтыр инем –*
*Тәҡдир инде – алыҫ йәшәйем.*

*Йөрәгемдә – Ерем, йәнем тере,*
*Доға менән көнөм башлана.*
*Сит илдәрҙә ситән үрмәйем мин,*
*Фатихаңдан, әсәй, ташлама!*

*Күл буйында үҫкән һылыу талдар,*
*Елдәр иҫтениһә, бөгөлә.*
*Таш түгел дә йөрәк, Илгенәйем*
*Иҫтәремә төшһә, өҙөлә.*

## *Атайым кәңәштәре*

*Егет булһаң, елкән кеүек*
*Еленләп барма елгә;*
*Дауылдары елкәндәрҙе*
*Сығарып бәрә ергә.*

*Егет булһаң, ерек түгел,*
*Ҡарағастай ғорур бул;*
*Шартлап һына ерektәре –*
*Елгә ҡаршы торор бул.*

Гөлнур
ЯҠУПОВА

# КАТИНДАР

ТРИЛОГИЯ

## Кесе йыһан – Оло йыһан*

### Өсөнсө китап

52

Сәғәткә ҡараһам, төнгө ике булып киткән. Берҙәр тирәһендә мәшәҡәтемде ослай торғайным да, был юлы бигерәк оҙаҡ ултырғанмын. Ҡыҙым менән улым йоҡлай. Фатихымды дауаханаға киске сәғәт ундарҙа ашығыс саҡырып алдылар, «экстренный случай» тип. Иремдең көн  тимәй, төн тимәй эшенә атлығып тороуына өйрәндем инде. Ҡай саҡ йәнем көйөп киткеләй, әҙәмсә йәшәп булмай, йәнәһе. Әммә үҙемде тиҙ ҡулға алам, уның тап шундай булыуы һоҡландыра лаһа мине. Бәс, ул да минең йәмәғәт эштәрендә ҡайнап йөрөүемә, донъямды ташлап, төрлө походтарға, туристик путевка менән союздаш республикаларға яңғыҙым йөрөп ятыуыма күнә бит. Әй, күнмәһә лә! Ерле юҡҡа шулай эстән сыпраңлай башлаһам, өләсәйемдең, ҡартәсәйемдең изге рухтарына күҙ төбәйем. Һәм улар, көтөп кенә торғандай, гүйә, алдымда пәйҙә булып, йә маҡтай, йә ороша. Бына әле лә, ғәҙәтемсә, эстән генә әңгәмә ҡорҙом:

– Күңелем бөтөн кеүек тә, барыбер борсолам.

– Шөкөр ит! – Өләсәкәйҙең тауышын ишетәм кеүек. Ул, өлкәнерәк булғанғалыр, гелән беренсе булып өндәшә, әхирәттә лә әҙәп һаҡлау барҙыр шул.

– Өйөм-ғаиләм түңәрәк. Донъялар ғына тыныс түгел. Ана, афған һуғышы...

– Ҡолоҡасым, һәр кемдең күрәсәге кеүек, ил-көнөмдең дә яҙмышы алдан яҙылғандыр, тип уйламайһыңмы? – Ҡартәсәйем ошо фаразды ҡолағыма киртте.

Шул мәл Фатих ҡайтып инде. Ишекте асып-ябыуынан һиҙеп торам: кәйефе ҡырылған. Кухняға сәй ҡуйырға йүгерҙем.

– Келәт тыҡрығында йәшәгән бер ҡатын ярты айлыҡ сабыйын күтәреп

---

*Аҙағы. Башы 10 — 11-се һандарҙа.

килгән... – көрһөнөп һөйләй башланы ул. – Юлда ҡулында үлгән бәпесе. Зөһрә шунда уҡ әйткән, ярҙам итеп булмай, тип. Әсә кеше ышанмаған, мине саҡыртҡандар. «Ул иҫтән генә яҙғайны, ҡотҡарығыҙ! – тип ҡатын йәнасыҡҡа ҡысҡыра. – Килгәндә балам иҫән ине, күрәләтә үлтерҙең», – ти ҙә Зөһрәгә ташлана.

– Ай, Аллам!

– Внезапная младенческая смерть...

– Нисек?

– Шундай диагноз. Һирәк осрай, әммә була торған хәл.

– Хәҙер нишләмәк?!

– Йәш әсәне саҡ тынысландырҙыҡ, укол һалып. Тәүге балаһы икән. Атай кеше лә артынса уҡ килеп етте. Ҡатынын әйтә, башына ла ябынмай, быймаһын ҡатты ла сығып йүгерҙе, ти. «Бала тын алмай!» – тигәнен генә ишетеп ҡалған. Ул да ҡойолоп төштө, хәлде аңлатҡас. Ағарынып китте, йөрәген тотоп лап итеп барып ултырҙы. «Инфаркт әллә?» тигән уй үтте баштан хатта.

– Әле ҡайҙалар?

– Дауаханала. Ҡатын бәпесен ҡулынан ысҡындырмай. Саҡ ҡына яҡтырыу менән район үҙәгенә оҙатырға инде.

– Диагнозды тикшерергәме?

– Эйе. Вскрытиеға. (Фатих ауыр һүҙҙәрҙе русса әйтергә тырыша, һынағанмын).

– Ә, диагноз дөрөҫ ҡуйылмаған, тиһәләр?

– Стационарҙа, роддомда тапҡан баланы. Сабый бер ниндәй патологияһыҙ тыуған, патронаж ваҡытында үткәрелеп торған. Һалҡын теймәгән. Инфекция эҙе юҡ, тәү ҡарашҡа күк-фәлән, йәрәхәт күренмәй. Әсәһе, йүргәген алмаштырам тип ҡулыма алғайным, ҡапыл тыны өҙөлдө лә ҡуйҙы, ти.

– Уф! Йәштәрҙең тағы булыр ҙа ул балаһы, тик быныһын алмаштырмаҫ, унды тапһалар ҙа. Бигерәк тә әсәгә ауыр инде был фажиғәне кисереүе. Туғыҙ ай туғыҙ көн түгел дәһә, шунса ғүмер сабыйыңды кесе йыһаныңда һаҡлап-бәпләп бар ит тә, Оло йыһанға тыуғас ҡына юҡ булһын әле – нисек сыҙар, нисек күнер бисара ҡатын?!

– Эйе, әсәнең үҙенә ярҙам кәрәк хәҙер. Психолог ярҙамы. Ә беҙҙә бөтә районға бер психоневролог. Сит илдә һәр ғаиләнең үҙ психотерапевты бар, ти. Һәр хәлдә, был йәһәттән унда – цивилизация.

– Ә беҙҙә тик үҙ көсөңә, түҙемеңә таянырға ҡала. Әлдә бешебеҙ, сабырлыҡҡа бәләкәйҙән өйрәтеләбеҙ. Халыҡ педагогикаһы, ти ҙәһә ғалимдар, шул бар.

– Ярар, Нуриям, иртәгә – эшкә, һиңә лә, миңә лә, – тине Фатих, эсен бушатҡас. – Әлдә йоҡламаған инең. Саҡ ҡына еңел булып ҡалды, һин тыңлағас. Врачтар өйрәнеп бөтә үлемгә, тигәнде лә ишеткән бар – юҡ, күнегеп бөтөп булмай, айырыуса сабый вафат булһа... Ғәйепле тояһың үҙеңде, сәбәпһеҙгә лә.

– Ә Зөһрә?

– Ул ни, түгелеп иланы. Илаһын, еүеш стресс еңелерәк үтә.

– Еүеш стресс?

– Эйе. Ҡоро стресс – күҙ йәшһеҙ, йөрәккә бәрә. Ир-атта инфаркт, мәҫәлән, сағыштырмаса күберәк, ҡатын-ҡыҙҙа әҙерәк – улар еүеш стресс кисереүсән.

Һы...

Иртәгәһенә асыҡланды: Фатихтың диагнозы дөрөҫләнгән. Өфөнән үк махсус эксперт килгән икән.

***

Яҙ моронлап ҡына тора. Ҡояш, уйынсаҡ йәш килендәй, йылмайыуҙан бушамай. Көн битендә йылы, ҡышҡы кейемде хәҙерҙән яҙғыһына алмаштырғы килеп китә. Әммә был ниәтеңдән күпмегәлер ваҡытҡа сигенеп тораһың, сөнки ҡапыл ғына ҡуйынға боҙло һалҡын ел килеп һарыла – тауҙарҙағы ҡалын ҡар ныҡ ята әле, мәңге ҡымшанмаҫтай булып. Уйҙар ҙа, әллә тәбиғәттән күрмәксе, күңелең ҡыуанып, имшеп кенә торғанда, болоҡһоп килеп инәләр ҙә өшәндереп ҡуялар. Бына беҙҙең йән-фарман донъя көтмөшөбөҙ, үҙебеҙсә тырышып байлыҡ йыймышыбыҙ, саҡ ҡына тотонолған «копейка» тип йөрөтөлгән еңел машина һатып алдыҡ, «ВАЗ-01» инде, көндән-көн арыураҡ, етешерәк йәшәйбеҙ, бер ҡараһаң. Икенсе ҡараһаң, ябай халыҡ барыбер ауыр көн итә. Икәүләп аҡса эшләп, мал аҫырап та, саҡ тейендек машинаға, ә бит ул – транспорт сараһы, кәрәк әйбер, өй беренсә булһа ла ғәжәп итергә түгел дә бит. Толпарлыла тик ике машина: беҙҙә һәм Вафичтарҙа. Әшрәфтәр, ана, ала алмай, кем әйтмешләй, балаға баттылар. Өс малай – Артур, Нариман, Сыңғыҙ һәм ике ҡыҙ – Раушания менән Ләйсән. Шундай матур исемдәрҙе ҡайҙан табып бөткәндәр тиһең. Артуры, билдәле,– иҫтәлек. Әшрәф үҙе ҡушҡан. Шул тиҫтеремдең күңел йомартлығына һоҡланыуымдың сиге булырмы бер? Булмаһынсы! Нариманды ҡайны кеше һайлаған. Ҡартәсәйемдең исемдәр тәфсиренән ҡарағайным: батыр, ғәйрәтле икән мәғәнәһе. Сыңғыҙҙы Әшрәф менән Әсмә икәүләп һайлағандар, аҡыллы, дәртле дуҫыбыҙға оҡшаһын тип. Раушанияны ҡәйнәм күптән күңелендә йөрөтә ине, малайҙар килә лә тыуа, ниһайәт, үтәнек оло кешенең теләген, ти Әсмә. Ләйсәне апрель аҙағында, тәүге ямғыр – ләйсән яуғанда тыуған. Бына уларға, ишле ғаиләгә, кәрәкмәйме ни шәхси транспорт? Һаман мотоциклдан уҙа алмайҙар. Әшрәф көнө-төнө баҫыуҙа, эш хаҡы барыбер әллә ҡайҙа китмәгән, Әсмәнеке – ишемтәгә ҡушымта ғына. Малсылыҡта, сөгөлдөрҙә эшләгәндәрҙеке хаҡында һүҙ йөрөтөргә лә түгел, бала-сағаһына кейем йүнәтеүҙән ары китә алмайҙар. Ә бит еренең өҫтөндә шаулап иген үҫкән, көтөү-көтөү мал үрсегән, ҡалын урмандар шаулаған, ҡуйынында ҡара алтыны, хисапһыҙ мәғдәне булған иҫ киткес бай илдә – Башҡортостанда йәшәйбеҙ, эшләйбеҙ! Донор беҙ – тапҡаныбыҙҙың сиреге лә үҙебеҙгә йоҡмай.

Ярһып китәһең дә шулай, тағы кире сигәһең, тамаҡ туҡ, өҫ бөтөн, баш осонда пулялар һыҙғырмай... СССР – ҡеүәтле дәүләт, уның ҡанаты аҫтында хәүеф юҡ.

***

Яңыраҡ Сыңғыҙ менән Гөлсирен (Менәүәрәне хәҙер толпарлылар шулай тип кенә йөрөтә) отпускыға ҡайтып киттеләр.

–Ҡарттар власҡа йәбешеп ята, мертвой хваткой, – сәйәсәткә күсә һалды Сыңғыҙ, бер кисте килеп һөйләшеп ултырғайнылар. Мин ирекһеҙҙән көлөп ебәрҙем, уның бынан егерме йыллап элек Политбюро ағзаларының мәктәп коридорындағы оҙон стенаға эленгән фотоларына ҡарап: «Көндәрегеҙ һанаулы, хөрмәтле ҡартластар!» – тип бармаҡ янағаны иҫемә килеп төштө. Ул да хәтерләне, буғай, ҡушылып көлдө лә дауам итте: – Күрәләтә Черненконы ҡуйҙылар, сирле кешене яфалап. Үҙгәрерме был ил берәй ҡасан, юҡмы?!

– Үҙгәрер! – тинем, телемдән тарттылармы ни.

– Ҡасан?! –Сыңғыҙ, һуңғы өмөтөн бағлаған бер оракулға ҡарағандай, төбәлеп торасы миңә. Аптырап ҡалдым да уйыма килгәнде әйттем:

– Оҙаҡламай. Торғонлоҡ мәңгелек була алмай ҙаһа! Йылға, ана, быуылһа,

күпмелер тонсоғоп тора ла, барыбер яйын таба, йырып сыға, хатта ташты бүҫә, ә ҡая йә тау ҡалҡһа юлында, урап ағып китә – тормош та йылға һымаҡ бит ул!

– Фәлсәфәң дөрөҫ. Әммә сәйәсәт тәбиғәттән хәйләкәрерәк, аҫтан, аҫтыртын хәрәкәт итә. Бына, ҡуйынымдағы ҡатынымды ышандыра алмайым КПСС-тың илде ниндәй һаҙлыҡҡа һөйрәүенә. Партияны маҡтап туймай, дифирамбылар яуҙыра. Бер килеп күҙе асылыр, конечно, не дура же. Белдеңме?!

Гөлсирен йылмайып ҡына тыңлап тик ултыра. Журналист һүкмаҡтары ҡайҙа ғына ташламай, кем менән генә осраштырмай, ниндәй генә яҙмыштарға юлыҡтырмай, үҙеңдән-үҙең кешене иғтибарлап тыңларға ғәҙәтләнәһең, сөнки тел асҡысы табыр, эске донъяһын асыр өсөн уның холҡон тойомларға кәрәк, тигәне бар ҙаһа. Ә Сыңғыҙҙың фекерҙәрен тап ошо минутта ғына иҫбатларлыҡ йә кире ҡағырлыҡ та түгел, уның күҙе-күңеле гелән киләсәктә.

Күп көтөргә ҡалмаған булып сыҡты үҙгәрешле заманды. Черненко власта бер йылдан саҡ ҡына артығыраҡ ултырып, мең туғыҙ йөҙ һикһән биштең унынсы мартында донъя ҡуйҙы. Өс йыл эсендә өс Генсекты ерләне халҡыбыҙ.

Сираттағы юлбашсы оҙаҡ көттөрмәне – Михаил Сергеевич Горбачев. Ниһайәт, сағыштырмаса йәш кеше, мәрхүм Черненконан 20 йәшкә кесерәк. Үҙәк телевидениенан тәүге сығышы уҡ уның бөтөнләй башҡа, журналистар яҙғанса, яңы формация кешеһе икәнен асыҡ күрһәтте. Матур һөйләй, телгә бай һәм уны тыңлағандан-тыңлағы килә, гипнозы бар тиерһең? Маңлайындағы миңе лә шундуҡ күҙгә ташланды, әлбиттә.

Олораҡ быуын кешеләре ошо осор Ленинды, Керенскийҙы телгә алғыланы, уларҙың да, Горбачев һымаҡ, белеме буйынса юрист булғанлығын хәтергә төшөрҙө. Эште закондарҙы үҙгәртеүҙән башлар, моғайын, тип юраусылар ҙа булды.

Беҙ, уҡытыусылар, яңы Генераль секретарҙың һәр телмәрен тыңларға, үҙ-ара фекер алышырға ғәҙәтләнеп киттек. Бығаса ла сәйәсәт менән ҡыҙыҡһына инек, ә был юлы тормош ҡуласаһы ҡыҙыуыраҡ әйләнә башлағанын һиҙәбеҙ, хәбәрҙар булырға тырышабыҙ. Ауылда йәшәйбеҙ бит, урам уртаһында туҡтатып та аңлатма һорай башлай бәғзе берәү бәғзе сәйәси хәлгә.

Ә Горбачев закон сығарыуҙан түгел, идеялар биреүҙән башланы эшмәкәрлеген. Беренсеһе – «фәнни-техник прогресты тиҙләтеү». Тәүге битенә «Ускорение - 90» тигән баш ҡуйылған «Правда» гәзите килеп етеүгә, Башҡортостандың мәғлүмәт саралары ла шул һүҙҙе телдән төшөрмәне.

Ауыл хужалығында нимәне һәм нисек тиҙләтергә һуң? Фатих та, мин дә игенсе йә малсы булмаһаҡ та, шул хаҡта кәңәшләшергә тип, бер көндө беҙгә колхоз рәйесе Искәндәр ағай менән агроном Вилмир килеп инделәр. Сәсеү башланып торған осор ине.

– Понимаете ли, Фатих ағай. – Рәйес һүҙен шулай башланы, – эште тиҙләтер өсөн сығымдар кәрәк тәһә? Ә бит һалырға аҡса юҡ ул научно-технический прогресҡа!

– Һаман да семенаны пестицидтар менән протравливаем. Ана... – Вилмир, рәйестең тамаҡ ҡырып алыуын ишетепме, ярты һүҙҙә туҡтаны.

– Орлоҡто ағыулайбыҙ, тип әйт әле, Вилмир, пестициды ярай инде... – тигәйнем, ҡапыл йәпһеҙерәк тынлыҡ урынлашҡан арала ҡусты ҡыҙҙы ла китте: – Ағыулайбыҙ шул! Ана, ырҙын табағындағы моторист Таҡый ағай келәттәге семенаны, әй, орлоҡто, эшкәрткәндә ағыуланған .

– Респиратор киймәгәнме, әллә бирмәгәйнегеҙме? – тип һораны Фатих.

– Биргәйнек. Резина итек, перчатка ла бар – киймәй. Кейһә лә, Фатих ағай, файҙаһы теймәҫ ине. Пестицидтарҙа ртуть бар бит, терегөмөш, ул инде ерҙе лә ағыулап бөтәсәк тора-бара.

– Вилмир ҡусты, елки-палки, етәр, паника таратма әле. Көҙҙән орлоҡто калибровать ҡына иттек тә алдан яҡшы итеп таҙартылған келәткә һалдыҡ, күрҙең бит, әйбәт һаҡланғандар. Пестицид ҡулланмаһаҡ та.

– Яңы, зарарһыҙ средство кәрәк. Орлоҡто эшкәртмәй булмай ул барыбер.

– Яҙып ебәр, ана, ғалимдарға, уйлап тапһындар, ускоряться итһендәр, черт возьми!

– Яҙҙым. Ебәрҙем.

Искәндәр ағай ҡул һелтәп кенә ҡуйҙы, «һинең кеүек баш-баштаҡҡа әйттең ни ҙә, әйтмәнең ни» тигәнде аңлатып.

– Ә Таҡыйҙың сиренең сәбәбен шундуҡ төшөнгәйнем, башта миңә күренгәйне бит. – Фатих һүҙҙе үҙ юҫығына төшөрҙө. – Терегөмөш парҙары бик ҡурҡыныс ул, егет үлемесле доза алған.

– Үлемесле?! Беҙ, тиҙҙән йүнәлеп ҡайтыр, тип көтөп тора инек, хәҙер моторисһыҙ... – Искәндәр ағайҙың тауышы ҡалтырап китте. – Йәш бит әле ул, яңы ғына өйләнгәйне.

– Районнан тура Өфөгә оҙаттылар, юҡҡамы ни?

– Иртәгә сельхозниктарҙың совещаниеһы була, подниму был мәсьәләне, понимаете ли, – тине рәйес.

– Мин уйлайым, партия программаһын тормошҡа ашырыу өсөн тип нигеҙләп, хөкүмәттән аҡса, техника һорарға кәрәк, төрлө инстанцияларҙан.

– Иламаған балаға имсәк бирмәйҙәр, – тип йүпләнем Вилмирҙе. Үҙ аллы фекерләүе, ҡыйыулығы оҡшаны уның миңә. Ни әйтәһең – Бүреһуҡкан олатай ейәне.

Колхоз етәкселәре ҡайтып китте, ә беҙ уйға баттыҡ. Фатих үҙен ошоғаса ауылдаштарының эш шарттарын күҙ уңында тотмағаны өсөн битәрләне. Иремә шул хаҡта кәңәш бирә алмағаныма әсендем: уның бит күпме ғүмере ҡалала үтте, хәҙер – дауаханала, ә мин гелән ауылда, колхозсылар араһындамын даһа, теге юҡ, был етешмәй, тип мыжығандарын да ишетеп йөрөйөм. Уф! Бер нисә йыл сөгөлдөр баҫыуына ла барып урағаным юҡ. Йәнәһе, унда хәҙер эш механизацияланған. Ысвикла бисәләре роботҡа әйләнмәгән дәһә, тере йәндәр. Әсәйем дә ерле бушҡа ҡолағыма тишмәгәндер, әйтеп торҙо бит былтыр көҙ, һаман ҡул көсө инде, тип. Аҡназар төҙөткән будкалар ҙа ҡыйшайып бөттө, ҡыйығынан һыу үтә, ямғыр яуһа, ултырабыҙ әлеге ҡайындар төбөндә, тигәне лә хәтерҙә. Аллам һаҡлаһын, анауы йәшенле йәй ҡабатлана күрмәһен!

***

Көтмәгәндә, Кәбир шылтыратты.

– Ленинградта «Даная көндәре» үтә, күргең киләме? – тине, иҫәнлек-һаулыҡ һорашҡас та.

– «Даная»?!

– Живописҡа һөйөүең үтмәгән, Нурия. – Кәбирҙең тауышында ҡыуаныс һиҙелде. – Ә мин үҙ стилемде таптым кеүек.

– Күҙ теймәһен. Ышана инем, Кәбир, сигенә торған егет һин түгел, бөркөтсө лә булып алғаныңды онотма!

– Ыласын... Бүреһуҡкан олатай иҫәнме әле? Ул әйтте миңә, уланым, һин – рәссам, тип. Ябай ауыл ҡарты.

– Уның ябайлығы –бөйөклөк, бөйөклөгө – ябайлыҡ.

–Эйе.

– Ҡасан кәләшеңде күрһәтәһең беҙгә, Толпарлыңа? – Тоттом да шулай тип һоранымсы.

– Бик матур натурщицам бар, бәлки... Һиңә оҡшаған.
– Минең кеүек ҡараҡай, бәләкәс буйлы берәүме?
– Толомдары һушты алды. Мәскәү урамында икегә үргән ҡалын толомдарын сайҡалдырып китеп барғанын күрҙем дә йүгереп барып ҡулынан тоттом һәм башҡортса өндәштем: «Һинең ҡара сәстәреңде...» Хәтереңдәме?
– «Үрер ҙә һүтер инем, һүтер ҙә үрер инем...» – Хәтеремдә. Онотоламы ни ул үҫмер саҡ?!
– Һәм тәүге мөхәббәт.
– Онотолмай. Әммә ул, ләйсән кеүек, яҙ мәлендә генә тәүге күкрәү менән яуып үтә лә... Сафлығы йөрәктә ҡала. Шунан, теге ҡыҙ?
– Әй һылыуы. Әй тигән йылға буйында ултыра ауылым, ти. Миллион әҙәм араһында осраттым шул башҡорт ҡыҙын. Ғәжәпме?
– Ғәжәп. Мәсетле районынан, Башҡортостандан?
– Кем менән һөйләшәм, географ менән. Ә ҡыҙыҡ өсөн генә әйт әле: Непал тигән ил ҡайҙа?
– Гималай тауҙарында, бейектә-бейектә.
– Уларса нисек була «һаумыһығыҙ»?
– Әйт, әтеү.
– Намастэ! Әйҙә, шуны пароль итәйек икәү-ара?
– «Даная көндәре» ҡасаныраҡ? Барып күрергә ине. – Һүҙҙе осларға кәрәклегенә ишара бирҙем.
– Бөгөн башланған. Бер аҙна барасаҡ. Иртүк поезға ултырам да – Эрмитажға. Килереңде алдан белгертһәң, ҡаршы алырмын.
– Каникул бит, мин бер нисә уҡыусымды эйәртермен, моғайын. Хәбәрләшербеҙ әле.
Хушлаштыҡ. Кәбир хаҡында уйланып алып киттем. Непалда булған икән, тағы байтаҡ ерҙәрҙә. Рәссамға күҙҙе арбар, күңелде айҡар урындар, тойғолар фейерверкы кәрәк, ти. Ә кемгә кәрәкмәҫ ине?!
...Текә тау, әллә Аҡбейек, уртаға ярылған да, күҙ күреме етмәҫ тарлауыҡ хасил булған. Унда, төптә, шаулап йылға аға кеүек, тауышы ҡолаҡҡа салына. Эйелеберәк ҡарайым тиһәм, ҡоланым да киттем. Инде барып төшөп селпәрәмә киләм тигәндә, ҡапыл һауала туҡтап ҡалдым: ҡанаттарымды яҙып, осорға торам даһа! Белә инем, имеш, ҡанаттарым барлығын, уларҙың, күҙгә күренмәй, арҡамда ҡаушырылған икәнлеген. Һәм бына, иң кәрәк мәлдә, яҙылды улар. Тик оса алмай ҙа ҡуям. Шул саҡ, Ыласын, буғай, минең менән йәнәшә оса башланы. Уның ҡанаттары шундай көслө, мин уларҙың еленән елпенәм. Ниһайәт, иркенлеккә сыҡтыҡ. Ярлауҙың һикәлтәләрендә сәйер йорттар теҙелгән. Шунда ҡунаҡланыҡ. Бер йорт алдында ҡаҡса кәүҙәле ир заты баҫып тора һәм көләс йылмайып өндәшә: «Намастэ!» Ә баяғы Ыласын янымда юҡ, башымды күтәреп ҡараһам, ул һауала талпына, бейектә. Ҡанаттарын Ҡояшҡа яндырып ҡуймаһын, тигән хәүеф йәнемде бөрөп ала. Эргәмдәге көләс кеше тағы үҙ телендә һаулыҡ ҡуша. Ахыр мин дә сәләмләнем:
– Намастэ!
Ысын әйттем, күрәһең, үҙ тауышыма һиҫкәнеп киттем. Телефон эргәһендә креслола ултырған көйөмә уйға һабышҡанмын.
– Әллә нимә тинең, аңламаным? – Бәс, Фатих эргәмдә сәйерһенеберәк ҡарап тора.
– Намастэ тигәнмендер?
– Шулайыраҡ, шикелле. Уныһы ни тигән һүҙ?
– Непалса «һаумыһығыҙ» йәғни. Әле генә шул илдә, һауаға олғашып торған

тауҙарҙа йөрөп әйләндем. Тәрән бер тарлауыҡҡа йығылып, һәләк булдым тигәндә, Ыласын килеп ҡотҡарҙы. Әллә һин булдың шул Ыласын?

– Бүреһуҡҡан олатайҙың бөркөтөмө?

– Эйе. Әй, Кәбир шылтыратҡайны. Сәләм әйтте. Непалға сәйәхәт иткән икән, шуны һөйләп алды. Эрмитажда «Даная көндәре» асылған, ти. Махсус буклеттар, кинороликтар һатыласаҡ, Рембрандттың бығаса күрһәтелмәгән картиналары, эскиздары күргәҙмәгә ҡуйыласаҡ, тип тә ҡыҙыҡтырҙы. Балалар менән әллә экскурсияға барырғамы, тип уйлап ултырған ерҙән Гималай тауҙарына барып сыҡҡанмын...

– Теге Ыласын, улайһа, Кәбир булған, – тине лә һалды Фатих.

– Бәлки. Мин уға бер осор Бөркөтсө тип тә исем ҡушып алғайным. Рәссамлығын ныҡлап белмәҫ борон. – Һаман баяғы үҙе ҡурҡыныс, үҙе илаһи күҙаллауымдан, хыялсан асылым халәтенән арынып бөтмәгәйнем. Аҡ халат кейеп янымда баҫып торған йәремә ҡараным да ҡапыл мейемә уралған уйымды әйтеп ҡуйҙым: – Һин, белгең килһә, Шаһимаран. Минең Шаһимараным.

– Уныһы кем?

– Аҡ йылан. Йыландар батшаһы. Уны күргән кеше бәхетле була. Бына минең кеүек.

– Әйтерһең тағы. Йылан?!

– Йә, сис халатыңды. Иртәгәгә тигәнен, ана, йыуып, үтекләп, пакетҡа һалып ҡуйҙым. Йәш кенә медсестралар араһында, мине оятҡа ҡалдырып, керлене кейеп йөрөй күрмә, тим. – Фатих өндәшмәне.

– Әллә үпкәләнең? Яратып әйтәмсе. Белгең килһә, мин ул әкиәти йыландар батшаһын күрергә хыял итеп йөрөнөм, ун дүрт йәшемдә.– Шулай тинем дә кухняға йүнәлдем.

– Хәҙер, иҫке ҡабығымды һалам да... Яңыһын, шыма ғынаһын кейәм дә... Һөйләрһең, йәме, бәғерем? – Район универмагынан матур эске майка алғайным, ебәктән, йоҡаҡ аҡ күлдәк эсенән килешер тип, ирем шуны кейеп алған да яныма килеп баҫҡан, имеш. – Кил әле, һыйпап ҡара Шаһимаранды, – тип устарымды түшенә ҡуйҙы. – Әйҙә, ҡотлайыҡ яңы тиремде, әй, ҡабығымды.

– Кит, бала-сағаланма, ана, уйнап туйғандар, балалар ҡайтып килә.

– Саға...ланмайымсы! Асия әле ҡустыһының битен-ҡулын, аяғын сайҡаясаҡ, унан үҙе оҙаҡ итеп йыуынасаҡ. Өйгә тиҙ генә инмәйәсәктәр, йәй көнө ни.

Минең дә айырылаһым килмәй ошо минутта был Шаһимаран-Фатихтан, биллаһи. Бармаҡтарым аша уның күкрәгенән ҡайнар ташҡын ағыла – гүйә, беҙ тоташҡанбыҙ: йөрәктәребеҙ бергә, бер ритмда тибә.

– Унисон, – тине Фатих, күҙҙәремдән яуап эҙләп.

Шул минутта, йәремдең ҡосағында тирелеп барғанымда, әлеге тынғы бирмәҫ телефон тағы шылтыраны. Фатих трубканы алды. Эшенәндер, тиһәк, түгел икән.

– Кәбир дуҫ, шәпме! – Фатих шулай һөйләшә башлағас, ғәжәпләндем: нишләп тағы шылтыратмаҡ булды икән ул? Көтөүҙән ҡайтып килгән һыйырымдың мөңрәүе ҡолағыма салынды ла, ҡапҡа асырға тип тышҡа сыҡтым. Инеүемә һөйләшеп бөткәйнеләр.

– Бөгөн «Даная»ға һөжүм иткәндәр, ти ҙәһә Кәбир. Аҡылдан шашҡанмы икән, бер ир картинаға бысаҡ менән ташланған, телгеләп, кислота һибеп өлгөргән, һаҡсылар ҡулынан тотоп алғансы. Картинаны реставрацияға оҙатҡандар.

– Маньяктыр ул, ләғәнәт, ҡулы ҡороғор! – Ярһып ҡысҡырҙым да, үҙемдең ҡарғышымдан үҙем ҡурҡып: – Ҡатын-ҡыҙҙы күрә алмаған ир аҡтығылыр күп булһа, тәүбә-тәүбә, – тип асырғандым.

Йоҡлар алдынан дәфтәремә теркәп ҡуйҙым: «Эрмитажда «Даная»ны үлтерҙеләр. 1985. 15 июнь».

***

Бал ҡорто күсен мәҙәләнылармы ни, халыҡ шулай геүләй былтырлы-быйыллы. Хатта Яңы йыл табынында ла сәйәси тостар алға сыҡты: өр-яңы, революция рухындағы, тиһәң инде, дөрөҫ үк булмаҫ, әммә шуға оҡшаш пафос солғап алғайны был осор беҙҙең күңелдәрҙе. Бәс, торғонлоҡта көн иткәнбеҙ икән, ысынлап та!

Горбачев әллә Хрущев һымағыраҡ булмаҡсы, тигән фараздар ҡуйырҙы. Тиҙләтеү әллә ни тиҙләмәһә лә, гәзиттәр туҡтамай тылҡый. Яңы Генсек СССР-ҙы, иң күп араҡы эсеүсе ил, тип бөтә донъя алдында фашланы һәм был күренештән ҡотолоу юлын тапты: алкоголизмды бөтөрөү өсөн көрәш. «Ҡырҡа һәм тамырынан» тигән һүҙҙәр – был кампанияның төп девизы. Бер уйлаһаң, дөрөҫ тә, аҙнаһына берәр шешә араҡы эсәбеҙ икән, дөйөм алғанда – ҡот осҡос бит. Был статистика эсендә ҡарт-ҡоро ла, бала-саға ла бар, уларҙы алып ташлаһаң, көнөнә берәр шешә тура килер ине, бәлки, бәғзе регионларҙа. Икенсе уйлаһаң, Фатих та хаҡлы, алкоголизм аппендицит түгел дәһә, ҡырҡып алдың да – бөттө булырға. Ул оҙайлы дауалауҙы талап иткән сир.

Араҡының хаҡы икеләтә артты. Кешеләр самогон ҡайната башланы. Оло илдә ни ҡылынһа, бәләкәйендә – ауылда ла шул, эскәндәр эсеүҙән туҡтамай. Ә көрәшергә кәрәк. Ишбирҙе хәҙер Толпарлы участковыйы, ғаиләһе менән ҡайтып төпләнде, уға төшә көс. Сәмиғуллин да пенсияламын тип ҡул ҡаушырып ултырмай. Званием һинекенән юғарыраҡ саҡта командовать итеп ҡалайым әле, тип йылмайып килеп инә, ти, Ишбирҙенең кабинетына. Килмәҫ тә ине, өйрәнеш типме, ихтирамдары шулай ныҡмы, тоталар ҙа Сәмиғуллиндың өйөнә баралар бит толпарлылар, ул-был була ҡалһа. Шунан ни, ауылда «милицияның терәк пункты» уйлап сығарып, икәүләп эшләргә тотондолар. Ишбирҙе әлдә аңлаған тәжрибәле кешенең ысынлап та ниндәй ҙур терәк икәнен, берәү булһа, тәкәбберләнеп киреләнеп ултырыр ине. Уларҙың тағы ике шәп ярҙамсыһы бар: Хәлисә инәй һәм Хәйривара ағай. Береһе һаман да участкала йыйыштырыусы, алтмыштан ашһа ла, эшен бирмәй, икенсеһе – йүкә телефон һуҙыусы. Хәлисә ҡарсыҡ самогон еҫен яҡшы һиҙә, Хәйри ҡайҙа нимә ҡырын ятҡанын үтә күрә, тип шаярталар ауылда, элекке яманаттарына кинәйә ташлап.

Әмин абый ҙа – Сәмиғуллин һыңары, пенсия йәшендә булһа ла, мәктәптән эҙен һыуытмай. Математиканан насар өлгәшеүселәрҙе тартышам тип, бушлай репетитор булып, үҙенә үҙе мәшәҡәт табып йөрөй. Сәйәси аңыбыҙҙы йоҡлатмаусы ла ул.

– КПСС-тың XXVII съезы ерле юҡҡа 25 февралгә ҡуйылғанмы, юҡ – 30 йыл элек Хрущев, XX съезда, тап шул көндө «шәхес культы һәм уның эҙемтәләре» тип мөгөҙ сығарғайны, Горбачев та ниҙер күстәрмәксе, күреп торорғоҙ, – тигән ҡотҡо һалып киткәйне яңыраҡ, бөгөн тағы килгән: – Ишеттегеҙме, хәҙер беҙҙең лозунг – «үҙгәртеп ҡороу».

Ә мин, астрономия уҡытыусыһы, Ергә яҡынлашып килгән Галлей кометаһы илгә ниндәй фажиғәләр килтерер икән, тип шөбһәләнәм ошо араларҙа, сөнки уның касафаттарын ғалимдарҙың нисәмә быуат буйына һынап, иҫбатлап килгәнлеген беләм. Планетабыҙҙа бер фажиғә булды ла инде. АҠШ-тың космос карабы күккә күтәрелгәндә үк шартланы. Старт мәлен телевизорҙан үҙем күрҙем: корабль бейектә, йондоҙға оҡшап бәләкәсәйә барып, күҙҙән юғалды тигәндә, ҡапыл селпәрәмә килде, утлы саңға әүерелде. Ярабби! Астронавтар һәләк булды, миллиард аҡсалар елгә осто.

Әммә олораҡ ҡайғы алдараҡ көткән икән, был юлы – беҙҙең илде. Чернобыль фажиғәһе. Ергә яҙ килгәндә, йылы яҡтан ҡоштар ҡайтҡанда...

Силәбеләге «Маяҡ» хәлдәрен йәшергән кеүек үк итмәһә лә, ысын дөрөҫөн халыҡҡа асып бөтмәүҙәренә шикләнмәнек. «Правда» гәзитендә «Чернобылдә ике кеше һәләк булған, бер ни тиклем радиация бар» тигән хәбәрҙе уҡығас, Фатих көлөп ебәрҙе лә туҡтай алмай бер булды – нервынан. Шунан гәзитте йомарлап ырғытты.

– Алдаҡ! – тине,– мин бит армияла хеҙмәт иткәнмен, аңлайым. Унарлаған, юҡ, йөҙәрләгән мең кеше радиация алған унда, шундай ҡеүәтле атом станцияһында шартлау булһын да.

– Бына һиңә ҡойроҡло йондоҙ, – тинем дә үкһеп илап ебәрҙем, сөнки киноларҙан, фотоларҙан таныш Хиросима фажиғәһе, нур ауырыуынан яфаланған япон балалары, үҙебеҙҙең «Маяҡ» ҡорбандары иҫемә төштө.

Фатих менән бер-беребеҙгә һыйынып оҙаҡ ҡына баҫып торҙоҡ та, икебеҙ бер юлы: «Мәүлиҙәләр!» – тинек. Атом станцияһы Киевҡа яҡын, әммә Киев Донецкиҙан алыҫ ҡына, тип үҙебеҙҙе тынысландырып ҡуйҙыҡ. Ә бит беләбеҙ радиоактив ямғырҙарҙы ла, һыу тамырҙарының әллә ҡайҙарҙан килеп ҡушыла икәнлеген дә...

–Үҙгәреш юҡ, үҙгәртеп ҡороу ҙа – ҡоро һүҙ, – тине бер нисә көндән һуң Фатих. – Горбачев Чернобыль хаҡында ниңә өндәшмәй?

Һөйләшеп ҡуйғандай, «Би-би-си»ҙы тыңларға ултырҙыҡ. Шаулап һөйләйҙәр, ҡот осҡос һандар килтерәләр, радиация фонды кәмендә 50 мең тапҡырға норманан юғары булыу ихтималлығын фараз итәләр һәм Фатихтың фекерен раҫлайҙар, СССР-ҙа билдәлелек булманы ла, юҡ та, тип.

Хәтер дәфтәремдә «Чернобыль атом станцияһында шартлау» тигән бит асып, уй-фараздарымды яҙып ҡуйҙым. Оҙаҡламай унда тағы бер нисә юл теркәлде: «Адмирал Нахимов» карабы икенсе бер судно менән бәрелешеп, һыу төбөнә батты. Дүрт йөҙләгән кеше һәләк булды. (Галлей кометаһы ғәйеплеме, әллә беҙҙең битарафлыҡмы?). P.S. Горбачев Чернобыль фажиғәһен телгә алып, 15 майҙа халыҡҡа мөрәжәғәт итте».

***

Күп тә үтмәне, улын-ҡыҙын эйәртеп, Мәүлиҙә ҡайтып төштө. Әмин абый, ҡаты ауырыйым, килегеҙ, балаларҙың икеһен дә эйәртегеҙ, тип телеграмма һуҡҡан икән. Тиҙерәк ҡуҙғалырға сәбәп булды, былай ҙа йәйгә Радмирҙы ла, Сәнәне лә ауылға килтереп ҡалдырырға һөйләшеп ҡуйғайныҡ, тине Мәүлиҙә. Аңлашыла: балаларҙы теге атом фажиғәһе эҙемтәләренән ҡурсалайҙар. Эшкә барышлай ашығып ҡына инеп күрешеп сыҡҡанда, ошонан артыҡ һүҙ ҡуйырта алманыҡ. Дәрестән һуң, төш ауғасыраҡ, Толпарсыҡҡан буйында осраштыҡ. Хозур күлебеҙҙә ҡолас ташлап йөҙөп кинәнгәс, минең теге йәшерен түмәләскә барып боҫтоҡ. Һыуҙан саҡ ҡына ҡалҡып, тал араһында йәшеренеп ултыра һаман кескенә ярымутрауым. Өс йыллап бында аяҡ баҫҡаным юҡ ине, ярға тоташҡан һуҡмағы киңәйеңкерәгән, әллә Толпарсыҡҡан һайыға төшкән, ә тирә-яғына йәш еректәр уратып баҫҡан. Мәүлиҙә күпереп үҫкән йәшел келәмгә йөҙтүбән төшөп ятты ла, үлән-сәскәләрҙе еҫкәп туйғас, салҡатан әйләнеп күккә ҡараны, ә унда, тап баш осонда, һабантурғай моң тирә, махсус осоп килгән һәм тик уға төбәп йырлай тиерһең. Әхирәтемдең күҙҙәре мөлдөрәмә йәш ине.

– Өҙөлөп-өҙөлөп, зарығып һағындым йәнтөйәгемде! – тине ул, эргәһенә һуҙылып ятҡан мине ҡосаҡлап алып. – Сит яҡтар барып күрер, сәйәхәт итер өсөн генәлер ул, Нурия, тамырың барыбер үҙ илеңдә булырға тейеш.

– Ә Олексий?

– Яратам шул уны...

– «Бер һөйгәнем өсөн алтмыш һөймәгәнде һөйөрмөн»ме?

– Һөйгәнемдең ҡәүемен, нәҫел-ырыуын, илен дә яратырмын, үҙ итермен... Үҙ итәм дә ул! Ә барыбер мин уларға ят бауыр. Эйе, инде профессормын, фән докторымын. Хөрмәт күрһәтәләр. Барыбер сит һөйәкмен. Тоям. – Шулай тине лә Мәүлиҙә, текәлеп күҙемә ҡараны, сәйер һорау бирҙе: – Әхирәт, әйт әле: берәй ҡасан ҡайтып ерегерменме мин тыуған төйәгемә?

– Ҡайҙан беләйем, бәс! – Ә эске һиҙемем ишара бирҙе: ҡайтасаҡ Мәүлиҙә, тип. Әммә был хаҡта өндәшмәнем. Тел осомдағын ғына әйттем: – Балаларыңды ауылға гелән шулай ҡайтарып тор. Сәнәң башҡортсаны онотмай, ана, ә бит беләһең, тел аша һеңә халыҡ рухиәте, мәҙәниәте, ғөрөф-ғәҙәте. Кем белә, Толпарлы егетенең йөрәген яулар ул бер заман һәм...

– Ҡыҙый, нисек уйлайһың, ун йәшлек балала мөхәббәт хисе уяныуы ихтималмы?

– Әллә... Дуҫлыҡ хисе – мөмкин, уның артабан һөйөү тойғоһона әүерелеүе бар. Ниңә улай тип һорайһың?

– Сәнә Әсмәнең Артурын ярата. Аҡылым ышанмай, күңелем һиҙә. Минең ике ағайым бар, Радмир һәм Артур исемле, тип һөйләнгән була үҙе. Ә икеһенә ике төрлө бүләк әҙерләй байрам-фәләнгә. Бер туған ағаһына, мәҫәлән, әҙер текст яҙылған открытка бирә, һүрәтенең ниндәй икәненә иҫе лә китмәй, ә ауылдағыһына һайлап-һайланып, сәскәләр, күбәләктәр төшөрөлгәнен һалып ебәрә, үҙ ҡулы менән ҡотлау яҙа һәм берәй нисек йәшерен генә ишара ла ҡыҫтыра һүҙ араһына, «мине ошо сәскәгә оҡшат» йәки «күбәләк булып Толпарлыға осоп барырға талпыныусы Сәнә һеңлең»– шулайыраҡ.

– Әтеү ысын, йөрәгендә бөрөләнгән уның мөхәббәт гөлө. Борсолорлоҡ хәл түгел. Хәҙерге балалар һәр яҡлап иртә өлгөрә – акселерация.

– Хәтерең дәме, ҡыҙый, үҙең һөйләгәйнең, ошо түмәләстә, Шаһимаранды күр ине, тип хыялланып ултырғаныңды?

– Мин хәҙер ҙә хыял ҡорорға әүәҫмен, әлдә ирем иҫәүәнгә һанамай – әллә нисә аптыраттым уны, көпә-көндөҙ төш күреп йә, уй артынан эйәреп, ниндәйҙер ваҡиғаларҙы күҙаллап, кинолай итеп ҡороп ултырып... Ә Шаһимаранды таптым мин, янымда ғына йөрөгән икән.

– Абау? Күҙеңә күрендеме? Арбанымы бер-бер?

– Арбаны шул. Фатих булып...

– Уф, ошо Нурияны!

Уңарсы Ҡояш байыу яғына китеп тә бара, имеш. Ниңәлер, илаһи Күк есеменең ҡәҙимге әйләнешен ҡатын-ҡыҙ ғүмеренә сағыштырҙымсы ошо юлы: Йыһан ҡарынынан алһыу битле сабыйға оҡшап тәгәрәп килеп сыға ла Күк йөҙөндә йәш ҡыҙҙай наҙлана бер килке, ә төшлөктә сәмләнеп, бөтә дәртен һалып нур һибә – уңған килендәй, шунан әкренләп талғынлана – донъяһы бөтөн, күңеле түңәрәк олпат ҡатындай, ә шәфәҡ мәлендә тағы көсәнеп ала – яҡты биреп, балҡып ҡалайым әле, ғүмер барҙа, тигәндәй... Һәм һәр көндөң – үҙ Ҡояшы: берсә таңдан ҡыҙҙыра, байығансы һүрелмәй, Күге менән ҡан илап айырылыша; берсә мыжып ҡына пәйҙә була ла һүлпән генә офоҡ артына инеп юғала; көн оҙонона болот менән йәшенмәк уйнағаны ла бар…

– Иртәгә – юлға, ҡыҙый, әҙерләнергә кәрәк, – тине Мәүлиҙә, ә үҙенең тирәйүнгә йотолоп бағып, ҡараштарын айырып ала алмай тороуы.

– Әйҙә! – Әхирәтемде етәкләп йүгертеп төшөрөп алдым да киттем биләндән.

Төшөп еткәс, туҡтап тын алған арала, Горбачев хаҡында һөйләшеп алдыҡсы, бынағайыш.

– Ҡатынын тиң күреп, ихтирам итеп тороуы оҡшай миңә уның, – тип Мәүлиҙә

башланы был хаҡта. – Күҙгә бәреп тора уларҙың араһындағы мөхәббәт. Әлбиттә, Раисаһы шуға лайыҡтыр.

– Әҙме ни бына тигән ҡатынын да түбәнһетеп ҡыланған ирҙәр ,– тип ихластан ҡушылдым әхирәтемә. – Ошо юҫыҡта мин дә уйланып алдым бер мәлде. Уҡытыусылар араһынан берәүҙең, ир затының: «Бисәһен эйәртеп йөрөмәһә булмаймы уға, Генсек башы менән?» – тигәнен үҙ ҡолағым менән ишеткәс. Ҡайтып, һәүетемсә сәй эсеп ултырғанда, түҙмәнем, Фатихтан төпсөнөм:

– Генсек булһаң, Горбачев кеүек, мине үҙең менән бергә йөрөтөр инеңме? – тип.

– Нимә тине?

– Урыны менән, уңайына ҡарап. – Шулай тисе.

– Һин яуапһыҙ ҡалмағанһыңдыр, Нурия?

– Башҡорт! – тинем. – Әллә күпме һүҙҙәр эркелеп килде тел осона, нишләптер тап шулай тип ысҡындырҙым. Наҙан йә иҫәр, тип әйтә алмайым иремә – ундай түгел дә.

– Ә ул?

– Ошо осор хәтәр сәйәсмәнгә әйләнеп алдыҡ түгелме, бәғерем, кухняла ла Горбачевты һөйләйбеҙ, тора-бара йоҡо бүлмәһенә инеп, уртабыҙға төшөп ятмаһа ярар ине ул батша, – тип шаяртып маташты.

– Ә беҙҙең өйҙә ике һүҙҙең береһе – Чернобыль, тағы...

– Тағы?

– Украинала «СССР-ҙан айырылып сығырға» тигән ҡотҡо йөрөй...

– Ана нисек?!

– Уф, нимә тип сәйәсәт мәсьәләһендә тел сарлап торабыҙ, бүтән хәбәр тапмағандай...

Шунан, әхирәтем менән күҙгә-күҙ ҡарашып, башҡа бер һүҙ ҙә ҡатышмай, эстән генә хушлаштыҡ, тағы осрашырға өмөт бәпләп айырылыштыҡ.

***

Ә нисек Ватаныңда барған ваҡиғаларға ҡағылмай йәшәргә? Бына ошо минутта, шыҡһыҙ ноябрь кисендә, мин, Фатих, ҡунаҡҡа килеп төшкән Динис туғаным – өсәүләп машинкала баҫып таратылған бер документты уҡып хайран ҡалып ултырабыҙ. Динис Свердловскиҙан алып килгән, унда бының күсермәһе – өй беренсә, ти. Борис Ельциндың КПСС Үҙәк Комитетының октябрь Пленумында юғары етәкселекте, Михаил Горбачевтың үҙен дә тәнҡит утына тотоуы тураһындағы имеш-мимеш Толпарлыға уҡ килеп ишетелгәйне, әммә гәзиттәрҙә күренмәгәс, ышанманыҡ. Билдәлелек осоро лаһа, ысын булһа, ташҡа баҫырҙар ине, йәнәһе.

– Ул саҡта Ельцин партияның Мәскәү ҡала комитетының беренсе секретары – ине, шундуҡ осорҙолар, Госстрой рәйесе урынбаҫары итеп ҡуйҙылар, – тине Динис. – Свердловск гөжләй генә: «Ельцин – Уральский мужик, не прогнется!» тип сәмләнә яҡташтары.

– Вазифаһын ғына түбәнәйткәндәр, ә әүәлерәк заманда шундуҡ ябып ҡуйырҙар ине. – Фатихҡа ҡаршы төшмәнек. – Тимәк, үҙгәрә илебеҙ, башҡасараҡ тын ала, иркенерәк итеп. Сәйәсәт тә сирләй бит, тере организм кеүек...

– Операция кәрәк булһа?! – Ярһып һикереп килеп торған Динис ыңғайына мин дә аяҡҡа баҫтым.

– Революциямы? «Весь мир насилья мы разрушим до основания, а затем...”? Кәрәкмәй! – тип, үҙем дә һиҙмәҫтән, ниндәйҙер эске хафаға буйһоноп, тәҙрә пәрҙәләрен яҡшылап тартып сыҡтым, ишеккә барып келә һалдым...

Динис килтергән «листовка»ны (үҙ-ара шулай атаныҡ) аҙаҡ Әмин абыйға ла

уҡыттым. «Партократтар! Ельцин үҙгәртеп ҡороуҙы тиҙләтергә тип янып йөрөй, уға ход бирмәйҙәр! – тип ҡыҙып алды ла, – Тартмаңа һалып тор, беҙ ҡапсыҡта ятмай ул, тишеп сығыр – шунда күҙ күрер», – тип кәңәш бирҙе. Шулай иттем дә: листовканы өҙөлә-бүленә яҙып барған бәйәндәрем араһына тыҡтым.

***

Толпарлы нисек кенә ылыҡмаһын ғөмүм ил тормошона, униң үҙенең ҡаҙаны ла бар үҙ утынын яғып, үҙ ваҡиғаларын ҡайнатырға. Көндәрҙән-бер көндө ауылға Летчик Мусаның (уның исемен ошо ҡушымтаһыҙ әйтмәй халыҡ) балалыҡ дуҫы Сәлим килеп юлыҡты. Зөһрәгә өйләнгәс, Муса ҡатынын, әсәһен эйәртеп тыуған еренә – Ырымбур далаһындағы совхозға, атаһының ҡәберенә зыярат ҡылмаҡ, барып урағайны, шунда осратҡан дуҫын. Механизатор һөнәре алып эшләп йөрөй икән. Әсәһе үпкә сиренән үлеп ҡалған, теге юлы эләккән төрмәнән әйләнеп ҡайта алмаған. Ике ҡустыһы ла Ырымбурҙа, ти. Өсөһө бер детдомда булғас, юғалтышмағандар. Сәлим һигеҙенсенән һуң һөнәрселек училищеһына кергән, эшләй башлағас, туғандарына ярҙам иткән. Уртансыһы автомеханик, ти, кесеһе иһә – юғары белемле экономист. Икеһе лә өйләнде, матур йәшәйҙәр, үҙем генә һаман буйҙаҡ йөрөйөм, ҡустыларҙы аяҡҡа баҫтырғансы ғүмер үтеп тә киткән, тигән Сәлим.

– Беҙгә ҡунаҡҡа кил,  иң һылыу ҡыҙҙар – Толпарлыла, – тип һалған шунда Зөһрә.

– Күрәһеңме? – Муса ҡатынының толомдарына ишаралап күҙ ҡыҫҡан. Ысын, Зөһрәнең маңлай сәсе алҡаланып-бөҙрәләнеп тора, толомо ла, һүтһә, тулҡынланып күҙҙе ҡыҙҙыра – ҡарап һоҡланғаным бар. Әлдә киҫтермәгәнмен сәсемде, бынау матур толомо менән Фатихымдың һушын алыр ине, ә былай – минеке лә кәм түгел, тип ҡыуандым берсә, анау ваҡыт, көнсөллөктән янып алғанымда.

Шул Сәлим үҙенең машинаһына ултырып Толпарлыға бара ятҡанда, Оло юл туҡталышында туҡтап, яңғыҙы ғына баҫып торған ҡыҙҙан: «Дөрөҫ китеп бараммы, юҡмы?» – тип һораған.

– Кемгә төбәп килә ятаһығыҙ? – Һорай һалған уныһы, таныш түгел дәһә.

– Муса менән Зөһрәләргә, Таңсулпан апайға. – Шулай тигәс, ҡыҙ, һөйөнөп, ингән дә ултырған машинаһына, мин дә шул ауылға, тип.

Тәүҙә шаңҡып ҡалған егет был ҡыйыулыҡтан, путаналар хәҙер ауыл юлдарына ла сыға башлағанмы, тип, аҙаҡ, ҡыҙҙың ауыр сумаҙанын саҡ күтәреп багажнигына һалғанда, нимә тултырҙың шул хәтлем, тигәненә яуабын ишеткәс, тынысланған: китап тейәгән кеше алама шөғөлдә йөрөмәҫ тәһә?

Мәүлиҙәнең өлкән апаһы осраған шул Сәлимгә. Ул гелән көс етмәҫлек итеп китап йөкмәп ҡайта, ауыл китапханаһын байыта. Сәлимә уның исеме. Кем белә, ошо йәштәренәсә парын тапмай йөрөгән ике яңғыҙаҡты шул да, аҙашлыҡ та, яҡынайтҡандыр – Толпарлыға улар күптәнге таныштар кеүек килеп төшкәндәр. Сәлим машинаһын ҡыҙҙың өйө тапҡырында туҡтатып, сумаҙанын алып инешкән, Әмин абый менән Рабиға апайға һүҙ ҡушҡан: «Салом, аман-саумысыз», – тип. Муса дуҫының «башҡорттар үзбәксә яҡшы аңлай» тигәнен иҫләптер, Сәлимә менән русса аралашып килгән еренән, ауылға ингәс үзбәксәләп һалдырған.

Шул арала хәбәр ҙә таралған: уҡытыусы Әминдең ултырған ҡыҙы кейәү алып ҡайтҡан, төҫөнә ҡарағанда, йә тажиҡ, йә үзбәк.

Ул да булмай, халыҡтың ғәмен башҡа ваҡиға биләне: эскеселеккә ҡаршы көрәш кампанияһы колхоздың кескәй генә майҙан биләгән виноград баҫыуын тамырынан киҫеп ырғытыуға барып терәлде. Әйтерһең, беҙҙә гектарлап үҫтерәләр

ҙә тонналап йыялар: балалар баҡсаһынан, мәктәп буфетынан артмай әлегә. Минең Камил туғаным – ул Өфөлә селекция станцияһында эшләй – виноградтың Башҡортостан климатына яраҡлаштырылған сортын мәктәп баҡсаһына ултыртып киткәйне, шуны үрсетеп, Вилмир колхоз башлығына ла еректергәйне. Күрше хужалыҡтар ҡыҙыға ине. Үрмәксенән күрмәксе, район түрәләре, ҡәҙимдән шарап етештеререү менән шөғөлләнгән регионда ҙа меңәрләгән гектарҙағы үсентеләрҙе ҡырыуҙы ишетеп ҡалғас ни, ҡаныҡтылар беҙҙең виноградникка.

Ярай ҙа, Искәндәр ағайҙың кәрәк саҡта үҙенсә эшләп ҡуя торған холҡо бар: күпмелер үсентене элекке андыҙлыҡҡа күсерттергән, унда комиссия барып йөрөмәй, сөнки ере үсемлекселеккә яраҡһыҙ тип табылған. Камил әйтә, виноградҡа килешәсәк унда тупраҡ, ял итеп, кәр ҙә йыйған, ти. Ҡайтҡылап йөрөй ул, үҙе һымаҡ илгәҙәк кенә кәләше бар, малайҙары үҫә. Бер ҡалала булғас, Камилалар менән ҡатнашалар. Уларының өс ҡыҙы бар, үҙе әйтмешләй, институтын бөтөү менән, һеңлем төп эшенә тотондо – бала табыуға. Эшкә Камил янына урынлашҡайны-урынлашыуын, декреттан башы сыҡмай. Тамсы ла бошонмай, илгә дипломлы хужабикә лә кәрәк, ти ҙә ҡуя. Арсены, минең Фатихым кеүек, ғаиләһенә генә түгел, һөнәренә лә мөкиббән китеп бирелгән. Былтыр Фәйрүзә ҡоҙағый уларға күсеп килде, тап-татыу йәшәйҙәр. Бер бөртөк улының башын үҙ яғыма ҡайырғаным да еткән, яңғыҙ зарыҡтырырғамы ни әсә кешене, ти Камила.

Шулай, үҙ ҡәүемеңдәге һәм ҙур донъялағы, хатта ки Йыһандағы төрлө ваҡиғалар әйләнешендә йәшәлә. Һикһән һигеҙенсе йыл Әрмәнстандағы ер тетрәү фажиғәһе хаҡында ҡот осҡос хәбәр килтерһә, һикһән туғыҙынсы арыу ғәмәл менән башланды: беҙҙең ғәскәрҙәрҙе Афғанстандан сығарырға ҡарар ителде. Әрмәнстанда 25 мең кеше һәләк булды, тип яҙҙы гәзиттәр. Ә афғанда һәләк булғандарҙың теүәл һанын өҙөп кенә кем әйтер? Матбуғат һәләк булыусыларҙы 13 мең, яраланыусыларҙы 50 мең һалдат тип күрһәтә, Бөйөк Ватан һуғышынан ике тапҡырға оҙайлыраҡ был мәхшәрҙә хәбәрһеҙ юғалыусылар күпмелер?

Юҡ, имен генә килмәне һикһән туғыҙынсы ла! Тымыҡ йәй төнөндә, 3 июнгә ҡарата, Башҡортостан менән Силәбе өлкәһе сигендә ике поезд, береһе Өфөнән Адлерға, икенсеһе Адлерҙан Өфөгә китеп барғанда, осрашыу нөктәһендә шартлаған. Тағы ҡорбандар – 575 кеше. Менәүәрә ҡайтып һөйләне, шартлау эпицентрында көл генә өйөлөп ҡалғайны, тип. Үҙ күҙҙәре менән күргән, мәҡәлә яҙған. Әрмәнстан фажиғәһе эҙемтәләре хаҡында ла тетрәнеп хикәйәләгәйне, барып ҡайтҡас. Бер әсә имсәк балаһы менән таш плитәләр өйөмө аҫтында ҡала, сабыйы ҡул һуҙымында ғына ята, тере, әммә уны эргәһенә алырға, исмаһам, ҡосаҡлап тәне менән йылытырға мөмкинлеге юҡ – ҡымшанырлыҡ та түгел! Нарасыйы асығып илай, нишләргә? Әсә үҙенең бармағын тешләп өҙөп, ғәзизенә ҡанын имеҙә... Ошо йән әрнеткес хәлдәрҙе йөрәгеңдән үткәреп яҙыу нисектер, уҡып күҙаллаған мин сабырлығымды юйҙым, һығылып иланым.

Менәүәрә ныҡ үҙгәргәйне. Тыштан түгел, эстән. Үҙгәртеп ҡороуҙы ул хыял офоҡтары асылыу тип аңлап, дәртләнеп ҡабул иткәйне. Гәзиттәрҙә бер-бер артлы шиғырҙары сыҡты, ижадында яңы бит асылды, гүйә. «Ҡурҡаҡлыҡтың тунап тиреһен, заман кәртәһенә элеүсе», – тип яҙҙы ул беҙҙең быуын исеменән. Һуңғы шәлкемендә иһә күңел төшөнкөлөгөн һүрәтләп тетрәндерҙе. Мәскәүгә барып ҡайтҡайны, шунан әйәргәнме уға был кәйеф: «...Беҙ йәшәйбеҙ сәйер күргәҙмәлә, ә тамаша осһоҙ – баҡыр тин. Хәйерсенең туҙған кәпәсенә һал тинеңде, бахыр, батыр ил...»

Үҙе бахыр, үҙе батыр – Ил тәңгәлендә әйтелгән! Шағирҙарҙың күңеле һиҙгер бит ул. Юҡҡа ғынамы ни, улар пәйғәмбәр түгел, тип дин тәғлимәте лә иҫкәртә: һүҙ ҡеүәһе, шиғри аһәң, аҡыл һәм нескә тойом арҡаһында уларҙың яҙғандары

бер көн килеп бойомға ашһа, кешеләрҙең яңылышыуы ла бар шул. Шағирҙарға илаһи һәлătте, моғайын, пәйғәмбәрҙәргә булышлыҡ итһендәр өсөн биргәндер Аллаһ?

– Мәскәүҙә ил һулышын яҡшыраҡ тояһың икән, – тине Менәүәрә. – Унда халыҡ ҡыйыуыраҡ, сәйәси йәһәттә зирәгерәк. Арбат тигән урамда рәссамдар теҙелеп баҫҡан, һүрәт төшөрәләр, картиналарын һаталар. Берәүһе Горбачевтың портретын яһаған, халыҡ шул тирәлә геүләшкәнгә, яҡын барып ҡараһам, Генсектың түшенә миҙал һымаҡ итеп талондар тағылған: шәкәргә, колбасаға, араҡыға...

– Ни менән бөтөр икән был үҙгәртеп ҡороу? – Менәүәрә һорауыма көтмәгәнсә яуап бирҙе:

– Горбачев власта оҙаҡ ултырмаҫ, ти Сыңғыҙ. Ә мин уға ышанам, әйткән бере алға килә. Һаман партияға инмәй йөрөй үҙе, күп партиялылыҡ булғас, һайлап инермен, үҙемә оҡшағанына, ти. Элегерәк көлә инем, һаташма, тип, хәҙер икеләнә башланым – ихтимал, шулай булыр ҙа.

– КПСС-тан бүтән партиямы?

– Эйе. Оппозицион партия. Сит илдә әллә нисә партия ҡатнаша лаһа һайлауҙарында.

***

Физиканан «ҡайнауҙың иң юғары нөктәһе» тигән термин иҫтә ҡалған. Сәйәсәттә лә була, ахырыһы, шул нөктә? Булһа, 90-сы йылға тура киләлер ул, моғайын. Сағыштырмаса ҡыҫҡа ваҡыт эсендә сәйәси система үҙгәрҙе лә ҡуйҙы. Башта РСФСР, артабан Украина, Грузия, Балтик буйы республикалары үҙаллылыҡҡа ирештеләр. РСФСР Юғары Советы Рәйесе итеп Борис Ельцин һайланды. Рәсәй суверенитеты тураһында Декларация ҡабул ителде.

Сыңғыҙ һымаҡ ҡалыплашмаған фекер эйәләренең хыялы бойомға ашыу алдында: СССР Конституцияһының КПСС-тың етәксе роле тураһындағы 6-сы статьяһы юҡҡа сығарылды, йәғни башҡа партияларға ла юл асылды. Борис Ельцин беренсе булып компартиянан сығыуы хаҡында иғлан итте, быны үҙ күҙебеҙ менән күреп, үҙ ҡолағыбыҙ менән ишеттек – КПСС-тың XXVIII съезын телевизорҙан ҡараныҡ.

Беҙҙәге үҙгәрештәр сит илдә лә шаңдауһыҙ ҡалманы. ГДР менән ГФР-ҙағы хәлдәр генә ни тора. Былтыр бер төркөм немец Берлин стенаһын емерергә тотонғайны, шул ел менән Германия берләшеүгә өлгәште. Бөтә донъя шаһит булды: 150 километрҙан оҙонораҡ стена һүтеп ырғытылды, Берлин илдең уртаҡ ҡалаһына әйләнде. Совет ғәскәрҙәрен Германиянан сығарырға ҡарар ителде. Был ваҡиғаларҙы, Бөйөк Ватан һуғышы яралары һаман һулҡыһа ла, беҙҙең халыҡ аңлап ҡабул итте булыр – ниндәй дәүләттә йәшәргә теләүҙәрен үҙҙәре хәл итһен, бәс.

Бер көндө Мәүлиҙәнән дә ошо юҫыҡтағыраҡ хат килеп төштө. «Украина, гүйә, уртаға бүленде, – тип яҙған, – уңай мәлде көтөп кенә торғандай, милләтселәре баш ҡалҡытты. Студенттарым араһында ла ҡый-сый бара... Бандеровсыларҙан герой яһарға ашҡыныусылар бар. Казак формаларын кейеп, шашка аҫып йөрөйҙәр, атамандарын һайлайҙар. Русса өндәшһәң, «Я не розумию» тип ебәрәләр. Мин, әлбиттә, украинса яҡшы һөйләшәм. Эш унда түгел, ә башҡа милләттәргә нәфрәт менән ҡараусылар күбәйеүендә. Етмәһә, халыҡтың матди хәле ныҡ ауырайҙы, был да татыулыҡҡа хеҙмәт итмәй. Шахтерҙарға аҡса түләнмәй. Уларҙың забастовкалары тураһында ишеткәнһегеҙҙер? Өҫтәүенә, шахталарҙа авариялар йышайҙы. Иҫке забойҙарҙы ваҡытында йүнәтергә сығымдар бүленмәй, терәүҙәр емерелә, ҡатламдар ишелә, ти Олексий, ул, хәүефһеҙлек техникаһы буйынса белгес булараҡ, йыш төшә шахтаға – ҡотом алынып тора».

Әхирәтемдең ҡурҡынған тауышын ишетәмендәй, уның ҡуйы бәрхәт керпектәренең елпенгәнен күрәмендәй…

Артабан иһә сәйәсәт машинаһының тормозы ысҡынды гүйә: СССР тарҡалды. Үгеҙ үлде, уртаға ярылды, тигән мәҡәл иҫкә төшә… Бөйөк империя уртаға ғына ла түгел, ун биш киҫәккә ярылды. Михаил Горбачев отставкаға китте. Власть тулыһынса Рәсәй Президенты Борис Ельцин ҡулына ҡалды. Юғары Советта оппозиция ойошто, был ҡаршылыҡты еңер өсөн Мәскәү урамдарына танкылар индерелде, Хөкүмәт йортонда тупланған парламент ағзаларына ут асылды...

Билдәлелек, һүҙ азатлығы, демократия тип лаф орған матбуғат был хәлде нисек аңларға-аңлатырға белмәй торҙо бер килке.

Ил шаңҡып ҡалды. Халыҡ, граждандар һуғышы тоҡанып ҡуймаһын, тип һағайҙы.

53

Ә һуғыш башланды. Чечен Республикаһында. Шул хаҡта уйланырға тотонһам, әле килеп тә мейем, тәгәрмәс эсендә йүгергән тейен кеүек, зырлатып фекер әйләндерә, әммә бер төрлө генә ҡәтғи һөҙөмтә сығара алмай... Афғанға беҙ тығылырға тейеш түгел инек, ә Чечня Рәсәй эсендә бит?!

Бер дәфтәремдә Чечня фажиғәһенә бәйле оҙон ғына хәтернамә бар, уны ҡушып ебәрмәһәм, бәйәнем бөтөн булмаясаҡ. Ҡушам.

...Балаларға үткән дәрестә өйгә эш итеп контур карталар тултырырға биргәйнем, бөгөн шуларҙы йыйып алып, география кабинетында тикшереп ултырһам, ипле генә баҫып кемдер килеп инде.

– Өйгә күтәреп алып ҡайтып йөрөгәнсе, бында ҡарап ҡайтырға булдығыҙмы, Нурия Баязитовна, – тип һүҙ ҡушҡас, күтәрелеп ҡараһам, күрше Аҡмәтенән Мәҙинә ләһә, элекке уҡыусым. Хәҙер үҙе уҡытыусы инде, былтыр ғына тыуған ауылында эшләй башланы. Уларҙа башланғыс мәктәп кенә, шуны ла ябырға итәләр, тигән хәбәр ҡуйырҙы һуңғы арала, шул турала һөйләшергә килдеме икән?

– Йыйыштырыусы апайҙыр, тиһәм... Яңы ғына, тиҙерәк осла мәшәҡәтеңде, иҙән йыуырға кәрәк миңә, тип мыжып киткәйне. Ни йомош, Мәҙинә?

– Нурия апа, һеҙгә күҙ терәп килдем әле, – тине лә был ишек яңағына һөйәлеп иланы ла ебәрҙе. – Бер үҙем барырға йөрәгем етмәй, анау «чечендар»ҙы күреп һөйләшкем килә, осратманылармы икән минең егетемде. Хәбәрһеҙ юғалды. Өфөнөкө ул, милицияла хеҙмәт итә ине. Уҡыған осоромда танышҡайныҡ...

– Айгизде әйтәһеңме чечен тип?

– Малайы чечен булғас ни... Унда булғандарҙың бөтәһен дә «чечендар» ти ҙә ҡуялар. Күрергә ине Айгизде. Малайы Булат тиме?

– Эйе. Ниңә «малайы», тиһең? Уныҡы түгел бит ул, дөм йәтим ҡалғас, баланы йәлләп эйәрткән дә алып ҡайтҡан.

– Чечен милләтенәнме? Шуныһы хаҡмы?

– Хаҡ. Дүрт йәшлек сабыйҙың ни ғәйебе?

– Бер ғәйебе лә юҡ!

– Әйҙә һуң, юл ыңғайы бергә инеп сығырбыҙ.

Контур карталарҙы шкафҡа һалдым да, ҡуҙғалдыҡ. Ә Айгиз Әмин абыйҙың ейәне ул. Уртансы ҡыҙҙарының кесе улы. Мәүлиҙәнең ул апаһы мединститутта уҡ һабаҡташына кейәүгә сығып, малай табып, ата-әсәһенә бәләһен һалмай ғына студент дөйөм ятағында үҫтергәйне. Диплом алғас, эшкә иренең тыуған Нефтекама ҡалаһына барып урынлашҡайнылар. Унда ошо Айгиздәре тыуҙы. Малайҙарының араһы алты йәш тирәһе. Өлкәне Толпарлыға бик ылыҡманы, тегендәге

ҡартатаһы менән нәнәйенә йылышты, ә бәләкәсе Әмин абыйҙарға атлығып торҙо. Биш йәшендә тәүләп килгәйне, шунда уҡ Рабиға апайҙың итәгенә сат йәбешеп, бер айға тороп ҡалды. Шулай эҫенде булыр, уҡырға төшкәс тә каникулдарҙа йәй оҙоно беҙҙә йөрөнө. Уны күргән берәү, ирекһеҙҙән, «Ишбирҙе һыңары» тиер ине. Төҫөнән бигерәк холоҡо тартҡан. Ҡыҫҡаһы, тағы бер «ен ботағы». Ҡырҙан килгән тимәҫһең, Толпарлы малайҙарын эйәртеп, геү күстәреп йөрөнө. Шул малай үҫеп, Нефтекамала мәктәп тамамлап, Ауыл хужалығы институтына имтихан биргәйне лә, балл йыя алманы. Әмин ағайҙың бәрейе ҡупты хатта:

– Олатай, Толпарлы урмандарын ҡурсаларға уҡыясаҡмын, урман факультеты асылған бит минең бәхеткә, тип ҡанатланып йөрөгән баланы үткәрмәгәндәр, шулар кем була? Сволочтар! – Шулай асырғанды.

Айгиз көҙгө призывта армияға алынды. Ярты йыллап ваҡыт уҙыуға, Әмин абыйға тағы күтәрелеп бәрелергә, теге һүҙҙе ҡабатларға сәбәп тыуҙы: ейәне Чечняға эләккән.

Мыштыр ғына булһа ла, үҙ донъяһын үҙе көтөп, ҡыҙыу холоҡло иренә күнеп йәшәгән Рабиға апай сиргә һабышты. Һыйыр һауып ултырған еренән тәгәрәгән бер көндө. Ярай ҙа, абый янында булған, малын көтөүгә ҡыуырға тип сыҡҡан булған. Шундуҡ дауаханаға шылтыратҡан.

– Шәкәр ауырыуы, диабет, – тип аңлатты Фатих апайҙың хәлен. – Анализ эшләһәк, шәкәре 12-гә менгән. Норма 4-5 кенә.

– Ҡайҙан килгән ул сир, уф! – Ҡобарам осто.

– Диабеттың ике төп сәбәбе бар: йә нәҫелдән килә, йә – стрестан.

– Стресс инде, тетрәнеү, – мин әйтәм, – Айгиздәре һуғыш эсендә бит.

– Әүхәт ағайҙың дәфтәрен асып ҡараным иң башта, нәҫелдәрендә ундай сир юҡ.

– Ниндәй дәфтәр ул, Фатих?

– Иҫ киткес шәп дәфтәр, торғаны энциклопедия! Әүхәт ағай гений, белһәң. Һуғышта ла көндәлек алып барырға ваҡыт тапҡан, төрлө ҡатмарлы осраҡтарҙы яҙып барған. Хикәйә һымаҡ ҡайһы бер яҙмалары, кеше яҙмыштарына тетрәнеп китәһең... Ә Толпарлыла эшләгәне бирле тотош китап яҙған, унлаған дәфтәрҙе бергә төпләп, миңә мираҫ итеп тапшырҙы. Ана шунда ҡайһы нәҫелдә ниндәй сирҙәр барлығы ла теркәлгән. «Халыҡ медицинаһы» тигән өлөштәр үҙе ғәжәйеп трактат – мин уларҙы махсус баҫмаларға әҙерләп ебәрмәксемен әле.

– Толпарлы Булгаковы, ҡыҫҡаһы.

– Эйе. Бер профессорыбыҙ иҫкә алғайны, «Мастер һәм Маргарита»ның авторы бөйөк яҙыусы Михаил Булгаков хәрби врач булған, төп һөнәре буйынса, тип.

– Ә беләһеңме, ҡартәсәйем дарыу үләндәре, төнәтмәләр хаҡындағы яҙмаларын – унынса табибнамә – кемгә ҡалдырған?

– Һиңә.

– Юҡ шул. Әсмәгә!

– Урман ҡыҙына. Рәйхана инәй уйламай эшләмәҫ?

– Эйе. Барыбер күсереп алам да Әсмәгә шуны бирәм, ә төп нөсхәне үҙемә ҡайтарам. Ҡартәсәйемдең ҡулы тейгән һәр әйбер мине йылыта, хатта ки дауалай.

– Ыңғай энергетика һиңә, үҙ ҡанына, ҡағылғанда – бигерәк тә көслө.

– Әсмә үпкәләһә?

– Аңлар. Үҙе лә эре һөйәкле, күңеле лә ваҡ түгел уның.

– Һин, етмәһә, психолог?

– Нуриям! Мин – табип, ауыл табибы, киң профилле булырға бурыслымын. Бәғерем, эйеме?

Шул «бәғерем»енә ирейем дә төшәм. Йыш әйтмәй, ә мин гелән тулҡынланып

китәм. Фатихымдың түшенә һыйынам, уның зәңгәр күҙҙәрендәге тере кәртешкәмә һынап-һынап бағам да, бәхетемдән тилергәндәй, ҡысҡырып көлөп ебәрәм. Ул тауышһыҙ ғына йылмая, билемдән ҡосоп, күтәреп-күтәреп ала. Шул саҡта үҙемдең бәләкәй буйлы икәнлегемә һөйөнөп ҡуям, юғиһә, буйсан, оҙон аяҡлы ҡатын-ҡыҙға күҙем ҡыҙыуҙан һаман арына алмайым.

– Килеп еттек, Нурия Баязитовна! – Юл буйына үҙ уйыма батып, Мәҙинә менән һөйләшмәй ҙә килгәнмен, имеш. Әй, ошо ғәҙәтемде, белмәгән кеше әллә ни уйлар ҙаһа. Уңайһыҙланып киттем дә татылдарға тотондом:

– Борсолма, инәбеҙ, күрәбеҙ, һөйләшәбеҙ, бәс!

Индек. Рабиға апай төҫкә бирешеп киткән, күҙҙәре теремек былай, Айгиз ҡайтҡас ни. Күмәкләп сәй эстек. Әмин абый эргәһендәге ҡара сәсле, ҡара күҙле, ҡарпыҡ ҡолаҡлы малайҙың башынан һыйпап, арҡаһынан һөйә лә, кеҫәһенән яулыҡ ҙурлыҡ ҡулъяулығын сығарып, битен һөртә. Тирләй, йәнәһе. Күҙе йәшкәҙәй, күреп торам, шыпырт ҡына шуны ҡоротоп ала.

Мәҙинә Айгизгә егетенең исемен, уның ҡайһы мәлдә Чечняла булыуын әйтте, осраманымы бер-бер, тип белеште.

– Башҡортостандан бер айға оперҙар килгәйне, сводный отряд МВД,– тине Айгиз. – Улар беҙҙән айырым хәрәкәт итте. Һалдаттар араһында һәләк булыусылар күберәк, әммә МВД-ныҡыларҙа ла юғалтыуҙар әҙ түгел. Һуғыш...

– Урындағы халыҡ та беҙҙекеләргә ҡаршы, ти, ысынмы? – Мәҙинә шулай тине лә кәсәнән һемереп сәй эсеп ултырған Булатҡа ҡараны. Малай ҡарашты һиҙҙе, кәсәһен ҡуйып, Рабиға апайға һыйынды.

– Ҡайһы урында дошман итеп күрмәгәндәйҙәр, ярҙам итәләр, ә ҡайһы бер яҡта, бала-сағаһына тиклем, беҙҙе күрһә, ҡул һырты менән муйынын һыпырып күрһәтә лә ҡаса. Башығыҙҙы киҫәбеҙ, тимәкселәр.

– Ай... – Мәҙинә ыңғырашып ҡуйҙы. Булат ашыҡ-бошоҡ әппәр итте лә Әмин абый эргәһенә йүгерҙе, ул әле генә үҙенең теге кескәй генә кабинетына инеп киткәйне.

– Баланың йөрәгә ҡубып бөткән, – тип иламһырап ҡуйҙы Рабиға апай.

Шунда, ҡапыл ҡуҙғалып, Мәҙинә ишек төбөндәге ултырғысҡа ҡуйған пакетын барып алды ла Рабиға апайға бирҙе:

– Чечендарға күстәнәс тигәйнем. Малайға ойоҡбаштар, көҙ ҙәһә, ҡышы ла көттөрмәҫ.

Рабиға апай аптырап миңә ҡараны. Ғәжәпләнмәгеҙ, тигәнерәк ым еткерҙем. Алды пакетты, эсендәгеһен өҫтәлгә сығарып һалды. Еләк ҡайнатмаһы, балан ҡағы, кәнфит-печенье, ике пар кескәй ойоҡбаш.

– Һы, рәхмәт, әтеү, – тигән булды апай. – Әлдә Әмин абыйың күрмәне, туҙынып ине, күрһә, моғайын. Асмы ни беҙ, яланғасмы ни, тип.

Айгизгә күҙ һалһам, риза ғына ултыра, күҙҙәрен бәзрәйтеп. Мәҙинә әллә оҡшап ҡалған егеткә?

Яйы сыҡҡанда, Чечня хәлдәрен унан төпсөнөбөрәк һорашырға булдым. Гәзиттәргә ҡай саҡ ышанып та бөтөп булмай, ә бында тере шаһит ултыра.

– Күңелеңә ауыр булһа, һөйләмә, – тинем улай ҙа. Ә ул, Мәҙинәнән күҙен алмай, хәтерләргә тотондо.

– Унда ҡыҙыу ҡанлы халыҡ йәшәй, – тип башланы Айгиз. – Бер ҡараһаң, йомарт, ҡунаҡсыл үҙҙәре, икенсе ҡараһаң, тәкәббер, власть көҫәгән кешеләр. Һәр чечендың кәм тигәндә кенәз булғыһы килә. Ғорур халыҡ беҙ, тиҙәр, әммә ғорурлыҡ төшөнсәһен бәғзеләре нисектер бүтәнсәрәк тә аңлай... Джохар Дудаевҡа, СССР-ҙың хәрби Һауа Көстәре генералы булған кешегә, абсолют власть кәрәккән – Чечен Республикаһы Президенты булыу. Был маҡсатҡа ирешеү юлында күпме

ҡан түгеләсәк икәнен ул, сәйәси аңы, белеме бар хәрби, күҙ алдына килтермәгәнме ни?! Һөҙөмтәлә – граждандар һуғышы. Дудаевҡа ҡаршылар ҡорал күтәрҙе. Илдә тәртип урынлаштырыу өсөн Ельцин ғәскәр индерҙе.

...Күҙ алдымда харабалар пәйҙә булды. Ҡайҙа һуң мин киноларҙа күргән, йырҙарҙа ишеткән гүзәл ҡала Грозный? Ҡыйралып, таш-бетон өйөмдәренә әүерелеп аяҡ аҫтында ята.

Айгиздәр Грозныйҙы штурмлауҙа ҡатнашманы. Ҡалаға бер нисә ай буйына туҡтауһыҙ ҡурғаш ямғыры яуған. Ҡайҙа ҡарама, шартлатылған БТР-ҙар аунап ята.

Һауала тимер, ут, дары еҫе мәңгегә ыҫланып ҡалғандай. Айгиз Пушкин әҫәрҙәре аша ғына таныш ер-һыуҙарҙы ошолайтып күҙ алдына ла килтермәгәйне. Йүгерек Терек буйҙарына яҙ килгәненә һауалағы Ҡояштың өтөп алып барған ҡайнар нурҙары ғына ышандыра. Көнгә тиртеп сыҡҡан үлән дә, сутылдаған ҡош та юҡ тирә-йүндә.

Айгиздәр ротаһының бурысы – Чечнялағы хәлдәрҙе контролләү, КТО – контртеррористик операция режимын тәьмин итеү.

Рота Грозныйға барған шоссе юлын һаҡлай. Айгиздәр төркөмө – ҡалаға терәлеп тигеләй торған урында. Асыҡланыуынса, был посты башта чечен бандалары ҡорған. Һөҙәк кенә ҡалҡыулыҡ һыртында. Шул ҡалҡыулыҡ ҡабырғаһын бүҫеп, йәшерен мәмерйәләр өңөлгән, бер ерҙән инеп, икенсе төштән барып сығырлыҡ итеп. Ҡалҡыулыҡ арьяғындағыларҙы һауанан ғына күреп була, ә улар, был юлы – Айгиздәр, алдарында ятҡан ҡаланы боҫоп күҙәтә алалар.

Өс-дүрт саҡрым алыҫтараҡ, ярым яланғас убалар арьяғында, кескәй ауыл бар. Бер нисә мөрйәнән төтөн сыға. Ошо мәхшәрҙә лә йортон ташламаған ҡайһы берәүҙәр, тимәк. Командирҙары иртәгәнән ауылға разведкаға барырға план ҡорҙо, ә бөгөн урынлашырға, күҙәтеү өсөн уңайлы позициялар билдәләргә бойороҡ бирҙе. Әҙер блокпоста йәтешләп урын һайлауы оҙаҡ булманы. Шул арала, һалдаттарҙы көтөп тормаҫтан, ауылдан ике чечен ҡарты килеп етте. Бик бәлтерәгәнгә оҡшамаһалар ҙа, таяҡҡа таянғандар. Русса ап-арыу һуҡалайҙар. Ниәттәре хаслыҡ ҡылышмау, дошманлашмау икәнен аңлаттылар. Үҙҙәре үткер ҡараштары менән кем барлығын, ни юҡлығын барлай кеүек. Береһе Айгизгә иғтибар итте, милләтен һораны.

– Башҡорт, – тине егет.

– Ҡурд? Мөхәммәт өммәте? Иншалла. – Тап шул мәлдә юл аша ултырған ярым емерек йорт яғынан бер нисә автоматтан ата башланылар. Алыҫ икәнлектәрен, тейҙерә алмаҫтарын белә тороп?

Командир, тәжрибәле кеше, дүрт яҡты ла күҙ уңынан ысҡындырмаҫҡа, ҡоралды әҙер тоторға приказ бирҙе. Ҡарттарҙың береһе, ҡалала партизандар күп, тип хәбәр итте.

Эйе, был партизан һуғышының башы ғына ине. Иртәгәһенә бер төркөм һалдат ҡаршылағы теге йортто барып тикшереп сыҡты, кисәге автоматчиктарҙың эҙе лә юҡ. Уның ҡарауы, подвалда дүрт йәшлек тирәһе малай менән йәш кенә ҡатынды таптылар. Бөтә нәҫел-нәсәбе һәләк булған, ошонда ҡасып ултырып иҫән ҡалғандар икән. Ашарҙарына, эсәрҙәренә бөткән, ҡулдарын күтәреп, әсир төшөргә әҙер торалар. Быларҙы юл аша сығарып, ауыл яғына йүнәлтеп ебәрҙеләр. Нишләтһендәр? Иң хәйерлеһе шулдыр? Ҡатын да, кисәге ҡарттар һымаҡ, Айгизгә иғтибар итте. Яулығын муйылдай ҡара күҙҙәрен генә асыҡ ҡалдырып ябынған ине, әммә егеттең йөрәгенә үтеп инергә шул күҙҙәрҙең ҡарашы ла етте. Усаҡ яҡтыһында ҡылыс йөҙө ялтлап китте, гүйә... Әйтерһең, Айгиз ҡасан да бер ҡылыс тотоп ҡараған?! Хәтерелер, быуаттар аша ым биргән ҡан хәтерелер, тертләтте уны.

Бер нисә көн тыныс ҡына үтте. Командир, ауылға һөт-ҡатыҡ йүнләп килергә тип, өс һалдатты ебәрҙе. Береһе, әлбиттә, Айгиз. Контакт урынлаштырыуы уға еңелерәк, йәғни. Ә бармы икән әле унда һөт-ҡатыҡ? Бар икән. Йыраҡтан уҡ күреп килделәр: кәртә буйында ике ҡатын кәзә һауа. Кетәктә тауыҡ ҡытҡылдағаны ла ҡолаҡҡа салынды. Ризыҡ бар, тимәк. Һалдаттар ҙа буш ҡул түгел: ит, бутҡа консервалары алғайнылар. Алмашҡа.

Теге ҡатындар баштарын баҫып кәзә һауыуын белде. Күтәрелеп ҡарамаһалар ҙа, Айгиз береһен таныны. Йөрәге таныны. Быға са таныш түгел сәйер тойғо биләп алғайны егетте, ышанырға ла, ышанмаҫҡа ла белмәй: сит ерҙә, һуғыш барғанда, хәрби хеҙмәт өҫтөндә, етмәһә, ят бер чечен ҡатынына күҙе төштөмө? Мөмкин түгел дәһә! Ниндәй мөхәббәт, ти, ошо шарттарҙа?!

Тәмле табикмәк менән һыйланып, бер сирек һөт тотоп ҡайтырға сыҡтылар. Юлда баяғы ике ҡатынға ҡапма-ҡаршы тап булдылар. Саҡ ҡына туҡтап, һүҙ ҡатышмай буламы? Тағы ҡылыс йөҙө ялтыраны, оҙон ҡуйы керпектәр дерелдәне.

– Как зовут тебя, красавица?

– Зарина.

– Айгиз, – тине егет, ҡара күҙҙәрҙәге өнһөҙ һорауға яуап итеп.

– А тот мальчик твой сын?

Көтмәгәндә ҡатын сылтыратып көлөп ебәрҙе лә ҡапыл туҡтаны.

– Брат. Родной. Хасбулат.

Оҙаҡ һөйләшеп торманылар, ярамай ҙа – устав ҡушмай.

Айгиз төн уртаһынаса йоҡлай алманы. Зарина күҙ алдына килде лә баҫты, килде лә баҫты. Күрҙе генә түгел, тауышын да ишетте бит! Ғажиз булып, асыҡ һауаға сыҡты. Күккә ҡараны. Сағыу йондоҙҙарға хайран ҡалды. Уларҙың ни һуғышта ла, мөхәббәттә лә эштәре юҡ – үҙҙәре бейек, ғәмәлдәре бөйөк.

Айгиздәрҙең позицияһына бер нисә тапҡыр һөжүм итте чечен партизандары. Улар araһында сит илдәрҙән ялланып килгән һуғышсылар ҙа бар, ти. Аҡса хаҡына ғүмерен аямаусылар юҡ түгел хәҙерге заманда. Әй, һәр саҡта ла бәндәләрҙең төрлөһө булған һәм буласаҡтыр?

Бер төндә вахтала тороусылар юл аша йортта яҡты күреп ҡалған. Таң атҡас, тикшерергә булдылар. Етеп кенә барғанда, ул йорттан түгел, ә күршеләгеһе, ер менән тигеҙләнеп бөткәне, яғынан автоматтан сират бирҙеләр. Айгиздең дуҫы Валера киҫелгән ағастай барып ауҙы. Сигенделәр. Валераны һөйрәп блокпостҡа алып ҡайттылар: пуля умыртҡа һөйәгенә кереп ултырған, буғай, тине командир. Вертушка – вертолет инде – саҡырҙылар ҙа яралыны Моздок ҡалаһынадағы госпиталгә оҙаттылар.

Рациянан төрлө хәбәрҙәр килеп тора. Яңыраҡ Башҡортостан оперҙары машинала пехота өсөн һалынған минаға саҡ эләкмәгән. Кемдер осраҡлы рәүештә буш консерва банкаһын юлға ырғытҡан да, уныһы «лягуха»ға барып төшөп шартлаған. Минаға «баҡа» тип исем ҡушҡандар, тейһәң, һикереп китә лә... теге банка әлдә алғараҡ барып кәкселгән. Юғиһә, тотош отряд һәләк булыр ине.

Ә иң ғибрәтле хәл торараҡ булды. Хәйер, һуғыштың һәр ваҡиғаһы – ғибрәт. Тик барыбер... Таң беленмәҫ борон ауыл яғында офоҡ гөлтләп яҡтырып китте. Ауыл көнсығышта ятҡас, әллә Күк Тәңреһе Ҡояш шулай ҡапыл һәм сағыу булып ҡалҡтымы, тип тә уйларға иттеләр, йәй уртаһы лаһа. Ысынында, чечен партизандары ауылдағы унлаған кешене үлтереп, торлаҡтарына ут төрткән. Беҙҙең һалдаттар менән аралашҡан өсөндөр?

Ҡотҡарырға тип барып еткәндә, янғын үҙенең яуыз эшен ҡылған ине инде. Ҡырҙа кәзәләр баҡырышып саба, ҡурҡыштарынан күҙҙәре аларып. Бер ситтә Зарина менән Хасбулат баҫып тора. Айгиз күҙҙәрен ыуалап ҡуйҙы, әллә яңылыш

күрәмме, тип. Улар! Ҡура яғындағы мөгәрәпкә урынлаштырғандар икән уларҙы. Шунда йоҡлап йөрөгәндәр. Шул арҡала иҫән ҡалғандар.

Зарина менән ҡустыһын һалдат араһында тотоп булмай бит инде, теге юл аша йортҡа, элек үҙҙәре йәшеренгән подвалға, оҙатырға тура килде. Командир унда ла вахта ҡуя башлағайны, һаҡлыҡ өсөн.

Йорттоң өстән бер өлөшө тотош ҡыйралған, тик бер яҡ мөйөшөндә генә биш ҡаты имен ҡалған, баҫҡыстары ла емерелмәгән. Хасбулат көн дә тиерлек иң өҫкө ҡатҡа менеп, үҙенсә кирбес ватыҡтарынан танкылар төҙөпмө, поездар теҙепме уйын таба. Шунда сәселеп ятҡан буш гильзаларҙы танк көпшәһе итеп йәпләп ҡуя. Ауылда бер ҡарт ағастан автомат ишараты юнып биргәйне, шунан «тух-тух-тух» тип ата ла, йәнәһе, мөйөшкә боҫа...

Бер төндө, вахтаға баҫҡанда, Айгиз Зарина менән осрашырға форсат тапты. Вахтала дүрт кеше дүрт тарафты күҙәтә. Һиҙгерлекте юғалтмаҫҡа кәрәк. Ә ғашиҡ йөрәк, билдәле, йоҡламай ҙа, уяу ҙа булмай. Ул, ғөмүмән, һуғыш барған илдә, харабалар араһында түгел, ә Йыһандың иң гүзәл бер ерендә, һандуғастар сутылдаған гөлдәр баҡсаһында, гүйә.

Айгиз Зариналар янына бер генә минутҡа тип ашҡынып барҙы: улар төндәрен, һалҡын булғанлыҡтан, өсөнсө ҡаттағы тәҙрәһе ватылмай ҡалған бер бүлмәлә уҙғара. Хасбулат йоҡламаған ине әле, «ағай» килтергән итле-бутҡалы консерваны гелән кеҫәһендә йөрөткән бәке менән оҫта ғына итеп асып йәлп ашаны ла, Айгизден төндә лә күрә торған күҙлеген һорап тороп, тышты күҙәтергә тотонды. «Ой, все видно! – тине малай ҡыуанып һәм: – только никого нет...» – тип күҙлекте ағайға кире бирҙе. Был сәғәттә бер кемдең дә йөрөмәүе хәйерле икәнен бала аңлап та етмәйҙер...

Айгиз теге күҙлектән тирә-йүнде иғтибарлап байҡаны ла Зарина эргәһенә килде: ҡыҙ иң хәүефһеҙ урында, ишек-тәҙрәнән алыҫ стена ҡырында кирбес өйөмөндә ултыра ине.

– Хорошая штука этот прибор ночного видения, – тине һүҙ башлар өсөн.

– Да. У снайперов он, наверное, тоже есть. – Ҡыҙ ғәҙәттәгенән дә бойоғораҡ кеүек тойолдо егеткә.

– Зарина, ты говоришь по-русски, наверное, в школе язык изучала, как и я, а Хасбулат откуда так хорошо его знает?

– У нас родители еще до школы начинают детей учить, чтобы в дальнейшем легче им было. Да и общение в садике, во дворе – в Грозном русских много. Было... А родители наши в Москве встретились, когда учились в мединституте. Еще студентами поженились, я там и родилась. Хасбулат тут родился, когда уже мама с папой оба врачами высшей категории стали, собственный дом построили. Папа часто говорил, что он сделал все, что мужчине положено: дом построил, дерево посадил и сына родил...

Айгиз Заринаның ҡулдарынан тотоп, уны аяғына баҫтырҙы. Ҡыҙ уның күкрәгенә башын һалып һулҡылдап илап алды. Егет һылыуҙың ебәк яулығы өҫтөнән ипләп кенә сәстәренән һыйпаны, яңаҡтарынан һөйҙө, һаҡ ҡына, бармаҡтары менән генә. Тау ҡыҙы бит ул, күндәм, баҫалҡы күренһә лә, ғорурҙыр, саялыр – башҡорт һылыуҙары кеүегерәктер, тип уйланы.

Бер минутҡа тигәне оҙаҡҡа һуҙылды. Ана, Хасбулат та, Айгиз килтергән одеялға төрөнөп, мышылдап йоҡлап китте. Ҡыҙҙың саҡ ҡына дерелдәгән ҡулдарын усында тотоп, уның яп-яҡында булыуынан еңелсә генә башы әйләнеүҙән ләззәтләнеп тор ҙа тор ине лә, ахырҙа ҡосағыңа алып үп ине! Шул мәл ҡыҙға әллә нимә булды, тауышһыҙ-тынһыҙ, бер ағастан икенсеһенә ырғыған тейендәй, Хасбулат яғына һикерҙе. Атыу тауышы яңғыраны. Зарина йоҡоһонан ҡурҡып уянған туғаны өҫтөнә ауҙы.

Тәҙрәнән туп-тура ҡарап ошо хәлгә шаһитлыҡ ҡылған Ай, әйтерһең, бөтә яҡтыһын ҡасан ғына әле эңер ҡараңғыһында эңгер-меңгер килгән бүлмә эсенә һибә. Теге дошман, толомдарын сайҡалдырып талпынған һындың ҡатын кеше икәнен аңлауҙанмы, бер секундҡа юғалып ҡалды булыр, Айгизгә шул мәл етте, тоҫҡап атып ебәрергә. Дошман үлгәнме-юҡмы тип тикшереп тә торманы, автомат утынан уның кәүҙәһе иләккә әйләнгәнен белә. Зарина янына сүгәләне, ҡыҙ иҫән ине. Яулығын урталай йыртып, ботона урарға хитлана. Яраланған, тимәк. Әҙәп һаҡлар мәл түгеллеген икеһе лә аңланы, уларҙы уртаҡ ҡурҡыныс туғанлаштырғайны гүйә, егет махсус кейеменең әллә нисәмә кеҫәһенең береһенән аптечка һөйрәп сығарҙы ла ҡыҙҙың яраһын бәйләргә ашыҡты. Шунда, ҡулы менән һәрмәп ҡарағас, бөгәрҙән саҡ ҡына өҫкәрәк бер төштән ҡандың шаулап тиртеп тороуын, шул арала иҙәнгә йәйелеп өлгөрөүен шәйләп, йөрәге туҡтағандай, тын ала алмай торҙо, сараһыҙлыҡтан, юғалтыу аянысынан. Пуля үтә тишмәгән, ҡыя тейгән, әммә артерия тамырын тетеп киҫеп үткән булыр. Айгиз аптечкаһындағы бөтә мамыҡты ҡуйып, марляны урап бөттө – ҡанды туҡтата алманы, инде ул һуңғы тамсыһына тиклем ағып бөтәсәк – ошо минутта, ошо бүлмәлә... Вертолет саҡырыуҙан да фәтүә юҡ. Зарина хәлһеҙләнде. «Хасбулатты...» – тине лә артабан тел тибрәтә алманы. «Я его не брошу, верь мне!» – тине егет, өҙгән сәскәләй һулып барған ҡыҙҙың сәстәренән үпте. Яулығының яртыһын ябындырайым тиһә, иғтибар итте: тишкеләнгән генә. Үҙенә бер генә пуля тейгән, ҡалғаны яулығына эләккән, елферҙәп күҙен албырғатҡандыр теге яуыздың.

Постан килеп еттеләр. Уңарсы Зарина һәләк булғайны.

Иртәгәһенә командир емерек йорттағы вахтаны туҡтатты, сөнки юғарынан приказ килде: юлға яҡын бина ҡалдыҡтарын шартлатырға, ул тирәгә миналар ҡуйырға һәм был хаҡта үҙебеҙҙекеләргә хәбәр итергә.

Заринаны убалар ҡырындағы ауылдың зыяратына ерләнеләр. Әллә ҡайҙан ике ҡарсыҡ, күктән төшкәндәй, пәйҙә булды, шулар мәрхүмәне тәрбиәләп оҙатышты. Уларҙан, һеҙ ҡайҙан, тип тә һораманылар. Берәй тау ҡыуышында йә ергә өңөлгән мөгәрәптәлер ойалары, моғайын. Грозныйҙы дүрт тарафтан да тау армыттары уратып алған бит. Толпарлыла – Урал, бында – Кавказ.

Ниңә һуғыша был халыҡ?! Хәйер, төптән уйлаһаң, һуғышты халыҡ башламай, ә кемдер берәүҙең, шул берәү ҡуштандарының нәфсеһе башлай.

Зыяраттан сығышлай, уларға, биш һалдатҡа һәм ике ҡарсыҡҡа, бер төркөм боевиктар һөжүм итте.

Ҡарсыҡтарҙың береһе шундуҡ ергә һырыҡты – быуындары бушап, икенсеһе, ике ҡулын йәйеп, беҙҙең һалдатты, Сашокты, ҡапланы – буйға иң бәләкәйен. Ул танылған йырсы Эдит Пиаф хаҡында, Париж урамдарында йырлап йөрөгән башта, ә сәхнәлә, буйға бәләкәй булғанға Турғай тигән псевдоним алған, француза Пиаф инде, тип, һөйләргә ярата ине. Үҙенә йәбеште лә ҡуйҙы: Сашок Пиаф...

Ҡарсыҡ ике арала тора, Сашок уға: «Уйди, бабушка!» – ти, боевик: «Кит, аңра һарыҡ!», – тип аҡыра. Барыбер атышмай мөмкин түгел дәһә (һуғыш, ҡәһәр һуҡҡыры!), ике яҡ та ҡапма-ҡаршы автоматтан сират бирҙе. Ҡарсыҡ, ҡулдарын һаман йәйгән килеш, бәпкәһен ҡурсалаған инә ҡоштай, сайҡалып салҡатан ауҙы, дошман йөҙө менән алға һөрлөгөп барып ятты. Пуля Саша Пиафтың яурынын ҡыя сыйып ҡына үткән – ул дошманға, ҡарсыҡҡа тейҙермәҫтән, ҡырыйҙан атҡан, ә теге – ҡарсыҡтың кәүҙәһе аша...

Айгиз артына йәшенгән Хасбулаттың ҡото осоп ҡысҡырғанын да ишетә, туҡтауһыҙ ата һәм шул уҡ ваҡытта алыш барышын да күҙ уңынан ысҡындырмай. Дошмандарҙың алҡымына барып йәбешерҙәй, шундай үс ҡайнай уның йөрәгендә, ул

үстең тауышын, бойороғон ишетә ул хатта: үлтер, юҡ ит, ҡырып һал! Зарина өсөн ҡон ҡотҡоһо шаша егеттең булмышында. Әммә уға ышыҡланған бала аҡылға өндәй, мәргән атырға, дошманды яҡын килтермәҫкә ҡуша. Ҡаушап ҡалған йә нәфрәттән сабырлығын юйған бәғзе һалдаттарҙың ҡайҙа етте шул яҡҡа ут сәсрәтеп, дошман уртаһына инеп китеп башын һалғанын да күргеләне ләһә ул.

Алыш оҙаҡҡа барманы. Һауаға беҙҙең ике вертолет күтәрелгәнен күреп, дошмандар ер тишегенә төшөп киткәндәй юҡ булды, өсәүһенең кәүҙәһе зыярат ҡапҡаһы алдында ятып ҡалды.

Айгиздәр, ҡәбер ҡаҙып, мәрхүмә ҡарсыҡты гүр ҡуйынына һалды. Иҫән ҡалған әхирәте уны шартына килтереп ерләй алмағандары өсөн Алланан ярлыҡау һораны, буғай. Шым ғына ясин сыҡты. Заринаға ла шул сүрәне уҡығайны ул. Хәҙер Айгизгә был шөһрәтле сүрәнең һүҙҙәре таныш. Ә ҡарсыҡтар бая, икеһе лә иҫән саҡта, зыяратҡа инер алдынан уҡылғанын ул яттан белә – «Әл-Фатиха»: Әғүҙү биллаһи минәш-шәйтанир-рахим. Бисмиллаһир-рахманир-рахим... Рабиға өләсәһе ошо доғаны уҡый ҙа, үҙен үҙе битәрләп алыр ине: «Әй, Раббым, бүтән доға белмәйем, ғәфү ҡыл, ихласлығым менән уҡығанымды ҡабул ҡыл», – тип.

Әлеге ҡарсыҡ, мәрхүм ҡәүемдәштәре яғына ымлап, уларҙы ерләүсе табылыр, тигәнде аңлатты, алыҫҡа ҡул иҙәне, йәнәһе, анау яҡта. «Шәһиҙәләр...» – тигәнен шыбырлап ҡына әйтһә лә, Айгиз ишетте, аңланы: Зарина менән баяғы вафат ҡарсыҡтың һуғыш ҡорбаны булыуҙарын, шәһит үтеүҙәрен әйтеүе. Инәй ҡаҡса кәүҙәһен йәлпелдәтеп китеп барыуға, һалдаттар ҙа ҡуҙғалды. Шул мәлдә Айгиз ҡалаҡ һөйәге аҫтына осло нәҙек бысаҡ ҡаҙалғандай тойҙо. Бысаҡ тиһәң, атыу тауышы яңғырағандай итте. «Автоматтарын һалдырып алғайныҡ таһа...» – тип уйланы ла ҡап-ҡара упҡынға төшөп китте, гүйә.

Поста аңына килде. Күкрәген уратып бәйләгәндәр, укол һалғандар ҙа вертолет саҡырғандар. Күҙе менән эҙләгәнен тапты – Хасбулат бында ине. Вертолет тауышы ишетелгәс тә, командирынан үтенде, малайҙы ла бергә ебәрегеҙ, тип.

– А потом его куда? Тебя, скорее всего, домой отправят, после лечения.

– Домой с собой заберу. Я обещал. Ей...

Вертолет Айгизде госпиталгә алып барып тапшырҙы. Уға сытырман йәбешкән Хасбулатты ла – бәләкәс кенә малайҙы, ҡайҙа итһендәр.

Пуля арҡанан инеп, ҡабырға һөйәген сарпыулап туҡтаған икән. Умыртҡаға йәнәш кенә үткән. «Бәхетең бар. Юғиһә, инвалид булып ҡалыр инең, егет»,– тигән хирургҡа ни тип әйтергә лә белмәне Айгиз. Һуғышта бәхет менән бәхетһеҙлек, йәшәү менән үлем, Сиам игеҙәктәреләй, ҡушлап йөрөйҙәр, буғай.

Айгизде артабан Мәскәүгә, унан, комиссовать ителгәс, тура Башҡортостанына оҙаттылар. Хасбулатты унан айырырға теләүсе табылманы әлдә. Өфө аэропортына килеп төшкәс, танауына асфальт еҫе, ҡолағына ҙур ҡаланың шаушыуы килеп бәрелгәс, егеткә әллә нимә булды: тыныс берәй урынға барып һыйынғыһы, йәшеренгеһе килде. Уға хәҙер автовокзалға барырға, Нефтекамаға билет алырға кәрәк. Ата-әсәһен, ағаһын, тыуған ҡалаһын һағынған. Әмәлгә таянғандай, шул саҡ күҙенә таныш автобус салынды, юл ыңғай аэропорттан да пассажирҙар алырға килгәндер. Йәйҙең йәйе уға ултырып Толпарлыға бара ине бит. Ана, шофер ағай, Айгизде танып, ҡуҙғалған еренән туҡтап, ишеген асты, ҡул болғаны. Айгиз Хасбулатты етәкләп алды ла автобусҡа инеп ултырҙы.

– Сволочь! – Әмин абыйҙың ҡырҡа тауышына терт итеп ҡалдым. Айгиздең һөйләгәндәрен үҙемсә күҙ алдыма килтереп, эсемдән генә һүрәтләп ултырыуым ине. Ҡапыл арындым был халәтемдән. Уңарсы абый теге кабинетынан беҙҙең

янға үҙе лә ярһып килеп сыҡты: – Салман Радуев Гудерместы баҫып алған. Бала табыу йортондағы йөклө ҡатындарҙы, яңы тыуған сабыйҙарҙы заложник иткән. Сволочь! Басаев та, Грозныйҙан һөрөп сығарылғас, Буденовскиҙағы дауахананы баҫып ингәйне. Тапҡандар һуғышыр урын! Осо ла, ҡырыйы ла күренмәй был чечен яуының.

– Хәҙер унда, Басаевтар яғында, яллланған террористар күп. Ана, Хоттаб атлы бер ғәрәп ябай ялсы ғына түгел – полевой командир. – Айгиз шулай әсенеп әйтте лә туҡтап ҡалды: Булат, ҡобараһы осоп, оҙон керпекле ҡара күҙҙәрен шар асып беҙгә ҡарап тора ине. Нишләптер бала бүтән берәүгә түгел, Мәҙинәгә килеп һыйындысы? – Апаһына, Заринаға, оҡшағанһың, – тине Айгиз, Мәҙинә аптырап ҡалғас. – Килеп ингән ыңғайы, әллә улмы, тип торҙом мин дә. Үҙ ҡулдарым менән ер ҡуйынына һалһам да...

Ҡайтырға сыҡтыҡ. Беҙҙе оҙатырға сыҡҡан Айгиз:

– Нурия апай, килеп йөрөгөҙ, – тине лә, Мәҙинәгә текләп ҡарап, өҫтәп ҡуйҙы: – Һин дә, йәме?

– Ярар. – Мәҙинәнең тауышында өмөт һиҙелде. Уның йөҙө килгәндәге ише моңһоу түгел ине.

54

Ошоларҙы уҡып сыҡҡас, ҡайтанан зиһенем, йөрәгем аша үткәргәс, ҡапыл хәтер сөңгөлөнән бер йыр ҡалҡып сыҡты, беҙ уны, үҫмер саҡта, Әнкәләр осондағы бүрәнәлә ҡысҡырып йырлап та ултыра торғайныҡ. Ҡайҙан отоп алғанбыҙҙыр?

*Хасбулат удалой, бедна сакля твоя.*
*Золотою казной я осыплю тебя –*
*Дам коня, дам кинжал, дам винтовку свою*
*И за это за все ты отдай мне жену...*

Аҙаҡҡы юлдарын ике ҡат йырлайбыҙ ҙа көлөшәбеҙ. Иҫәүән булғанбыҙ. Бәхетле булғанбыҙ – шуға йырҙағы фажиғә күңелгә ҡағылмаған. Ни тиклем генә сәйер булмаһын, был ят йырҙың үҙ романтикаһы бар: мөхәббәт, хыянат, үс... Һәм, ғәжәп, көйө ҡайғылы түгел, ә дәртле.

Иҫемә төшкәс ни, йырлап та ебәргәйнем шул. Ишек ҡапыл асылып ябылыуға һиҫкәнеп, туҡтаным.

– Хасбулат-Булат түгел, апа жан, Сәлим мен. Калей сиз?

– Хуш килебсиз, – тинем. Сәлимдең, бик тулҡынланһа, шулай үҙ лөғәтен ҡушып һөйләүен һынағаным булғас, ҡаршыһына атланым.

– Хуш хабар йук, апа жан, Алтынай шамба көн сырхаулап китте, бөгөн якшамба... Фатих аға хәстәханала йук гаплашырга?

– Үт, Сәлим, икәү гәпләшеп алайыҡ. Фатих ағайың Өфөгә киткәйне, семинарға тип. Асияны ла күреп ҡайтмаҡсы бер ыңғайҙа. Икенсе курста уҡып йөрөй бит ҡыҙыбыҙ, мединститутта. – Әңгәмәсем ултырған еренән һикереп торҙо. Нишләргә белмәй, үрһәләнде:

– Ҡасан китте? Ҡасан ҡайта? Апа жан!

–Бөгөн ҡайтыр, иртәгә –эшкә. Төшкө автобусҡа сығам, тигәйне. Бәс, сәғәт нисә, төш ауған, ағайың килеп тә төшөр хәҙер.

Сәлим автобус туҡталышына йүгерҙе. Мин тамаҡ хәстәрләргә тотондом. Данияр нишләп һаман ҡайтмай, мәктәптә дәрес бөткәненә ҡасан? Ишбирҙе янына һуғылғандыр, күп булһа, уныһына шәмбеһе лә юҡ, йәкшәмбеһе лә – гелән эштә. Ә беҙҙең малай юрист булырға хыяллана, шуға участковыйҙың ҡушайына әйләнеп бара. Ишбирҙенән былай, милицияның терәк пунктында, шул уҡ бинала ултырған Сәмиғуллин эйәләштерә малайҙы, ваҡ-төйәк йомошҡа йөрөтә, төрлө

рәсми ҡағыҙҙар тултырырға өйрәтә. Ишбирҙе ағайға бер апай, күршемдең тауыҡтары түтәлдәрендә типсенеп, сәскән орлоҡтарымды, шытып ҡына сыҡҡан көйө, тотош сүпләп бөтөргән, тип ошаҡларға килгәйне, шуға ялыу яҙыштым, ти. Шунан ни, Сәмиғуллин мәсьәләне кисектерергә яратмай ул, әлеге ҡатынды тотҡарлап, Даниярға, теге күршеләрҙе саҡыртып, ҡағыҙ тотторop ебәргән. Йыйылышҡас, ике яҡты ла тыңлағас, үҙенең ҡарарын әйткән: йәшелсә баҡсаһы сиген үлсәп уртаға бүлергә лә һәр кемгә үҙ яртыһын тауыҡ кермәҫлек итеп нығытырға! Юғиһә, административ сара күреләсәк – кәмендә штраф!

Күршеләр шымтайып ҡына ҡайтып киткән, Сәмиғуллиндың ҡапылда ҡаты яза бирмәүенә ҡыуанып.

Ваҡытын бушҡа сарыф итеп йөрөмәй, эшкә күнегеүенән бигерәк, кеше танырға, эрене ваҡтан айырырға ла өйрәнә, малайҙы тыймайыҡ, тине Фатих. Ә мин нишләп ҡаршы төшәйем, ярай, атаһы, һинеңсә булһын, тип йөпләнем. Гуля-Гөлсөм апайҙың ирен «эттәгенәһе» тигән бер генә һүҙе менән «йыуғанын» бөтә ауыл белә ләһә – шуны иҫләп, «атаһы» тип өндәшкән һайын үҙемдән үҙем йылмайып та ебәрәм. Фатих иһә ирепkитә – һиҙәм. Үҙе лә миңә «әсәһе» тип әйткеләй, әммә «бәғерем»де ташламай, моғайын, шулай тигәненә наҙланыуҙан быуындарым бушап киткәнен тоялыр? Һаман да...

Атаҡ! Нишләп йөрөйөм әле рәхәтләнеп-мәлйерәп, Сәлим менән Сәлимәнең хафаһын онотоп, хаяһыҙ бер бәндәләй булып?! Дауаханаға шылтыраттым. Унда дежур терапевт бар ҙаһа: духтыр Искәндәр, анауы Миләүшә Таштояҡтың элекке ире. Хайран ипле кеше булып сыҡты, Фатих ҡырҙа саҡта ҡуна-төшә дауаханала була.

Шылтыраттым. Искәндәрҙең үҙенә эләктем. Баяғы хәлде аңлатҡайным, шундуҡ, трубканы һалмаҫтан, ярҙамсы персоналға ҡуша башланы: «Баланы срочно бында килтерергә, больница машинаһы, на всякий случай, районға сығырға әҙер торһон! Лаборантҡаға шалтыратырға, немедленно килеп етһен, анализдар алырға!» Шунан миңә өндәште:

– Фатих Рамазановичҡа әйтерһегеҙ, надеюсь?

– Будь уверен, – тинем дә, йылмайып, трубканы һалдым. Ул да булмай, ашығып атлауҙан тыны ҡабынып Фатих килеп инде. (Сәлим уны ҡаршы алған, хәлде һөйләгән, тимәк.) Өфөнән алып ҡайтҡан әйберҙәрен ҡуйҙы ла кире сыға башланы. Һәм, ҡапыл боролоп килеп, ҡосаҡлап алды, ҡолағыма: «Һағындым, бәғерем», – тип шыбырланы, ялт ҡына миңә зәңгәр күҙҙәренең ипкенен һирпте лә эшенә йүгерҙе. Йөрәкте ҡабындырып...

Бер йылдан иллеһе тула, дәрт-дарманы ҡайтышмай әле йәремдең. Шул уйҙанмы, көҙгөгә ҡарағым килде. Ҡараным. Әллә ни бирешмәгәнмендәй. Барыбер йылдар үҙенекен итә... Уф! Һыуытҡыста ҡуйы ҡатыҡ бар ине, шуны алып битҡулыма һыланым да диванға салҡатан төшөп яттым.

Баяғы Искәндәр, врачты әйтәм, ҡабат иҫкә төштө. Даниярым тыуған йылды, 81-ҙә, килгәйне ул беҙҙең дауаханаға эшкә. Балаҡатай районынан, сыуаш егете. Күпселек башҡорттар йәшәгән ауылдан, шуғалыр беҙҙеңсә апаруҡ һөйләшә. Исеме Александр, әммә килгән көндө үк уны, башҡорт хәтерендә һис юйылмаған Македонскийға һаплап, Искәндәр тип йөрөтә башланылар. Колхоз рәйесе Понимаешь Искәндәр менән бутарлығы булмаһа ла, «духтыр» тигәнен дә тағып ебәрҙеләр. Ә бер мәлде ул Ҡушмөгөҙлө Искәндәр тигән ҡушамат менән йөрөп алды, ҡатынының хыянатсыллығы арҡаһында. Әҙ генә ваҡыт. Халыҡ уныһын тиҙ онотто, сөнки духтыр Искәндәр Толпарлының һөйөклө, абруйлы шәхесенә әйләнеп өлгөргәйне. Ай, шул Миләүшә менән бәйләнеп кенә яңылышты егет.

Нишләтмәк, мөхәббәт ғали йәнәптәре шулай насип иткәс? (Ыңғай ғына инеп киттем хәтер урманына, сәхифәләр уралған йомғағымды һүтә-һүтә.)

...Улым менән декретта ултырам. Мин уҡығанда, былай ҙа йонсоноң, малайға ике йәш тулғанғаса мәктәбең көтөп торор, тине Фатих. Уҡыусыларымды, күпме йылдар бөртөкләп йыйып йыһазландырған кабинетымды, географиямды нисек һағынғанымды белһә икән ул! Астрономияны, Вафич әйтмешләй, кем етте шул уҡыта. Һиҙмәй буламы минең болоҡһоуҙарымды, Фатих бер кисте әйтеп һалды:

– Мәҙәниәт йортонда Халыҡ-ара балаларҙы яҡлау көнөнә арналған кисә уҙғарыла, иғлан элгәндәр. «Өфөнән танылған башҡорт шағирәһе Гөлсирен килә» тип яҙылған. Зөлфәрҙе күргәйнем, район үҙәгенән дә артистар буласаҡ, ти.

– Миләүшәләр – районда, күп булһа, Ә Гөлсиренде сәхнәнән ишетке килә, шиғырҙарын оҫта уҡый торған.

– Барабыҙмы, әтеү? Бәпкә сығарған ҡаҙҙай, гелән өйҙә ултырып, йонсоп киттең, әсәһе.

– Суҡышым ағарып, тәпәйем күгәрепме?

– Әйтеп ҡуяһың ҡай саҡ, бәғерем...

– Нимә кейерем икән, таҙарып киттем, халаттан башҡа әйбер һыймай хәҙер.

– Костюм бәйләтеп ал, йәиһә тектер, көнкүреш комбинатының цехы үҙебеҙҙә асылғанға күпме, һинең барып та урағаның юҡ. Сентябрҙә эшкә сыҡһаң, барыбер яңыртырға кәрәк өҫтөңдө.

– Сыҡһаң, тисе?! Сығам! Хәҙерҙән үк Даниярҙы йәслегә йөрөтә башлайым, өйрәнә торһон.

– Мин ҡаршы түгел дәһә, әсәһе.

– Һы...

Иртәгәһенә кейем бәйләү цехына барып, заказ бирҙем. Ике көндә өлгөртөрбөҙ, тинеләр. Үлсәмемде алып, «50-се размер» тигәндәренә шаҡ ҡаттым. Тәпәш кенә кәүҙәм менән шуға барып еткәнмен. Мискәгә оҡшап торам, тимәк. Ғәрләнеп киттем хатта, саҡ иламаным. Ҡайтышлай, дауаханаға һуғылдым, унда Зөһрәнең бүлмәһендә үлсәү бар. Үлсәндем. 74 кг! Ә миңә, буйым метр ҙа илле һигеҙ сантиметр булғас, 55 – 60-тан артығы кәрәкмәй. Абау, ике ботҡа яҡын артыҡ май йыйғанмын. Тағы илағым килде лә, тыйылдым. Баш бәләһе түгел дәһә.

– Нурия апа, хәсрәтләнмәгеҙ, диета яҙып бирәм, ике аҙнала ташларһығыҙ, – тине Зөһрә. Әйтмәһәм дә, аңлап тора икән хәлемде. Бәс, күнәктән артылған ҡамырҙай ҡабарып, ишелеп торһон да берәүҙең кәүҙәһе, күрмәһенме? Күрә.

– Ташлармын? Нимәне? – Аңлап торһам да, шулай тип һоранымсы.

– Артыҡ весыңды, тим. Бала менән ултырғанда ни, бөтәһе лә шулай һимереп ала ул. Данияр имсәк ташланымы әле?

– Ташлаттым, атлап йөрөгән баланы ни...

– Улайһа, бөгөн эштән һуң индереп сығам диетаны, үҙ яйығыҙ менән башларһығыҙ.

– Иртәгәнән үк! – Әйтеүен әйттем дә, эсемдән шөрләп тә ҡуйҙым: тәүләп ҡыланыуым был йәһәттә.

Сығып барғанда Фатихҡа тап булдым.

– Билем беленәме? – тинем уға тоттом да.

– Хәтерем яңылышмаһа, ошо тирәлә ине шикелле ул. – Шулай тине лә Фатих, уйынға һабыштырмаҡ, билемдән ҡосаҡланы.

– Кит, кеше күрһә... Мискәнең дә мискәһенә әйләнгән бисәһен ҡосаҡлап тора, тип аптырарҙар.

– Эшкә сыҡҡандың тәүге көнөнән нәҙегәйә башлаясаҡһың – әйҙә, бәхәсләшәйек!

Мәктәп тормошо үҙенең ҡуласаһында зырылдатып әйләндерергә тотонһа, ғәжәп тә түгел уныһы. Әммә уғаса ярты йыл ошолай кәмһенеп йөрөргәме, юҡ инде – ғәрсел «үҙем» шулай сәмләндә булыр.

Кискеһен Зөһрә «Меню» тип яҙылған ҡағыҙ тоттороп китте. Икмәкте миңә өсләтә әҙерәк ашарға, май-ҡаймаҡты ҡыҫҡартырға, күберәк йәшелсә менән туҡланырға тура киләсәк икән. Асҡа ҡаҡланыу түгел дәһә. «Йәйәү йөрөргә, көнөнә кәмендә өс саҡрым» тип тә әйтелгән. Уныһын инде булдырам. Өй эсендә кәләп һалыуым ғына ла шунан кәм булмаҫ. Ихатала ла эшем етерлек, мал аҫырайбыҙ ҙаһа, ауыл интеллигенцияһы тигәс тә, аҡ һөйәк түгелбеҙ. Ҡыҫҡаһы, тәүәккәлләнем.

Ә байрам кисәһендә иҫтә ҡалырлыҡ нәмәләр байтаҡ булды. Гөлсирен «Самантаға яуап» тигән оҙон шиғырын уҡыны. «Кем ул Саманта?» тип берәү ҙә һорамай, сөнки был 10 йәшлек кенә ҡыҙыҡайҙың, Америка мәктәптәренең береһендә уҡып йөрөгән баланың, Юрий Андроповҡа яҙған хатын баҫма матбуғат, радио-телевидение яҙҙан бирле сурыта. Уның фотоһы район гәзитендә баҫылды, йөҙө лә таныш. «Һеҙ һуғышҡа ҡаршымы, юҡмы?» – тип һораған кескәй американка совет дәүләте етәксеһенән. Иң ғәжәбе – Андроповтың Самантаға яуап биреүе! «Һин ҡыйыу һәм саф күңелле ҡыҙыҡайһыңдыр, хатыңа ҡарағанда...» – тигән һүҙҙәр яҙып, Генсек уны СССР-ға ҡунаҡҡа саҡырған.

Гөлсирен ошо ваҡиғаны йөрәгенә шул тиклем яҡын алған, ялҡынлы һүҙҙәр тапҡан – тыңлап бөткәс, халыҡ аяғүрә баҫып ҡул сапты. Ә минең күңелем Самантаның хатына шунса ҙур иғтибарҙы сәйәси кампания тиеберәк ҡабул иткәйне. Әмин абыйҙың йоғонтоһомо – йөрөтәләр баланы, ҡурсаҡтай итеп, театр уйнайҙар, тип мыжығайны ул. Брежневтың минең уҡыусыма, Туҡтаровҡа, яуап бирмәүе лә иҫкә төштө...

Сәхнәгә бер мәл сиған ҡыҙҙары бейеүен башҡарырға Миләүшә сыҡты. Тын да алмай тамаша ҡылдыҡ. Уның үҙебеҙҙең Толпарлыныҡы икәнен онотток. Күҙ бәйләп, ҡаныбыҙҙы ҡыҙҙырыусы сибәрҙең сиған ҡыҙы Кармен булыуына ышандыҡ та ҡуйҙыҡ – ана ниндәй ул сәнғәт ҡөҙрәте! Аһ! Өйөрөлә, ут-ялҡын булып дөрләй, дерелдәгән яурындарынан, тирбәлгән түштәренән дәрт эркелә, үткер ҡараштарынан осҡон сәсрәй. Ялтыр беләҙектәр кейгән матур беләктәрен ебәк еңдәр берсә аса, берсә ҡаплай, бармаҡтары күбәләктәй талпына. Ә осалары... ымһындыра, талсыҡтырып саҡыра! Ҡатын башым менән мин шул халәткә сумғанда, ир-ат ни кисерәләр?!

Сираттағы сығышты иғлан иткәндә Зөлфәрҙең тауышы әллә ҡарлыҡҡан, әллә саҡ ҡына ҡалтыранғандай ишетелде. Миләүшәне яратты лаһа егет бер осор, тик шул елгүтәндең (Земфира дуҫымдан отҡан һүҙ таман булыр) йөрәген яулай алманы. Күпмелер ҡаңғырып йөрөнө лә, һөнәренә әүрәп, элеккесә асыҡ йөҙлө, йор һүҙле Зөлфәргә әйләнде. Гармунда уйнай, ҡурай тарта, үҙе ойошторған ансамблдә йырлай, бейергә лә булдыра. Әммә иң ҙур маһирлығы – пьесаларҙа уйнау. Лирик геройҙың үҙе булып әүерелә лә ҡуя. Шул һәләте менән дә Толпарлы бик һөйһөнөп бөтмәгән уҡытыусы ҡыҙҙың күңелен ирэтте шикелле. Инглиз теленән уҡыта ине, текәрәк, мәктәпкә ҡыйып ҡарағыһыҙ бөхтә итеп аҡ кофта, ҡара костюм кейеп килер, сәсенә лә үҙенсә бер прическа яһап йөрөр ине уныһы. Бар ҡиәфәте менән, әйтерһең, һеҙҙең арала мин – бүтән, буҫтауым башҡа, тип иҫбатлай. «Ун беренсе синыфтан бер малай уға ғашиҡ булған, имеш» тигән хәбәр ҙә таралып алды бер мәл. Малайҙың әсәһе: «Ул уҡлау йотҡан мәрйәгә нишләп минең улымдың күҙе төшһөн!» –тип әрепләшеп тә йөрөнө. Мәрйәлеккә мәрйә түгел ине, Өфөлә тыуып-үҫкән башҡорт ҡыҙы, урыҫ мәктәбендә уҡығас, беҙҙеңсә һөйләшергә ихласлығы әллә ни юҡ. Инглиз теле уҡытыусылары, ғәҙәттә, дәресте

инглизсә-русса алып бара, шулай ҡулайыраҡ, күрәһең. Бынығына беҙ аптыраманыҡ. Ыҫпай кейемена, ҡырыҫлығына ла күндек, әкренләп. Сит тел уҡытыусылары ауыл мәктәбендә торламай, ваҡытлыса күренешкә түҙергә була лаһа, тинек. Әммә Адель Мирасовна Толпарлыға ғүмерлеккә килгән булып сыҡты.

Ғәжәп ҡыҙ ине ул. Ысынлап та. Шул кисәлә биш егет «Ҡара юрғам» тигән йырҙы башҡарҙы. Бәс, берәү, йыр бөтөр-бөтмәҫтән, сәхнәгә һикереп менде лә уртала торған Зөлфәргә сәскә тотторҙо. Беҙҙә ундай ғәҙәт бар ҙа, ансамблдәгеләрҙе айырып баһалауҙы күргәнебеҙ юҡ ине әлегәсә. Баҡһаң, Адель Мирасовна лаһа! Егеттәр, халыҡ геүләп ҡул сапҡас, тағы бер йыр башҡарҙы, Зөлфәр гөлләмәһен аҙаҡҡаса тотоп торҙо.

Иртәгәһенә ишеттек: англичанка сәхнәлә беҙҙең егеттең ҡолағына «Ай лав йу!» тип шыбырлаған. Ә Миләүшәбеҙҙе духтыр Искәндәр оҙата барған. Тәүге хәбәргә илтифат бирелмәне, Адель Мирасовнаның сәйерлегенә япһарылды. Ә бына икенсеһе уңлы-һуллы тикшерелде. Таштояҡҡа 29 йәш икәнлеге хисапланды, духтырҙың ике йәшкә кесерәк булыуы асыҡланды. Ахырҙа халыҡ, әрәм генә итер инде ул Аҡназар ҡыҙы духтырыбыҙҙы, тип аһ орҙо. Сит яҡтан килгән берәү үҙенекенән яҡын булып киткәнме Толпарлыға?! Ә бит ауыл юҡҡа хафаланмаған...

Ошо урында юллап ҡына алған хәтер һуҡмағым өҙөлдө. Фатих ҡайтып ингән дә ҡысҡырып телефондан һөйләшә:

– Первичный. Клещевой энцефалит, похоже на то. Анализ крови? Конечно! Лейкоцитоз, лимфопения. Гиперемия зева. Дежурный врач быстро среагировал, знаете, он специалист, каких поискать! Больную отправили, скоро у вас будут. Прошу, соберите консилиум, не мне вас учить. Единственный ребенок, поздний – родители в панике, поймите...

– Талпан ҡаҙалғанмы? Ай... – Ныҡ борсолоп киттем Сәлим менән Сәлимә өсөн, бер бөртөктәре иҫән булһын инде.

– Начмед менән һөйләшеп алдым. Машина оҙаҡламай барып етә, тинем. Сәлим бала менән ултырып китте, Сәлимә апайға укол һалырға тура килде, әле ул Зөһрә янында.

– Олоғайып ҡына тапҡан балаһы...

– Күпме икән уларҙың йәш араһы?

– Биш-алты ғына барҙыр. Сәлимә апай Мәүлиҙәнән дүрт йәшкә, ә Мәүлиҙә минән бер йәшкә өлкән, Сәлимдең Мусаға ағай икәнен беләм, ике-өс йәшкә, ә Мусаһы минән дүрт йәш самаһы кесе. Вәт.

– Высшая математика, ҡыҫҡаһы.

– Ниңә төпсөнәһең? Йәш айырмаһы бер-береһен ятраҡан кешеләр өсөн мөһим түгел, минеңсә.

– Минеңсә лә. Башҡа уй борсой. Сәлимә апай Алтынайҙы ҡырҡты үткәс тапҡан. Ҡыҙыҡайға ун йәш. Бүтәнде таба алмаясаҡ.

– Ҡурҡытма, Фатих! Йөрәккә шом һаласы, кит!

– Китәм. Тамаҡ ялғап алам да эшкә барып әйләнәм. Искәндәр үҙе лә юлланғайны районға, нимәләр асыҡлап ҡайтыр икән, тим. – Шулай һөйләнгән арала Фатих, ниһайәт, миңә иғтибарлап баҡты ла шарҡылдап көлөп ебәрҙе: – Нишләттең битеңде, Нурия? Әллә ҡатыҡҡа буялған?

– Онотҡаным даһа, абау, шул килеш кеше араһына сығып китһәм.

Сәй эстек. Бая иҫләп ятҡандарымды һөйләп алдым. Фатих һығымта яһағандай итте:

– Кемдең кем йәре булырын Күктәр хәл итә, тигәне дөрөҫтөр. Адель Мирасовна Әҙилә булып китте, ауылдың һөймәлекле килененә әйләнде. Миләүшә ниҙәр күстәрҙе, шундай аҫыл егеттең ҡәҙерен белмәй, иҫәүән. Ышан был ҡатын-ҡыҙға...

Шул саҡ, һиҫкәндереп, телефон шылтыраны. Трубканы алған Фатихтың эргәһенән китмәйерәк торам, Алтынайҙың хәленә ҡағылышлы хәбәр түгелме икән, тип. Фатих ара-тирә башын ҡаҡҡылап тыңлай, үҙе бер һүҙ өндәшмәй. Йөҙө былай тыныс һымаҡ?

– Йә, әйтә һал!

– Әсәһе, сығырыңдан сыҡма. Алтынайға диагнозды дөрөҫ ҡуйғанбыҙ, ваҡытында тейешле ярҙамды күрһәткәнбеҙ. Кризис тағы 2-3 көн барасаҡ, әммә балаға ҡурҡыныс янамай. Йүнәләсәк!

Иремде ихластан ҡосаҡлап алдым, нишләтергә белмәй, өлтөрәп китеп, яңаҡтарынан һөйҙөм – шулай аңлаттым рәхмәтемде, ҡыуаныѕымды.

Шул мәлдә кемдер тамаҡ ҡырҙы. Данияр икән, шым ғына ингән дә йылмайып ҡарап тора, олоғайып килгән ата-әсәһенең былай ҡыланыуы уға ҡыҙыҡтыр.

***

Фатихтың «Миләүшә ниҙәр күстәрҙе...» тигәне һауала эленеп ҡалғайны, шул, башыма килеп төшөрҙәй булып, йәнемде көйҙөрҙө лә торҙо. Онотолмай ҙаһа! Ахырҙа, иртәгәһенә дәресем юҡ, ирем дежурҙа булған бер кисте, мал-тыуарҙы тәрбиәләп аҙбарға индергәс, өҫтәл артына барып ултырҙым да алдыма өр-яңы дәфтәр һалып, бынан ун ике – ун өс йыл алда, мең туғыҙ йөҙ һикһән өстә, үткән ваҡиғалар йомғағын һүтергә тотондом. Күптәнге асыуым яңынан ҡабарғайны, шуғалыр «Таштояҡ» тип исем ҡуйҙым дәфтәр тышына башта, шунан уны танымаҫлыҡ итеп һыҙғаҡлап, яңыса атаным – «Әсмә». Бәйәндәремдә, әлбиттә, әхирәтемдең исеме үрелә килде һәм ул быға лайыҡ та. Ә был дәфтәрҙә Әсмә – төп герой, яҙыусы булһам, шулай тиер инем.

...Шул уҡ йәйҙе Зөлфәр Әҙиләгә өйләнде. Имеш, егет уйынлы-ысынлы ғына, инглизсә берәй йыр өйрәтегеҙ әле миңә, тигән икән, ҡыҙ «О кей» тип унын ҡосағына ташланған да өйөнә тағылып барған. Уф, шулай үҙенекен күтәреп, ятты түбәнәйтеп ҡуя ҡай мәл толпарлылар. Бына тигән уҡытыусы ҡыҙ беҙҙең егетте тиң күргән, тиһәләр ни була?

Миләүшә ары ташланды, бире ташланды, Зөлфәрҙән ҡолаҡ ҡаҡҡас, аҙна һайын ҡайтып, ғаиләһен боҙорға ла маташып ҡараны, булдыра алманы. Әҙилә ғорур булып сыҡты, көнләшмәне. Әллә һиҙҙермәне? Ә Зөлфәр анау уҡыусы баланан ҡыҙғанып алған, ти, ҡатынын. Уныһы ла, имтиханға әҙерләнергә ярҙам итегеҙ, апа, тип өйҙәренә кәләп һалырға тотонған шул. Уҡытыусыһы, бер нигә ҡарамай, ваҡыт табып, сәғәттәр буйы инглизсә һөйләшкән, хатта йырлашып ултырған уҡыусыһы менән. Кешеләр һағайҙы, күҙәтте, ҡапылда хөкөм итмәйерәк торҙо. Ә инде теге егет остоғо университеттың сит телдәр факультеты студенты булып киткәс, Әҙиләне маҡтап, бәғзе ләститселәрҙе фашлап бер иттеләр. Зөлфәрҙең көнләшеүе иһә файҙаға ғына булған: бөтә иғтибары ҡатынында, Миләүшәгә иҫе лә китмәй. Сәмләнде-сәмләнде лә, Таштояҡ сигенде. Шунан духтыр Искәндәрҙе үҙенә ҡаратты. Холҡон яратмаһам да, ҡабатламай хәлем юҡ: Миләүшәнең бейеүенә дәрте ҡуҙғалмаған ир һирәктер. Тик ауылда уны кәләш итергә теләүсе табылманы.

Искәндәр иһә яратып өйләнде Миләүшәгә. Загслап, туйлап. Дауахана эргәһендәге элек беҙ ҙә күпмелер йәшәп алған йортта донъя ҡорҙолар. Инде баҫылыр был Миләүшә, тиһәк, ҡайҙа ти! Үҙебеҙҙең мәҙәниәт йортона худрук итеп ҡуйҙылар, юҡ, торламай ауылда, район үҙәгенә оздойоп сыға ла китә, теге-был сәбәп табып. «Ирен һанға һуҡмай, өҫтөнән йөрөй» тигән хәбәр ҙә оҙаҡ көттөрмәне.

Күпмелер шулай елгүтәнләнде лә Толпарлыны шаҡ ҡатырырлыҡ хаслыҡ ҡылды Таштояҡ.

...Көҙҙөң йылы бер кисе – август башланып ҡына тора. Эш-көшөмдө бер сама ослап, баҡсаға сыҡҡан тәҙрәне асып, һауа һулап ултырам. Ялан кәртәләге һыйырҙың мышнап тын алғаны ишетелә, шул яҡтан йәш бесән, яңы һауған һөт еҫе аңҡый. Һиллек. Һыуы мөлдөрәмә тулы мискәгә эргәһендәге сейә ҡыуағынан һыңар емеш өҙөлөп төштө, «суп» итеп ҡалды. Өлгөрөүе еткән, тимәк. Емеш тә, бер үк ботаҡтағыһы ла, бер ҡояш аҫтында ла, төрлөсә бешә – был саҡ ҡына иртәләгән. Комбайн гөрөлдәгәне ҡолаҡҡа салынды: элекке Малик бай баҫыуҙарында ужым арышын уралар. Бойҙайға төшмәгәндәр әле – ишелеп уңған, ти. Малик олатай хазиналай итеп һаҡлаған орлоҡ хәҙер Башҡортостанда дан алды. Ҡаты сортлы бойҙай, тиҙәр. Йәшергән еренән тапһалар утыҙынсы йылдарҙа, Себер һөрөрҙәр ине. Ҡурҡмаған, мираҫ итеп ҡалдырған. Агроном булмаһа ла, ҡәҙимге игенсе тәжрибәһе, тойомо менән һайлап-барлап, күпме йылдар күҙәтеп, сорт килтереп сығарған. Ә Понимаешь Искәндәр ағай уны төпкөл баҫыуҙарҙа Аҡназар ағайҙан рөхсәтһеҙ сәсеп, һынап ҡараны. Иң башта мәктәп баҡсаһында кескәй түтәлдә үҫте әле ул бойҙай... Ҡапыл Ленинград блокадаһындағы аслыҡ, шул фажиғә эсендә лә махсус лаборатория фондында бер бөртөгө лә сарыф ителмәй һаҡланған сортлы иген, бәрәңге орлоҡтары хаҡында уҡығандарым иҫкә килеп төштөсө! Эшләгән кешегә – 250, бүтәндәренә 125 грамм ғына икмәк бирелгән шарттарҙа...

– Ҡыҙый! – Күңелем тулып иларға етешеп ултырған еремдән ҡапыл тертләп боролоп ҡараным:

– Әсмә? Нимә булды?!

– Әшрәфте тоттом! Хыянат өҫтөндә...

– Уф, әхирәткәйем, һантыйландыңмы әллә? Тоттом, тисе... Нисек, бәс, кем менән?

– Таштояҡ...

– Һөйлә!

Әсмә, күҙ йәшен сығармай, әммә тауышы һулҡылдап, өҙөлөп-ялғанып, һөйләй, ә мин, ышаныр-ышанмаҫ, күңелемдән, хатта ки күҙ алдымдан үткәрәм уның башынан кискән хәлде.

...Һыҙа буйында комбайн тора: моторы эшләмәй, фаралары һүндерелмәгән. Ошонда, ауылға терәлеп тигеләй ятҡан әүәлге сөгөлдөр баҫыуына, сәсеү әйләнеше технологияһы тип, быйыл арыш сәскәйнеләр. Сөгөлдөр ваҡытлыса Аҡбейек яғына күсте.

Кескәй генә йылғасыҡ ярында һыҙыҡҡа теҙелгәндәй тигеҙ баҫып тирәктәр үҫкән, шуға Һыҙа буйы тигәндәрме? Һыҙа аръяғында – йомро аҡлан, ул сабынлыҡ өсөн тотола. Шул аҡлан ауыҙында кемдер усаҡ яҡҡан, тирәктәр араһынан ялҡын телдәре ап-асыҡ күренә.

Әсмә, аяҡ аҫтына ла ҡарамай, таҡыр юлда абына-һөрөнә, әлеге усаҡ яҡтыһына йөҙ тотоп китеп бара. Әҙер ҡуйырып, үләндәргә ысыҡ һарылған мәл. Әллә Әшрәф, ут тергеҙеп, йылынып алырға булдымы? Төштән һуң арышты урып бөтәм дә, комбайнымды МТС ихатаһына ҡуям, иртәгә, бойҙайға төшөр алдынан, ҡараштырып, йүнәткеләп алаһым бар, тигәйне, эше бөтмәҫтән, боҙолоп ултырамы? Төнөн булһа ла, ослап ҡайтайым был баҫыуҙы, тип тотҡарланғанмы? Ашарына ла, иртә ҡайтам, тигәс, мул һалмағайны, асыҡҡандыр инде...

Төрлөсә фаразлап, Әсмә шоссенан һуҡмаҡҡа боролдо, комбайн торған яҡҡа. Баштараҡ төнгө һунарға сыҡҡан ваҡ йәнлектәрҙең үлән араһында ҡыштырҙап йөрөштөрөүен, терпе теркелдәүен шәйләй, өкө ухылдауын ишетә ине, бара торғас, ҡолағына музыка салынғандай итте. Булмаҫ та? Әммә көй һаман асығыраҡ

ишетелә, көслөрәк яңғырай, усаҡтағы киҫәүҙәрҙең сытырлауы ла ҡушылып ала. Әллә бейеү көйө?!

Ярабби! Һыҙа шишмәһен һикереп кенә сығып, тәпәш ярҙан күтәрелгән Әсмәгә көтөлмәгән күренеш асылды: усаҡ тирәләй икәү ултыра. Береһе, арҡаһынан танып тора, – Әшрәфе. Уның янында кем? Ҡатын-ҡыҙ?! Ана, ул шырҡылдап көлөп ебәрҙе, һәм Әсмә шундуҡ аңғарҙы:Таштояҡ.

Был хәлдең төш түгел, ә ысынбарлыҡ икәненә һаман ышанып етмәгән ҡатын, башы әйләнеп китеп, тирәккә барып терәлде. Һәм тегеләргә шаҡ ҡатып ҡарап торҙо ла торҙо. Әйтерһең, уға спектакль күрһәтәләр.

Әшрәфтең өнө лә сыҡмай, ә Таштояҡ туҡтауһыҙ нимәлер һөйләй, көлә. Бына бер мәл ул йылдам хәрәкәт менән һикереп торҙо ла махсус алып килгән магнитофонының тауышын көсәйтте, Әшрәфте усаҡтан арыраҡ әйҙәне. Уныһы тороп баҫты, бер-ике аҙым атланы ла туҡтаны. Таштояҡ ҡыҫҡа ғына үлән үҫкән бер төшкә барып баҫып, талғын көй ыңғайына һығылмалы кәүҙәһен уйната башланы. Ҡулдарын аҡҡош ҡанатылай тирбәлдерҙе. Көйҙөң ритмы шәбәйә барҙы, Таштояҡтың хәрәкәттәре лә шул ыңғайҙа ҡыҙа барҙы, ҡыҙа барҙы. Йыландай борғоланған йор кәүҙәһе Әшрәфкә яҡынайҙы, ирҙең ике ҡулынан алып, берсә үҙенә тартты, берсә этәрҙе, уныһы йәнһеҙ бер һындай торғас, саҡ ҡына алыҫайҙы ла усаҡ утынан һикергән осҡондай өйөрөлөргә тотондо. Сәстәре тағалып китте, урман ҡыҙы Әсмә уны шул минутта ҡара бауыр төлкөгә лә оҡшатып ҡуйҙы. Күҙе шулай күрҙе, ә күңеле Таштояҡты албаҫты тип юраны. Эстән ҡайнап, бына-бына атылыр вулкан кеүек был албаҫтының хәрәкәттәре. Һәм... атылды! Иҙеүе ныҡ асыҡ, еңе юҡ, кендегенән өҫтә торған һылашма кофтаһын сисмәһә лә була: тотош тәне үтә күренә, әле бала имеҙеп ҡарамаған йомро тығыҙ түштәре күҙҙе арбай. Ҡыҙыштырыуҙың ахырғы нөктәһе был түгел икән әле! Бейеүсе ҡатындың елфер итәге уның талмаҫ ҡупшы аяҡтарын ялт-йолт асҡылап күрһәттекүрһәтте лә, бер мәл, әллә төймәһе өҙөлдө, һыпырылды ла төштө – һомғол кәүҙә инде талғыныраҡ бәүелә башланы. Шунда ошо тамашаны ҡымшанмай ҡарап торған ир ҡырҡа хәрәкәтләнеп бейеүсе янына атланы һәм гөрҫ итеп барып тубыҡланды, усаҡ яҡтыһында әкиәти алһыу мәрмәр һын булып күренгән ҡатындың аяҡтарын ҡосто.

Әсмә ҡысҡырып ебәрҙе. Асырғанып яр һалды, яралы януарҙан кәм түгел ине уның һыҙланыуы был минутта. Тик тауышы баҫыуҙы һиҫкәндермәне, теге икәүҙе тертләтмәне. Сөнки ишетелмәне. Сөнки Әсмәнең ауыҙ асыр, өн сығарыр хәле юҡ, ә бары күңеле ғазап урғытып һөрәнләне. Ә Таштояҡ тантана итте, Һыҙа буйҙарын яңғыратып көлдө...

Әсмәнең тауышы туҡтап ҡалғас, пәйҙәләр юғалды. Әммә байтаҡ ваҡыт иҫәңгерәп ултырҙым, шулай тетрәндем.

– Ҡыҙый, көймә ул тиклем! – Әхирәтем мине үҙе йыуатып тора лаһа. – Ләйсәнемде имеҙеп кенә йоҡлатып киткәйнем, йә илап ятыр, өлкәндәрен уятыр... Бишәүҙәр. Ай, ҡыҙый... Башым тубал булды, бәғерем туңды. Ярай, ҡайтайым. Эсемде тағы кемгә бушатайым, Нурия, әлдә һин бар. Ни ҡылайым икән хәҙер?!

– Ашыҡма. Күтәрелеп-бәрелмәй тор, әхирәт. Бергәләп уйлашырбыҙ.

– Ә һин, ҡыҙый, абай бул, Фатихыңды тартып алмаһын берәй албаҫты. Ана, Әшрәф! Яратам, тип анттар биргәйне...

– Эйе. – Шулай ғына тинем. Тел осомда «Башымдан көлһәме, күрһәтермен мин ул Фатихҡа күрмәгәнен!» һымағыраҡ һүҙҙәр эленеп тора ине тороуын.

Әсмә ҡайтып китте. Өйөндә, бала-сағаһын күргәс, тыныслана төшөр. Ә миңә

нишләргә? Әхирәтемдең был ауылда, был донъяла, хатта ки Йыһанда минән башҡа таянысы юҡ таһа.

Фатих, төнгө берҙәрҙә генә йоғормон өйгә, бер пациентыбыҙҙы даими күҙәтергә тура килә, тигәйне. Барыбер уны күтәп, күҙгә йоҡо кермәйәсәк. Тегеләр һаман шундамы икән? Тәүәккәл, ғәрсел «үҙем»де тыя алманым, киттем Һыҙа буйына. Йортобоҙ ауыл осонда, дауахана ҡырында, баҫыуға алыҫ та түгел. Ғишыҡтары ҡыҙыу булһа, тиҙ генә айырылышмаҫтар...

Усаҡ яна әле. Музыка ишетелмәй. Бәлки, ишетмәйемдер, сөнки ҡолағымда ярһыған ҡаным шаулай. Комбайн янынан үтешләй кабинала бер һынды күргәндәй булдым, әммә ары атланым, аҡлан яғына. Барып еттем. Янып бөтөп барған киҫәүҙәрҙе ҡағыштырып Әшрәф ултыра, башын баҫып. Яурындары төшкән, кикреге шиңгән әтәскә оҡшаттым үҙен. Аяҡ тауышымды ишетмәй түгелдер, күтәрелеп тә ҡараманы. Был арҡаһын ҡуйып ултыра, мине күрмәй, юрамал һынап ҡарайым әле, нишләр икән – мәкерле хәйлә ҡорҙом шулай. Артынан барып, сәстәренә, иңдәренә ҡағылған булдым. Ҡырҡа алып ташланы. Тағы ҡабатланым. Боролоп ҡарамай ғына өндәште, ят, ҡырыҫ тауыш менән:

– Бар, ҡайт! Башҡаса яҡын юлайһы булма минең ҡырға.  Ҡатыным бар, балаларым. Антым башыма етер ине, әгәр...

– Аяғыма йығылдың! – Бәс, ҡайһы аралалыр эргәгә Миләүшә килеп баҫҡан. Комбайн кабинаһында шәйләгәнем шул булған. – Апайым өсөн үс алдым, Әсмәң күрҙе! Тотто!

– Әшрәф һикереп торҙо ла боролоп ҡараны:

– Әсмә... күргән?!

– Эйе, ул һинең өсөн борсолоп баҫыуға килгән дә... ҡарап торған уйнашығыҙҙы, – тип дөрөҫләнем мин.

– Нурия?! – Әшрәфтең тауышында ғазап, ялбарыу, үкенеү, нәфрәт – һәммәһе бергә уҡмашып яңғыраны һымаҡ.

Хыянат йәберен кисергән ҡатын халәтенә инеп алдым, буғай – аңым томаланып, осо янып өлгөрмәгән бер киҫәүҙе уттан һөйрәп сығарҙым да уңлы-һуллы һелтәргә тотондом. Әшрәф ситкә һикерҙе, ә Таштояҡ ергә ауҙы, эләктерҙем, ахырыһы. Тороп, сарылдап һикерәңләй башланы. Итәгенә ут тоҡанған албаҫтының. Киҫәүемде ырғыттым да, сәсенән усмаллап тотоп, Һыҙа шишмәһенә һөйрәнем. Аңлап алды булыр ниәтемде, ҡарышмай ғына йүгерҙе. Сәсен ысҡындырмай, һыуға һөрөндөрҙөм тегене. Тәне бешеп өлгөргәндер, һуҙылып төшөп ятты йылғаға.

– Әхирәтемә теймә! Йәнеңде алырмын!

– Милицияға барам! Эшеңдән ҡыуҙыртам... – тип телләшә, үҙе шыңшып илай.

– Милицияның милицияһына бар, әтеү һине белмәйҙәр. – Шул урында шып туҡтаным. Нишләп шуға һүҙ әрәм итәм? Эргәмдә шым ғына баҫып торған Әшрәфкә боролдом да Толпарлыла иң алама әҙәмдәргә әйтелә торған әрҙе ысҡындырҙым: – Батлис! – Улай ғына асыуым баҫылманы, сикәһенә саптым балалыҡ дуҫымдың.

Ҡайтып еткәнсе иланым, буҫлығып бөттөм. Ныҡлыҡайлығым бар ҙа кәрәк саҡта, ә барыбер илаҡ мин. Еүеш стресс, тиер ине Фатих. Әсмә иламаны – ҡоро стресс. Йөрәгенә ҡаҙалғандыр был Әшрәфтең ҡылығы. Уф, әхирәткәйем, һинең өсөн ғүмеремдә тәү тапҡыр ир-атҡа ҡул күтәрҙем, һаман яна усым...

Өйөмә түгел, Әсмәләргә йүнәлдем. Ул болдор тупһаһында ултыра ине.

– Ҡыҙый, сәй ҡуй, тамағым кипте, – тинем.

Өйгә индек. Әхирәтемдең танауы сос, минән төтөн, торонбаш еҫе килгәнен

шундуҡ һиҙҙе. Һыҙаға барыуымды, Таштояҡты утлы киҫәү менән бәргесләүемде һөйләп бирҙем, Әшрәф һинең башыңдан көлмәгән,тинем. Баяғы кисергәндәрем яңырып, тағы илай башланым. Әсмә лә иланы. Йөрәген тотҡан ғәрлекле ғазап әҙ генә ыҫҡындырҙылыр – шуға шатландым.

Таң менән әлеге лә баяғы ял белмәҫ телефон зыңғырланы. Был сәғәттә кем булһын, дауахананандыр. Улай ҙа иремде, йәлләп, уятманым, үҙем барып алдым трубканы.

– Әшрәф ағай ҡатынын килтерҙе, гинекология... – тине лә Зөһрә, һүҙен дә осламай, трубканы һалды. Фатихты уятырҙы бәлә инде. Ә үҙе ҡайҙа улай өтәләндә? Әсмәнең хәле хөрт микән?

Уңарсы Фатих уянған, кейенеп йөрөй. Зөһрәнең хәбәрен әйттем.

– Нимә булды икән? Һап-һау ҡатын дәһә... – Шулай һөйләнгән Фатихҡа майлап, өҫтөнә бал яғып икмәк тотторҙом, ҡаты итеп һөтлө сәй яһаным да, эргәһендә тороп, күҙҙән эсерҙем.

– Зөһрә шылтыратҡас, операция ихтималы...

– Фатих! Биш балаһы бар, уларын иҫән-һау үҫтерһен, күр берәй сараһын, башҡаса ауырға ҡалмаһын. Гонаһын үҙемә алам.

Ирем ғәжәпләнеп ҡараны ла өндәшмәне. Мин, күкрәгемә алҡынып килеп тулған наҙлы тойғома бирелеп, үрелеп, бармаҡтарым менән уның сал йүгерә башлаған сәстәрен тарап ҡуйҙым. Ҡапҡаға тиклем оҙатырға сыҡтым. Йоҡом осҡайны.

Ауыры булған, Әсмә үҙе лә белмәй йөрөгән – имсәк балаһы бар ҙаһа. Зөһрә дөрөҫ борсолған, операция яһарға тура килгән. Үҙе фельдшер-акушер булһа ла, ҡатмарлы осраҡта Фатихты саҡыра һала ул.

– Иҫеңдән сығарманыңмы минең үтенесте? – тип һораным иремдән, ҡайтып инеүе менән. – Операция хәленә барып еткәнме әхирәткәйем?

– Яралғы инәлек көпшәһендә урынлашһа, артабан үҫә алмай, көпшә шартлай... шул хәл.

– Шунан?

– Шартлағанын киҫеп алдыҡ. Хәҙер улай йыш балаға уҙмаҫ, һыңар көпшә менән...

– Тапҡаны еткән! – Фатих миңә тағы сәйерһенеп баҡты, был юлы һорашмай ҡалманы: – Нимәләр йәнеңдә көйҙөргән һинең, бәгерем, йә, сис әле шул сереңде?

Систем. Иремә, ахырыһы, һынап, уҫал итеп, сәнсеп ҡараным, түҙмәне, шаяртҡан булды:

– Һиңә хыянат итергә башым икеме ни, әхирәтең өсөн ана нишләткәнһең теләләрҙе. Миләүшәгә таман да... Ә янып китһә? Тәнгә  эскәрәк үтһә, утты һүндереп булмай, белдеңме?

– Белдем. Тик һин миңә тоғро бул, Фатих! Ғәфү итә алмам. Белдеңме?

Ҡосаҡлаштыҡ. Ир менән ҡатын хисләнеүенән бигерәк, бер-береһен аңлаған ике тиң һәм дуҫ йән итеп тойҙоҡ үҙебеҙҙе ошо саҡта.

Әшрәфенең ҡылығын ауыр кисерҙе әхирәтем. Унан да былай, сабыйын юғалтыуға күнә алмай аҙапланды. Уның аңы операцияны аборт тип ҡабул итәләр һәм әрнеүле хәтирәләрен яңырталыр.

Үҙенә бикләнде Әсмә. Ураҡ тамамланды. Зәп һөрөлдө. Ужым сәселде. Сөгөлдөр шәкәр заводына оҙатылды. Ҡыш килде. Яҙ етте. Күрәнлелә боҙ китте. Муйыл сәскә атты. Тик, был тормош, әйтерһең, унан башҡа бара. Өйөндә лә донъяһын илтифат һалып көтмәй. Ҡасан ҡарама, битараф ҡиәфәт менән бола эсендә ултыра. Әлдә тамағын ҡайғырта сабыйҙарының, өҫ-баштарын йыуа. Мал-тыуарын ҡәйнәһе тәрбиәләшә.

Беҙгә лә килеп урамай Әсмә, исмаһам. Үҙем барыштырам, барған һайын бошоноп ҡайтам: ни генә әйтһәм дә, әхирәтем баш ҡағып, үҙ уйына батып ултыра бирә. Әшрәфтең хыянатына ышанмайым, тип тә тылҡыйым, донъяңды һүндермә, мах бирмә, тип тә сәмләндереп ҡарайым – өндәшмәй. Уф, былай дауам итһә, хәсрәте бауырына таш булып ҡата лаһа!

Көндәрҙән бер көндө, ниһайәт, тел тибрәтте әхирәтем.

– Ҡысҡырҙым – тауышым сыҡманы, яндарына барам тиһәм, быуыным бушаны ла, ергә сүктем. Һыҙанан юлға имгәкләп сыктым. Нисек аяҡҡа баҫтым, нисек ауылға ҡайттым – төштәге кеүек... Ә бит был яҙаны миңә Аллаһ бирҙе, ҡылған гонаһтарым өсөн, Нурия!

– Аллаһҡа япһарма. Яҙа, имеш. Әшрәф урынында берәү булһамы, аҙыр ине. Ә ул үҙен тотоп ҡалған. Хыянат итмәнем, ти ҙәһә.

– Хыянатсы ул түгел, Нурия, ә мин үҙем. Инде ике сабыйымдың ғүмерен ҡыйыусы. Кем була, әйт!

– Тәҡдир... Әйткәйнем дәһә Таштояҡты утлы киҫәү менән бәргесләгәнемде, «Миңзифа апайым өсөн үс алырға иткәйнем, эшкинмәне, ебегән!» – тип ҡысҡырҙы шунда.

– Кем ебегән?

– Әшрәфте әйтә, бәс. Мин дуҫымды аңлайым, ул бит усаҡ яҡтыһында бейегән ҡатын заты алдында тубыҡланған, уның Таштояҡ икәнен иҫенән сығарып ебәргән, моғайын, бер мәлгә генә.

– Ебегән?! – Әсмә, шул һүҙҙән ҡыҙыҡ тапҡандай, көләргә тотондо, көлөп арыған, илап ебәрҙе... Йүнәлә башлауы ошо булһа ярар ине, тип юраным.

Әсмә бүтәнсә бала тапманы. Яҡындан белмәгән кешегә улар Әшрәф менән татыу ғына йәшәп яталар кеүек. Математиканан артта һөйрәлгән әхирәтем миңә үҙенең хәләтен геометрик ысул менән аңлатты. Ҡағыҙға кәсәне түңкәреп ҡуйып, ҡәләм менән түңәрәк һыҙҙы ла, шуны дүрткә бөкләп, бер өлөшөн ҡайсы менән киҫеп ырғытты һәм, бына минең Әшрәфкә булған хистәрем ошолай кесерәйҙе, тип күрһәтте. Йөрәгем өшөп китте: ҡырҡып ташланған бүлкәттең инде бер ҡасан да урынына кире берекмәҫен аңланым. Уф, әллә ниндәй образдар таба Әсмә үҙенең хәсиәтен аңлатырға, Айыусылығы анауы ҡарағай, хәҙер – ошо геометрия...

Бер ҡараһаң, ғүмерлек, ысҡынмаҫлыҡ нығ ептәр менән бәйләнгән ир менән ҡатын. Икенсе ҡараһаң, улептәр шундай нескә, ҡыйыҡ һүҙҙән дә өҙөләргә тора. Ҡатын-ҡыҙҙар советында йәштән ҡатнашып йөрөгәс, тәбиғи күҙәтеүсәнлегем дә булғас, китаптарҙа яҙылған мөхәббәт үрнәктәренең ауылымда һирәк күренеш икәнен танымай булдыра алмайым. Ә бит ныҡлы, күркәм ғаиләләр етерлек. Һәм ул ғаиләләрҙең күпселеге ҡатын-ҡыҙ фиҙакәрлеге арҡаһында татыу, бөтөн. Һөйөү йыһаны – һәр кемдең үҙенеке, үҙе ҡора, үҙе емерә ала. Ирҙәрҙе унда, ғәҙәттә, бер һуҡмаҡ алып бара – төп инстинкт, тиһәм, йөҙ процентҡа хаҡ булмам, бәлки, әммә артабан бергә донъя көтөү, тормош даръяһында бер кәмәлә йөҙөү хаҡында алдан әллә ни баш ватмай һымаҡ улар заты? Ҡатын-ҡыҙ күңеле иһә һайлаған йәр менән нисегерәк йәшәрен күҙаллап, бәхет моделен хыялында беркетеп ҡуя. Ғаилә төшөнсәһе уның өсөн шундай киң, тәрән һәм тармаҡлы, шундай бөйөк, изге һәм зарур, шуғалыр уға йәне-тәне менән бирелә, инана, сат йәбешә ул. Ә ысынбарлыҡ башҡасараҡ... Хыял офоғонан әкренләп ниҙер юғала, төҫһөҙләнә бара: иң аяныслыһы – күп осраҡта илаһи мөхәббәт мираж булып сыға. Ул сихри бер мәл булып иҫтә ҡаласаҡ, бына-бына әйләнеп ҡайтыр кеүек өмөтләндерәсәк кенә. Инде ҡатын-ҡыҙ башҡа тоталҡалар эҙләйәсәк һәм табасаҡ! Үҙем белгән ҡатындарҙың бәғзеһе ул тоталҡаны иренең йүнселлегендә йә тоғролоғонда, йә

баласыллығында тапҡан һәм тап шул сифаттарын яратыу дәлиле тип инанған. Кемдер, ирем туҡмамай, тип йыуана, кемдер йәмәғәтенең йомартлығын өҫкә сығара. Мең сәбәбен таба ҡатындар үҙен бәхетле тип иҫбатлар, хыялында йөрөткән образдан ваз кисмәҫ өсөн. Аҡыл зирәклеге, йөрәк ҡаһарманлығы, ахырҙа рух бөйөклөгө түгелме ни был?!

Бер арала әхирәтемде, бәләкәстәребеҙҙе ҡәйнәләргә ҡалдырып, умарталыҡҡа Балбабайҙарға өгөтләп алып киттем. Әсмә мине ошонда ныҡ ғәжәпләндерҙе. Әллә ҡалын урман, йөҙйәшәр ҡарағайҙар шулай ҡапыл үҙгәртте уны?

Уртансы Балбабай, Бүреһуҡҡан олатайҙың тиҫтеренең улы инде, һыбай килеп туҡтаны ла, атын бәйләп ҡуйып, өйгә инде. Артынса, улы – кесе Балбабай килеп етте, уныһы ла һыбай. Шул, беҙҙең йәштәрҙәге күркәм ир, эйәренән төшмәй генә, Әсмәгә һүҙ ҡушты: «Урман сибәре, һыбай елгән саҡтарыңды иҫләйһеңме әле?» – тип. Бәс, әхирәтем теге бәйле аттың теҙгененән тотоп саҡ ҡына ары атлатты ла, һикереп менеп, сабып сыҡты ла китте. Уның артынан теге ир төштө. Киң генә аҡланды өс уратып килделәр, һә тигәнсе. Мин ауыҙымды асып ҡарап торҙом. Һы...

Урман ҡосағында үҫкән, мылтыҡ аҫып һунарға йөрөгән, айыу менән алышҡан көслө рухлы Әсмә, әйтерһең, асылына әйләнеп ҡайтты! Ана, толомдарын сайҡалдырып, күкрәген айҡалдырып толпар атта кем елә – ул даһа, ҡасандыр минән, Одиссей сәйәхәттәре менән һаташҡан Нуриянан, амазонкалар башҡорт ҡыҙҙары булғанмы икән әллә, тип һораған әхирәтем.

Амазонкалар... Быуат-быуат, быуын-быуын кешелек аҡылын биләр, хәтерен ҡуҙғатыр өсөн улар ише мәшһүр даның булыу кәрәктер шул! Ҡатын затынанмы икән улар, тип шик белдереүселәр ҙә бар, имеш? Ана, «Вокруг света» яҙып сыҡты: амазонка ҡәбере табылған, һөлдәнең ҡулында көҙгө, ти... Әйткәндәй, Сәлимә апай ҙа бер һөйләп алғайны, булған икәнсе «башҡорт амазонкалары»! Боронғо сығанаҡтарҙы уҡығанда ул ғәжәйеп бер легендаға юлыҡҡан: «...Әүәл бер дәүерҙә башҡорт ырыуынан биш һыбай яугирҙы күмәк дошмандар ҡамап әсир иткән. Ҡараһалар, берәһе ҡатын кеше, ти. Алыштa мәргән уҡ атып, ҡылыс һелтәп, иң ныҡ асырғанып айҡашҡаны ла тап ул булған. Дүрт яугир ир – ҡатындың атаһы, бер туған ағаһы, ире һәм улы икән. Дошмандарҙың ғәскәр башы аптырап ҡалған, нисек язаларға, ҡайһылайтып рухын һындырырға был амазонканың, тип. Шунан ул мәкерле һынау уйлап сығарған: «Үҙеңде һәм ғаиләңдән ике ир затын, ҡаһарманлығыңа һан биреп, азат итәм, икеһен үлем язаһы көтә, тик бер шартым бар: кемдең ғүмере ғәзизерәк – һиңә хәл итергә». Легенданың ошо төшөнә еткәс, Сәлимә апай миңә ҡапыл һорау биргәйне, шул амазонка урынында яҡыныңдың ҡайһыныһын һайлар инең, тип. Юғалып ҡалдым, ахырҙа, атайымды һәм улымды, моғайын, тигән булдым. Әстәғәфирулла... Ундай ҙа сараһыҙлыҡтарға дусар итмәсе, Раббым!

Яугир ҡатын иһә әйткән, ти:

– Атамды йәнә ағамды ҡалдыр.

– Нишләп улай хәл иттең? – тип һораған дошман.

– Атам менән ағамды мин бер нисек тә үҙем бар итә алмам, ә иргә башҡаға сығырға була, улды, быныһына йөрәгем ҡанһыраһа ла, тағы табырмын.

– Үҙең үлтер уларҙы!

– Юҡ!

– Улайһа, яңғыҙыңды ғына тере ҡалдырам.

– Ҡалдырмаясаҡһың.

– Нишләп?

– Хас дошмандың башын ҡыясаҡмын барыбер!

Иҫем-аҡылым киткәйне ул легендаға. Хәҙер ҙә тетрәнеп киттем дә, хәтер ебен ошо урында төйөнләп тороп, бөгөнгөмә йөҙ борҙом.

Сәлим район үҙәгенән бер аҙна тигәндә әйләнеп ҡайтты, ҡыҙын етәкләп беҙгә инеп сыҡты. «Бир ҡуй башы, апа жан, юз яшагез», – тип рәхмәтен әйтте. Һарыҡ һуйып мәжлес йыймаҡсы, аңлашыла. Үзбәк йолаһы буйынса, ҡуйҙың башы айырым бешерелеп, иң ҡәҙерле ҡунаҡ алдына ҡуйыла. Сәлимә апай ҙа кисә килеп киткәйне, һөйөнөсөн уртаҡлашып. Гәпләшеп ултырҙыҡ. Кәйефе шәп булғас ни, фәһемле генә ваҡиғаны, мәрәкә тип, һөйләп алды. Берәй еренә төртөп ҡуй бәйәҙеңдең, тине. Төрттөм.

...Дөрөҫ һиҙенгән Әмин абый үзбәк егетенең кейәүе булып китерен. «Минең ҡыҙҙарыма ғына башҡорт табылмай, береһе Нефтекамала, татарға барҙы, икенсеһе – Хохляндияла, быныһына ни ҡалған, башҡорт зыялылары уртаһында, милли әҙәбиәт ҡомарҡтыларын аҡтарып ултыра, ә үзбәк эйәртеп ҡайтҡан!» – тип туҙынһа ла, эсенән риза ине ул, егеттең арыу кеше икәне йөҙөнә сыҡҡан даһа.

Оҙаҡҡа һуҙмай, Сәлим Толпарлыға күсеп килде. Колхозда өс йыл зоотехник булып эшләп алған бер белгес шул арала йорт һалғайны, ҡатынын ауылға күсергә өгөтләй алмағас, һатып китергә мәжбүр булды. Шул ҡаралтыны Сәлим алды, йәһәт кенә мейесен сығарып, ихатаһын кәртәләп ҡуйҙы. Аҡсаһы ла булған икән? Сәлимә лә йышланы ауылға, һайт итеп ҡайта ла төшә. Халыҡ күрмәй буламы? Кемдер бот саба, уҡыған башы менән шул трактористың майлы кейемен йыуып, солярка еҫкәп йөрөрмө, тип. Икенсе берәү ҡыҙҙың күптән «кенәгәһе батыуы»н телгә ала, ир сыҡҡас, рәхмәт әйтһен, йәнәһе.

Ә теге мәрәкә тигәне никах туйы алдынан булған. Сәлимдең Ырымбур яғынан килгән ҡустыларының береһе, ағаһының йортон тыштан ҡарап йөрөгәндә, мөрйәһе ҡыйышыраҡ икән, тиһә, Әмин абый ишетеп ҡалған да: «Зато төтөнө тура сыға», – тип ҡырт киҫкән, саҡ бәрейе ҡупмаған. Бәс? Сәлимә апайҙан был хәбәрҙең ғилләһе ниҙә икәнен төпсөндөм. Баҡһаң, зыялыларға билдәле тарихи шәхес Ерәнсә сәсән менән уның ҡатыны Бәндәбикәгә барып тоташа икән һүҙ осо.

– Ана шул Бәндәбикәнең муйыны, – тине Сәлимә апай, – минеке һымаҡ, әҙерәк ҡыйыш булған. – Аптырап киткәйнем, иҙеүен асып күрһәтте: бар икән шул саҡ ҡына кәмселеге. – Ерәнсә сәсән Бәндәбикәне һоратырға килгәндә, яусыларҙың береһе һүҙ ҡыҫтырған, ҡыҙҙың муйынына ымлап. Атаһы әйткән шунда кинәйәләп, мөрйәһе ҡыйыш булһа ла, төтөнө тура сыға, тип. Минең атай ише. Ерәнсә – тел маһиры, ә Бәндәбикә аҡыл ҡаҙнаһы булған. Халыҡта уларҙың бәғзе бәхәстәре хаҡында риүәйәттәр йөрөй. Ерәнсә сәсән, ырыу башлығы булып киткәс, ирлегенә барып, ҡай саҡ ҡатынын тыңламаған. Ә Бәндәбикә алдан күрә белеүе менән дан алған. Ире ҡаҙаҡтарға яу менән барырға йыйынғас, ҡатыны киҫәткән, һөжүм итмә, үҙ малыбыҙ ҙа етерлек, тип. Тыңламаған. Еңелеп, ғәскәрен юғалтып ҡайтҡан... Һөйләй китһәң, бик оҙон, яҙма тарихын уҡырға бирермен.

Бәндәбикә. Әүлиә ҡатын. Ил инәһе. Исеме тарихта ҡалған шәхес. Мин, наҙан, уның хаҡында саҡ ишетеп торам. Географ булыуым аҡламай ҙаһа. Ер-һыу буйлағанда, ҡайҙа ниндәй халыҡ йәшәүен, ҡайһы телдә һөйләшеүен дә еткерергә тырышам уҡыусыларыма, шул телдән бер-ике кәлимә булһа ла элеп алып, ҡолаҡтарына киртеп ҡуям. Үҙемә лә ҡыҙыҡ тел тамырын юллау – шулай халыҡ яҙмышын, милләттәр туғандашлығын төҫмөрләп була. Ә үҙ халҡыбыҙҙың сал быуаттар аша ауаз һалған ауыҙ-тел ижадында, топонимик атамаларҙа һаҡланып ҡалған тарихын төбөнә төшөп беләбеҙме, беҙ, уҡытыусылар?! Һәр заманда, һәр сәйәсәттә лә тап мәктәп, мәғариф кешеләрҙе «ағартыусы» булып ҡаласаҡ таһа.

Сәлимә апай фән кандидатымын тип торманы, Толпарлыһына ҡайтып, мәктәп китапханаһында эшләй, өлкән кластарҙа башҡорт теле һәм әҙәбиәтенән уҡыта башланы. Уҡыусылары аңлаймы икән Бәндәбикә вариҫаһынан һабаҡ алыу бәхетенә ирешеүҙәрен? Аңлайҙарҙыр. Юҡҡамы ни тап беҙҙең мәктәп йылдың-йылы «Урал батыр» эпосын ятҡа һөйләүселәре менән районда ғына түгел, республикала дан ала? Әйткәндәй, Сәлимә Әмин ҡыҙы данлыҡлы эпосыбыҙҙы иң башта уҡытыусыларға өр-яңынан асып бирҙе: унда телсе йә тарихсы ғына түгел, географ та, математик та үҙ фәненә ҡағылышлы материал таба ала. Ғөмүмән, «Урал батыр» башҡорттарҙы – донъяға, ә донъяны башҡорттарға таныта торған мәшһүр әҫәр ул!

Был тәңгәлдә танымай булдыра алмайым, әлеге ҡатмарлы замандың, торғонлоҡ мөһөрө һуғылған осорҙан һуң килеп иҫкән үҙгәртеп ҡороу, билдәлелек, демократия тигән әүрәткес елдәрҙең ыңғай шауҡымы ла булманы түгел. Иң әһәмиәтлеһе – милләтебеҙҙең йоҡомһорап киткән үҙаңы асылыуы.

***

Ошо осор Толпарлының йәшәйеше ҡатыҡ кеүек ойоп китте әле, тигән уйҙа һәүетемсә генә урам буйлап атлап барһам, тәҙрә туҡылдаттылар. Әмин абыйҙар йорто тапҡырында. Ул да булмай, абый ҡапҡаһынан елтелдәп килеп тә сыҡты. Кеҫәһенән әлеге лә баяғы яулыҡ ҙурлыҡ ҡулъяулығын һөйрәп сығарып, күҙлеген һөртөп кейҙе лә миңә мут ҡарашын текләне.

– Ғалимдар ҡатын-ҡыҙ организмында үҙлегенән үҙе бала яралтырға һәләтле матдә тапҡандар, тигән мәғлүмәтте һин ҡайҙан алдың, Нурия, – тип һорайсы. – «Вокруг света»ны мин һаман алдырам, күрмәнем. Фатихтың берәй махсус журналында яҙғандармы?

– Һеҙҙән ишетеп тороуым ул хаҡта, – тинем, ғәжәпкә ҡалып.

– Шырмый Иҡсан әйтә, Толпарлының иң аҡыллы ҡатыны һөйләне, аулаҡта ишетеп ҡайтҡан, ти. Вәт.

– Аулаҡты яңырттыҡ, йөрөйбөҙ, эйе, төрлөһөн һөйләшәбеҙ. Ә кем ул «иң аҡыллы ҡатын» тигәне?

– Үҙенең бисәһен әйтә. Шырмыйҙың ни... Ирҙәр советы ойошторайыҡ, донъя ҡатын-ҡыҙ ҡулына күсеп бара, тип ҡотҡо таратып йөрөй. Кискә ир-ат йыйылыша – клубта. Бараһы микән?

– Абый, бар, йүнәлеш бирерһең, исмаһам. Әкиәт уйлап сығарғансы, ана, эскән, эшһеҙ ятҡан, ҡатынын туҡмаған ирҙәрҙе тикшерһендәр – бар ҙаһа ундайҙар беҙҙә.

Ҡайттым да Фатихҡа еткерҙем теге хәбәрҙе, Әмин абый әйткәнде. Ысын һүҙ, имеш. Йә, Аллаһ! Ҡөҙрәтең киң. Ир-атты һуғыштар, эскелек ҡыра, аңһыҙ үлемгә улар йышыраҡ дусар була, тигәндәнме был хәстәрең?! Аясы уларҙы, атабыҙ Әҙәм вариҫтарын һуңғы сиккә еткермәсе, нәҫел дауам итеү һәләтенән мәхрүм итмәсе!

Ә «Ирҙәр советы»нда хәтәр етди һөйләшеү булған.

– Улар (ҡатындар инде) тамам башҡа менделәр. Ҡарағыҙ, кем ултыра ауыл Советы рәйесе булып – Гөлдәриә, тимерсе Хәйрулла ҡыҙы,ҡан атаһы – Рамай мәрхүм, – тигән береһе, – гөлдөрләп кенә ауылды ҡулына йомарлап алды.

– Мәктәптә кем уҡыта – бисәләр, – тигән икенсеһе.

Һәм... киткән хәбәр сурытыу. Оҙаҡ гәпләшкәндәр, Шырмый Иҡсандың ҡатыны килеп ингәнсе. Ул үҙе менән Аҡназар ағайҙың улы Айсыуаҡты эйәртеп алып килгән. Ир ҡорона инеп килгән, аҡыллы, тотанаҡлы шәхесе ул Толпарлының. Һуңғы арала тышҡы ҡиәфәте менән бигерәк атаһының рәйес булған сағын хәтерләтә

башланы: кәүҙәгә мыҡтыланды, төҫкә матур. Әммә уға ҡартәсәйемсә «ләғәнәт» тип әйтеүсе табылмаҫ. Сыңғыҙҙың ҡошсолоҡ фермаһын бөлгөнлөктән йолоп ҡалыу ғына түгел, артабан киңәйтеп, агрофирма итеп ебәрә алды. Районда бер-бер артлы колхоздар тарҡалған осорҙа! Аҡназар ағайҙы теге юлы, рәйеслектән төшөргәс, Сыңғыҙҙың урынбаҫары итеп тә, Айсыуағы бына-бына уҡып ҡайтыр ҙа эште лә, эскегә һабышып барған атаһын да яйға һалыр, тип ышанып, яңылышманы толпарлылар.

Шул Айсыуаҡ бер үк балыҡ башын сәйнәгән ирҙәрҙе тыңлап торған да әйткән:

– Ағай-эне, ҡыҙмағыҙ, кем мине туғыҙ ай күтәрҙе, яҡты донъяға тыуҙырҙы, күкрәк һөтөн имеҙҙе, тип үҙегеҙҙән һорағыҙ башта. Бына мин яңыраҡ бер китаптан уҡыным, унда, ҡатын-ҡыҙ ул йылға кеүек – бысраҡты ла таҙарта, ә үҙе барыбер саф ҡала, тиелгән.

– Әсәләр хаҡында әйтелгән бит ул, бисәләр – башҡа. Ана, ирҙәрһеҙ йәмғиәт ҡорорға уйлашып йөрөйҙәр.

– Замана амазонкалары! Уларға ход бирһәң...

Шулай тип тағы ҡубып сыҡҡан ирҙәрҙе бүлеп, Айсыуаҡ һорау биргән:

– Ә беләһегеҙме, ҡатын-ҡыҙ көнөнә нисә һүҙ әйтә, ти? 21 мең һүҙ!

– Ләстит тоҡсайҙары бит улар, лығырҙаҡтар.

– Ә һеҙ, бына конкретно һеҙ, ошондағылар, өсләтә күберәк лығырҙайһығыҙ. Ә ни өсөн? Эшегеҙ юҡ. Барығыҙ, ана, хөкүмәт малсылыҡ тармағындағы фермерҙарға ссуда бирә, алығыҙ. Ойошоғоҙ. Аҡса табығыҙ! Һөтсөлөк фермаһының бинаһы буш тора, һыйырҙарын, банкротҡа ҡалып, ит комбинатына оҙатҡандары бирле. Бер мөйөшөнән кирбестәрен ҡутарып алып мөнтәй ҙә башлаған бәғзе оятһыҙ әҙәмдәр...

Әмин абый ҙа һүҙ ҡатҡан, Айсыуаҡты хуплап:

– Дөрөҫ әйтә Сәйетов, тел менән яҡҡа һалышып ултырмағыҙ. Ирлекте дәлилләү – мәртәбә, һүҙем юҡ, ә был беләк көсө генә түгел, ә йөрәк һәм аҡыл ҡеүәте лә талап итә.

– Тағы мотлаҡ кәрәк бер нәмәне оноттоң, абзый, ҡартайыуың шулмы? – тип төрттөрөргә маташҡан Шырмый Иҡсандың ауыҙын Әмин абый бик йәпле итеп ҡаплап ҡуйған:

– Бына һеҙ нейә йыйылдығыҙ, нейә ҡубарылдығыҙ,ә? Ана шул бер нәмәгеҙҙең дә хәжәте хәжәткә генә тороп ҡалыуы ихтимал, тигәнде ишетепме? Ирҙе ир иткән аҡ ҡот (ҡото аҡ – ҡолаҡ һалығыҙ әле!) ғәйрәтенән сигер ҙә...

Советты барыбер төҙөргә булғандар һәм тәүге ҡарарын, әлегә телдән генә, ҡабул иткәндәр: бисәләргә мах бирмәҫкә!

Шундай төйәк бит ул Толпарлы, донъяуи проблемаларҙан ситтә ҡалмай, бик булмаһа, үҙе уйлап сығара ла хәл итә башлай.

## 55

Тормош та, йылдың дүрт миҙгелеләй, алмашынып, төрлө сүрәткә инеп тора, шуғалыр ҙа һис биҙҙермәй, танһыҡтыр ул. Таң ата ла кис була, тип мыжырға өлгөрмәйһең, көтмәгән бер ваҡиға килеп баҫа көн тупһаһына. Мәктәптә имтихандар бөтөп, ялға туҡтап ҡына торғанда, ҡәлбемдәге сәйәхәтсе «үҙем» ҡотҡо һала ғына башлағайны, сәфәр сығырға яйы килде лә сыҡты – Арҡайымға!

Мусаларға Мәскәү ҡунаҡтары килеп төшкәнен йүкә телефон таратып өлгөрөүгә, Зөһрә үҙе лә килеп хәбәр итте: иренең афғанда тапҡан дуҫы Илфат менән ҡатыны икән.

– Бортарь Илфат, ғалимә Люсямы? – Ҡапыл тулҡынланып киттемсе. – Улар миңә таныш, бәйәндәремдә барҙар...

– Эйе, шулар. Арҡайымға барайыҡ, тип быуыныма төштө ҡатыным, ти Илфат. Беҙҙе лә ҡыҙыҡтыралар, яҡын ғына йәшәп тә, һаман ул серле төбәкте барып күрмәгәнебеҙгә аптырайҙар. Люся унда бер тапҡыр булған да, шикелле. Был юлы икәүләп йыйынғандар. Башта командир янына һуғылайыҡ, тигәндәр. (Толпарлыһы өсөн Муса әле лә командирлығынан сыҡмаған: ауыл Советында хәрби иҫәп алып бара, ДОСААФ -тың урындағы бүлексәһе етәксеһе булараҡ, егеттәрҙе армияға әҙерләй.)

– Мин дә барам! – Әйткәнемде һиҙмәй ҙә ҡалдым.

– Нурия апа, шуға килгәйнем дәһә, өгөтләргә. Тарихи башҡорт ерҙәрендә табылған тәгәрмәс ҡала хаҡында белмәй түгелһегеҙҙер, географ кеше, тим.

– Әтеү!

Дүрт ғаилә – Илфаттар, Мусалар, Фатих менән мин һәм Сыңғыҙҙар, улар отпускала ине, сәйәхәт ҡылдыҡ Арҡайымға. Үҙе бер ғүмер, ти халыҡ ундай юл гиҙеүҙәрҙе. Ҡайтҡас, Гөлсирен ғәжәйеп поэма яҙып баҫтырҙы. Люся арийҙарҙың эҙҙәре ҡалған, бронза быуаты цивилизацияһы үрнәге булған тәгәрмәс ҡала хаҡында китап яҙҙы. Фәнни хеҙмәт, уҡыным, почта аша ебәргәйне – урыны-урыны менән фантастик аҫәргә лә тартым... Мин дә тәьҫораттарымды, һыуынмаҫ элгәре, ҡағыҙға төшөрҙөм. Төшөрҙөм дә башҡа яҙмаларым янына һалып ҡуйҙым. Мәле еткәс ҡуҙғатырмын, тигәндән. Бына, ҡуҙғатам.

...Арҡайымды "табылған ҡала" тиҙәр. Ә нисек әйтергә бүтәнсә: 1987 йылда, был тирәлә йөҙҙәрсә саҡрым ерҙәрҙе баҫасаҡ һыуһаҡлағыс төҙөргә ҡарар ителгәс, бульдозерҙар байтаҡ ер ҡатламын умырғас, боронғо ҡоролмалар ҡалдыҡтары асыла ла, эш туҡтап ҡала. Археологтарға әлеге күренеште өйрәнергә, һығымта яһарға ваҡыт бирелә. Әлбиттә, тарихсылар, этнографтар, ботаниктар һәм башҡа бик күп белгестәр йәлеп ителә. Вертолеттан, хатта йыһан спутнигынан төшөрөлгән һүрәттәр тәгәрмәс формаһындағы ыҙандарҙы күрһәтә, ҡаҙып тикшеренеүҙәр беҙҙең эраға тиклем бында, заманына күрә, үҫешкән цивилизация төйәге булыуын иҫбатлай. Донъяуи сенсация күтәрелә. Сарыф ителгән матдиәткә ҡарамай, илебеҙ хөкүмәте һыуһаҡлағыс төҙөүҙе туҡтатырға тигән ҡарар ҡабул итә. Ә 1991-ҙә «Арҡайым тәбиғәт һәм боронғо мәҙәниәт ҡурсаулығы» булдырыла.

Барып төшкәс тә, Люся, мин һеҙгә гид булайым әле, тип уйынлы-ысынлы әйтте лә: «Ана, Мөхәббәт тауы, Теләк тауы, арыраҡ – Аҡыл тауы, эргәһендә – Арҡайын, урыҫтар уны Гора покаяния тип йөрөтә, маңлай тура – Шаманка тауы, – тип аңлата ла башланы. – Ә беҙ үтеп киткән йылғаның атамаһы Караганка».

– Ҡайҙа ҡараған икән? – Сыңғыҙ шулай шаяртмаҡ булды ла, усы менән сәп итеп маңлайына һуғып алғас, әйтеп ҡуйҙы: – Ҡара ҡан тигәндән түгелме икән, юғиһә, был – боронғо Ҡыпсаҡ далаһы, ниндәй генә алыштар, ҡан ҡойоштар булмаған, тарих биттәрен аса башлаһаң... Белдегеҙме? – Ыңғайына гелән тел осонда торған һүҙен дә ысҡындырҙы.

Оҙаҡламай ике автобус тулы сәйәхәтселәр килеп туҡтаны ла шаулашып беҙгә килеп ҡушылды. Шул ығы-зығыла аймылышҡанбыҙ. Мин, бер төркөмгә эйәреп, тәүбәгә килеү тауы Арҡайынға барып сыҡҡанмын. Менгән үрҙең түбәһенән бар тирә-яҡ күренә. Икенсе бер төркөм Мөхәббәт тауына күтәрелеп бара, минең юлдаштарым да шунда: Менәүәрәнең ҡыҙыл ебәк шарфы елферҙәп әллә ҡайҙан күҙгә салына.

Толпарлынан ике машинала юлға сыҡҡайныҡ, Сибайҙа туҡталып, Фатихтың институтта бергә уҡыған дуҫтарында ҡундыҡ. Унан иртүк ҡуҙғалып, Арҡайымға күп тигәндә ике сәғәттә килеп тә еттек. Ҡояш саҡ үрләп бара. Тәбиғәттә – нардуған, көн менән төн тигеҙлеге. Минең күңелемдәге үлсәүҙәр генә абсолют тигеҙлекте белмәй, күрәһең, бер-береһе менән һәр даим бәхәстәләр.

Тек-тек-тек... Ҡолағыма сәғәт текелдәгәне ишетелгәндәй. Ҡулымда сәғәтем юҡсы? Шунда зиһенем һағайҙы: Йыһан ваҡытын тоям, уның сәғәте текелдәй булыр. Илаһым! Күкрәк тултырып һулыш алдым, әрем, мәтрүш, артыш еҫтәре бергә буталып, һауа менән күҙәнәктәремә үтеп инде. Ҡапыл, юҡ, аңым томаланманы, ә ниндәйҙер икенсе халәткә индем, гүйә. Ярабби! Ҡояш туп-тура күҙемә ҡарап тора! Һәм шул минутта Күк сырағы тарафынан Арҡайымға нур ағылды, әйтерһең, алтын улаҡтан аҡты ул, күпмелер бер арауыҡҡа Ер менән Күкте тоташтырҙы. Раббым әл-ғаләмин! Ышанырғамы, юҡмы, тип, күҙҙәремде әҙгә генә йомоп тороп, ҡабат асһам, улаҡ нисек бар булһа, шулай юҡҡа сыҡҡан, күк көмбәҙендә төрлө төҫтәге дүңгәләктәр генә бәүелә. Уҡығандарымдан мәғлүм мәжүсиҙәр аллаһы Ахрымаз күрһәттеме миңә был мөғжизәне?! Заратуштра пәйғәмбәр ишара бирҙеме? Ул даһа ошо тарафтарҙа, Яйыҡ буйында, тәү дин тәғбирен еткергән халыҡҡа. Әллә Һомай Хоҙайбикә алтын ҡанатын елпенеме?

Ай, әлеү-әлеү! Балтырымдан селек ҡыуағы әләктереп алған, имеш. Толпарлыла, Ҡырластауҙың таш баҫҡыстарында ла, үҫә ул. «Таныйым, һаумы, – тинем селеккә, – тик тырнашма, йәме». Шул ыңғайҙа иҫемә төштө: селектең боронғо атамаһы «ҡараған» даһа, ҡартәсәйем әйткәйне ләһә. Баяғы йылғаның, бәлки, шунан ҡалғандыр исеме? Ана бит, тау башынан айырым асыҡ шәйләнә: моғайын, әүәлге нигеҙҙәрҙе уратыптыр, түңәрәкләп үҫкән селек. Эргәмдәге үлән-сәскәләргә күҙ һалдым, был йәһәттә апаруҡ ғилемлемен – ҡылғанға, аҡтамырға аптыраманым, ҡәҙимге тупрағы. Шул мәл йор ғына ел килеп юлыҡты ла бер ҡамғаҡты ҡуҙғатты, тәгәрәп үк китмәһә лә, аҫтында йәшенеп ятҡан дала ҡара йыланын күреп ҡалырға өлгөрҙөм. Әллә ҡурҡышымдан, шыбырлап ҡуйҙым: «Шым ғына шыл инде, шыл, йыланға табынған йәзит ҡаны ла бар миндә, бел». Иғтибарымды албырғатып, һары сәпсәү алдыма уҡ төшөп һикерәңләне, пырпыр килеп, ҡанаттарын зырылдатты. Яңыраҡ ҡына «Башҡортостандың Ҡыҙыл китабы»н ҡарап ултырғайным, дәрескә өҫтәмә мәғлүмәт эҙләп, шунда күргәйнем уның һүрәтен, тимәк, юғалыу ҡурҡынысы янай илгәҙәк ҡошсоҡҡа. Хәйер, юғалмаҫ, ҡурсаулыҡҡа килеп һыйынғас. Ҡапыл ҡырҡа ел иҫте, баяғы ҡамғаҡ ары тәкмәсләне. Теге йылан мине аңлаған, шылған...

Уңайын көтөп кенә тора хәтерем – тарих юллап алырға. Беләм: Арҡайым миңә, әҙәм балаһына, Йыһан камиллығының бер өлөшө икәнлегемде, мейемдә йыһани хәтер күсермәһен йөрөтөүемде иҫбатламай ҡалмаҫ. Мин бит Ер кендеге булған изге төштә баҫып торам. Ошонан, дүрт тарафҡа тармаҡланып, төрлө ҡитғаларға даруғалар тартылған, йәшәйеш таралған, ти ҙәһә сал тарих. Ҡәнифә юлының – географик киңлек, Ҡуңыр буға юлының – буйлыҡ икәне хәреф танығаң һәр башҡортҡа мәғлүм дәһә бөгөн.

Уф! Ҡояш Тәңре әллә бөтә нурын тик Арҡайымға ҡоя?! Төшәйемме был тауҙан, әллә юлдаштарымды көтәйемме? Көтәйем. Мөхәббәт тауына артылып та тормам, тапҡанымды юғалтмаһам ине. Фатихымды. Анау юлы саҡ яҙманым йәремдән... Ординатурала уҡыған сағында булды ул хәл. Зоя тигән берәү, «Фатихты көтмә, ул мине ярата» тип хат ебәрҙе. Ҡәлбемдәге ғәрсел «үҙем» күтәрелеп бәрелде! Аҙна араһында Өфөгә барып, теге һүҙҙе юллайыммы икән әллә, тип ярһып йөрөгәндә, әлеге Зоянан тағы хат килеп төштө. «Ҡурҡма, беҙ, бер төркөм ҡатын-ҡыҙ, һине һынап ҡараныҡ. Ирең суфый булып ҡылана, шуға үс итеп». Шулайтып та хаслаша икән ҡай берәүҙәр?!

Ә мин ут йотоп йөрөнөм! Әсмәгә лә асылманым, хатта... Аҙаҡ Фатихҡа күрһәттем ул хатты, беҙҙең менән Зоя тигән ҡыҙ уҡыманы, тип аптыраны.

Ултыра төштөм, шул хәтирәләр шауҡымы бәкәләмә һуҡты, гүйә. Үткән, аҙағы хәйерле булған, тинем дә ҡыуып ебәрҙем уларҙы һәм ошо тауға, дөрөҫөрәге,

уның исеменә төбәлдем – Тәүбәгә килеү тауы лаһа. Ә миңә, минең хәтеремә ым ғына бир, хәҙер төптән төпсөргә тотона, ҡасан, ҡайҙа, нисек ҡылдың ҡырын эшеңде, тип. Шуға тәғәйен генә мөрәжәғәт иттем тау рухына: «Ҡояш күрә, тау ишетә, Раббым, аңлы һәм дә аңһыҙҙан ҡылған гонаһтарымды ярлыҡа, зинһар, кисер! Үтенәм: миңә тейеш язаны балаларыма ауҙарма, үҙем күтәрермен».

Әкренләп уйым үҙекәйемдән ил-ҡәүемгә күсте. Көн эҫеһендә тау башында һауа бер мәл кеҫәл һымаҡ дерелдәп торғандай күренде, һәм, әллә шул томра тәьҫирендә, әллә Илаһ тәғбирендә, тарихи хәтерем өндәште, бәғзе юйылмаҫ шәжәрәләр пәйҙә булды, ауаз ташланы.

...Ҡәүемемдең бер ҡанаты Тын йылға, Ҡара диңгеҙ яҡтарына күсенә. Дөпдөп... Тек-тек... Тояҡ тауышымы дөпөлдәй? Йыһан сәғәтеме текелдәй?

...Дәште ҡыпсаҡ! Күҙ иңләмәҫ дала киңлектәрендә йәйрәп ятҡан империя. Яугир ҡыпсаҡ рухы, ҡыпсаҡ ҡануны хакимдар бында: һыбай сабыу, мәргән уҡ атыу һәм ирек – зарури. Эйәрҙә тыуған, эйәрҙә үлгән, һыбайлыҡта рухы йоп ҡыпсаҡ, кем яҫҡына уның далаһына, яу ораны: бысаҡҡа-бысаҡ!

...Ҡылыс болғап, иран телле сармат оран һала, аталыр, тип, был тау Ирандағ, һәм аҡ ташы алыҫтан ағарып күренгән Ирәндек яғына ҡул болғай. Асылымдағы хиссән үҙем тасуир үрә: Ирәндек...беҙ, башҡорттар, ҡайҙа йәшәһәк тә, бейеклеккә тауҙан өйрәндек!

...Аh, был ни хәл? Шәфәк ҡыҙылына сумып кем атлыға башҡорт далаһына? Йәсиғ намаҙына баҫыр мәлдә һыбай саба. Ҡуш толомо сыбыртҡылай арҡаһын ҡайыҙлай... Ҡатын заты?! Дала еле ҡолағыма әлә: был Чернигов кенәзенең тол ҡатыны иленән-диненән ҡасып бармаҡ. Башҡорт ханға ғашиҡ булмыш, ханбикәлеккә хыял итмеш.

...Ә был осһоҙ-ҡырыйһыҙ сиреү ҡайҙан, кемдеке? Сыңғыҙхан! Тымыҡ океандан алып Көнбайыш Европағаса ятҡан киңлектәрҙә йәшәгән барса халыҡтарҙы дер ҡалтыратҡан бөйөк Сыңғыҙхан. Уның ҡашындағы ғорур ҡиәфәтле ир-уҙаманды сырамытам һымаҡ. Хәтер төпкөлөнән белешмә алам: минән утыҙ быуын алда йәшәгән ҡартатайым Майҡы бей булыр ул!

Дөп-дөп, тек-тек... Йөрәгем дөпөлдәй. Йыһан ғәмәленә, йыһан ваҡытына барып тоташҡан ғүмер сәғәте текелдәй... Күккә төбәлдем. Раббым әл-фәләк! Көтмәгәндә ҡыялатып ҡына эре күҙле ямғыр һибәләп үтте. Шул арала бейек һәм сағыу йәйғор күпере хасил булды. Хыялсан “үҙем” талпынып алды: йүгер ине шул күперҙән! Юҡ шул, булмай шул. Миңә тик хәтер баҫмалары буйлап сәйәхәт итеү сараһы бирелгән. Ана шул баҫмаларҙа әле генә Рим империяһы менән даулашҡан затташтарымды күрҙем, сармат батшаһының Боспор ярҙарында һалған эҙҙәрен шәйләнем, Ҡытай тарафтарында башҡорт яугирҙары һөрәнен ишеттем. Афғанда, Һиндиҡуш тауҙарында, мөйтән ырыуы тауыш бирҙе, Амударъя менән Һырдаръя тулҡындары боронғо башҡорт йырын йырланы: «Йыуасалы кеүек батыр ирҙәр беҙҙән киткән инде, юҡ инде...» Булған бит Йыуасалы ырыуы, ҡасандыр Урта Азияға барып сығып, кире әйләнеп ҡайтҡан?! Бәғзе тарихсылар яҙғылаған бер осор, имеш, башҡорттарға ахалтекин аттары төркмән тарафтарынан килеп юлыҡҡан. Элгәре Азияла ат булмаған даһа, тап беҙҙекеләр унда аҫыл тоҡом арғымаҡтар, еңел һөйәкле күкбуҙаттар менеп барғандыр. Ғәмәлдә әлеге көндә Толпарлыла үрсетелгән Күк юрға нәҫеле лә беҙгә ҡаҙаҡ дәрүише илә әйләнеп ҡайтҡан толпарыбыҙҙыр ул.

Бәс! Эргәмдә Фатихым баҫып тора, ҡайҙалыр әйҙәп ҡул һуҙа.

– Әлмисаҡтан алып урап сыҡтыңмы тарихты? – тине, йылмайып, – Айырылып киткәнеңде күрҙем, туҡтатманым, холҡоңдо белгәс. Улай ҙа ике күҙем һинең яҡта булды. Хәүефләнеп килеп еттем бына, ҡапыл юҡҡа сыҡтың... Ял итеп ултыраһың икән. Тегендә махсус экскурсовод бар, бик ҡыҙыҡлы мәғлүмәттәр

бирҙе. Бында бронза быуаты мәҙәниәте булған, мейестәрҙә баҡыр, еҙ, ҡурғаш иреткәндәр, аҡса ҡойғандар, ти. Ысын булһа, махсус торлаҡтарҙа эшселәр икешәр ҡатлы һәндерәләрҙә йоҡлап йөрөгән, унан бөтә һуҡмаҡтар промзонаға, домна мейестәренә илткән. Ә донъя көтмөштәре – айырым. Тәгәрмәс ҡалала өс түңәрәк булған: уртала – административ үҙәк, унда Кәңәш ҡоро, Хөкөм ҡоро йыйылған; икенсе түңәрәктә халыҡ йәшәгән, бер айырсала – сәнәғәт атҡарылған; ә иң тышҡыһында мал-тыуар аҫыралған. Белгең килһә, Арҡайымда водопровод булған, һыу үткәргес! Бында тормош ике мең быуат дауам иткәндән һуң серле рәүештә юҡҡа сыҡҡан. Ҡаралтыларын яндырып киткәндәр, шуға күрә археологтарға тулыһынса күҙаллау ауырыраҡтыр. Имеш, сит планетанан йыһан карабы төшкән дә бында үҙенекеләргә мәғдән туплаған. Оҙаҡлағандар. Моғайын, караптары боҙолоп, йүнәтә алмай хитланғандар. Йүнәткәс, осоп киткәндәр. Ошондай версия ла бар икән.

– Иҫ киткес үҫешкән цивилизация эҙҙәренә тап булғас, шик тыуа инде ғалимдарҙа. Һин әйтмешләй, әлмисаҡта... Ә бит күптән түгел мин бер ҡыҙыҡ мәғлүмәткә юлыҡтым: Арҡайым кеүек тәгәрмәс ҡала Ерҙә өс урында булған: Афғанстанда, Үзбәкстанда һәм бына ошонда. Афғанда Муса мөйтән ырыуынан бер ҡартты осратҡан, тигәйнемме? Хәтер ебен өҙмәгән шул ҡәүем хәҙер пуштун телендә һөйләшә, ә нәҫел шәжәрәләре – тимерселек, ти. Тимәк, башҡорттар афғанда ла төйәкләнгән бер дәүерҙә. Әй,тағы, Муса, яраланғас, үлем менән йәшәү араһындағы хәлдә, төш күрҙем, имеш, вертолетта осам, ә аҫта боронғо ҡала контурҙары шәйләнә,тәгәрмәскә оҡшаған,тип һөйләгәйне. Моғайын, өнөндә лә күҙенә салынған, һуғыш мәхшәрендә иғтибарға алмаған, әммә төпкө аң иҫенә һалып ҡуйған, шул төшөнә ингән?

– Ихтимал. Тәгәрмәс ҡалалар цивилизацияһы башҡорттарҙыҡы булып сығамы?

– Моғайын.

– Әйҙә, Шаманка тауына.

– Ниңә тап унда?

– Һине сихырлатам, шаманканан.

– Абау, уның рухы тауын ташлап китмәҫтер. Тик мине әмәлләйһең ҡалмаған, Фатих, беләһең. – Ирем, «тураһын әйт, шылдырма» тигәнде аңлатып, күҙемә текләне. Нисек яуап бирмәй ҡалайым уның зәңгәр күҙҙәренә?! Ғүмерлек йырыбыҙҙы үҙемсәләп көйләп ҡуйҙым хатта ки: «...Һинең өсөн өҙөләм бәғерем, Фатихым, һиңә һиҙелмәһә лә». Алан-йолан ҡаранып алдым, берәйһе ишетеп торһа, бынау өлкән генә апай мөхәббәт йырын килештереп маташа,тип шаҡ ҡатыр ҙаһа, ошо мөғжизәүи төйәктең йоғонтоһона бирелеүемде аңламаҫ. Атаҡ, ниңә аҡланам? Яратам тигәс яратам, өҙөләм тигәс өҙөләм дәһә!

– Ышанам, Нуриям – тине Фатих, уйымдағын әйтеп үк бөтөрмәһәм дә. Һәм өҫтәп ҡуйҙы: – Унисон!

Кеше ыңғайына бындағы ритуалды үтәп, теҙеп һалынған таш өйөмдәрен бер нисә ҡат урап сыҡтыҡ та етәкләшеп тауҙан төшөп киттек. Үҙемде бик бәхетле тойҙом ошо минутта. Хәтер яңыртҡанғамы, Күк менән Ер ҡушылып алған мәлдә тәүбәгә килеп өлгөрөүемәме, күңелем разый, түп-түңәрәк ине.

Шаманка. Шомлораҡ тау. Бисә затынан булған, ти, шул ошо тауҙы төйәк иткән ул зат. Төпкө аң тиҙ генә белешмә бирҙе: тәүге яҙыусы ла ҡатын-ҡыҙ булған. Бәлки.

Тауҙан төшөп барғанда, ҡапыл Мәүлиҙә уйыма килеп инде, кемдер ҡолағыма шыбырлағандай итте: «Ҡәнзәфәр!» Аптырап, туҡтап ҡалып, Фатихҡа ҡараным, юҡ, ул бер ни ҙә әйтмәгәнгә оҡшай. Етәкләп, мине аҫҡа табан йүгертергә иҫәбе. Ҡулымды тартып алғас, үҙе генә елдерҙе. Ә мин уның йәштәрсә еңел кәүҙәһенә, дәртенә һоҡланып ҡарап торҙом да яйлап артынан ыңғайланым. Тауға менеүҙән төшөүе ҡатмарлыраҡ, тубыҡтарым сатнап һыҙлап алып китә – бында шул

хәлемде нығыраҡ тойҙом. Аҫта көтөп алған Фатихым шундуҡ диагноз ҡуйҙы: «Бәғерем, нишләп йәшереп йөрөнөң, артроз бар бит һиндә, тубыҡтан алған, быуын сире. Ҡайтыу менән, отпускым бөтмәҫ борон, Соль-Илецкиға, Ырымбур өлкәһенә, алып китәм, бер ыңғайҙа ул яҡтарҙы ла күрербеҙ, башҡорттар төҙөткән данлыҡлы Каруанһарайға инеп сығырбыҙ. Тиҙүк аҙа ул сир, алдан алмаһаң. Толпарлылар әйтер, уның духтырлығы, бисәһен дә дауалай алмаҒас, тип.

– Бәс?.. – Шулай тиеүҙән башҡа һүҙ тапманым. Ә башымда һаман бая ишеткәнем уралды: шаманканың рухы миңә ниҙелер киҫәтте булыр. Анау кеҫә телефондарын да юлға алманыҡ, был үҙенсәлекле урында Юғары Көс, Юғары Аң менән тик үҙ асылың арҡылы бәйләнешкә инеү фарыз, тигәндән.

Башҡа туристарға эйәреп барып, Арҡайым архитектураһының бер өлөшөн күҙаллатҡан кескәй генә күсермәһен күрергә лә мөмкинлек тыуҙы. Ергә соҡоп эшләнгән. Экскурсовод, йәш кенә бер егет, Силәбе университеты студенты икән, Тәгәрмәс ҡаланың һыҙма һүрәттәрен дә күрһәтте.

Арҡайым табылған, ә һыу аҫтында ҡалған мөғжизәүи Атлантиданы, әкиәти Шамболаны һаман эҙләйҙәр – ғалимдар, үҙен донъя хакимы тип иҫәпләгән Гитлер кеүектәр, әлеге заман ҡашҡалары олигархтар... Әҙәм балаһы мәғиә ҡөҙрәтенә ышана. Аллаһ Тәғәләнең тап уның үҙенә биргән аҡыл, иман, хис даланын һаҡлау, камиллаштырыу хаҡында етерлек уйланмай. Башында Ер шарының кескәй моделен йөрөтөүен иҫенә төшөрһәсе! Ике ярымшарҙағы мейе йыйырсалары Йыһан менән хәбәрләшә ләһә! Тик... Кешенең ялҡаулығы, битарафлығы арҡаһында ярымшарҙар әүҙем эшләмәй, хатта генийҙар ҙа мейеһенең мөмкинлеген 15 – 20 процент тирәһе генә файҙалана, ти ғалимдар. Бәлки, пирамидалар дәүерендә, даһиҙар, атланттар, титандар эраһында мейе йыйырсалары тулы көсөнә хеҙмәт иткәндер эйәләренә?

Арҡайымда, археологтар билдәләгән шартлы Үҙәк майҙанда, ошо уйҙар уратып алды мине. Бына яҫы таш, ул тәгәрмәс ҡаланың ҡап уртаһына һалынған – тимәк, Ерҙең кендегенә генә. Шул ташҡа яланаяҡ барып баҫтым да ҡулдарымды Күккә һуҙҙым – эске ихтыяжым шулай ҡушты. Һәм... Тыумышымдан бирелгән һәләтем (хәҙер, олпат йәшемдә, быны шулай ҡабул иттем, бала сағымда шөрләй инем берсә) мине күңел күҙе күргән, төпкө аң хәтере аҫҡан халәткә индерҙе. Беләм, Фатихым янымда, ул ҡамасауламай, һаҡта ғына тора.

...Мин – Хөкөм ҡорондамын, имеш. Түңәрәкләп аҡһаҡалдар ултырған, ағинәйҙәр ҙә бар. Бер инәйҙең тубығында китап ята. Ҡөрьәнме? Түгел икән, тим, йондоҙҙарға ҡарап юрай торған фал китабы. Аңым томаланмаған, Заратуштра дәүере – Аллабыҙ инсандарына Мөхәммәт пәйғәмбәрҙе илсе итеп ебәрмәгән, уның аша Ҡөрьән-Кәримде төшөрмәгән әле. Мин – ике арауыҡта, әлмисаҡ һәм бөгөнгө тоташҡан мәл тәҡдирендә. Хөкөм ҡорона шаһитлыҡ ҡылырға саҡырылғанмын. Минең һүҙем, намыҫым бер йәш кенә ир баланың яҙмышын хәл итәсәк. Ҡайһылай ҙур яуаплылыҡ ята иңдәремдә. Хатта, көсөм етмәҫтәй кеүек, иңкәйеп ҡуйҙым. Уф! Егет яңы ғына мәғдән ҡайнатыу эшенә йәлеп ителгән. Бөтә ырыу быуын-быуын һаҡлаған серҙе яттарға аҫҡан, тигән оло ғәйеп ябылған уға. Ярабби!

Ҡанбабалар, ҡамдар миңә һорау бирә. Улар дөрөҫлөктө һиҙемләү һәләтемде һынай, юғиһә, ул мәғдәнселәр янына барып сыҡҡаным, ҡорамалдарын күргәнем дә юҡ таһа. Күрәҙәсе лә түгелмен.

Дөп-дөп... Тек-тек... йөрәк тибешем минуттарҙы һанай, гүйә. Ваҡыт үтә. Ҡор көтә.

Баш ҡанбаба һүҙ ҡушты:

– Арҡайымда сер ине аҡ ҡурғаш, һары баҡыр. Һатҡанмы илде был бахыр? Йә, Ҡатын, ни әйтерһең?

– Нахаҡ ошаҡ һәләк иткән күпме аҫыл кешене... Өйрәнсек кенә егеттең серҙе белер эшеме – күпме миҡдар ҡурғашын, күпме осмот баҡырын һалырға кәрәк ҡаҙанға, теп-теүәлен, тапҡырын?

– Шаһитың бармы, Ҡатын?

– Һүҙем хаҡтыр, Ут әйтер! – Шул саҡ, аҡылым, намыҫым тойомлағанды йөпләп, усаҡ гөлтләне. Был Ҡор өсөн Ут – Тәңре! Ҡапыл, сикәмә осҡон сәсрәнеме, тертләп киттем һәм бөгөнгөмә ҡайттым. «Ҡотҡарҙым хурлыҡлы язанан баланы: башының осонда ҡылыс һындырманылар». – Шулай тигәнемде ап-асыҡ ишеттем дә тамам арындым әле генә кисергән халәтемдән. Эйе, мин Арҡайымдың ҡалын тарихының бер битен хәтер пәйҙәһендә саҡ ҡына асып ҡараным...

Ул арала әлеге туристар, уларға эйәреп Илфаттар, Мусалар менән Сыңғыҙҙар килеп етте үҙәк майҙанға. «Әлдә өлгөрҙөм» тигән уй менән Фатихҡа ҡараным, ул, килешеп, баш ҡаҡты. Уй-хистәремде, борсолоуҙарымды һүҙһеҙ аңлай йәрем. Инде утыҙ йыл бергә йәшәгән ир менән ҡатын өсөн был ғәжәп тә түгелдер? Фатихса – йөрәктәр бер ритмда типһә, унисон булһа әгәр.

Ҡояш һүрәнәйҙе. Ҡайтырға сыҡтыҡ. Юл ыңғайы туҡтап, Ҡарағанда һыу индек. Күрәнлегә оҡшаған был йылға әҙерәк, ҡамыш-күрән араһынан аға, тик ул күпкә тарыраҡ һәм һайыраҡ.

Беҙ, ҡатындар, һыуҙан алданыраҡ сыҡтыҡ. Машина янында кибенеп, кейенештек тә, тамаҡ ялғап алырға тип, сирәмгә ашъяулыҡ йәйҙек. Шул арала Люсяға бер осор башымдан сыҡмай яфалаған һорауымды бирергә өлгөрҙөм:

– Һин афғанда Муса менән Илфатҡа алиһә Изида хаҡында һөйләгәнһең, эйеме?

– Эйе. Боронғо Мысырҙа уға табынғандар, мәҙхиә йырлағандар. «Изида гимны»ның бер өлөшөн ятҡа беләм. Русса инде, үҙегеҙ тәржемәләгеҙ. Тыңлағыҙ: «Я – почитаемая и презираемая; Я – блудница и святая; Я – жена и дева; Я – мать и дочь; Я – руки матери моей; Я – мать моего отца; Я – сестра моего мужа...»

– Ҡапылда ғына башҡортсаға ауҙарырлыҡ түгел, ҡатмарлы, – тинем. Шағирәбеҙ ҙә минең менән килеште. Ғәжәп һүҙҙәр! Аңыбыҙҙы оҙаҡ айҡар әле улар...

Ирҙәребеҙ ҙә оҙаҡ көттөрмәне. Сыңғыҙ ҡулына дүрт томбойоҡ тотоп алған, беҙгә тип өҙгәндер, үҙе һаман да оҙон итеп йөрөткән һары сәстәрен тегеләйбылай һелккеләй, ҡояш нурында, әйтерһең, шул сәстәренән тирә-йүнгә алтын һибелә. Менәүәрә-Гөлсирен ҡулынан төшөрмәй йөрөткән блокнотына ашығып нимәлер яҙырға тотондо. Шыпырт ҡына күҙ һалғайным, «башҡорт тамырҙары, борон, ахыры, арий (арыу) тигән үҙҙәрен»... тигән юлдарҙы ғына уҡып ҡалдым, Сыңғыҙ алдыбыҙға килеп тә баҫты.

***

Арҡайым ғүмер-ғүмергә иҫемдән сыҡмаҫ, моғайын. Яңыраҡ, ул серле төйәккә сәйәхәт ҡылғанға бер йыл тирәһе ваҡыт уҙғас, Шамантау ауазы ҡайтанан яҙмышыма килеп ҡаҡлыҡты, көнөмә килеп инде. Астрология дәресендә әлеге Арҡайымды, унда борон замандарҙа йондоҙҙарға ҡарап яҙмыш юрауҙары, ҡояш йөрөшөн һынландырған тамғалары (свастикаға оҡшаған) хаҡында һөйләп, дәүер остарын ялғап, сал тарихлы, сор хәтерле халыҡтың балалары икәнлектәрен уҡыусыларымдың ҡолаҡтарына киртеп ҡайтыуыма, Фатихым ҡабаланып килеп инде. Нимәгәлер ныҡ тулҡынланған. Тупһаны ашатлау менән һөйләй ҙә башланы:

– Шәрифә апай, ҡәйенбикә, ейәнен күтәреп килгән дауаханаға, ахмалға төшөп... Нимәлер йотҡан, ти.

– Ҡәнзәфәрме?! – Түҙмәй, бүлдем.

– Эйе. Ярай ҙа, күреп ҡалған, ярай ҙа, яҡын йәшәйҙәр, ярай ҙа, шундуҡ килтергән...

– Тегеләре ҡайҙа ҡараған, Руслан менән килен, тим?

– Магазинға тип сыҡҡандар, буғай.

– Шунан, Фатих, һуҙма?!

– Төймә йотҡан, уныһы трахеяға ҡапланған. Кислород бармағас, йөрәк бынабына туҡтаясаҡ. Ваҡыт – минутлап түгел, секундлап ҡына ҡалған. Анестезия яһап торорға ла форсат юҡ. Өҫтәлгә һалдым да муйынын хирургия бысағы менән тиштем, трахеяға көпшә ҡуйҙым, бәхеткә күрә, төймәнән аҫҡараҡ тишкәнмен. Юғиһә... Шунан инде – операция, еренә еткереп. Ҡотҡарҙыҡ. Искәндәр әйтмешләй, в рубашке родился пацан. Руслан, ишетеп килеп етеп, эште боҙа яҙҙы, саҡ ҡулға килеп йәбешмәне, бысаҡ ҡаҙағанды күреп. Медсестра ҡулынан тотоп ҡалды.

Ҡәнзәфәр, сабыйыбыҙ, иҫән, иншалла.Оло улдары институтта уҡып йөрөгәндә киленебеҙ тағы бәпес килтерҙе шул. Быға ҡайғыраһы түгелсе, барыбер йәнем көйөп китте: балаһын йүнләп ҡарамай, ҡунаҡҡа (Шәрифә апайым менән Әлтәф еҙнәмдең пенсияға сығыу менән ауылға күсеп ҡайтып, атай йортонда һәттөйоҡ донъя көтөп ятыуҙары) килгән арала ла мода журналы ҡарап ултырғандыр әле, күп булһа. Модельер, имеш, берәү... Декретта ултырғанда ла эшен ҡайғырта, йәнәһе! Ҡарасәле, анау шаманка рухы бар икән, ысын икән – иҫкәрткәйне ләһә! Ул саҡта яңы тыуған сабый ине Ҡәнзәфәр. Исемен ҡартәсәйемдең дәфтәренән ҡарап ҡушҡайныҡ – арыҫлан, тимәк, көслө, зирәк һәм һауһаҡ булыр, тип.

Шул дәрәжәлә әҫәрләндем – Фатихымдың ҡулдарын ҡулдарыма алып, бармаҡтарын үптем. Аҙаҡ, икебеҙ ҙә тынысланғас, уйлап ҡуйҙым: көн дә ошондай кисерештәргә юлыҡһам, йөрәгем күпмегә сыҙар ине икән. Ә минең йәрем сыҙай! Уға, ауыл дауаханаһы табибына, универсаль белгес булырға кәрәк шул. (Әлдә генә анау ординатураһына арҡыры төшмәгәнмен!) Толпарлының байтаҡ сабыйына донъяға килергә ярҙам иткәнен белгәс, Шырмый Иҡсан уны «кендек атаһы» тип тә шаяртҡылай. Ә күпме өҫтө-өҫтө уҡырға кәрәк табип һөнәрен һайлаған кешегә. Медицина урынында тик тормай, туҡтауһыҙ үҫә, үҙгәрә, яңы ысулдар, технологиялар, дарыуҙар уйлап табыла. Рух ныҡлығы, ҡаһарманлыҡ,– тиһәм дә, яҙа китмәҫ – талап итә көндө лә төндө лә айырмай торған был фиҙакәр хеҙмәт. Практика плюс эрудиция, клиник фекерләү, интуиция, тип тә өҫтәр ине врачтар үҙҙәре...

Мәүлиҙә ошо арала иҫкә төшөп тик торҙо. Арҡайымда юҡҡа һеркелдәмәгән йөрәгем, хәсрәткә булған. Әхирәтем ата-әсәһенә телеграмма һуҡты: «Муж погиб. Авария на шахте. Похороны послезавтра». Украинаға Ишбирҙе генә барып әйләнде. Олексийҙы бергәләп иҫкә алып ултырҙыҡ, ул ҡайтҡас.

– Еҙнәмә, шахтаға йыш төшөргә тура килгәс... бына... – Ишбирҙе, көрһөнәкөрһөнә, фажиғә тураһында һөйләне – ун бер шахтер һәләк булған икән.

– Унда дүрт меңләп башҡорт йәшәй, тигәйне Мәүлиҙә, ул бит хәҙер «Украина башҡорттары йәмғиәте» ағзаһы, – тип, һүҙҙе башҡа яҡҡа бороп ебәрҙе Әмин абый, илап ҡына барған Рабиға апай яғына ымлап. – Хәтерләйем, 1948-ҙә Башҡортостандан, бер вагон тулып, йәштәр украиндарға ярҙамға китте. Күптәре шунда тороп та ҡалғандыр. Күренекле башҡорттарҙың исемдәрен дә әйткәйне Мәүлиҙә, береһе генә иҫтә: бер осор Нур Ниғмәтуллин, халыҡ шағиры Рәшит Ниғмәтиҙең улы, Украинаның атом энергетикаһы министры булған. Вәт.

– Ана нисек? Белмәй инем. Ә Башҡортостанда илле биш мең тирәһе украин йәшәй... – Әйтеремде әйтеп тә бөтөрмәнем, Әмин абый теҙеп алып китте:

– Урыҫ, татар, сыуаш менән мариҙан ҡала, улар – иң күп һанлы халыҡ беҙҙә. Хохол менән донъя тулған ул. Вәт. – Абыйҙың телмәренә ошо һүҙ дегәнәк кеүек йәбешкән икән, шуға иғтибар иттем. – Ҡыҙымды, кейәүем булмағас, ҡалдырмайым унда, ҡайтһын! – шулай тип һалды ул көтмәгәндә. Түрбашта бер үҙе мышҡылдап ултырған Рабиға апай беҙҙең янға йүгереп килеп сыҡты ла: «Әтеү. Вәт!» – тип кире инеп китте.

– Сәнәһе эйәрер. Радмирҙы ҡуҙғатмаҫтыр. Ғаиләһе бар, тамырланған. – Ишбирҙе лә атаһының фекерен йүпләп ҡуйҙы.

Саҡ сәбәкәйләп ебәрмәнем, әлдә ни сәбәп менән йыйылғаныбыҙҙы иҫләй һалдым.

56

Фатих кискеһен йыш ҡына духтыр Искәндәрҙе алып инә. Алдан әйтеп ҡуйғайны, дауаханала тамаҡ ялғап йөрөй, өй ашы эләкмәй уға, яңғыҙаҡҡа, килгеләһен әле, тип. Үҙем нишләп был хаҡта уйламағанмындыр?

Ошо арала Искәндәр ябығып, йонсоп киткәндәй. Тәмәке тартмай ине элек, хәҙер туҡтауһыҙ һура. Күҙ ҡарашымдан аңлай ҙа: «Беләм, Нурия апай, доктор пример бирә. Брошу курить», – ти, әммә ташлай алмай. Һәләк кенә итте һыу һөлөгө кеүек егетте анауы Миләүшә. Теге ваҡыттан һуң, Әшрәфтән үс алғас, Стәрлегә шылғайны. Һирәк-һаяҡ ҡайтҡылап йөрөнө лә юҡ булды. Испанияға сығып киткән, тип ишеттек. Иҡсан ағай әйтмешләй, «тап үҙенең местоһы» – испандар һымаҡ дәртле ләһә. Ә Искәндәр көттө. Көтә. Эстән генә һыҙа. Ауырыуға һабашмаһа ярар ине.

Һыйырҙы һауып, һөттө һөҙөп ҡуйыуға, Фатих шылтыратты, икәүбеҙ, тип. Тиҙ генә аш-һыу хәстәрләнем. Искәндәргә төнгө дежурға икән, оҙаҡ ултырманы. Яңы һауған һөт һалып бирҙем уға, көрөшкәне күтәреп эсеп ҡуйғанына кинәнеп ҡарап торҙом. Туҡмас һалып итле аш бешергәйнем, һөҙләкле генә итеп, уны ла яратып ашаны. Шунан ҡапыл төҫө боҙолоп, усы менән һул яҡлап түшен ыуалап алды.

– Ҡалаҡ һөйәге аҫтына бирәме? – Фатих һораша башланы.

– Йөрәк ауырта, тиер инем, үҙем врач булмаһам, – тине Искәндәр, ағарынып китеп. – Ашағандан һуң тота башлай. Сода болғап һыу эсһәм, ебәрә. Ашҡаҙан...

– Белә күрә нишләп дауаланмай йөрөйһөң?! Иртәгә үк – районға! Тотош тикшерел, зонд төшөртөп ҡараттыр. Ашҡаҙан шаяртмай! Операцияға не доводи! Срочно – диета, консевартивное лечение, коллега.

– Үтә ул. Эт эсенә һары май килешмәй, тиҙәрме әле толпарлылар? Это у меня от домашней еды...

– Юҡты һөйләмә, ҡустым. Врач үҙенең сирен алдан ала белмәһә, ташҡа үлсәйем булыр.

– Ташҡа үлсәйем?! Ашҡаҙанда что ли таш?

– Ҡарауһыҙ ирҙең уныһы ла ихтимал. Курам на смех була һинең медиклығың, если вовремя не распознаешь собственный недуг – вот что.

– Понятное дело. Аңлашыла, ташҡа үлсәйем... Барыбер тотош белеп бөтөп булмай телегеҙҙе, башҡорт араһында үҫеп, ярты ғүмер инде ошонда йәшәһәм дә. – Искәндәр бошоноп ҡына әйтеп ҡуйҙы.

– Вот-вот, тағы ярты ғүмер, то есть хотя бы до восьмидесяти йәшәргә обязан, – тине Фатих, дуҫының арҡаһынан ҡағып. Мин дә һүҙ ҡаттым:

– Халыҡ медицинаһы ярҙам итмәҫме? Андыҙ төнәткәйнем, тағы ике көндән әҙер була.

– Андыҙ ул девясил буламы?

– Эйе. Ә иң һәйбәте – алтын тамыр, родиола йәғни. Мин уны түтәлдә үҫтерәм. Аҙна элек кенә, дарыуға тип, тамырын турап спиртҡа һалып, баҙға ҡуйҙым, ҡараңғыға. Көнөнә өс тапҡыр бишәр тамсы эсергә, ашарға ярты сәғәт ҡалғас.

– Башта ҡаралып ҡайтһын әле, гастроэнтерологтан үтеп. Минең диагноз: почти язва, эрозия.

– Значит, точно так, Фатих Рамазанович, һеҙ бит диагност от Бога, – тине Искәндәр.

Башын баҫып дауахана яғына атлап барған егеттең артынан тәҙрәнән ҡарап ҡалдыҡ. Икебеҙ ҙә бер юлы көрһөндөк. Яҡын кешебеҙ ҙәһә.

Фатихтың диагнозы дөрөҫләнде. Искәндәр тәмәкеһен ташланы. Дауаланды, мин эшләгән дарыуҙы ла эсте. Һөттән-катыҡтан да өҙмәнем. Бер айҙан тағы тикшерелгәйне, «зарубцевалось» тип ҡайтты. Иншалла.

– Маладис, коллега, – тине Фатих. – Инде һаҡлан, ҡустым. Етәр, мөхәббәт сиренән ҡотол, баһаңды күтәр, ана, ауылда ҡыҙҙар бөтмәгән, помани пальцем, һиндәй егеткә...

Әллә Фатихтың һүҙе фәрештәнең «амин» тигән сағына тура килде – күп тә үтмәне, дауаханала физиотерапия бүлеге асылды ла яңы белгес килде – үҙебеҙҙең Әхиәрҙең ҡыҙы лаһа! Йәше егерме биштәр тирәһендә барҙыр. Ауылда егеттәр күп, кемеһенең өлөшөнә төшөр көмөш икән?

Ә ҡыҙ Искәндәргә ғашиҡ булды. Тәү күреүҙән. Серен миңә систе башта. Улай ҙа иҫкәрттем ҡасандыр Миләүшәне ныҡ яратыуын, оҙаҡ яңғыҙ йөрөүен – бәс, балалыҡ дуҫымдың ике ул араһында һөйөп кенә үҫтергән ҡыҙы лаһа. Егеттең дә дәрте ҡуҙғалды, сирләп алыуы уға йәшәү тәмен бирҙе, күрәһең, яңы врачты үҙенә ылыҡтырҙы.

Фатих хәлде Әхиәргә белгертте. Уныһы Искәндәрҙе, үҙ милләтем түгел, етмәһә ҡарт абышҡа, тиеберәк ҡыр типкәс, ашыҡма, башта әҙме-күпме һынашһындар, тип күндерҙек. Тыңланы дуҫыбыҙ. Егеттең арыулығын аңлап алғас, йәштәргә аяҡ салманы.

Искәндәрҙең өйләнгәнен белгәндәй, юрамалдай, шул тирәләрҙә Испаниянан олпат ҡына бер сеньор менән ыҫмалалай ялтыр ҡара сәсле, ҡуңыр йөҙлө ике малайын эйәртеп, Миләүшә ҡайтып китте ауылға. Гөж килде Толпарлы. Туғантыумасаһына ғына түгел, күрше-күләненә лә бүләк тараткан, ти. Сеньоры, ире икән, байҙыр, күрәһең. Икәүләшеп урамдан үтеп-һүтеп йөрөүҙәре үҙе бер тамаша ине: Миләүшә һомғол кәүҙәһенә һыланып торған күлдәк кейеп, тауис ҡоштай елпенһә, тегеһе сигара тартып, тирә-яҡҡа иҫе китеп, һәлмәк кенә атлай, уның бер баҫыуына, эргәһендәге ике-өс баҫа. Ә иң ҡыҙығы клубта булған, мин күрмәй ҡалдым уныһын.

Өфөнән концерт килтерәсәктәрен белә инем, ниндәйҙер мәшәҡәт сығып, бара алманым. Шунда булған теге ҡыҙыҡ. Миләүшә, баш ҡала артистарын нисек күндергәндер, сәхнәгә бейергә сыҡҡан. Испандарҙың данлыҡлы «Фламенко» тигән бейеүен башҡарған, ти. Нисек килештергәнен, ауыл сәхнәһендә ут өйөрмәһеләй өйөрөлөүен күреп, өфөләрҙең күҙе дүрт булды, тип ғорурланып һөйләне күргәндәр. Үҙебеҙҙеке! Ә инде сеньорҙың сәскә гөлләмәһе тотоп сығып, бар ғәм ҡарап торғанда Миләүшәнең алдына теҙләнеүен, уның ҡулдарын үбеүен ҡабатҡабат сурыттылар. Мин иһә ҡайҙалыр уҡыған юлдарҙы иҫкә төшөрҙөм: «Испанский танец – это огонь, вихрь, любовь, смерть...»

Таштояҡты ауыл ғәфү итте. Булған-бөткән, буяуы һеңгән, йәғни. Бәхетен тапҡан даһа. Мәҡәл, ҡатын ҡырҡтан уҙған, уҡаһы ҡойолған, тип торғанда, әҙәмде шаҡ ҡатырырлыҡ итеп бейер, кәттә кейенеп уйнаҡлап йөрөр өсөн бәхетле булыу кәрәктер ҙәһә?!

***

Көтмәгәндә Асиянан хат килеп төштө. Ҡайтҡылап тора, көн аша телефондан һөйләшәбеҙ, нишләп яҙырға булған, тип борсолоп киттем. Уҡығас, ҡойолоп төштөм, кейәүгә сығам, тигән дәһә. Саҡ өсөнсө курсҡа күскән... Фатихҡа шылтыраттым, ҡайтып әйлән әле, тиҙ генә, тип. Мин өйҙәмен – көҙгө каникул мәле. Аптыраптыр, шундуҡ, эшен ташлап, килеп тә инде. Ҡарашында хатта ҡурҡыу бар, улайтып ваҡытһыҙ бимазаламай инем шул.

– Ашығаһыңмы? – Үҙем күреп торам, өтәләнгәнен.

– Минең һәр минут хисаплы...

– Асиянан хат килде.

– Хат?!

– Кейәүгә сығырға йөрөй, имеш.

– Бер барғанда күргәйнем егетен, әйттем дәһә. Әллә?

– Ауырлы микән, тиһеңме? Уф!

– Нурия, хафаланма ул хәтлем. Медицина институтында студент ваҡытта өйләнешеү – ғәҙәти хәл, дөйөм ятаҡ коридоры тулы коляска...

– Бала?! Ә уҡыуы?

– Уҡыр. Кейәү егете лә шунда бит, бер үк курста, алмаш-тилмәш ҡарарҙар әле бәпестәрен. Ярай, төшкө ашҡа ҡайтҡанда тағы һөйләшербеҙ был хаҡта. Шылтыратмай тор әлегә, йәме, бәғерем.

– Йәме.

Мәктәпте алтын миҙалға бөтөп, шул йылды уҡ мединститутҡа инеп кит тә хәҙер ата-әсәңде шулайтып ҡайғырт, ә? Ошо уйҙан шып туҡтаным, тәүбә, ниндәй ҡайғы, юҡҡа туҙынмайым әле, тип. Шул минутта телефон шылтыраны. Асия икән.

– Хатты алдыңмы, әсәй? – Тәүге һорауы шул булды.

– Башҡа һуҡҡандай иттең.

– Вәсилдең ата-әсәһе отпускаға ҡайтты, уларҙы һеҙҙең менән күрештерергә инек.

– Вәсил? Урыҫ егетеме ни?!

– Юҡ, башҡортсо. Боронғо исем, ти. Рәйхана ҡартәсәйҙең дәфтәренән ҡара әле?

– Ярар. Ә ата-әсәһе ҡайҙан?

– Йәштән Себергә сығып киткәндәр, атаһы – буровик, әсәһе – бухгалтер. Өфөлә фатир һатып алмаҡсылар ошо килгәндәрендә. Ә сығыштары менән улар Дыуан районынан.

– Ҡыҙым, ниңә улай ҡапыл?

– Абортҡа бармайым!

– Тәүбә!

– Атайым асыуланыр микән?

– Асия, килегеҙ. Каникул саҡ башланып тора, ЗАГС, туй – бергә үткәреп ебәрергә лә ҡуйырға. Һуҙмағыҙ. Килеп һоратһындар башта!

– Беләм, әсәй, хәүефләнмә. Бына, буласаҡ ҡәйнәм янымда тора, трубканы бирәм. – Тағы ҡойолоп төштөм.

– Ҡоҙағый, шулай тиһәм дә ярайҙыр, балаларға ҡаршы төшмәйек. Беҙҙең ваҡыт наҡыҫ, бер ыңғай туйға әҙерләнеп барабыҙ, көтөгөҙ!

– Ярар, беҙ ҙә риза. – Шулай тинем дә өҫтәй һалдым: – Атаһы ни тиер?..

Аҙаҡ йәнем көйөп алды әҙерәк: ҡайһылай өҙөп һөйләшә, «Ул инәһе – губернатор, ҡыҙ инәһе – боҫоп ятыр» тигән әйтемде иҫеңә төшөрмәй түгел төшөрөрһөң. Уҫал ҡәйнә булыр микән?

Һөйләшкәнсә, ҡоҙа менән ҡоҙағый (беҙҙән йәшерәктәр икән), балаларҙы эйәртеп, тейәнеп килеп тә төштөләр. Өҫтәлгә ҡуйырға ризыҡты мул алғандар, бүләктәрҙе өйөп килтергәндәр.

ЗАГС үҙебеҙҙең ауыл Советында булды, туй – шул уҡ көндө ҡыҙ яғында, иртәгәһенә – Өфөлә, ресторанда ҡоҙалар уҙғарҙы. Себерҙә эшләгәндәрҙең кеҫәләре ҡалын икән, балаларға туй бүләге итеп бер бүлмәле фатир алып бирҙеләр ҙәһә.

Июндең 27-һендә, 1998-ҙә, мин иллегә баҫырға торғанда, ейәнебеҙ тыуҙы. Ғүмер буйы күңелемдә йөрөткән исемем, тип, ҡоҙағый уны Фидан тип ататты. Шунда иҫемә төшөп, ҡартәсәйемдең дәфтәренән кейәүемдең исеменә тәфсир эҙләп таптым: Вәсил – айырылмаҫ дуҫ, тиелгән. Бәс, Фидан исеме лә бар, мин уны бөтөнләй сит-ят телдән килгәндер, тиһәм, төркиҙән дәһә – фиҙакәр, тырыш мәғәнәһендә.

Ҡоҙа-ҡоҙағыйымдан уңдым. Фидан тыуғас, Асия менән кейәү июль-август беҙҙә йәшәнеләр, бала ҡулға эләккәнсе ҡараштыҡ. Сентябрҙән уҡырға киттеләр, тап шул саҡ ҡоҙағыйым килеп төшөп, Фиданды йәш ярымғаса тәрбиәләште, йәслгә биргәнсе. Декрет отпускыһы юллап алдым, ти. Шулай мөмкин икәнен белмәй инемсе.

Ашығып ҡына Айгиз инеп сыҡты, Асияларға ебәрәһе әйберегеҙ юҡмы, тип. Ул ситтән тороп ауыл хужалығы институтында, үҙе хыял иткән урман факультетында, уҡып йөрөй, әле шунда сессияға йыйынған, тимәк. Яңы ағыҙған ҡаймаҡты көршәктән банкаға һалып тотторҙом. Оҙаҡламай бөтә инде, интернатураһына ҡалырмы икән тағы, атаһы һымаҡ, тип һөйләнгән булдым, Айгиздең нимәлер әйтергә теләүен, ҡыйыулығы етмәй тороуын һиҙеп.

– Нурия апай, һеҙгә Чечня һуғышына бәйле яҙмаларымды ҡалдырайым тигәйнем, бәлки, кәрәге тейер, романығыҙға ҡыҫтырып ебәрерһегеҙ, – тине ул, ниһайәт, ҡулыма папка тотторып.

Урыҡ-һурыҡ булһа ла яҙышҡылауымды белмәгән әҙәм ҡалмаған, имеш. Роман тип тороп! Хәҙер ярты юлда туҡтарға түгел инде, бәс – ауылым күҙәтә. Осрағанда «ил көтә ләһә» тип ебәрә бәғзеләр был тәңгәлдә. Толпарлылар шулай ҙурҙан төшөп һөйләшергә күнеккән, ауыл – илдең түле, хәтер сығанағы, тип тә инанған улар.

Егет Мәҙинәгә өйләнде. Булатты (исемен шулай ҡыҫҡартып яҙҙырҙылар) уллыҡҡа алдылар. Был йәһәттә әллә ни ҡатмарлыҡтар тыуманы, илдә етем әҙәйгәндән кемгә зыян? Малай тиҙ эйәләште, хәҙер мәктәптә уҡып йөрөй. Шартлатып башҡортса һөйләшә. Үҙе зерә матур, ҡара бөҙрә сәсле, ҡылыс танаулы. Бейергә әүәҫ, биш йәшенән Зөлфәр уға тау халыҡтары бейеүен һалып бирҙе. Милли кейем кейеп ала ла теттерә генә бейеүҙе – ҡандан күскән гендар, нәҫелдән бирелгән һәләт, ни әйтерһең?

Айгиз менән Булатҡа, икеһенә бергә, «чечендар» тигән ҡушамат йоғоп ҡалды. Нишләтәһең, буяуы уңмаҫ хәтирәләр бит, иҫ белгән баланан нисек йәшермәк нәҫел тамырҙарын – белеп үҫеүе хәйерлерәктер ҙә. Хәҙер ул өлкән ағай, ғаиләлә тағы ҡыҙ бала үҫә. Булаттың һеңлем тип йәнен бирерҙәй булып тороуы үҙе бер үрнәк тиҫтерҙәре өсөн. Тау халыҡтары уғата туғансыл була, тигәндәре ысын икән.

Ҡалын ғына папка эсенән тәүҙә блокнот килеп сыҡты, русса шиғыр теркәп ҡуйылған: «...Чем ближе к смерти, тем чище люди... Но когда на меня смотрели эти пыльные глаза человечьи, не по-птичьи, да не по-овечьи, по-людски они меня грели, а я пел им рокн-рольные песни, говорил, что все будет нормально...» тигән юлдар таныш һымаҡ? Уларҙа авторҙың ижад кешеһенә хас намыҫ әрнеүен тойҙом... Иҫемә төштө! Яҡташабыҙ Юрий Шевчуктың йыры.

Күҙем һайлап, һөҙөп ала ҡапылда Айгиздең яҙғандарын: «Һалдат әсәләре» комитеты мәғлүмәтенсә, Чечняла ун меңдән ашыу улдарыбыҙ башын һалған. Урындағы халыҡ араһында юғалтыуҙар һикһән меңдән дә кәм түгел, шул иҫәптә Зарина ла...»

Ярар, иркенләп ултырып уҡырмын тип, папканы ябырға итһәм, ике яҙма ҡойолоп төштө. Эйелеп алдым. Бик матур итеп, уҡытыусы теле менән әйткәндә, коллиграфик почерк менән яҙылған дәфтәр бите иғтибарымды тартты. Зарина Үмәрованың иншаһы булып сыҡты. Туғыҙынсыны тамамлаған, һуғыш арҡаһында унға бара алмаған, тигәйне Айгиз.

Бер табаҡ ҡағыҙ баштан аяҡ атыш-үлтереш күренештәре, һуғыштың сәбәптәрен төшөнә алмай асырғанған бала күңеленең тәьҫораттары менән тулған. Таныштары, күршеләре тарыған фажиғәләр тасуирланған. Ҡайҙа каникулдың күңелле мажаралары, кескәй йондоҙсоҡтар булып яуған ҡарға, аҡ бүрек кейеп алыҫтан бағып торған бәһлеүән тауҙарға һоҡланыу?! Бер урында: «Сунжа туңды. Уның йыры боҙ аҫтында тонсоҡто. Ҡарт чинара төбөндәге эскәмйәлә ғашиҡ парҙар ултырмай, сал сәсле олатайҙар гәп ҡормай», – тигән өс һөйләм бар. Һәм ошо өс һөйләм, тағатһаң, тотош романға торошло. Сунжа хаҡында әҙәбиәттән уҡығаным бар, ул – Грозный тупһаһынан аҡҡан йүгерек тау йылғаһы. Борма-борма, тип яҙалар, беҙҙең Һигеҙбөгөл һымаҡ микән? Сунжаның уртаһы, ағымы көслө һәм шәп булғанғамы, ҡыштарын туңып бармай, ҡаранлап ята, тигәндәре иҫтә ҡалған. Чечня урмандарында сәтләүек, бук, граб, имән, әлеге чинара, ылыҫлы ағастар үҫкәнен беләм – географмын даһа. Түбәләре күккә олғашҡан мәғрур тауҙар, текә таш ҡаялар һәм йәшеллеккә, сәскәгә сумған, емешкә бай тигеҙлектәр – тәбиғәте үк был төбәктәге халыҡты ҡылыҡһырлап тора кеүек.

Ә бала йөрәге фажиғәне нисек тәрән һәм нескә тойған: туңған йылға һәм тонсоҡҡан йыр!

Ә был хатта кемдең яҙмышы икән? Астым. Валера дуҫынан. Бер өлөшөн генә уҡыным да оҙаҡ ҡына өй эсенә, үҙемсә ҡәҙерләп, дәртләнеп йыйған-йыйыштырған күркәм генә донъяма күҙ йәштәрем аша ҡарап ултырҙым. Тыйыла алмай иланым. Донъям төҫ ташланы кеүек, иренемә, тамағыма тоҙло йәштәремдең ҡырҡыу әсеһе яғылды. «Хәтерләйһеңме, брат, таң атҡанда Грозныйҙың көньяғындағы тау теҙмәләре ғәжәйеп төҫкә инә торғайны, берсә алтынһыу һары, берсә йәшкелт, берсә күкшел. Шул мөғжизәне күрер өсөн ташланымы икән мине яҙмыш Чечня тамуғына? Сашок Пиаф, һине Мәскәүгә оҙатҡандан һуң ай ҙа үтмәҫтән, һәләк булған. Кәүҙәһен үҙ яғына ҡайтара алған икән командование. Сашок бәхетле, минең кеүек тере мәйет түгел. Күҙҙәрем генә ҡыймылдай, күрә, ҡолағым ишетә – шул минең терелегем. Ҡул-аяҡ йөрөмәй, һөйләшеүем дә ауырлашты. Ә миңә бит 22 генә йәш. Үҙемә ҡул һалырға тәүәккәллегем етмәй. Йәшәге килә, брат! Ә барыбер, төнгә ингәндә, әсәйем йоҡо дарыуы эсергәндә, уянмаһам да ҡуйһам ине, тип теләйем. Йоҡлар алдынан теге Кавказ армыттарын күҙ алдыма килтерәм: улар Каспийға тиклем һуҙылған – 150 километр. Вот так, браток. Хуш».

Хат аҙағында өҫтәмә бар: «Айгиз, Валераның әйткәндәрен мин, бер туған апаһы, яҙҙым. Уға, зинһар, яуап бирегеҙ, күңелен күтәрегеҙ. Үтенәм!»

Папканы ябыр алдынан баяғы блокноттың артҡы битенә эре хәрефтәр менән яҙып, аҫтына һыҙып ҡуйылған юлдар күҙемә салынды. Мәҙинәнең егете өс йыл бер чечен ауылында әсирлектә ҡоллоҡта тотолоп, ҡайтҡан, баш ҡалала милицияла хеҙмәт итеүен дауам итә икән. Уны, йәйын табып, ете йәшлек кенә кескәй чечен ҡыҙыҡайы ҡотҡарған. Зиндан ишеген асҡас: «Рөхсәтһеҙ эш ҡылдым, тик тотолма, зинһар, Алла хаҡына!» – тигән бала. Шул балала, тимәк, ил-ҡәүемендә лә, бөтөнләй өмөт юҡ, тип нисек әйтәһең ошонан һуң? Барҙыр өмөт, иншалла, барҙыр.

Тәҙрәне оса-килә генә ҡарабаштурғай суҡып китте, уның мәшәҡәте артты шул һуңғы осор: Хәйри ағай олоғайып китте, өйөнән сыға һалып бармай хәҙер. Уңарсы ҡапҡа асылды, Аҡман Ҡара ағайҙың ҡыҙҙарының береһе күренде, почтальон сумкаһы Ҡарағаш Мәсрүрә иңенән уға күскәйне. Ҙур конверт болғап инеп килә, моғайын, Мәүлиҙәнәндер. Әхирәтем өс көн элек кенә шылтыратҡайны, бында йөҙҙәрсә гектар майҙанда Тәбиғәт паркы асылды, һиңә фотоларын һалып ебәрҙем,тип.

Ҡоҙаса ғына түгел, элекке уҡыусым да яңы почтальонкабыҙ, хатты өйгә үк индереп, ҡулыма тоттороп китте. Аса һалдым. Бер фотоға ҡарап аһ иттем: ҙур дүрткел таш өҫтөндә Ыласындың һәйкәле! Бүреһуҡҡан олатай ҡанатын бәпләгән, Толпарлы күгенә сөйгән ғорур ҡош – ҡойоп ҡуйған шул үҙе. Һандыҡташтың ҡабырғаһында соҡоп яҙылған һүҙҙәр бар: «Прошлое, настоящее, будущее едины в тебе». Түш яғында ла яҙыу бар икәне күренә, тик тотош уҡырлыҡ түгел, өҫкө юлдарҙағы «Кто вы?.. Куда идете?.. Что ищете?..» тигән һүҙҙәр генә асыҡ төҫмөрләнә.

Фатих менән өйләнешкән йылды Украинаға сәйәхәт итеүебеҙ, дала ҡосағында сайҡалған сал ҡылғандар иҫкә төштө. Хат ҡағыҙынан тимъян еҫе һирпелгәндәй итте. Һы... Еҫ-тойом хәтере кешенең тәүге, иң боронғо хәтере, ти ҙәһә.

«Паркка улым менән барып  ураныҡ, – тигән әхирәтем. – Теге юлы һеҙ Олексий менән сәйәхәт ҡылған  «Таш ҡаберҙәр» ҡурсаулығы ла уның эсенә ингән хәҙер. Петроглифтары, һин әйткәнсә, башҡорттарҙың боронғо тамғаларын хәтерләтә икән шул... «Бында ҡылғандың «Ҡыҙыл китап»ҡа индерелгән 12 төрө үҫә,»– тип аңлатты Радмир, минең бер ғәжәйеп үләнгә иҫем китеп ҡарап тороуымды шәйләп. Украин ҡылғаны, тик ошонда ғына һаҡланып ҡалған, ҡуш башаҡлы эфедра тип атала икән. Аграрныйҙы тамамланы бит улым, дипломды «Реликтные  растения» тигән темаға яҡланы. Тәбиғәтте һаҡлау министрлығына ҡараған ведомствола эшләй.

Бөйөк далаға: «Һөйгәнем өсөн һин – «Земля батькив», миңә – килен булып төшкән ер. «Краси такой не зустрить ниде», – ти торғайны Алеша, тыныс йоҡлат уны ҡосағыңда, Донеччино!» – тип өндәштем. Хушлаштым. Уф,ҡыҙый, дала мине илап оҙатып ҡалды. Ышанаһыңмы? «Это кречет белый плачет, прощается с вами, чует», – тине улымдың шоферы...»

Хатын уҡығас та әхирәтемә шылтыраттым.

– Ҡайтаһыңмы, ҡыҙый?! Ҡайт! Бында эш тапмаҫһыңмы ни? Ана, Сыңғыҙға әйтһәм, хәҙер табып бирер, таныштары быуа быуырлыҡ. Сәнә лә бында талпыналыр, һине ҡалдырып китә алмайҙыр.

– Әлләсе. Бында мине ситләтеп ҡыланалар...

– Тәүәккәллә! Улың урында эшләй, үҙе ҡойоп ҡуйған украин, бирешмәҫ. Ә Сәнәне айырма Толпарлынан. Әмин абый өмөтләнеп йөрөй, ейән-ейәнсәрҙәрем сығанаҡҡа, шишмә башына ҡайта, тип.

– Сыңғыҙға әйтеп ҡара, әтеү. Сәнәгә эш табылырмы икән? Һөнәре һирәк – флорист, ауылда уның ни хәжәте? Ботаника уҡыта ала инде алыуын, ә мәктәптә кем уға сәғәтен бирергә тора тиһең.

– Бизнес асыр. Сәскә үҫтереү, сәскә һатыу бизнесы. Эргәлә генә ҡалалар, машина зыйлап йөрөп ята.

– Заманы килде инде эшҡыуарлыҡҡа. Сәнәнең тәжрибәһе лә байтаҡ, колледжды бөткәс тә бер фирмаға урынлашты, маҡталып эшләй.

– Ә ул ултыртҡан ләлә-тюльпандар мәктәп оранжереяһында гөрләп сәскә атып ултыра, 15 сортҡа етте, тиҙәр. Нисәмә төрлө роза килтереп үҫтерҙе. Ҡулынан гөл тама ҡыҙыңдың, әхирәт.

– Ҡайтырға кәрәк, иветә, ҡыҙый. Бында сыҡҡан пенсиямдың, уны көтөп ҡалам тиһәм, Рәсәйҙә ярамауы ла бар, бүтән дәүләт... Әшрәфтәр ҙә ярҙам итер, балалар ғаилә ҡорһалар, мин дә буш ҡул ҡайтмам, әҙ-мәҙ аҡса төйнәгәнмен. Фатирымды һатырмын, улым риза.

– Әсмә хәҙер фермерша бит, беләһең. Башҡорт аттарын үрсетәләр. Талымһыҙ ул тоҡом, ҡыш та ҡар аҫтынан үлән типсеп, көтөүе менән тибендә йөрөй. Бүренән дә ҡурҡмай беҙҙең өйөр айғыры, маңлайына сәсрәтә тибә лә ҡуя, ти Әсмә. Шәкетау бүреләре килеп-килеп ураған бер осор... Әшрәф, МТС банкрот булғас, осһоҙға ғына трактор, комбайн, төрлө ҡорамал һатып алды, хәҙер баҫыуҙа үҙенең игенен үҫтерә, колхоз тарҡалды лаһа.

– Кем уйлаған тиһең, ә, ҡыҙый?

– Өс агрокооператив бар беҙҙә. Береһе – Әшрәфтәрҙеке инде, икенсеһе – Малик бай нәҫелендә, Мөхәрләм бүләрҙәрендә, Күк юрға тоҡомон һаҡлап алып ҡалып, хәҙер еңел тояҡлы арғымаҡтарын аукциондарҙа һаталар. Бәхеттәренә, бер бай инвестор килеп тапты уларҙы. Сыңғыҙҙың фермаһын Аҡназар ағай менән улы, Айсыуағы, тотоп тора.

– Ә бүтән халыҡ, кәсепһеҙ ҡалғандар нишләй?

– Көнләшеп, аяҡ салыусылар булды. Әшрәфтең «Беларусь» тракторының тәгәрмәстәрен балта менән сапҡылап киттеләр. Ишбирҙе тапты хаслыҡлыларҙы, оялыштарынан ауылдан сығып тайҙылар. Эҙәрлекләп торманы, Әшрәф тыйған. Һәр кем бизнесҡа тотона алмай инде, яңы байҙарға ялланып эшләйҙәр. Сыңғыҙҙың отдельный коммунизмы шәхси капитализм булып сыҡты.

– Атайым әйтә ине, быйма баҫыусылар, балаҫ һуғыусылар, тегенселәр әртиле ойошто, тип. Ресторан да бар, ти ҙәһә?

– Ресторан уҡ түгел инде, кафе – Ҡарағаш Мәсрүрәнең улы Радик асты.

– «Атаһын эҙләп тапҡан» тигәндәре ысынмы?

– Ысын. Үҙебеҙҙә, Өфөлә, йәшәп ятҡан.

– Мәсрүрә апайҙа адресы булғанмы икән?

– Юҡсы. Малайы барлығын ул хәрби белмәгән дә. Ҡыҫҡа ғына итеп һөйләйемме?

– Һөйлә!

– Радиктың кооператив техникумында уҡыған сағы. Үҙебеҙҙең ауылдың ҡыҙына күҙе төшкән, унаһының артынан тағы икенсе берәү йөрөй икән. Ике егет сәкәләшеп киткән. Тегеһе Радикка: «Атайым полковник, тип шыттыраһың, тыума! – тип ысҡындырған, – тыумаларҙың бөтәһенең дә атаһы йә военный, йә летчик, йә космонавт, йә хәрби бурыс үтәгәндә һәләк булған, тиергә йәтеш.

Ныҡ ғәрләнгән Радик, әсәһенән баяғы хәрбиҙең исем-фамилияһын әйттереп, военкомат ашалыр инде, юллап тапҡан. Килеп төштө бер ваҡыт Толпарлыға, үҙ күҙебеҙгә үҙебеҙ ышанмай торҙоҡ: отставкалағы полковник, төҫкә һис тә бирешмәгән. Улын эйәртеп ауылды әллә нисә урап сыҡты, күргән берәү менән күрешеп. Уны танып белеүселәр етерлек, күп тигәндә ун һигеҙ йыл үткән. Улы барлығын белмәгән…

– Ә Ҡарағаш Мәсрүрә?

– Индереп сәй эсергән, йоҡларға ҡалмайһың, даным сыға, тигән. Полковник үҙенең машинаһында килгән. Радикты ла ултыртып, Өфөгә ҡунаҡҡа алып ҡайтып киткән.

– Теге ҡыҙҙы алдымы Радик?

– Алды. Ҡыҙ үҙе лә, Мәсрүрә апайса, уға тас йәбешеп ятҡан. Үҙенә бер төрлө матур егет тәһә, сәсе ерән, бөҙрә. Ҡашы ҡара, әсәһенеке ише.

– Мәсрүрә апай арттырып та ебәрәлер. Полковниктан таптым малайҙы, тип фәстергәне иҫтә, бөтә әҙәм унда фатирҙа майор торғанын белгән ерҙән.

– Тимәк, чинын иң тәүҙә беҙҙең Ҡараҡаш апай күтәргән? – Шулай тинем дә, үҙ хәбәремдән үҙем ҡыҙыҡ табып, көлөп ебәрҙем. Мәүлиҙә лә ҡушылды.

Әлдә илашмай ғына хушлаштыҡ, тип ҡыуандым. Олексий һымаҡ күркәм йәрҙе юғалтыуы еңел түгелдер, үҙ алдына әхирәтем һығылып-һығылып һыҡтайҙыр... Шуға теге шофер телгә алған кречет хаҡында, белһәм дә, һүҙ ҡуҙғатманым: ыласындар ғаиләһенә ҡараған ҡыйғыр ҡош ул, башҡорттар уны тойғон тип нарыҡлаған, илауы ла, бәлки, хаҡтыр, халыҡ беҙҙә хисле, нескә күңелле кешене лә «тойғон әҙәм» ти ҙәһә. Әйткәндәй, төйләгәндең бала кеүек йәл итеп, һулҡылдап илағанын ишетеп ғәжәпләнгәнем булды бер, Бүреһуҡҡан олатай менән урман гиҙгәндә, бала сағымда...

Әхирәтемде өгөтләнем дә ул, ҡайт, тип, ә шул уҡымышлылығы менән эш таба алмай ҡаңғырһа? Диплом тотоп өйҙә ултырыусы йә Себергә китеүселәр, Мәскәү кеүек ҙур ҡалаларҙа урам һепереп йөрөүселәр әҙме ни? Эҙһеҙ юғалыусылар күп...

Ҙур ауылда бик беленмәһә лә, бәләкәйерәк ауылдарҙа эшһеҙлек халыҡты ныҡ миктәтте ул. Аҡмәтеләгеләр тик баҡсаһындағы бәрәңгегә, мал-тыуарына күҙ терәп ҡалды, мал көтөрлөк хәле булғандары. Мәҙинә, ундағы ике егет, аҡсаға алданып, һыңар бөйөрҙәрен һатҡан, тип иҫте китәрҙе. Мәскәүҙән килеп донор эҙләп йөрөүселәрҙең ҡармағына эләккәндәр. Егеттәрҙе Төркиә аша Израилгә алып барғандар, шунда операция яһап, самолетҡа ултыртып Рәсәйгә осорғандар. Доллар менән түләгәндәр. Ауыл кешеһе өсөн ҙур аҡса ла – «Жигули» алырлыҡ,ти, тик һаулыҡты аҙаҡ унлата түләп тә кире ҡайтарып булмаясаҡ таһа! Етмәһә, Аҡмәтегә мәңгелеккә «бөйөрһөҙ ауыл» тигән мөһөр һуғылды. Инде беҙҙең яҡтың тарихының бер өлөшө «Аҡмәте егеттәре бөйөрҙәрен һатҡан йылды» тип башланып китәсәк...

## ЭПИЛОГ

Ғаләм ҡапҡаһын егерме беренсе быуат асып инде, ғәрәсәтле туҡһанынсы йылдар Рәсәй тарихында йылъяҙма булып ҡалды. Кешелек аҡылы ул йылъяҙманы, ҡатлы-ҡатлы кәртләнсектәй итеп, ҡабат-ҡабат асып ҡараясаҡ, фәһем аласаҡ әле.

Илдең яҙмыш кәмәһе ҡомға төртөлгән хәл иткес мәлдә Борис Ельцин властан баш тартты. Яңы етәксегә, Владимир Путинға, күҙ терәнек. Рәсәй халҡы, шул иҫәптә беҙ, башҡорттар ҙа, яҡшыраҡ батша килеренә өмөт өҙмәйбеҙ, мәңге баҡый шулай.

Рәсәй хәйерселектең сигендә баҫып тора. Туҡһан һигеҙҙең августындағы дефолт арҡаһында, былай ҙа бартер менән көн күргәндә, аҡса өсләтә осһоҙланды. Халыҡтың йәшәйеш кимәле буйынса донъяла 68-се урындабыҙ. Эшһеҙҙәр һаны 9 миллионға барып еткән. Уртаса ғүмер оҙонлоғо ҡырҡа кәмегән. Сабыйҙар араһында үлем икеләтә артҡан.

Ә 2000 йылда Ельцинға «Президент марафоны» тигән китабы өсөн халыҡ-ара әҙәби премия бирелде. Заманында Горбачев Нобель премияһы алғайны...

– Ҡартәсәй! Мин беләм ни өсөн быуат башында туҡталып ҡалған һинең бәйәндәрең, әйтәйемме? – Ейәнсәрем Айһылыу ҙаһа, ишектән инешләй үк хәбәр һалып килә. Кисә генә минең ҡорап-ҡоршап бөтөргән дәфтәрҙәремдәген компьютерында баҫып, принтерынан сығарып, килтереп тотторғайны. Бер ҡосаҡ ҡағыҙ! Шуларҙы уҡып ултырыуым ине: бәғзе урындарында, быныһын мин яҙмағанмындыр, тип тә ҡуям, ваҡиғалар үҙ артынан эйәрткән...

– Хатаһыҙ ғына баҫҡанһың, ҡолоҡасым, өҙмәй-йолҡмай ғына.

– Әҙмә-әҙлекле итеп яйға һалып биргәнде ни, әҙерҙе ни, баҫыуы ап-анһат. Ә бына яҙыуы рәхәт түгелдер? Ҡартәсәй, артабан үҙем дауам итәйемме китабыңды? Минең арҡала эшеңде дауам итә алмағанһыңдыр бит? Ваҡытһыҙ килеп тыуғанмын да…

Әй, ошо баланы! Ҡапылда ни тип яуап бирергә лә белмәй ҡалам бәғзе һорауҙарына. Шулай шул, Даниярым ун һигеҙ йәшендә, атай булырын белмәҫ борон, армияға алынды ла… Үҙем үҫтерҙем ейәнсәремде, эйе. Ҡыҙыма ла, улыма ла теймәне уның өлөшөнә төшкән әпәүләп бағыу, күңел һандығындағы хазиналарҙы һиҙиәләү. Киленем, уҡығандарымды тоҙламаҫ элек, тине лә мединститутҡа уҡырға китте лә барҙы, ике айлыҡ бәпесте миңә ҡалдырып. Ай… Ҡоҙа-ҡоҙағый саҡ ҡырҡтан уҙған, эш ташлай алмайҙар. Утыҙ биш йыл стажым бар, тип даулашып, 52 йәшемдән пенсия юлларға тура килде. Шунан ни…

– Шунан ни, – тип дауам итте Айһылыу, эсемдән генә барлаған хәбәремде ишетеп торғандай, – атайым армиянан ҡайтты, ҡайтты ла әсәйем янына Өфөгә һыпыртты, милицияға эшкә инде, йәнәһе, шул һөнәргә артабан уҡымаҡ! Миңә 7 йәш тулғанда, диплом тотоп ҡайтып төштө былар. Береһе – врач, икенсеһе – юрист.

– Ата-әсәң хаҡында «былар» тиергә ҡайҙа итәғәтең?!

– Беләм, ҡартәсәй, һинең ролеңә инеп киткәнмен, әрләмә. – Ана шулай ауыҙымды ябып та ҡуя ҡай саҡ ейәнсәрем.

– Бәйәндәреңде дауам итәм, тигәнеңә аптырап торам әле. – Һүҙҙе икенсегә бора һалдым.

– Үҙең ослап ҡуй, әтеү.

– Ошо осор былай ҙа яңы быуатта булған хәл-әхүәлдәрҙе хәтеремдә әүәләп йөрөүем: башымдан кискәндәрҙе ил-ҡәүем яҙмышы менән бәйләп, һығымталар яһап. Һәр көндөң, һәр ҡылыҡтың үҙ баһаһы…

– Ә миңә, һинең һымаҡ, берәй ҡисса яҙам тиһәм, ҡайҙа геройҙары? Һеҙҙең заманда ғына булған бит ул романтик тарихтар.

– Бына һиңә, әйттең һүҙ, ҡолоҡасым. Атайың менән әсәйеңдең мөхәббәтен генә ал…

– Юҡ, ҡартәсәй, мин һеҙҙән башлайым! «Нурия вә Фатих ҡиссаһы» – яңғырай бит!

– Һы… Бар, атайың ҡайтыуға үҙегеҙҙә бул, сәй ҡуя тор, исмаһам. Әсәйеңдең ҡасан өйгә йоғорон кем белә, табиптың ни уның. Ана, ҡартатайың да көнө-төнө дауахананан бушамай.

– Килешкәндәр инде, атайымды ла төн уртаһында юллап киләләр ҡайһы саҡта.

– Биш ауыл ҡараған ауыл Советының участка милиционеры бит ул, бәс. – Айһылыу, был хаҡта ишеткән бар, тигәнде аңлатып, ашығып китә һалды.

Бер олоно, бер кесене тыңла, тигәндәй, эйе, бәйәндәремә әйләнеп ҡайтыу фарыз. Төрлө мәлдә урыҡ-һурыҡ ҡағыҙға төшкән яҙмаларымды бер папкаға йыя барғайным, шуларҙы ҡыштырҙатырға тотондом.

…Борис Ельцин Башҡортостанға килгәндә: «Берите суверенитета столько, сколько сможете проглотить», – тип фәстергәйне, тығынығыҙ, тигән һымаҡ яңғыраны.

Бер биттә тик ошо һөйләм генә яҙылған. Хәҙер, күпме йылдар үткәс, һөҙөмтәһе күренә: ғәмәлдә юҡҡа сығып бара беҙҙең мөстәҡиллек, Башҡортостан Республикаһы Конституцияһы гелән шул маҡсат менән һаман үҙгәртелә тора.

Туған тел мәсьәләһе бер ҡасан да көн тәртибенән төшмәҫтер, моғайын. Рәмиебеҙҙең «Теле барҙың ғына иле бар!» тигән аманаты йөрәккә уйылған, мейегә киртелгән. Әгәр халыҡ, милләт үҙен Йыһанда, Ерҙә юғалтмай һаҡлап ҡала икән, был уның үҙаңынан, рух ныҡлығынан килә. Беҙҙең эраға тиклем үк Птоломей картаһына төшөрөлгән, Яйыҡ буйынан Тубыл үрҙәренәсә йәшәгән, тәү ҡарыһүҙҙе – «Урал батыр»ҙы ижад иткән халыҡ икәнлегебеҙҙе беләбеҙ ҙәһә! Әммә бөгөн шуны ла онотмаҫҡа ине: ЮНЕСКО, башҡорт теле донъяла юғалыу ҡурҡынысы алдында торған телдәр иҫәбендә, тип иҫкәртә. Туған теле һаҡланһын өсөн милләттең 70 проценты шул телдә һөйләшергә тейеш, ти фән. Беҙ быға өлгәштекме? Юҡ. Бер ғалимыбыҙ телевизорҙан һөйләп ултырҙы: имеш, 10 миллион кеше һөйләшһә, шул тел йәшәйәсәк, ти. Шунса башҡортто ҡайҙан алмаҡтыр ул?

Балаларыбыҙға күкрәк һөтө менән һеңһен, бишек йыры аша ҡолағына инһен, ҡанына ҡушылһын туған телебеҙ! Кесе йыһанда – әсә ҡарынында, кесе йыһанда – ғаиләһендә, кесе йыһанда – ауылы-ҡалаһында, республикаһында үҙләштерһен йәш быуын әсә телен, шул саҡта милләтебеҙ Оло йыһанда ла юҡ булмаҫ.

Артабан аҡтарынам папкамда. Һарғая төшкән гәзит килеп сыҡты – районды-ҡы. Бер мәҡәләнең аҫтына һыҙып ҡуйғанмын, авторы – Ләйсән Дәүләтова, Әсмә менән Әшрәфтең төпсөк ҡыҙҙары. Ул саҡта унынсыла ғына уҡып йөрөгән шул баланың аҡылына һоҡланғайным һәм халыҡтың “наҙандан наҙан тыуа” тигән бер әйтемен шик аҫтына алғайным, ата-әсәһе әллә ни белемле түгел дәһә. Хәйер, тәбиғәт уларҙың икеһенә лә донъяуи аҡылды сумырып биргән.

Әйткәндәй, әхирәтем әкренләп ирене Әшрәфенә. Бер серләшкәндә асылды:

– Күңелдәге теге ярам бөтәште, ҡыҙый.

– Һыҙып күрһәт, анау ваҡыттағыса, – тип алдына ҡағыҙ, ҡәләм, кәсә килтереп ҡуйҙым.

– Ҡайсыһы кәрәкмәй! – Әсмә кәсәне түңкәреп ҡуйып түңәрәк һыҙҙы, дүрткә бөкләне. Теге юлы һымаҡ бер бүлкәтте киҫеп ырғытманы, шунда биш йөрәк һүрәте төшөрҙө лә: – Улар тоташтырҙы түңәрәкте ҡабат, – тине.

Ҡайтанан уҡып сыҡтым Ләйсәндең мәҡәләһен, ҡайтанан һоҡландым:

“Башың болғас, нисек уйланмайһың?! Ил яҙмышы – үҙ яҙмышың. Мин – Толпарлым – Башҡортостаным – Рәсәйем – Ерем – Йыһаным: бер-береһенә кендек илә бәйле! Үҙеңде Оло йыһандың бер өлөшсәһе итеп тойоу һәм ошо ябай һәм гениаль гармонияны аңлау өсөн беҙгә, кешеләргә, аҡыл бирелгән, ҡылған ғәмәлдәреңде үлсәү өсөн аңға намыҫ һағауылы индерелгән, әхлаҡ ҡыҫалары ҡуйылған! Сылбыр итеп теҙһәм– алгебра, үҙемде үҙәккә ҡуйып, түңәрәк эсенә алһам – геометрия. Был фәндәрҙе кеше абстракция өсөн генә уйлап тапмағандыр ҙаһа?! Ә үҙеңдең йыһани үлсәмдә лә мөһим берәмек икәнеңде белер өсөндөр ҙә? Оло йыһан – галактикаларҙан, улары бихисап планеталарҙан тора. Ер – Ҡояш галактикаһында, уның шәхсән үҙ орбитаһы, үҙ урыны. Һәм быны, Юғары көс ихтыярын, боҙоу мөмкин түгел һымаҡ, әммә Ер яҙмышы әҙәмдәрҙең үҙенә лә бәйле: тупланған барлыҡ ҡорал, тәү нәүбәттә атом энергияһына ҡоролғаны, бер ыңғай ҡулланылған осраҡта, планетабыҙ күсәренән ысҡынасаҡ һәм йәһәннәмгә осасаҡ. Һөҙөмтәлә тотош галактика, Оло йыһан тетрәнәсәк. Донъяға ултырған ерҙән кнопкаға баҫып ҡына идара итер өсөн уйлап тапҡан техник прогресс ҡаҙаныштары ла беҙгә гелән файҙаға түгел. Тәбиғәтте тәләфләү, унан алыҫлашыу кешене һаңғырау, һуҡыр итә! Хайуандар, үҫемлектәр телен аңлаған, ете ҡат ер аҫтында йылан көйшәгәнен ишеткән, ете диңгеҙ аръяғында ни күстәрелгәнен

күргән-белгән әкиәт геройҙары ҡасандыр, бәлки, ысын ғәмәлдә булғандыр? Әкиәттәр төпкө хәтерҙәге ассоциациялар ауазылыр?

Һаман да аҡылға килмәһәк, үҙ ҡулдарыбыҙ менән атҡарасаҡбыҙмы ахрызаманды, улайһа?!»

Эйе, был мәҡәләне бәйәндәремә үреп ебәрәсәкмен.

Бына тағы бер тәьҫорат кисәге. Фидандың йәйгеһен беҙҙә ҡунаҡта сағында яҙылған.

…Телевизор ҡарап ултырғанда, тышта уйнап йөрөгән ейәнем йүгереп килеп инде:

– Өләсәй, хәҙер мультик башлана!

– Тороп тор әле, ана, Чечняла шартлау булған... – Ай, телемдән ысҡынды, ҡурҡыр ҙаһа бала. Юҡ, иҫе лә китмәне:

– Унда көн дә шартлау, – тисе.

Йәш кенә чечен ҡатыны халыҡ уртаһында үҙен шартлатҡан, унлаған кеше һәләк булған. Был ни хәл – үҙенә ҡул һалғанды мосолман насрани тип атаған, оло гонаһҡа һанаған?! Гөлсирендең бер шиғырын иҫләп, йөрәгем өтөлдө:

*Ут эсендә кеше сыныҡмай ул,*
*Есеме бит түгел тимерҙән!*
*Чечнялағы әсәләргә ҡара:*
*Утта янып һүнгән күмерҙәр...*

Фиданға мультфильм каналын астым. Үҙем һаман уның баяғы һүҙен уйлап торҙом. Ә бит тегендә, Чечняла, һуғыш башланғас тыуып үҫкән тотош бер быуын бар – улар өсөн атыу, шартлатыу тәбиғи күренешкә әйләнмәҫ тип кем әйтә ала?

Боронғо грек философы Платон сәйер фекер яҙып ҡалдырған: «Һуғыштың ахырын үлгәндәр генә күргән». Төрлөсә һаплап ҡараһам да, төбөнә төшөп аңлап етә алманым. Тереләр өсөн яу дауам итә, тимәксе булғанмы ул аҡыл эйәһе?

Яҙғандарымдың бәғзеләрен уҡығанда көлөп ебәрәм, иларҙай булып та китәм. Бына быныһы йылмайтты.

...Айһылыу менән Толпарсыҡҡан ярында ултырабыҙ. Хыялымда йөрөткән әкиәти Шаһимаран менән «осрашҡан» кескәй түмәләсте күрһәттем дә хәтирәләр ҡосағына сумдым. Ә ейәнсәремә – һөйлә генә, тыңлауҙан һис ялҡмай. Яңы ғына алтыһын тултырҙы. Бөтөп үҙемә оҡшаған, мин дә уның йәшендә ололарҙың һүҙен йотоп ҡына йөрөй торғайным. Иҫәр Әсән хаҡындағы хикәйәткә төшөп кенә киткәйнем, кеҫә телефоны шылтыраны.

– Әү, Фатих?

– Оҙаҡланығыҙ. Беҙгә ҡунаҡ килде, йәһәт ҡайтып етегеҙ!

– Кем, ҡайҙан?

– Ҡытай тарафтарынан, шуны ғына әйтә торам.

Ашыға төштөк. Земфира дуҫым, имеш. Өс йыл ғына барҙыр күрешмәгәнгә.

Ҡытайҙан, тине ләһә Фатих, вәт мәрәкә.

– Шул илдән ҡайтып төшөүемә аҙна ла үтмәне, тип һөйләнгәйнем шул.

Өйгә инеү менән шаҡмаҡлы клеенканан тегелгән ҙур сумка күҙемә салынды.

– Һаман шул кәсептәһеңме? – Земфира баш ҡына ҡаҡты ла сумкаһын бушатырға тотондо. Бүләккә алты пар ҡытай сынаяғы алып килгән.

– Матурлыҡҡайҙары! – тип һокланды Айһылыу. – Сын-сынаяҡмы?

– Сын-сын... Ә бына былар ҙа ысын, быяла түгел. – Земфира ейәнсәремдең

беләгенә оҙонсараҡ формалағы ынйылар теҙелгән беләҙек кейҙерҙе. – Пекиндың үҙенә барҙым был юлы, унда махсус ынйы баҙары бар, шунда булдым.

– Нисек йәшәйҙәр, ҡытайҙарҙы әйтәм?

– Ҡырмыҫҡа кеүек егәрле халыҡ. Ҡасан ғына әле хәйерселектә көн итеүҙәрен иҫкә алғанда, алға китеш унда иҫ киткес.

– Уҙған быуаттың илленсе йылдарында ғына әле крәҫтиәндәре ерҙе ағас һуҡа менән һөргән, ә беҙҙең Толпарлыла батша заманында уҡ ике төрәнле тимер һабаны булған бәғзе хәллерәк кешеләрҙең, – тип йөпләп ҡуйҙым әхирәтемде. Һәм төпсөнмәй түҙмәнем: – Уҡытыусылыҡтан китеүеңә үкенмәйһеңме?

– Башта, тауарҙы елкәгә йөкмәп ташып, баҙарҙа һатып торғанда – ямғыр аҫтында ла, сатнама һыуыҡта ла сыҙағас, хәҙер рәхәтен күрәм. Бәләкәй сумка тотоп ҡына барам, аҡсаны банк аша күсерәм, тауарға заказ биреп китәм дә, уныһы контейнер менән килә. Анһатҡа сыҡтым. Магазиным бар, ҙур сауҙа үҙәктәрендә бутиктарым эшләй. Һатыусыларым үҙемдең күҙ күргән кешеләрем – уҡытыусылар. Тәүҙәрәк уңайһыҙлана инек,таныш-тонош килеп сыҡһа… Ә ниңә, беҙҙе шул хәлгә төшөргән хөкүмәт үҙе оялһын! Тауыҡ кетәгендәй өйҙә көн күрә инем, хәҙер яҡшы фатирым бар, улым ғаиләһе менән коттеджда йәшәй, шәп машинала йөрөй. Уҡытыусылыҡта ҡалһам, шул кетәктән сыға алмаҫ инем. Яңғыҙ башым...

– Һоратыусы бар, ти инең бер осор?

– Тәүәккәлләмәнем. Ҡурҡып ҡалдым бит, беләһең. Ун ҡатын-ҡыҙҙың һигеҙе туҡмалып йәшәй, тип яҙҙылар гәзиттә лә. Ғаиләләрҙең яртыһы тап шул арҡала тарҡала икән. Ҡайһы бер илдә хатта ҡатынды нисек туҡмау хаҡында закондар бар, ти, мәҫәлән, Лос-Анжелеста ирҙәргә ҡатынына 2 дюймдан да яҫы ҡайыш менән һуғыу тыйыла.

– Биш сантиметр тирәһе, нәҙегерәге менән, әйҙә, ярһынмы? Әй, Данияр ҙа бер һөйләгәйне, юрислыҡҡа уҡып йөрөгән сағында, АҠШ-та «Арканзас йылғаһы күперенән өҫкә ҡалҡып ағырға тейеш түгел» тигән закон бар, тип. Әкәмәт…

– Нурия, мин бер ыңғайҙа күп кенә тауар килтергәйнем, ынйы мунсаҡтар, алҡа-йөҙөктәр – һатып булырмы икән бында? – Земфира үҙ йүнен ҡайғыртты.

– Әллә. Мәктәптә ҡатын-ҡыҙ күп, өндәшербеҙ. Беҙҙекеләр хаҡты белә, Өфөләгенән кәмерәк һораһаң, алырҙар ҙа.

– Ҡартәсәй! Иртәгә Айыусыға барабыҙ, тигәйнең? – Айһылыуҙың нисек һүҙгә ҡушылырға белмәй тороуы ине, яйын тапты.

– Тигәйнем дә… ҡунаҡ бар ҙаһа.

Әсмәне ныҡ һағынғайным, ул гелән тиерлек Айыусыла төпләнгән Артуры менән Сәнә килененде йәшәй, йылҡыларын шунда, иркенлеккә, күсерҙеләр. Әшрәфте, игенен Толпарлы баҫыуҙарында үҫтергәс, йыш күрәм.

– Улайһа, алыпһатар апайҙың юлы уңа икән, – тине Земфира,– әхирәтеңдең ҡыҙы Стәрлелә магазин тота, тигәйнең?

Сәнәнең сәскә бизнесы тирә-яҡта берәү, шуғалырмы эше бик уңышлы бара. Район үҙәгенә әүәлге йәйәүле тура һуҡмаҡты был «яңы башҡорттар» үҙ аҡсаһын сарыфлап шоссе иттеләр, хәҙер толпарлылыр ҙа шунан елдерә. Әйткәндәй, дуҫтарымдың биш балаһы ла тормошта үҙ урынын тапты. Артурҙары, экономист булараҡ, тотош ғаилә бизнесын хисапта тота, Наримандары ауылда юҡ һөнәрҙә – физик- ядерщик, Себерҙәге ниндәйҙер ғилми үҙәктә эшләй, Сыңғыҙ менән Раушания техникум тамамланы, береһе – механик, икенсеһе – кондитер, ауылда ҡалып, өлкән ағайҙарына һыйындылар, ә теге мине ғәжәпләндергән ҡыҙҙары Ләйсән – социолог.

Айыусыла Әсмәнең бер сиған әбейе менән гәпләшеп ултырған мәленә тап булып, ғәжәпкә ҡалдыҡ. Шунда уҡ Айһылыу йәштәрендәге ике ҡыҙсыҡ та ултыра шырҡылдашып. Әхирәтем мине билемдән ҡосаҡлап күтәреп алды, шулай ҡыуанды. Ул һаман да әүәлге кеүек: төҫ ташламаған, көслө, ихлас күңелле. Теге ҡарсыҡ тиҙ генә йыйынды ла ҡыҙыҡайҙарҙы эйәртеп юлында булды.

– Ошо мәлдә генә өлгөрә торған дарыу үләндәре бар ҙаһа, шуларҙы йыяйым тип һыртҡа күтәрелһәм, бер әбекәй бәләкәй көрәге менән дөр-дөр сәскә тамырын ҡаҙып мәш килә, – тип һөйләй башланы Әсмә уның артынса. – Күҙәтеп торҙом башта: тотош аҡтарып сығармай, ипле ҡылана, йәш тамырсыҡтарын ҡалдыра, орлоғон йыйып күмеп ҡуя, ыңғайына. Белеп кенә тотона был тип, янына барҙым, һаулыҡ һораштым. Сиған әбейе ләһә! «Аптырама, мин был урынды күптән беләм, һуғышҡаса әле, беҙ табор менән ошо тирәлә туҡтай торғайныҡ, – ти. – Ун йәшлек сағымдан мине өләсәйем шифалы үләндәр танырға өйрәтте, бына ошо үлән – марьин корень, бик һирәк ерҙә үҫә. Илленсе йылғаса был тирәгә юл төшмәне, шунан кире инде ике-өс йылға бер килер булдым. Октябрь башына юллана инем ғәҙәттә, быйыл ике-өс көнгә иртәләнем. Бына ейәнсәрҙәремә юл күрһәтергә тип эйәртеп алдым. Элегерәк ошонда бер оло ғына ҡатынды осрата торғайным, бик яҡшы белә ине үлән-фәләнде. Һуңғы осор килеүҙәремдә тап итмәнем уны?» – тип һораны ахырҙа.

– Ҡартәсәйемде күргеләгәндер ул?

– Мин дә шулай уйланым, ҡыҙый.

Сәнә менән Артур Стәрлегә киткәйне, улар ҡайтҡансы урман күреп килергә булдыҡ. Теге таныш ҡарағай янынан үттек. Артабан йылҡы көтөүе ҡырынан сәтләүек урманы яғына тартылдыҡ.

– Күр әле, күр анау ҡола бейәне, өйөр айғыры тирәләй уралыпмы-урала, төшөнә барып кермәмме, тип өмөтләнә.

– Ә? – Айһылыуҙың ҡолағы ҡарп итеп ҡалды был сәйер хәбәргә.

– Айғыр үҙе һайлап алыр бейәнең төҫөн төшөндә күрә, имеш, ти. Ана, өйөр башы баҫҡан килеш йоҡлап тора...

Ул да булмай, ейәнсәремдең күҙенә осар тейен салынды:

– Оса! – тип сәпәкәйләне. (Осар тейенде миңә Бүреһуҡҡан олатай күрһәткәйне, тип хәтерем мейемә туҡып ҡуйҙы...)

– Оса шул! – Земфираның да һушы китеп ҡарап тороуы.

Кәрзин тотоп алғайныҡ, тултырғансы сәтләүек йыйҙыҡ. Земфираның ҡапҡан сәтләүеге ас булды, күрәһең, төкөрҙө лә әйтеп ҡуйҙы:

– Ҡайһы бер әҙәмдең дә эсе буш икәнен тышынан белеп булмай...

Был һығымтаның беҙгә ҡағылмағанын белгәс, төпсөнөп торманыҡ, Сәнәләр ҡайтҡан, машиналары сигнал бирә ине – шунда ашыҡтыҡ. Шул арала Әсмә ҡолағыма шыбырлап өлгөрҙө: иғтибар ит әле, ҡыҙый, киленем йөклө түгелме икән? Анау сиған ҡарсығы кәрт һалды, ай-вайыма ҡуймай, эсеңде нимә бошорғанын беләм, тип тороп. Улыңдың улы тыуасаҡ, килененң ауырлы, тисе?!

– Бирһен Хоҙай! – тинек икебеҙ бер тауыштан. Артур менән Сәнәнең йәше ҡырҡҡа китеп бара, нисек хафаланмайыҡ был мәсьәләлә.

Һөйләшкән арала Сәнәнең йөҙөнән балаға уҙған ҡатын салымдарын эҙләп таптым: «Әсмә, һөйөнсө!» – тип саҡ ҡысҡырмай ҡалдым. Ҡарасы анау сиғандарҙы, кәрттәре ҡай саҡ дөрөҫөн дә әйтеп ҡуя икән.

Земфираның да юлы уңды, хаҡын килешеп, тауарын ҡалдырып китте.

Айыусынан ҡайтышлай, Айһылыу әйтеп һалды:

– Сәнә апайҙарҙың ҡыҙына исем таптым! Роза – сәскәләр королеваһы!

– Сос ҡолаҡ, ишетеп тә ҡалдыңмы? Сиған әбейе, улдары тыуасаҡ, тигәнсе?

– Һы, юлы бер асылғас, улы ла тыуыр, ҡыҙы ла… – Шулай тине, күҙен дә йомманы. Күргән берәү юҡҡа ғына ейәнсәремде «Бәләкәс Нурия» тип һөйөп китмәй, юғиһә.

Эсемдән генә тәкрарлап ҡуйҙым: мин – ҡартәсәй! Ниңәме? Бер-ике көн тураһында ғына гәзиттән бер психологтың мәҡәләһен уҡып, үҙемде һынап-тикшереп хитланғайным. Пенсия йәшендәгеләрҙе геронтологтар өс төркөмгә бүлә: «мыжыҡ ҡарт», «ҡартатай(ҡартәсәй), йәғни ейән-ейәнсәр бағыусы, алмаш тәрбиәләүсе», «бөйөк ҡарт» тиелгән мәҡәләлә. Абау, мыжыҡ булмам! Бөйөк булырға дәғүәм юҡ. Ҡартәсәй мин!

«Дуҫтарым, туғандарым» тигән бүлек тә асҡанмын папкамдағы бер биттә. Ҡыҫҡа ғына мәғлүмәттәр бар унда.

…Бергә сорлауыҡ уйнап үҫкән теге алты малайҙың барыһы ла иҫән, шөкөр. Харис сирләп алды бер осор, анауы туҡһанынсыларҙа йөрәге бирешеп китте, отставкаға сыҡты. Гөлфирә әйтмешләй, унның погондарынан үҙе ҡәҙерлерәк. Бәс, генерал бәләкәс чинмы ни?

Әшрәф менән Сабир – күҙ алдында йөрөйҙәр. Күптән түгел Толпарлы Ботвинникгы, Әшрәфтең ҡустыһы Гәрәйҙең ҙур бер шахмат турнирында еңеүен бөтә ауыл менән байрам иттек: беҙҙеке! Сабир дуҫым халыҡ телендә Вафич булып ҡалды: шәп директор, бер тигән мәктәп һалдырҙы, күпме баянсылар үҫтерҙе, Сыңғыҙҙың ҡурайсылар ансамблен дә быуын-быуын юғалтмай килтерҙе. Заһираһы менән өс бала үҫтерҙеләр. Бер улдары – Америкала. Сара менән танышлығын өҙмәнеләр, малайҙарын Магнитогорскиҙағы теге үҫмер менән бергә каникул һайын Бостонға ебәргеләп торҙолар ҙа, ахырҙа, телде ярайһы өйрәнгәс, шунда уҡырға ла оҙатып ҡуйҙылар. Хәҙер егеттәр Рәсәй менән бәйләнештәге бер предприятиела ҙур ғына вазифаларҙа эшләйҙәр.

Әхиәрҙәр – Стәрлелә. Ҡыҙҙары духтыр Искәндәр менән уңып китте, ул үҫтерәләр, шул берәү менән сикләнделәр тиһәк, былтыр тағы малайҙары тыуҙы. Минең Төхвәтулла олатайым ише, Искәндәрҙе әйтәм.

Кәбир яңыраҡ ҡайтып, ауылда аҙналап тороп китте. «Даная» ун йылдан ашыу реставрацияла булғандан һуң, Эрмитажға, ватылмай торған быяла эсенә, ҡуйылды, ти. Майгис исемле бер литовец ҡылған икән теге еңәйәтте. Шизофреник, имеш. Үҙ аҡылындағы әҙәм картиналағы ҡатынға һөжүм итмәҫ шул. Ә Кәбир үҙе Сыңғыҙхан портретын яҙған.Төшөнә ингән ул тарихи шәхес. Ике һыбайлы яугир ҡаршыһына сабып килеп туҡтаған да сәләм биргән, уларҙың мәшһүр Сыңғыҙхан менән бабабыҙ Майҡы бей икәнен таныған… Йәғни, ишара алған.

– Сыңғыҙхан хаҡында күп һөйләнелгән, күп яҙылған, уны «варвар» тигән күҙлектән генә ҡараған тарихсылар етерлек,– тип һөйләне Кәбир, йөрәкһенеп. – Ә бит унның ғәскәрҙәре яулап алған ил-дәүләттәрҙә үҙ диндәрен тотоу ирке һаҡланған, мәҙәниәт, сәнғәт ҡаҙаныштары ҡыйратылмаған, архитектура ҡомарҡылары емертелмәгән. Бөйөк хандың хакимлығын таныу, яһаҡ түләү, әлбиттә, мотлаҡ булған. Полотнола донъяға киң билдәле шәхестең образын тыуҙырыр алдынан тәүҙә унның тураһында төрлө сығанаҡтарҙан мәғлүмәт йыйҙым. – Дуҫымдың әйткәндәре миңә лә мәғлүм ине: Айһылыуҙы үҫтергәндә күп уҡыным, яҙышырға ғына форсатым булманы, ошолай, остоҡ-остоҡ тәьҫораттарҙы теркәргә генә булдырғанмын.

Сыңғыҙ менән Менәүәрә-Гөлсирен үҙҙәреише һәр ҡайһыһы талантлы, ил йөҙөндә күренекле кешеләр өлөшөнә төшкән һынауҙарға бирешмәне, шәхсән асылдарын, мөхәббәттәрен, ғаиләләрен һаҡлап ҡала алды. Сыңғыҙ – иҡтисад фәндәре докторы, ҙур сәнәғәт предприятиеһы етәксеһе. Заманынан алдараҡ йүгерә торған зирәк фекерле, намыҫлы, халыҡ мәнфәғәтен ҡайғыртыусы депутат булараҡ, дуҫтан дошманы күбәйеп китте бер осорҙа: машинаһын шартлаттылар. Инеп ултырғас, телефонын онотҡанын иҫләп сығып йүгергән, шул арала шоферы моторҙы ебәргән… Ғәйеплене тапманылар. Гөлсирен һуңғы йылдарҙа балалар өсөн матур-матур әҫәрҙәр яҙа: өсәүгә өләсәй ҙәһә!

Мәүлиҙә лә – Өфөлә, Сыңғыҙ уға бер вузда эш белешкәс, ҡайтты ла төштө. Уға ни, профессорға, конкурс тигәндәрен үтеүе лә ҡыйын булманы.

Динис туғаным заманында атайымдың уң ҡанаты булды, әле лә рационализаторҙар төркөмөн етәкләй. Рубес тигән исемдән ҡотолдорған өсөн һаман рәхмәт әйтә. Шахматын ташламай, улы, ейәндәре менән ғаилә турнирҙары уҙғара. Шахмат тигәс, өләсәйемдең бер ҡыҙығы иҫкә төштө. Гел күтәреп йөрөмәҫкә, Динис бер таҡта шахматын беҙҙә тотто. Өләсәйем, эсе бошҡанда, шуларҙы теҙә лә тегеләй-былай шылдырғылап ултыра. Әле лә ҡолағыма салынғандай: «Мыныһы ат, мыныһы хәтәр – король! Ә мыныһы фил дәһә. И-и, хөртәфейе…» – Шулай ти ҙә пешканы ауҙарып, тәгәрәтеп ебәрә. Камила өйрәткән исемдәрен, өләсәйемдең бала һымаҡ уйнап ултырғанын күргән дә. Һеңлем «шәп ҡатын» булып сыҡты, бала саҡта ишеткән һүҙемде юллаһам. Өс ҡыҙ менән туҡтап ҡалдымы тиһәм, улары мәктәпкә төшкәс, игеҙ малай тапты. Эйе, уға әләкте нәҫелдә ҡабатлана килгән игеҙҙәр. (Әйткәндәй, балаларын башҡорт тип яҙҙырҙылар.) Камил биология фәндәре докторы дәрәжәһенә барып етте! Баҫалҡы тырышлығы һәм, әлбиттә, Толпарлыла «Әлфиә баҡсаһы»н ҡалдырған уҡытыусыбыҙҙың үҙе уҡытҡан фәнгә һөйөү уятыуы арҡаһында.

Был папка йоҡаҡ ҡына, эсендә төшө юҡ ас һоло кеүек – ҡапылдап торған ҡоро кәбәк... Тартып сығарған һуңғы ҡағыҙҙың битенә Мостай Кәримдең шиғырын ҡуйғанмын. Яттан беләм уны, аулаҡтарҙа, уҡыусыларым менән әңгәмә уҙғарғанда уҡый торғайным. Әле лә, хисләнеп китеп, ҡабатланым күңелемә хуш килгән юлдарҙы:

*Өс мөъжизә мине әсир алды –*
*Ер, йәнә күк, йәнә ҡатын кеше…*

Анау ваҡытта, ағай-эне ирҙәр советы төҙөп мәш килгәндә, ошо бер шиғыр менән дә еңергә булған икән шуларҙы! Һы...

Ә ҡайһылай ярһып алғайным шул саҡ, әллә берәй ултырыштарына барып, диспут ойошторайыммы, тип. Ирҙәр генә булдыра ала, тип бәғзе һөнәрҙәрҙе һанап, ауыҙымды ябырға тырышасаҡтарын самалап, яуаптар әҙерләнем. Уйымда ул бәхәсте ҡороп та ҡуйҙым хатта:

– Механизатор, шофермы? Һуғыш йылдарында һеҙҙе кем алмаштырған? Ирҙәрҙең һабанға үҙҙәре егелгәнен күргән юҡ, ә ҡатындар егелгән!

– Йыһанға…

– Валентина Терешкова! Светлана Савицкая! Донъя буйынса – 56 ҡатын-ҡыҙ космонавт бар.

– Самолетта…

– Мәғүбә Сыртланова! Советтар Союзы Геройы!

– Фән өлкәһенә, сәйәсәткә үтеп индегеҙ инде...

– Бөтәһе лә ҡулыбыҙҙан килә, ә иң мөһиме, бер ир ҙә булдыра алмағанды булдырабыҙ! Беҙ – бала табабыҙ! – тинем дә: – Ир – баш, ҡатын – муйын,– тип сак өҫтәмәнем. Сөнки Фатихтың: «Баш мейеһе ҡайһы яҡҡа бойора, муйын шунда борола – физиология», – тигәне иҫкә төштө…

Юҡ, барып йөрөмәнем ул дәғүәләр менән, бәлки, ирҙәр советын төрлө йәмғәтселек эштәренә йәүкәләп булыр, тигән өмөт тә бар ине. Тик улар тиҙ һүрелде, клубта бильярд төртөүҙән, шахмат уйнауҙан һәм, әлбиттә, беҙҙең затҡа һан бирмәй ҡыланыуҙан ары китмәнеләр. Барыбер яуапһыҙ ҡалманым. Рәсемгә һәүәҫ бер уҡыусымдан әлеге Платондың ирҙәр өсөн дә, ҡатындар өсөн дә бик үтемле фәлсәфәһен ҙур хәрефтәр менән яҙҙырып, бильярд бүлмәһенә элеп киттем: «Әлмисаҡта, имеш, ир менән ҡатын бер бөтөн булған: бер муйында – ике баш, бер кәүҙәлә – дүрт ҡул, дүрт аяҡ, ике төрлө енес ағзаһы. Икәү булғас, баштар бөтә тирә-яҡты күҙ уңында тота, береһе йоҡлаһа, икенсеһе уяу; дүрт ҡул арыу-талыуҙы белмәй, дүрт аяҡ шәп йүгерә, ике енес тоҡом ишәйтер өсөн йәпле – башҡа бер ерҙән пар эҙләйһе түгел. Әлеге ҡуш заттан Олимп аллалары шөрләй башлаған бер килке. Зевс, мин был бәндәләрҙең көс-ҡеүәтен нисек кәметергә беләм, тигән дә йәшен ҡылысы менән кәүҙәләрен урталай ярған да ҡуйған. Шулай ир менән ҡатын айырым затҡа әүерелгән…» Маҡсатым – ярашыу, беҙгә һәр хәлдә лә рух берҙәмлеген юғалтмау фарыз, тип ишаралау ине.

Папкамды һалып ҡуйҙым да еңдәремде төрә башланым. Әсәйемдең ошо ғәҙәте иҫемә төштө. Иҫән әле әсәкәйем, Яңы өйҙә, үҙе әйтмешләй, мөрйәһенән төтөн сығарып ултыра.

Эйе, бик яуаплы эшкә тотонмаҡсымын, шуға еңемде төрөп кенә ҡалманым, бөйөрөмә таянып алдым. Тап шул минутта Фатихым килеп инде.

– Әсәһе, ни күстәрмәксеһең былайтып? – ти.

– Иртәгәнән Айһылыуҙы шәжәрә ағасы менән ентекләп таныштырам. Унда яңы ботаҡтарҙы өҫтәп ҡуяһы ла бар, һаман ваҡыт тапмайым шуға.

– Фиданда туҡталғайны...

– Бәс! Асияның кесе улына, Моратыбыҙға, инде ун йәш. Камил менән Камиланың балалары кергән шәжәрәгә, ә ейән-ейәнсәрҙәре теркәлмәгән. Динистың, Русландың тармаҡтары, Наҙгөл менән Мәйсәрәнең дә өсөнсө быуыны үҫә...

– Минең яҡ та яланғас тора, Мөдәристең ике улы, биш ейәне бар...

– Ана лаһа! Ҡайын туҙына хат яҙған ҡәйнешем, иҫемдән сыҡмай ул сығыуын...

– Иртәгәнән шәжәрәгә тотонмаҡсыһың?

– Юҡ, башта зыяратҡа барам. Ейәнсәремде лә эйәртәм.

– Аңлат!

– Төрлөһөн төпсөнөп быуынға төшә. Үҙебеҙҙең тәүарихтан башларға инде уға бирер мәғлүмәтте. Зыярат ҡылыуҙан…

– Шул папкаңды ҡасан иҫеңә төшөрөрһөң, тип уйлап ҡуйғылай инем. Донъяны көтөшөрмөн. Һуңғы биш йыл, главныйлыкты Искәндәргә тапшырғас, еңел һулап ҡалғайным, инде бөтөнләй бушаһам да ярайҙыр, тим. Етмешкә етеп барам даһа.

– Алтмыш биштәһең генә әле, атаһы, арттырма. Барыбер тынғы бирмәҫтәр һиңә, йүгерерҙәр ҙә килерҙәр.

– Консультация артынанмы, бүтәнгәме – килерҙәр шул. Искәндәр ҙә, арыным

был йөктән, миндә етәксе һәләте юҡ, писанины много, бесконечные отчеты, тип мыжый. Беҙҙең киленгә тоттормаҡсы дилбегәне.

– Атаҡ. Мин уны, тағы бер бала тап, Айһылыуға иптәшкә, тип өгөтләмәксе йөрөйөм.

– Улайһа, Искәндәр тағы ике-өс йылға сыҙар, үҙем дә ҡапылда туғарылмай торормон.

Шулай һүҙ беркеткәс, сәй эсеп алдыҡ та көтөү ҡаршыларға сыҡтыҡ. Элгәре Бүреһуҡкан олатайҙар, хәҙер Вилмирҙәр йәшәгән Келәт осонан ҡайта мал-тыуар, шул яҡҡа табан атланыҡ.

Алтын көҙҙөң һуңғы көндәре. Сентябрь аяҙ, йылы килде, шуға күрә малдар ирәүәнләп көтөүҙә йөрөй, көтөүселәре зарланмай. Ә минең башымда хәтирәләр өйөрө йөрөй, тырым-тырағай. Инде улар ҡағыҙға төшөп ятмайынса маҙа бирмәҫ...

***

Яңы зыярат 1961-ҙә асылғайны. Ҡушҡайын ҡалҡыулығында. Зөлхизә өләсәйем, Төхвәтулла бабайының ҡәберен тәрбиәләргә барышлай, гелән ҡолағыма киртеп ҡуйыр ине: «Мине ошонда, яңыһында, ерләрһегеҙ, әтеү йә оноторһоғоҙ, мына лаһа, ул яҡҡа минең һуҡмағым да, Татар килендең эҙе ята», – тип. Аманатын үтәнек. Тик мин һәр саҡ, бына әле лә, башта иҫке зыяратҡа юл алам, ҡайтышлай – яңыһына.

Төхвәтулла олатайҙың ҡәбер ташына соҡоп яҙылған исем-шәрифен, «1852 – 1925» тигән һандарҙы йыл да аҡҡа буяп китәм, имән бураһын уратып ҡарап сығам, бирешмәгән әле... Бура эсендә ҡарт шыршы үҫә, уның күләгәһе сәскә үҫтерергә бирмәй, ҡойолған энәләрен, тубырсыҡтарын бер ситкә тырмап өйөп ҡуям. Халыҡ хәтерендә уның Толпарсыҡкан төбөндәге иң ҡарт йәйенде һөйрәп сығарған, тик башҡорттарҙа ғына уйлап табылған шыға ысулы менән суртан тотҡан балыҡсы булып ҡалғанлығын иҫләп алам да өләсәйемдең көндәше, ысынында әсәһеләй күреп хөрмәт иткән кешеһе Мәғүҙә инәйҙең ҡәберен эҙләп китәм. Оҙон булып үҫкән үләнде ике яҡҡа ҡулым менән йыға барып, юл ярам. Өләсәйем башта уның янына барыр, оҙаҡ итеп үҙенең хәл-әхүәлдәрен һөйләр, «Зөлхизә»не шым ғына йырлап ҡуйыр ҙа: «Тыңлаһын, ул ошо йырҙы ярата ине...» – тип илап та алыр ине.

Йөҙөмдө ҡиблаға бороп доға уҡыйым: «Әссәләмәғәләйкүм йә әһләл-кубур йәғфируллаһ ләнә вә ләкүм. Әнтүм сәләфунә вә нәхну бил-әсәр. (Сәләм Һеҙгә, әй, ҡәбер халҡы! Аллаһ беҙгә һәм һеҙгә мәғрифәт итһен. Һеҙ элек киткәндәрҙән, беҙ ҙә һеҙҙең артығыҙҙан киләсәкбеҙ.)» Зыяратта уҡыла торған доғалар күп ул, ҡартәсәйемдән ошоноһон отоп ҡалғанмын, бәләкәй сағымда уҡ. Ул үҙе «Ясин», «Тәбәрәк», «Ихлас», «Нас» һәм «Фатиха» сүрәләрен уҡыр ине... Тәүге икәүһе оҙон, артабанғы өсәүһе ҡыҫҡа һәм еңел генә ятлана. «Нас»ты мин шиғыр кеүек итеп һөйләп ҡуйһам, әй, ҡыуана ине ғәзизем. Бәрәкәт! Ошо сүрәне хас та бәләкәс Нурия булып яңғыратып уҡып тора берәү янымда – ейәнсәрем!

– Тереләрҙең ҡәҙерен бел, үлгәндәрҙең ҡәберен бел, ти ҙәһә мәҡәл. Әйҙә, эҙемә генә баҫ, һине үҙемдең ҡартатайым янына алып барам.

– Теге ҡыҙыҡ исемле – Һатыбал ҡартатайымы?

– Эйе. Минең бәйәндәрҙә ул исемдең тарихы аңлатылған.

– Ҡырағай бер ырым, тәҙрә аша үҙ балаңды, имеш, һатып ал?

Бала аҡылы менән бәхәскә инмәҫтән, «Ихлас» сүрәһен көйләй башланым, Зирәк Рәйхана кеүек күркәм ҡатындың йөрәгенә ғүмерлеккә мөхәббәт һәм тоғролоҡ булып береккән заттың рухына арнап.

– Ҡартәсәй, Әдисәй бабай менән Татар әбекәй ҙә ошонда, тигәйнең?

– Йәнкисәкте, был зыярат ябылһа ла, ошонда оҙатҡайныҡ, әйтеп ҡалдырғайны, Әдисәйем янына ҡуйығыҙ мине, тип.

Ҡәберҙәре ҡараулы ғына. Сәғәҙәт ағай үҙе исән саҡта тимер рәшәткәләр ҡуйҙырып өлгөрҙө, Ҡырластауҙан яҫы гранитты ҡуптарып алып, шымартып, ядкәрташ итеп урынлаштырыу ҙа – уның изгелеге. Татар әбекәй Әдисәйенең һуңғы төйәгенә эре алһыу сәскәле тырнаҡ үләнде килтереп ултыртҡайны, шул хәҙер үҙенең тупрағына ла тамыр һуҙып үҫкән. Күп йыллыҡ ҡырағай гөл ул, Толпарсыҡҡан буйында мәңге баҡый ҡоромай, ана. Көҙөн уның оҙон һабаҡтарын төптән һындырып, бер ситкә йыйнап ҡуяһы бар – шулай иттем дә бер арый хәтирәләргә бирелеп торҙом... Ҡайтырға йыйынғанда, рәшәткә тышындағы «Килен ағасы»нан (Йәнкисәк Ҡырымынан килтереп Толпарлыға еректергән ҡыуағын бында ла ултырҡайны) бер ус ҡуҙаҡ өҙөп алдым да, ҡапҡанан сыҡҡас, һыҙғыртып ҡуйҙым: «Тыныс йоҡлағыҙ, әрүахтар…»

Яңы зыяратҡа табан барғанда, Айһылыуға өндәштем:

– Арыһаң, ҡайт?

– Юҡ инде, ҡартәсәй, мин һинең урыныңа ҡаласаҡ бәйәнсе, үҙең әйтмешләй, нәҫел бағы, – тимәһенме был бала.

– Ҡолоҡасым! – Зирәк Рәйхананың һиҙиә һүҙен әйтеп, хисләнеп китеп ҡосағыма алдым ейәнсәремде.

– Һин үҙеңдең дәфтәрҙәреңдә ҡасан яҙа башланың, әйт әле?

– Зөлхизә ҡиссаһынмы? Тап һинең йәшеңдә. Белгән берәүҙән мәғлүмәт тартҡылап мәш килеп йөрөгәйнем...

– Мин дә шулай! Атайым, һораштыра башлаһам, ана, ҡартсәйеңдән белеш, ти ҙә ҡуя. Әсәйем ни үҙенең медучилищенан һуң беҙҙең дауаханаға эшкә ебәрелеүен, мәктәпте тамамлап ҡына торған атайым менән ғашиҡ булышыуҙарын һөйләүҙән ары китә алмай. Әй, яңыраҡ бер серен асты, имеш. Әйтәйемме?

– Сер, тиһең үҙең.

– Һин белгән хәл ул. Атайым юрислыҡҡа уҡырға инә алмаған да армияға алынған, эйеме? Ул китеп ай самаһы үтеүгә, бер ҡыҙ, әсәйем инде, өйөгөҙгә килеп ингән дә иларға тотонған...

Айһылыу үҙ хәбәрен һөйләй, ә мин шул ваҡиғаларҙы хәтеремдән юллайым.

...Декабрь урталары. Кис. Шәмгә ут алған саҡ. Тышта ыжғыр буран, тәҙрәгә ҡар һылашҡан, үтеп-һүткәнде күрерлек түгел. Кемдер тәҙрә шаҡыны кеүек? Ишеккә йүгерҙем, Фатих дауаханала, тип әйтергә. Был сәғәттә ни, уны эҙләп килгәндәрҙер. Тупһаға уҡ сығып баҫтым, бер кем дә юҡ. Кире инеп китәйем тиһәм, бер һын шәйләнде.

– Инегеҙ, соланға ҡар тула! – тинем дә көтөп торам. Атаҡ, Фатих менән эшләгән медсестра? Халат ҡына кейгән, ҡалтырап төшкән үҙе. Өшөгәндер. Өйгә индереп, халатын системеп, ҡағып элдем дә сәй ҡуйҙым.

– Даниярҙан бер-бер насар хәбәр килдеме әллә? – Ҡурҡҡаным шул даһа. Был ҡыҙҙың улым менән хатлашыуын беләм. Армияға күҙ алдында оҙатып та ҡалды.

– Юҡ, уның өсөн борсолмағыҙ, – тине ҡыҙ, үҙе дер-дер ҡалтырай, – минең башыма ҡайғы төштө!

– Ниндәй ҡайғы, уф, балаҡай?!

– Фатих Рамазанович юҡта килдем, һеҙгә әйтергә... – Шунан был ҡысҡырып иларға тотондо, тыйып та алып булмай.

– Нимә булды, әйт! – Ҡаты итеп өндәштем.

– Ауырға ҡалғанмын... – Йығылып китә яҙҙым. Ниңәлер, ошо баланы әүрәткәнме Фатихым, тигән уй ҡаҙалды мейемә. Әлдә шул минутта ҡыҙ өҫтәп ҡуйҙы:
– Даниярҙан.

Өҫтөмдән тау ишелеп төштө, биллаһи! Ҡапылда шатланып уҡ китмәһәм дә, күҙ алдарым яҡтырҙы, зиһенем асылды кеүек.

– Шулмы ни ҡайғың, иҫәүән! Исемең иҫкә төшмәй тора?

– Сөмбөл. Иҫәүәндең иҫәүәне мин, һүҙегеҙ хаҡ, апай.

– Нишләмәкһең?

– Фатих Рамазанович мине уволнять итһен дә, ҡайтып китәйемме икән, тим. Отработкамды үтмәһәм, артабан институтҡа инеүе проблема буласаҡ.

– Ҡайҙан әле һин? Өфөнәнме?

– Эйе.

– Үҙегеҙҙә эшкә ҡалып булманымы?

– Атайым троллейбус йөрөтә, әсәйем – кондуктор. Танышлыҡ кәрәк хәҙер ҡалала урынлашыу өсөн, йә – аҡса... Бер йыл эшләрмен дә институтҡа керермен тигәйнем.

– Етер, илама! Урыҫ әйтмешләй, потерявши голову, о волосах не плачут. Шулаймы?

– Данияр...

– Йәшермәй әйт, әллә ул һине...?!

– Юҡ, апай, юҡ! Өйләнәм тигәйне, үҙем ҡаршы төштөм, армиянан ҡайтҡас та өлгөрөрбөҙ, тип. Белгәнме ни ошолай килеп сығырын!

Уңарсы сәйнүк ҡайнап сыҡты. Ҡыҙҙың битен йыуҙырып, бергәләп сәй эсергә күндерҙем. Күҙемә тултырып ҡарап тик ултыра. Яуап көтә. Ә мин – ике ут араһында: был бала ла йәл, улым да. Ун һигеҙ йәшенән атай булып, киләсәген кәртәләп ҡуйырмы? Әлегә Сөмбөлдө, ярар, Фатих Рамазанович ҡайтһын да, кәңәштөңәш итешербеҙ, борсолма, тип оҙатып ҡалыуҙан ары китә алманым.

– Ҡартатайым иртәгеһенә үк әсәйемде етәкләп алып ҡайтҡан, иветә? – Айһылыу, минең хәтер ебемде ҡулында тотоп торғандай, дөрөҫләп килә.

– Килендеме? Эйе, үҙебеҙҙә йәшәттек, атайың армиянан ҡайтҡансы. Ҡартатайың Харис дуҫы аша һөйләшеп, улыбыҙҙы өс көнгә ҡайтартып, загслаттыҡ.

– Теге генерал бабаймы? Уның ейәне быйыл йәй оҙоно ауылда йөрөнө. Етенселә уҡый икән. Адресымды һораған була, хәстрүш. Бирмәнемсе.

– Ниңә? Хат яҙғайны түгелме, барыбер белгән дәһә?

– Белгән! Разведчиклыҡҡа уҡыясаҡмын, тигән була...

Һай, мут ҡыҙыҡай, үҙенсә, шул малайҙы оҡшатып ҡалыуын ҡыялатып ҡына һиҙҙермәк.

Мин белгәндән әхирәткә күскән толпарлыларҙың күпселеге яңы зыяратта ята. Тәғәйен берәүгә түгел, ә һәр ҡаһыһын иҫкә алырға тип килдем. Бөтәһенә бергә сәләм бирҙем, доға атҡарҙым. Бында тәртип шундайыраҡ: нәҫелдәштәр бер тирәгәрәк ерләнгән. Тәүҙә үҙемдекеләр яғына йүнәлдем. Ҡартәсәйемдең ҡәберенә ҡуйылған ҡара мәрмәр әллә ҡайҙан күренә, атайым килтереп ҡуйғайны. «Тыныс йоҡла, ғәзизебеҙ» тип яҙылған да ике сәскә төшөрөлгән – умырзаялар.

– Зирәк Райхана – уны күреп беләм кеүек, һин йыш иҫкә алғанғамы икән, ҡартәсәй, – тип шыбырлай ейәнсәрем, үҙе миңә һыйынып килә. Әллә был тарафтағы һил шымлыҡтан шомлана төшкән?

– Айһылыу, ҡолоҡасым, әхирәт йорто – иң хәүефһеҙе, иң тыныс урын, шөрләмә, – тим. Һүҙемде башҡа юҫыҡҡа шылдырам: – Бәйәндәремде ослап ҡуяһы ине...

– Хафаланма унышына, үҙем дауам итермен артабан, тинем дәһә. Был быуат – минеке!

Ни тиергә лә белмәнем, ҡеүәтләргәме, йүгәнләргәме уның хыялын? Ярар, ул турала уйлар урын түгел бында. Ҡартәсәйемдең мәрмәр һәйкәл йөҙөндәге фотоһүрәтенә баҡтым. Йәш сағы. Ваҡ барсалы күлдәктән, иңендә селтәр шәл, муйынында мәрйен мунсаҡ, мәрйендәрҙең ҡыҙыл икәнен беләм...

– Ҡартәсәй, Зирәк Рәйхана Булгаковтың «Мастер һәм Маргарита»һын уҡымағандыр ҙаһа? – Айһылыуҙың һорауына аптырап ҡалдым.

– Уҡымыған.

– Ә ҡайҙан алған ул, ҡатын-ҡыҙҙың ҡанатын киҫһәң, ул һеперткегә атланып оса, тигәнде? Бәйәнеңдә бар. Булгаковса…

– Тормоштан алған, бәс.

– Әкиәттән, тиһәңсе.

– Әкиәт тә ысынбарлыҡтан сыҡҡан. Һы… Киреһенсә лә була, ҡолоҡасым.

– Ә нишләп орденлы Зөлфиә өләсәйҙең ҡәберендәге һәйкәлдә йондоҙ төшөрөлгән? Герой түгел дәһә? – Айһылыу уңарсы өләсәкәйҙең ҡырына барып баҫҡан.

– Уға һәйкәлде район хакимиәте ҡуйҙыртты, почетлы ветеранылыҙ, тип. Йондоҙо – ил алдындағы абруй символы.

– Мин «Зөлхизә вә Абдрахман ҡиссаһы»н хатта ки ятлап бөтөрҙөм. Шул борон заманда ла булған мөхәббәт?

– Донъя мөхәббәттән яралған, ҡолоҡасым.

– Беләм. Әҙәм вә Һауа...

Уйҙың тиҙлегенә ғәжәп иттем мин ғүмер баҡый – йыһани тиҙлек, үлсәм итеп ҡулланылған яҡтылыҡ йәки тауыш тиҙлегенән дә етеҙерәк ул!

Бына әле минутлап ҡына баҫып торам ҡәрҙәш әруахтар рухына баш эйеп, шул ғына арауыҡта уйым уларҙың тотош ғүмер йомғағын һүтеп, кире урап ҡуйып өлгөрә – үҙемә мәғлүм булған тәҡдирҙә, әлбиттә.

Әлеге уйҙы тыйып та булмай, ҡасан теләй, шунда, үҙе теләгән йөкмәткелә килә лә инә башыңа. Ошо минутта ни уйлап тораммы? Ҡартәсәйем баҡыйлыҡта Һатыбал ҡартатайым менән осрашҡандыр, унда тәүге никахың менән, имеш, ҡауышаһың. Ә Зөлхизә өләсәйемдең Абдрахманын күргеһе килер ҙәһә?! Мәңгелектә лә айырылышыу насип булһа, ҡайһылай үкенесле! Эйе, ошо сәйер уйға төшөп тороуым. Әй, өләсәкәй, һин йыш ҡына, күршегә ут алырға кергән кеүек кенә булдым, үттең дә киттең, ғүмеркәйем, тип ҡабатлар ҙа, яҡты донъяларҙан кем туйһын, тип ҡуйыр инең…

Бар ихтыярымды нығытып, семәрле сөгөн рәшәткәле ҡәбер янына йүнәлдем. Атайым! Ҡайтты...

«1929–1999», етмешенә ике ай ҡалғайны. Күмәкләп йыйылып юбилейын байрам итербеҙ, тип кәңәш ҡорғайныҡ. Декабрҙә тыуған ул. Уҡсы йондоҙлоғо бағыуында. «Уҡсы»лар хаҡында астрологтар, улар ҡайнар йөрәкле, тура һүҙле, ҙур маҡсаттар ҡуйып, һайлаған юлынан тайпылмай йәшәүселәр, тип яҙа. Һүҙмә-һүҙ Баязит Ҡарамырҙин хаҡында әйтелгән кеүек.

Әлдә генә атайымды иҫән сағында ғәфү итергә көс таптым үҙемдә, әлдә генә шуны белдерергә форсатым булды. Бала саҡтан бәғеремдә таш булып ҡатҡан

үпкәләремдән арына алмайынса оҙаҡ яфаландым. Сөнки уны яратыуым, атайлы – арҡалы булыу бәхетенә ирешеү өмөтө, ҡартәсәйемдең бер бөртөк улын һағынып бөгөлөүҙәре, йөрәк сиренә һабышып һарғайыуҙары өсөн көйөүем ифрат та көслө ине шул!

Атайымды Әмин абый бер ваҡыт «космополит» тип ҡылыҡһырлағайны. Моғайын, шулайҙыр ҙа. Бер һөйләшеү иҫкә төштө ошо юҫыҡта. Екатеринбургта батша ғаиләһен тотош, олоһон-кесеһен, атып үлтергәндәр. Имеш-мимеш түгел, ысын икән был фажиғә. Атайым эшләгән заводҡа тантаналы сараларға йыш ҡына бер почетлы ҡунаҡ саҡырылған, уға, ил батырҙарына тиңләп, ҙур хөрмәт күрһәтелгән – баҡһаң, батша ғаиләһен атыуҙа ҡатнашҡан кеше икән. Трибунаға сығып, маҡтанып, ентекләп һөйләр булған әлеге ваҡиғаны. «Шул әҙәмде күрһәм, оҙаҡ тыныслана алмайым, йөрәгем сәнсә, – тигәйне атайым. – Аңлайым, уға ла кемдер бойорған. Тик унын ҡырағай хөкөмдө атҡарыуына кәпрәйеп йөрөүенә, тыңлаусыларҙың ҡул сабыуҙарына йәнем әсенә. Йыһан һынлы Йыһанда халҡы хаҡлыҡҡа, тигеҙлеккә ҡоролған йәмғиәттә йәшәүсе планеталар барҙыр, тип ышанам. Ерҙәге намыҫлы кешеләрҙе шул планетаға күсерер инем!»

Фантастар яҙа лаһа... Жюль Верн һүрәтләгән ваҡиғалар ҙа заманында тупға яҙмаған, тип уҡылған, хәҙер улар ысынға әйләнеп бөтөп бара. Ул саҡта бәләкәй инем әле, атайымдың һөйләгәндәре күңелемә ҡыялатып ҡына ҡағылып киткән. Хәҙер килеп унын ҡалыпҡа һыймаҫ фекерҙәренә шаңҡып тороуым... Шул мәлдә кескәй Нуриянан башҡа асылыр кешеһе лә булмаған, күрәһең?! Их, атай, таяныс була алманым һиңә. Яҙмыш...

– Ҡартәсәй, ә бит дөрөҫ! – Айһылыу тағы һүҙ башланы.

– Нимә дөрөҫ?

– Баязит ҡартатайҙың космополитлығы. (Үҙем дәһә, онотолоп китеп һөйләшеп йөрөйөм баҡыйлыҡтағы ғәзиздәрем менән, баланы нисек тыяйым?) Һине интернет селтәренә индерҙем, ҡартәсәй, ә барыбер томанаһың был йәһәттә, шул «Класташтар»ынңан ары китә алмайһың.

– Белгәнем еткән: хәреф йыям, хат ебәрәм... Йә, баяғы хәбәреңә кире ҡайт.

– Сит планеталарға күсенеү – бөгөн алға килеп баҫҡан мәсьәлә, белһәң. Ғалимдар кешелекте кисекмәҫтән ерҙән күсендерә башлауҙың стратегик планын эшләргә тәҡдим итә, юғиһә, һуң буласаҡ, тиҙәр.

– Ҡайһы планеталарға?

– Марсҡа, мәҫәлән.

– Марс? Ҡыҙыл планета... Ул интернет уйҙырма менән тулған, тиҙәр. Ҡатырма башыңды, ҡолоҡасым. (Ә мин астрологиянан, Ҡояш системаһында Ерҙең урыны бәхетле, Марс һымаҡ алыҫ планетала йәшәһәк, туңыр инек, тип уҡыта инем? Дәреслек буйынса...)

– Ә һин, ҡартәсәй, ахрызамандан ҡурҡып йөрөмә! Теге Төркмәнбашындағы Иркен ағайға ла хәбәр ебәрҙем, ул да шөрләмәһен: булмай, һәр хәлдә – кисектерелгән ул катастрофа. Ер бабайҙың тағы кәмендә мең йыл йәшәтәһе бар әле кешеләрҙе – фәнни иҫбатланған.

– Юҡ-юҡта мин дә ул үрмәкес ауына инеп аҙашып йөрөп алам. Яңыраҡ кеҫә телефонына һалған аҡсамдан ҡолаҡ ҡаҡтым: тоҙаҡҡа эләктем, йәшәрергә теләп. Бушлай тип торҙо ла телефон номерымды алды, «Баҫығыҙ!» тигәс, баҫһам, йылт итеп бер рецепт килеп сыҡты...

– Бына һиңә «продвинутая бабушка»!

– Кем шулай, ти?

– Әмир, генерал ейәне. Иҫкә төшә лә торасы шул малай? Әй, кисә уның менән «Контакт»та ултырғайныҡ, әллә нимәләр яҙып бөткән, Америкала «ахрызаман пакеты» һатыуға сыҡҡан, ти.

– Пакет?

– Махсус кейем, маска, күҙлек, ун көнлөк ризыҡ запасы, антидепрессант кеүек дарыуҙар һалынған тоҡ, ти.

– Иҫәүәнлек. Ярар, күпмелер әҙәм берәй урында ҡотолоп ҡалды ла, ахырҙа, бер тереклекһеҙ ҡалған ергә килеп сыҡты, ти, – шунан?!

– Ҡартәсәй! Бында ысын герой ерләнгән, күр, һәйкәленә ҙур йондоҙ ҡуйылған! – Ейәнсәрем шул арала Сәмиғуллиндың ҡәбере янына барып баҫҡан икән. Мин дә шул яҡҡа ҡайырылдым.

...Ҡарлуғастар бала осора. Июнь башы. Ҡыҙылъяр ятыуы өҫтөндә кәйелешәләр. Алыҫтан бәләкәс кенә булып күренһәләр ҙә, осоштарынан танныйым. Улар мине ошо минутта хәсрәтле халәтемдән әҙгә генә йолоп торҙолар. Ҡайҙа икәнлегемде иҫемдән сығармаһам да, унлаған мылтыҡ көбәгенән сыҡҡан атыу тауышына тертләп киттем. Әммә был залп – ихтирам билдәһе, Толпарлының олоһо-кесеһе белгән, хөрмәт иткән, ваҡыты менән ҡурҡҡан да ҙур шәхесе менән хушлашыу ауазы.

Яугир, милиция ветераны Сәмиғуллинды бөтә ауыл оҙатты һуңғы юлға. Район комиссариаты һәм милиция бүлегенән форма кейгән кешеләр ыңғайына, хәрби оркестр ритмына баҫырға тырышып, халыҡ үҙәк урам буйлап үтте, митингыға йыйылды. Сәңгелдәктәге бәпестәрен дә күтәреп килгәндәр, берәү ҡалмағандыр өйөндә ултырып.

Әй, әттәгенәһе... Кәрәк саҡта йәшкә үҙенән өлкәнерәктәргә «атай» була алды ул заманында. Толпарлының тыныс йәшәүендә, ғәрәсәтле туҡһанынсыларҙа ла ҡот осҡос енәйәттәрҙең беҙҙе урап үтеүендә участковыйҙың хеҙмәтен баһалап та бөтөргөһөҙ. Тәртип боҙолғас ҡына сара күреп, йәғни ҡағыҙ тултырып районға оҙатыуҙа күрмәне ул бурысын, ә алдан алырға тырышты. Мәктәпкә көн ашалап килеп урар ине – кәүҙәһе күренеү ҙә иҫкәртте!

50 йыл хеҙмәт итте Сәмиғуллин Толпарлыға. Эшен шул тиклем дә яратҡан булған икән, тип уйланым да, эсемдән төҙәтеп ҡуйҙым: беҙҙе, кешеләрҙе, яратты ул!

Тыуым барҙа, үлем бар. Шул арауыҡта нисек йәшәүең бар! Донъялыҡта йөҙөңә ҡыҙыллыҡ килмәһә, баҡыйлыҡта ла һанланырһың. Ошо уй һә тигәнсе барлап сыға үткәнеңде, яҡшы-яманыңды бындай саҡта, зыяраттағы яңы ҡәбер тупрағы һалҡынлығы йәнде өшөткәндә...

Митинг ауыл аръяғында, зыяратҡа барып терәлгән киң майҙанда уҙҙы – кәнсәләр алдына ғына һыйырлыҡ түгел ине халыҡ. Ауылдаштарыма күҙ һалдым: ҡайғылылар, әммә етдиҙәр, әйтерһең дә, эстән генә Сәмиғуллиндың рухы алдында ниндәйҙер ғәйептәрен таныйҙар, ҡырын эш ҡылмаҫҡа вәғәҙә бирәләр, баш эйеп рәхмәт еткерәләр.

Гөлфирә менән Харис, Әлфирә менән Вилмир Гуля-Гөлсөм апайҙы ҡурсалап эргәһендә баҫып торалар. «Бөйөк ҡатын», – тип шыбырланы ирендәрем, аҡылым кире ҡаҡманы. Сәмиғуллин кеүек ир-уҙаман уны, ошо ябай, күңелсәк, бер ҡатлы, урыны менән мут-хәйләкәр, ярҙамсыл ҡатынды тиң күргән икән, тап шул даһа уның бөйөклөгө. Хәтер офоғонда ялтлап бер күренеш сағылды: әсәйем менән Гөлсөм апай Белоретҡа һатырға алып китергә әҙерләнгән көнбағыш тоғон йәшерәләр... Тентеү... Сәмиғуллин аҡты ҡаранан айыра белмәһә, кеше

яҙмышына битараф булһа, беҙҙе шул саҡ иҫкәртер инеме лә ҡатыны, тәкәббер булһа, үҙе килеп ярҙамлашып йөрөр инеме?!

Ҡарлуғастар бала осора. Күк аяҙ. Тыныс. Тормош дауам итә. Заяға үтмәне, тимәк, Сәмиғуллиндың ғүмере.

Дәфтәремә теркәп ҡуяйым, тип төйнәгәйнем ошо уйҙарҙы шул матәм көнөндә үк, һаман ниәтемде атҡармағанмын. Әле һүҙмә-һүҙ телемә килде лә, әйтеп бирҙем Сәмиғуллиндың үҙенә. Ана, ул милиция формаһындағы фотоһынан миңә һынамсыл ҡарашын төбәгән дә тыңлай...

Ниҙер ялт-йолт килгәнгә күҙем сағылып, һағайып киттем: Айһылыу икән, кеҫә телефоны менән булаша.

– Нишләүең, ә?!

– Ҡартәсәй, һинең әруахтар менән һөйләшеүҙәреңде диктофонға яҙҙырам.

– Тағы нимәләр ҡыландыра ул ғәләмәт?

– Фотоға төшөрә, хат ебәрә, иртән йоҡонан уята, математиканан миҫалдар эшләп бирә, – әй, һанап бөткөһөҙ...

– Тик бында кәртешкәгә төшөрөп йөрөй ҡуйма!

– Беләмсе. Ҡартәсәй, уйлап торам әле, бында торғаны бер ауыл һымаҡ, теге донъя ауылы.

– Фани донъянан үтеп киткәндәрҙең мәңгелек йорттары, ҡолоҡасым. Был «ауылда» бөтәһе лә тиерлек таныш йә туған, йә күрше миңә. Яңы зыярат асылғанда һинең йәштәрҙә инем.

– Был олатайҙы беләм. Һарыгүҙ, Ыласын тарихтары хәтеремдә генә. Һунарсы мажаралары... Элек шундай шәп олатайҙар булған? – Айһылыу ошонда ҡырт туҡтаны, килешмәгән хәбәр ысҡындырыуын аңғарҙы булыр. Ҡайтҡас, уңайын килтереп, был хаҡта һүҙ ҡуҙғатмай ҡалмам, тип уйланым да бер-ике йөмлә генә әйтеп ҡуйҙым:

– Атайҙары, ағайҙары һуғыштан ҡайтманы беҙҙән алдағы быуындың, беҙ олатайһыҙ ҡалдыҡ – улар яуҙа баш һалды. Ә күпме минең тиҫтерҙәрем тыумай ҡалды!

– Уф, нишләп?!

– Егеттәр һуғыш ҡырында һәләк булды, ҡыҙҙар кейәүһеҙ ҡалды.

Айһылыу бөтәнсә һорау бирмәне. Уйлы бала ул, хәҙер үҙенең уй-фекерҙәрендә төпсөнәсәк. Ә мин күңелемдән баҡыйлыҡҡа өндәштем: «Әй, Бүреһуҡҡан олатай, Толпарлы аҡһаҡалы! Ейәнең Вилмир, вариҫың, – беҙҙең арала. Уның булмышында – һинең сор зиһенең, ҡыйыу холҡоң, илһөйәрлегең. Рәхмәт һиңә, Бөркөтсө ҡарт! Минең аҡыл һандығымда ла һин һалған мираҫ бар, уны киләсәк быуынға тапшырыуҙы изге бурысым тип күрәм. Ә теге ҡомарҡыңды юғалтманым...»

Бер-ике көн генә сырхап ятты Әхмәҙин олатай. Мине янына саҡырып алды. Усыма бер бөртөк ҡыҙыл мәрйен кейҙерелгән булавка һалып йомдорҙо ла аңлатты: «Һатыбал дуҫым менән Малик байҙың бойҙайын елгәрәбеҙ. Өмә иткәйне. Рәйхана ла шунда. Йәш саҡ, ун етебеҙ ҙә тулмаған. Ҡулыбыҙ эшләй, күҙебеҙ – тик Рәйханала. Әле лә иҫтә: өҫтөндә йәшел ерлеккә сыт ҡыҙыл сәскә төшкән күлдәк, башына яулыҡ сөйгән. Муйынында ваҡ ҡына ҡыҙыл мәрйен теҙелгән мунсаҡ. Әй, килешә үҙенә! Бер мәлде Рәйхана ике ҡулы менән түшен ҡаплап, ҡатып ҡалды. Баҡһаң, мунсағының ебе өҙөлөп, мәрйене сәселгән икән. Һатыбал менән, йүгереп барып, ерҙән ул мәрйендәрҙе эҙләшергә тотондоҡ. Ырҙын табағы былай таҡыр, тотош тиерлек табып бөткәнбеҙҙер. Ә берәүһен мин үҙемә алып ҡалдым, уртыма йәшереп. Иҫтәлеккә. Бына ошо булавкаға күҙәүләп ҡуйҙым да ғүмер буйы һаҡланым. Йәшлегем мәрйене...»

Бүреһуҡҡан олатайҙың рухына, Һарыгүҙҙең тоҡомо ҡоромаған әле, быйыл Әнкәләр осонда уның тағы бер ише тыуҙы, тип хәбәр иттем дә хәләл ефете көләкәс Сәғүрә инәйҙең ҡәбере эргәһенә атланым. Фотоһы ҡуйылмаған, әммә уның һөйкөмлө йөҙөн күрәм, сылтыратып ҡына көлөүен ишетәмдәй...

Ете ҡуллы Сәғүрә лә – ошо тирәлә. «Егәрленең ҡулы – етәү» тигән мәҡәлде, шул уңған апайҙың ҡулын һанап ҡайтҡас, ҡартәсәйемдән тәүләп ишеткәйнем. Биш йәшемдә.

...Үлем һәр саҡ үкенесле. Ғәзиз кешеһен ҡотҡарыр өсөн ниҙер эшләй алмағаны өсөн әрнемәгән әҙәм һирәктер. Атайымды юғалтыу хәсрәтенән йүнәлеп өлгөрмәнек, Самат ағай вафат булды. Ейәненә тип, Ғаяндың улына, йорт бураһына делянка киҫергә барған ерҙән. Етмеш ете йәшендә. «Ауыр күтәргәндән эсәктәре сейәлгән, – тине Фатих, – шундуҡ районға алып китһәләр, операция эшләһәләр...»

– Атайым шундай ине бит, бүтәнгә ауыр булмаһын тип, гел бүрәнәнең йыуан осонан тота, – шулай өҙгөләнде Ғаян аҙаҡ. – Эсен тотоп барып сүгәләгәс тә, әйҙә, алып ҡайтам, тинем, юҡ, түҙерлек, ти ҙә ҡуя. Их, тыңламаҫҡа ине уны, үҙем ғәйепле!

– Йәштәр ыңғайына йөрөтмәҫкә ине, һикһәнгә етеп барған ҡартымды, мин дә инде, иҫәүән, – тип бөтөрөндө әсәйем дә.

Яҙмыш ғали йәнәптәре шулай хәл иткәс, нишләмәк. Атаһын һуңғы юлға оҙатырға Лира ла ҡайтҡайны. Ул үҙен оло кешеләй тотто:

– Матур йәшәне, намыҫлы ғүмер кисерҙе атайым. Беҙгә йәтим төҫө индермәне. Гәүһәр апай, рәхмәт, атайымды хур итмәнең, беҙҙе ҡаҡманың. Наҙгөл һеңлебеҙ бар. Атайымдың күңеле бөтөн булып йәшәне. Иламайыҡ. Йәне йәннәттә булһын.

Мин, мәңгелек йорто шаһитлығында, Самат ағайҙың рухына: «Атай» тип әйтмәһәк тә, атайҙан күрер изгелекте һинән күрҙек, ағай, рәхмәтебеҙ әхирәттә терәк булһын,» – тип өндәштем.

– Самат олатай мине ярата ине. – Ейәнсәрем дә үҙенең рәхмәтен ҡушып оҙатты баҡыйлыҡ почтаһына.

Һәр ҡәбер алдында әҙгә генә булһа ла туҡталып, хәтер йомғағындағы берәй төйөндө сисеп, ҡабат төйнәп китәм.

Дәүләтбикә апайым да, һуғышта һәләк булған Рәхмәтулла бабайымдың Кемерево яҡтарында донъя һөргән ҡыҙы, «ҡайтты». Тупраҡ тартҡандыр...

Орҡоя ҡоҙағый... «Ҡалала ни, балкондан тышҡа ҡарап торған булам, ситлектәге ҡоштай,» – тигәне һаман иҫтә.

Гөлшәһүрә инәй! Доғаҙаҡ ҡаҙҙай яңғыҙ ҡалманың. Гөлгәүһәр апайым бар – Абдрахман олатайымдың, үҙең әйтмешләй, «аҫыл ирҙең төҫө».

Әй, Ғәзимә инәй, күршекәйебеҙ... Һинең зарыңды ишетмәҫ, йөрәгемде әрнетмәҫ өсөн өйөңдө урап йөрөгән саҡтарым да булғылаңы, зинһар, ғәфү ит! Әрәшитеңде осратҡанһыңдыр, әхирәттә сиктәр юҡ, ти?..

– Алдашмағанһың, ҡартәсәй, был апай ысынлап та ҡайһылай сибәр булған!

– Фариза еңгәм үҙе сибәр, үҙе уңған, үҙе йомарт ине, ҡолоҡасым.

– Беләм, яҙғандарыңда сумырып маҡтағанһың уны. Яратҡан еңгәң.

– Серҙәшем. Бауырҙашым.

– Хәйрулла ағай унан ярты йылға ғына тороп ҡалған. Ә бит ул бәһлеүән кәүҙәле, көслө кеше булған, ҡатынынан күпкә йәшерәк тә?

– Һағынды ул еңгәне, һағыштан бөгөлдө...

– Әлдә бәйәндәрендә уҡып, баҫып бөткәйнем, ошонда эйәртерендә белгәндәй. Күбеһен танып торам, тормошта күрергә тура килмәгәндәрен дә. Бына был апайҙың, Гөлбикә күршенең, аҡ яулығы, күңеле лә, күпме хәсрәт кисереп тә, ҡараймаған, иветә? Ай... Уның Магаданға барған баржалағы фажиғәһен уҡығанда иланым, ҡартәсәй.

Ядкәрташтарҙағы, һәйкәлдәрҙәге яҙыуҙарҙы уҡып, Айһылыу шулай хәтеремдә ҡуҙғатып бара. Көҙгө көндөң ҡояшы төш мәлендә генә көндө сыуаҡлай тип, ашыға төштөм. Тик был хәтирәләргә сорналған моңһоу ауылды тотош урап сыҡмай ярамай, илтифатлы булыу фарыз!

Әүхәт ағай рухына нисек баш эймәй үтәйем? Фатихтың, ниһайәт, ауыл фельдшерының яҙмаларын ҙур ғына китап итеп баҫтырыуға өлгәшеүен уға әйтмәй китәйемме, әйттем.

– Ысынмы икән кешеләрҙең теге донъяла табыша алыуҙары? – тип һораған ейәнсәремдең арҡаһынан һөйөп алдым. – Үҙенә «таң чуагым» тигән Нүрбәге менән күрешһен ине Таңсулпан инәй, иветә?

Хәлисә инәй үпкәләп ҡалыр, иҫкә алдым. Һөйөнгән Мәхмүт ағай... Иҫәр Әсән – йәшенле йәй фажиғәһен күтәрә алманы... Хәйри ағай, Ғилмиә апай... Тракторсы Насип ағай... Маһибикә апай – ҡапыл әсәйемдең башынан яулығын һыпырып алып, ергә һалып тапағаны иҫкә төштө, тыныма туҙан ҡапланғандай булды: «Ғәфү иттем, аңланым, йәнең әрнеүҙән шулай ҡыланыуыңды: ир бирмәк – йән бирмәк, тиҙәр», – шыбырлай һалдым... Сулаҡ Мансур ағай – уның счеты үҙе киткәс тә оҙаҡ йылдар колхоз кәнсәләрендә стенала эленеп торҙо, иҫтәлеккә. «Ағай, бәләкәй сағымда һинән ишеткәйнем Хрущевтың американдарға: «Я вам покажу Кузькину мать!» – тип янағанын, шул Кузька тигәне атом бомбаһының йәшерен исеме булған икән»,– тип мәғлүмәт биреп киттем һуғыш ветеранына… Мәмбәт ағай – Комбат булып ғүмер иткәйне... Шәйәхмәт бабай – тәүге әртил ойоштороп, оҙаҡ йылдар колхоз рәйесе булған кеше – оҙон ғүмерле булыуына, туҡһан етегә етте, һөйөнә алманы, колхоздар тарҡала башлауына әсенеп китте донъялыҡтан...

– Ҡартәсәй, бында «Уҡытыусыларҙың уҡытыусыһы» тип яҙылған, унһы нисек була? – Ейәнсәрем Әмин абыйҙың ҡәбере тәңгәленән һүҙ ҡуша.

– Ул, мәҫәлән, минең дә уҡытыусым, әлеге көндә беҙҙең мәктәптә унлаған уҡыусыһы төрлө фәндәрҙән дәрес биреп йөрөй. – «Аңланым» тигәнде белдереп баш ҡаҡты ла Айһылыу, был төштә оҙағыраҡ торорomдо белгәндәй, арыраҡ китеп, тағы әлеге телефоны менән мөкиббән мәшғүл булды. Ә минең хәтерем Әмин абый вафат булған йылдағы ваҡиғаларҙы барлап сыҡты һәм әлеге минутта миңә кәрәклеһен һайлап алып, алдыма килтереп ҡуйҙы, ғәҙәтем уны бәйән итеп һүрәтләй һалды.

...Ауылдың йүкә телефонын хатта спутник бәйләнеше лә алмаштыра алмай, уға һауа торошо ла ҡамасау түгел, боҙолмай ҙа, иҫкермәй ҙә. Етмәһә, бушҡа хеҙмәтләндерә. Яңы хәбәре: уҡытыусы Әмин татар кейәүен башҡорт итеп ҡайтҡан. Бәс!

Баҡһаң, абый ҡоҙаһының юбилейына Нефтекамаға барған икән дә шунда унһының костюмына «Парижды алған өсөн» тип яҙылған тарихи көмөш миҙалды тағып алғанын күреп шаҡ ҡатҡан.

– Кемдеке? – Нисек һорашмаһын.

– Мөхәммәтҡол ҡартатайымдың атаһыныҡы, законный! – тигән ҡоҙаһы.

– Кейәүҙең ҡартатаһының ҡартатаһы була, әтеү – бишенсе быуын. – Математик Әмин абый тиҙ үк хисаплап сығарған.

– Меӊ дә ете йөҙ ҙә һикһән өсөнсө йылда тыуған, башҡорт кавалерияһы сафында Парижға барып еткән. «Төньяҡ амурҙары» хаҡында ишеткәнеӊ юҡмы ни? Быйыл 190 йыллыҡ юбилейы!– тигән ҡоҙа кеше, түшен киреп, миҙалдарын сыӊлатҡан: – Ә былары – үҙемдекеләр, Бөйөк Ватан һуғышынан. Еӊеү көнөн Польшала, Краковта, ҡаршыланым. Ғәләмәт матур күперҙәре иҫтә ҡалған...

– Ҡоҙа, бигәйбә, нишләп һин татар булып киттеӊ, меӊ һигеҙ йөҙ ун икелә ул кавалерияла тотош тиерлек башҡорттар хеҙмәт иткән дәһә? 28 кавалерия полкы! Күҙ алдына килтерегеҙ, һыбай сабып, уҡ атып, яу ораны һалып Парижға килеп кергән батырҙарҙы! Мсье-мадамдары, һүрәттәрҙә күргән уҡ-һаҙаҡлы мөхәббәт фәрештәләре ошо ҡиәфәткә ингәндәрме әллә, тип һаташып киткәндер ҡурҡыштарынан: улар ҡушҡан даһа «Төньяҡ амурҙары» тигән матур данды беҙҙекеләргә. Мөхәббәте лә булғандыр: «Жетем, егетем!»– тип бәғзе француженка башҡорт яугирыныӊ ҡосағына ла ингәндер... Вәт. Әтеү, ҡоҙа, һин – төптө башҡорт. Вәт!

Байрам табыны гөжләй башлаған, икегә бүленеп киткәндәр, бәхәс ҡупҡас.

– Был ерҙәр ҡәҙимге башҡорт ерҙәре, – тигән берәүҙәре.

– Милләт тикшерергә килдеӊме, ҡоҙа? – тип үпкә белдергән икенселәре.

Шунда Әмин абыйҙыӊ уҡымышлылығы ярап ҡалған, шиғыр әйтеп ебәргән:

*– Татарҙан да, башҡорттан да*
*Урыҫ тыуа, вәт бәлә –*
*Бына ҡайҙа мәсьәлә!*

– Вәт сәпәгән Әнғәм абзаӊ! Йәмәғәт, ҙур мәсьәлә был, ике халыҡ өсөн дә. Беҙгә татыу йәшәргә, бер төптән булырға кәрәк! – тигән кәйеф башланып, мәжлес боҙолмай ҡалған.

Зыярат ҡылып ҡайтышлай, мәҙәниәт йортона йәнәшә паркка һуғылдыҡ: бында Бөйөк Ватан һуғышында һәләк булған ауылдаштар иҫтәлегенә обелиск ҡуйылған. Унда минеӊ ике бабайымдыӊ, Рәхмәтулла менән Зәйнулла Нәҙершиндарҙыӊ, һәм олатайым Абдрахман Аҡсуриндыӊ исемдәре бар.

– Бынау исем аҙағыраҡ яҙылған әллә, хәрефтәре яӊы кеүек? Һорайым тием дә, онотам гелән. – Айһылыуҙыӊ күҙе осҡор, элек үк күргән: – Мәрүән Ғәлләмов. Ут күрше Гөлбикә апайҙыӊ ГУЛАГ тотҡонлоғонда үлгән иреме? Теге американка Сараныӊ атаһы?

– Эйе. Бик иғтибарлап йыйғанһыӊ минеӊ бәйәндәрҙе... Саранан хат алғас, Мәрүән ағайҙыӊ яҙмышын теүәл белгәс, исеме өҫтәп ҡуйылды.

Ҡайтышлай һөйләшмәй генә атланыҡ. Айһылыу ҙа, минеӊ һымаҡ, күӊеленә инеп тулған тәьсораттарын барлап килә, моғайын. Шул минутта телефоны шылтыраны, әсәһе икән. Ейәнсәрем йүгереп ҡайтып китте, мин үҙебеҙгә ыӊғайланым.

Фатихтыӊ да өйгә инеп кенә тороуы икән.

– Әсәһе, сәйеӊде хәстәрлә, дауаханала бик ҡатмарлы хәлдәр... Өсәүләп диагноз ҡуя алмайбыҙ. Килен, йөрәктер, ти, Искәндәр миӊә күҙ терәй.

– Бәс... Үҙеӊ нисек уйлайһыӊ һуӊ?

– Дивертикул пищевода һымаҡ. Аш юлында, бер урында бүҫелеп сыҡҡан «тоҡсай» йәғни. Арсенға шалтыратайым әле, тим.

Мин өҫтәл хәстәрләгән арала, Фатих бажаһы менән оҙаҡ ҡына итеп һөйләшеп алды. Ары-бире ҡолағыма салынды хәбәрҙәре:

– Аритмия сердца... Пробовали... Наследственный фактормы – юҡ... Бер

догадкам бар, тыңла әле. На дивертикул пищевода похоже. Пищеводмы, башҡортса – ҡыҙыл үңәс. Да-да, пища туда  затекает и давит на заднюю стенку пищевода, а тот в свою очередь – на сердце, в результате – аритмия. Конечно же! Рәхмәт, бажа!

Фатих трубканы һалды ла минең янға кухняға инде. Үҙе устарын ыуғылап, баҫҡан ерендә сыҙамай тора. Зәңгәр күҙҙәре бәзләгән, ауыҙы йырылған. Эше уңһа, шулай йәшәреп китә ул. Ашығып һөйләй ҙә башланы:

– Точно! Минең диагноз дөрөҫ. Хәҙер үк районға шылтыратам, ашығыс операция кәрәк.  Иртүк оҙатам сирлене. – Шунан бер сынаяҡ ҡына һөтлө сәй эсеп алды ла өтәләнеп сығып йүгерҙе. Улай ҙа минең компьютер өҫтәлендәге ҡағыҙ-ҡәләмгә ишаралап, ҡолағыма «бәғерем»ен шыбырларға онотманы. Бына табылған берәү...

Айһылыу, китабыңды дауам итәм, тигәйне? Мәшәҡәт араһында был һүҙе уйымда уралды, яуап талап итте. Юҡ, улай ярамаҫтыр. Үҙемә тейеште ҡәләмем ҡулымдан төшкәнсе үҙем атҡарырға бурыслымын. Ә ул – яҙһын! Шәхсән үҙ китабын, донъяға үҙ күҙлеге аша бағып.

Ейәнсәремде һынамаҡ иттем башта. Һәләтен самаламаҡ. Уҙған ике-өс көн хаҡында яҙып килтер әле, һинән башҡа кем булдыра ала быны, тип юхаланым бәләкәсемде.

– Ә мин шул көндө үк, зыярат ҡылып ҡайтҡас та, тасуир иттем, ҡартәсәй, – ти. – Мә, уҡы! – Тотоп та килгән.

Шундуҡ уҡый һалдым. Эсемдән генә үҙемдең тәьҫораттарым менән сағыштыра барҙым. Айырма бар. Зыяраттан сығыр алдынан ҡапыл көслө ел ҡупты ла ҡарт бер ҡайындың һары япраҡтарын күҙ асып йомғансы өҙөп алып, әллә ҡайҙа осороп алып китте. Мин быны «Хушығыҙ» тигән ишараға юраным. Ә Айһылыу ошолай яҙған: «Мәңгелек ауылында ла «өйҙәр» урам-урам булып теҙелгән. Тик бында машиналар елмәй, кешеләр ығы-зығы йөрөмәй. Был ауылда үткәндәр йәшәй, хәтер еле иҫә. Уртала дәү ҡайын ултыра, тик бер уның ғына япраҡтары һаман өҙөлмәгән. Ғәжәп. Бүтән ағастар шәп-шәрә, көҙ килгән дәһә. Ә япраҡтармы икән әле ул ҡайында дер-дер килә? Һарытүш турғайҙар бит! Дөрөҫөрәге, уларҙың йәндәрелер, ошо тынлыҡҡа һыйынғандарҙыр... Ай, турғайҙар тубы көтмәгәндә осто-китте, әллә беҙ өркөттөк?»

Атаҡ, ҡәләме шыма ғына, ә иң ғәжәбе – олпат уйлы, ун өсөнә генә киткән бала лаһа... Хәйер, хәҙергеләр иртә  өлгөрә, һәр йәһәттән дә.

– Ҡартәсәй! Иркен ағайҙан хат килгән, китабыңды һораған. Әйҙә ебәрәйек, аҙағы буласаҡ, тип иҫкәртәйек тә.

– Ебәр һуң...

Ошо минутта ҡарар иттем: үҙ заманымды тасуирлау – минең өлөш. Уҙған ун ике йылды күңелемдә яҙып, үҙемдең аҡыл иләгемдән иләй барҙым, ҡәләм тибрәтмәһәм дә, әммә бына сәйәси ваҡиғаларға баһа бирергә ашыҡмаҫҡалыр. Был йәшемдә шуны яҡшы аңланым: тарих үҙгәрмәй, ә ҡараш үҙгәрә.

...Тышта күшеккән турғайҙар һикерешә, Фатих лапаҫ аҫтындағы малға бесән төшөрөп киткәйне, шунда ҡойолоп ҡалыр үлән орлоҡтарына тамшанып сырҡылдашалар. Баҡсала ҡырау һуҡҡан көҙгө сәскәләр йәл ҡиәфәттә ҡоршайып ултыра – ҡаҙып алаһы бар. Ҡар һибәләп ҡуйғылай, әммә ноябрь туңғағын ҡаплай алмай әле. Шыҡһыҙ сағы тәбиғәттең.

Ә минең күңелемдә – үҙенә күрә бер сыуаҡ мәл. Бәйәндәрем бәйнә-бәйнә ялғана, берсә күҙен төшөрмәй генә бәйләнгән шәлдәй, берсә нескә селтәрҙәй – кәйефемә ҡарап. Ҡалын, тупаҫ һәм төҫһөҙ ептәр менән эш иткән урындар ҙа бар, әммә шул килеш ҡалдырам: тормош гелән ебәктән туҡылмаған. Ана, яңыраҡ Мәскәүҙә ике ауылдашты туҡмап үлтерҙеләр, йәш кенә ирҙәрҙе. Кемдер ерәү юл асты ла, шунда төҙөлөшкә бригада туплап бара торғайнылар, биш-алты йыл инде. Арыу ғына аҡса алып ҡайталар ине. Яҙҙан китәләр ҙә ҡар яуғас ҡына өйҙәренә йоғалар. Йәйҙәрен ауылда ҡарттар менән малай-шалай ҡала, өмә итәм тиһәң, кеше табырлыҡ түгел, тип зарлана халыҡ. Һуғыш осоромо ни?!

Тажиҡ гастарбайтерҙары тип уйлап, эшһеҙ йөрөгән урыҫтар һөжүм иткән, тине Данияр. Тажиҡ булһа, үлтерергәме ни? Мәскәүлеләрҙең ауыр, бысраҡ эшкә елкәләре батмауын, ҡырҙан килгәндәргә икеләтә әҙ түләүҙәрен дә беләбеҙ. Ошо хәлде әсенмәйенсә, сағыу төҫтәр менән семәрләп яҙып буламы?!

Йәки бына тағы бер бәлә: донъяны алдаҡ табиптар баҫып алды, улар ауылға ла килеп етә. Экстрасенстар, күҙ ҡарашы, шифалы тыны менән дауалаусылар, әллә ниндәй төнәтмәләр эсереүселәр, һылап-һыйпаусылар... Фатих әйтә, илдә ете йөҙ мең ысын врач бар, ә халыҡ медицинаһы тигән һүҙ менән күҙ бәйләүселәр һаны һигеҙ йөҙ меңдән ашыу, ти. Шарлатандарға ышанып, күптәр үҙен һуңғы сиккә еткерә лә дауаханаға килеп йығыла, ҡотҡара алмаһа, врач ғәйепле…

Иң ҡурҡынысы – наркомания. Илдә баш китерлек фажиғәләр күстәрелә. Район үҙәгендә өс үҫмер передозировканан үлгән: мәктәптә дезоморфин таратып йөрөгәндәр, уныһы аптекала иркен һатыла торған кодеинлы дарыуҙарҙан эшләнә, шуға осһоҙға төшә, ә үҙе ҡиммәтле героиндан да көсләрәк, ти. Ҡалаларҙа иһә – мәхшәр. Беҙҙең Русландарҙың күршеләре наркоман булып сыҡты, әллә нисә тапҡыр дауаланып ҡаранылар – файҙаһы юҡ, кире башлайҙар. Ахырҙа спид эләктереп, үлеп ҡуйҙылар. Ун йәшлек ҡыҙҙары өләсәһе ҡулында тороп ҡалған. Бала наркоман түгел, ә барыбер шауҡымы тейгән ата-әсәһенең: алтынсы ҡаттан балкондан һикергән. Шул хәлде нисек ҡәләм осона эләктермәй ҡалайым, эләктерҙем:

...Азалия балконға сыҡты. Өләсәһе ҡояшҡа сығарып ҡуйған ярангөлгә һыу һипте. Ә көн шундай сыуаҡ, еләҫ кенә иркә ел иҫә, ҡыҙыҡайҙың маңлай сәстәрен туҙғыта. Кисә муйыл сәскә атҡайны, һалҡын булды, ә бөгөн донъя хуш еҫтәр менән тулған, йылы рәхәтлеккә сумған.

Ҡыҙыҡайҙың усына күбәләк килеп ҡунды. «Өф» тигәнгә осто-китте. Зәңгәр күккә, иркенлеккә. Ҡанаттары булғас ни!

Азалия ла – ҡанатлы, ул да азат һәм теләгән яҡҡа осоп китә ала! Ана, аҡ күбектәй сәскәгә сумған муйылдар, әйтерһең, туй күлдәге кейгән кәләштәр...

Азалия ла шунда осоп барһын, ул бит ҡанатлы, үҙе нәҙекәй, еңел генә, талпынһын да осһон-китһен! Осто…

– «Күбәләк синдромы», – тине Фатих, был фажиғәне ишеткәс. Наркологтар шундай термин менән йөрөтә икән был сирҙе. Балаға әсәһенең кисергәндәре ҡан хәтере менән күсә... Ана шул минутлыҡ халәтте, ер менән күк араһында күбәләктәй осоп йөрөү халәтен, тойор өсөн наркоман үҙенең һаулығы, ғүмере менән түләй.

Ошо өлөштө уҡып сыҡтым да, бөгөнгә башҡаса яҙыша алманым да ҡуйҙым. Халыҡтың баш өҫтөндә аяуһыҙ балта эленеп торғанын айырым-асыҡ күрҙем.

Һуғыштарҙы туҡтатыу, бер уйлаһаң, алама ғәҙәттәрҙе, үлемесле мауығыуҙарҙы еңеүгә ҡарағанда еңелерәктер?

Шул саҡ өҫтәлемдәге компьютер былтланы: хәбәр килгән. Почтамды астым. Иркен икән:

– Апа-жан, һеҙ сайтта – гәпләшеп алайыҡ? Китабығыҙҙы уҡыным. Хәҙер минең беләһем килә бит инде, геройҙарығыҙҙың яҙмыштары артабан нисек барып сығыр, тип яҙған?

– Әле тап шул хаҡта яҙышып ултырам.

– Көтәм!

– Хуп, мырҙам. Ә Урал йылғаһын Жайыҡ тип ҡаҙаҡтар тоғро йөрөтә икән, әйткәйнең. Крәҫтиән яуын баҫтырғас, Екатерина II батшабикә махсус манифест сығарған, Пугачевҡа бәйле барлыҡ исем-атаманы телгә алмаҫҡа, тип. Беҙҙә – Салауат батырыбыҙҙы, уның көрәштәштәрен, Яйыҡ йылғабыҙҙы... Үҙеңдең хәлдәрең, мырҙам?

– Бында бер төркөм әҙәмдәр «Нух кәмәһе» төҙөп ята. Ахрызаман көтәләр.

– Ҙурмы кәмәләре?

– Ҙур! Мең квадрат метр, ти. Карап!

– Нух пәйғәмбәрҙекенән ун тапҡырға бәләкәй икән.

– Ысынмы?

– Китап шулай, ти. Әлегә хуш, мырҙам?

– Хош, апа жан!

Дауахана яғына ҡараған тәҙрәгә күҙ һалып килдем, Фатих күренмәйме, тип. Күренмәй. Телевизорҙы астым: «Социаль етемдәр» тигән теманы күтәреп сыҡҡан тапшырыу бара. Балалар йортонда тәрбиәләнеүселәрҙең 90 проценты ата-әсәһе ташлаған, йәғни социаль етемдәр, ти. Әстәғәфирулла! Уйым үҙенән-үҙе башҡараҡ юҫыҡҡа инеп китте. Тәбиғәттә яманаты сыҡҡан кәкүк иҫкә төштө. Бер тапҡыр үҙ күҙем менән дә күрҙем шул ҡоштоң балаһының ни ҡыланғанын. Сорлауыҡ уйнаған бала сағымда шаһит булдым ул хәлгә, бөгөн дә онотмағанмын. Яҙ мәле. Күрәнле ҡултығында, теге мөншөгөр «баҡырған» төштә, йәшенеп ултырам. Бер ҡыуаҡтағы ҡош ояһынан сәйер тауыш килгәненә иғтибар иттем. Үрелеп ҡараным да шаҡ ҡаттым: унда әлегә яп-яланғас өс турғай балаһы һәм ҙурыраҡ бер ҡошсоҡ мәш киләләр. Шул ҙурырағы – алданыраҡ сыҡҡан әллә йомортҡаһынан – теге бәләкәстәрҙең берәүһен ҡыҫырыҡлап оянан төртөп төшөрҙө. Йомортҡаһын сатнатып морон төрткән дүртенсе сепей ҙә аҫка осто. Ул арала инә турғаймы, атаһымы осоп килде лә, суҡышындағы емде теге ҙурыраҡ ҡошсоҡтоң тамағына һоғондороп, ҡабат осоп китте, унынһы иркенәйеп ҡалған ояла йәйелеп ятып ҡалды. Шаңҡып һерәйеп баҫып торғанымда, малайҙар мине килеп тә тапты.

Ҡайтҡас ҡартәсәйемә һөйләнем теге ғибрәтте. Кәкүк балаһын күргәнһең, инәһе шулай сит ояға һала ла ҡаса бит күкәйен, тине ул. Һағыҙаҡта ла бар ундай ғәҙәт, ҡарышлауыҡтың эсенә һала күкәйҙәрен, улары меҫкендең есемен эстән мөнтәп туҡланып, шунда ҡанат яра, ә күбәләккә әйләнәсәк ҡарышлауыҡ һәләк була, тип тә аптыраткайны. Кәкүкте ғалимдар аҡланы бер килке, уның тел төбөндә ағыулы шыйыҡса бар икән, шуға ла балаларын туҡландыра алмай, имеш.

Тағы баяғы тапшырыуға ҡолаҡ һалдым.

– Биш баланы нисек үҫтерәйем, эш юҡ, аҡса юҡ, – тип сәрелдәй йәш кенә ҡатын.

– Араҡыға табаһың, балаларға хөкүмәт биргән аҡсаны эсеп бөтөрәһең. – Быны күршеһе әйтә.

– Ә ниңә йыл һайын бала табаһың, ҡарарға хәлеңдән килмәгәс?! – Залдан ҡысҡыралар.

– Әсәлек хоҡуғынан мәхрүм итәбеҙ! Балаларҙы детдомға оҙатабыҙ, – ти опека органы вәкиле. Һәм әлеге ғаиләнең тормош шарттарын экранда күрһәтеүҙе һорай. Әләгеп йығылырлыҡ бола, бысраҡ һауыт-һаба. Ризыҡ әҫәре күренмәй. Иҙәндә араҡы шешәләре аунап ята, шунда уҡ сабый имгәкләп йөрөй...

– Демография киҫкен хәлдә. Етеш тормошта йәшәүселәр бала тапмай, өйөндә йә эт, йә берәй экзотик йәнлек аҫырай. Күп балалы ғаиләләргә шарттар тыуҙырыу кәрәк! – тип һалды тапшырыуҙа ҡатнашҡан депутат әфәнде. Әйтерһең, һайлаусылар тап шундай хәстәрҙәрҙе уның үҙенә йөкмәтмәгән?

Ай... Асиямдың әйткәндәре лә килеп уралды бауырыма, минутына 2 аборт яһала, ти ҙәһә беҙҙең илдә. Ана нисек килә ята ахрызаман!

Йөрәгем сәнсеп ҡуйҙы. Шул мәлдә баяғы компьютер ым бирҙе. Ейәнсәрем хат ебәргән: «Мин – Айһылыу, микрокосмос, макрокосмосҡа сыҡтым. Күҙемде астым. Иң беренсе ҡартәсәйемдең йөҙөн күрҙем, уның тауышын ишеттем... – тигәндәрен уҡып бөтөр-бөтмәҫтән, илап ебәрҙем. Күңелем ебеп, йәнем рәхәтләнеүҙән... Шулай шул, яңы тыуған сабыйҙың тәзләп илауына түҙмәй, барып ингәйнем бәпесләү бүлмәһенә. Зөһрә баланы миңә төрөп тотторҙо ла килен янында мәш килде: ейәнсәрем илауынан туҡтап, шешмәк күҙ бәбәктәрен күтәреп миңә ҡараны – танығандай итте. Әле килеп, ана бит ул тағы ниҙәр яҙа:
– Әсә ҡарынын «кесе йыһан» тип ҡартәсәйем дөрөҫ атаған, микрокосмос – кешенең үҙе, ти фән. Кеше лә, Оло йыһан да бер үк хасилда: беҙҙең тәнебеҙ – тупраҡтан, ҡаныбыҙ – һыуҙан, тыныбыҙ – һауанан, йылыбыҙ – уттан. Кесе йыһан – Оло Йыһан гармонияһы».

Раббым! Ошо баланың донъяға бар булыуында, Йыһан киңлегендә аңлы, тере бөртөк хасилында өйөрөлөүендә минең дә кескәй генә ихтыярым булды: киленемә һырт ҡуйып торһам, кем белә, тыуыр инеме ул, юҡмы? Рәхмәтлемен, Аллаһым, шул мәлдә зиһенемә яҡтылыҡ, күңелемә миһырбан биргәнеңә!

Нәҫелем, Толпарлым тәүарихын, халҡыма, донъяға булған һөйөүем шаңдауҙарын хәҙергегә килтереп терәнем, иншалла. Башҡортостан, Рәсәй киңлектәренә сәселгән, донъяның һәр ҡитғаһында эҙе ҡалған тоҡомдаштарым яңы быуатта ла төрлө тарафтарҙан ауаз ташлай. Һәм беләм: бер яңғыҙым түгелмен мин – Оло йыһандағы шәхсән орбитамда, ауылымда-илемдә хәтер бағыусы ҡатын. Быуаттар һуҙымында күпме ташъяҙмалар ауған, кәшәнәләр ҡомтупраҡҡа ҡалған, санскриттар саңға әйләнгән, петрографтар юйылған... Әммә уй - хәтер уларҙы тергеҙгән, быуындан быуынға ҡан аша, тел илә тапшыра килгән һәм шулай дауам итер – Йыһани даһи аҡылдың ҡануны был.

Бөгөн 2012 йылдың 20 декабре. Иртәгәге көн – Юғары көс ихтыярында. Уны һәр кем үҙенсә көтә, фаразлай, әҙерләнә – үҙ аҡылы, иманы, холҡо кимәлендә. Кемдер ризыҡ туплап бункерға инеп ултырған, кемдер – карапҡа... Ә мин – Ҡатын, Әсә, уй даръяһында йөҙәм, уйлы заттан мин. Донъяның ҡот-ырыҫы сәңгелдәк бәүеткән ҡулда икәнлегенә аңы-йөрәге менән инанған заттан.



**Йыһат**
**СОЛТАНОВ**

# СӨЙӨМБИКӘ ҺЫЛЫУ

## ДРАМА-ХРОНИКА

**3 ШАРШАУҘА, 13 СӘХНӘ ҺӘМ ЭПИЛОГТА**

**ҠАТНАШАЛАР** *(бөтәһе лә реаль ваҡиғаларҙағы тарихи шәхестәр)*:

**Йософ** — *башҡорт (нуғай) иленең көньяҡ яртыһының, йәғни Бәләкәй урҙаның мырҙаһы, аҙаҡтан кенәз*
**Һылыубикә** — *Йософтоң ҡатыны*
**Сөйөмбикә** — *Йософтоң ҡыҙы, тәүҙә 14 йәштә*
**Юныс** — *Йософтоң өлкән улы, Аҡтүбә ҡалаһы мырҙаһы*
**Йәнсура батыр** — *азаматтар башлығы, тәүҙә 16 йәштә*
**Үҫәргән** — *Йософтоң Мәскәүгә йөрөмтәл илсеһе*
**Исмәғил** — *Ҙур урҙа кенәзе, Йософтоң бер туған ағаһы*
**Тимер** — *Исмәғилдең Мәскәүгә йөрөмтәл илсеһе*
**Йәнғәли** — *Ҡасим ханы Шәйехғәлиҙең аҡылға бер төрләрәк бер туған ҡустыһы, Ҡазан ханы, тәүҙә 27 йәштә*
**Сафагәрәй** — *Ҡазан ханы*

---

*Яҙыусы Йыһат Әҙеһәм улы Солтанов 1932 йылдың 3 декабрендә БАССР-ҙың Йәнсура (хәҙерге Ырымбур өлкәһенең Һарыҡташ) районы Сәнкем-Биктимер ауылында тыуған. Колхозда эшләй, Ырымбурҙағы колхоз рәйестәре әҙерләү мәктәбенә ебәрелә. Шуның икенсе курсынан хәрби хеҙмәткә саҡыртыла: 1951—1956 йылдарҙа Балтик хәрби-диңгеҙ флотында хеҙмәт итә. 1953 йылда «Әҙәби Башҡортостан» (хәҙерге «Ағиҙел») журналында — тәүге шиғыры, ә 1957 йылда «Пионер» журналында хикәйәһе донъя күрә.*

*Хәрби хеҙмәтен тултырғас, йәш әҙип ҡабат колхозда эшләй, киске мәктәптә урта белем ала, ә 1969 йылда ситтән тороп Башҡорт дәүләт университетын тамамлай. 1965 йылда уны «Һәнәк» журналына саҡыралар, аҙаҡ ул оҙаҡ йылдар «Ағиҙел» редакцияһында әҙәби хеҙмәткәр була. Нәфис әҙәбиәттең хәтһеҙ жанрҙарында әүҙем ижад итә, күп китаптары баҫылды.*

*Элекке хеҙмәттәшебеҙҙе һәм өлкән ҡәләмдәшебеҙҙе оло юбилейы — 80 йәше менән ихлас ҡотлайбыҙ, ныҡлы һаулыҡ, бөтмәҫ илһам теләйбеҙ.*

**Ҡушаҡ** — *Сафагәрәйҙең, һуңынан Сөйөмбикәнең хан гвардияһы башлығы*
**Мурали бәк**
**Хоҙайғол уғлан** — *Сөйөмбикәне Яуыз Иванга һатҡан Ҡазан олуғтарының етәкселәре*
**Ҡолшәриф** — *Ҡазандың баш муллаһы*
**Бойорған Сәйет** — *Ҡазан ханлығының баш муллаһы*
**Елена (шәүлә)** — *Мәскәү бөйөк кенәзе мәрхүм Василийҙың мәрхүмә ҡатыны, Яуыз Ивандың әсәһе*
**Иван (Яуыз Иван)** — *Рәсәй батшаһы, 21 йәштә*
**Макарий** — *митрополит*
**Адашев** — *Яуыз Ивандың ышаныслыһы. Ҡазан, Әстерхан ханлыҡтарын яулап алыу буйынса дипломатик эштәрҙе башҡарыусы, Ҡазан ҡәлғәһен шартлатыуҙа инженер эштәре башлығы*
**Петр Серебряный** — *кенәз, татарса яҡшы белә*
**Кадыш Кудинов** — *Мәскәүҙең Бәләкәй урҙалағы илсеһе*
**Вәкил** — *Төркиә вәкиле, ғәмәлдә башҡорттарҙы урыҫ дәүләтенә (Мәскәүгә) ҡаршы аяҡландырыусы шпион.*
**Әбей** — *Сөйөмбикәнең тәрбиәсеһе*
**Бабай** — *Йәнгәлиҙең тәрбиәсеһе*

## БЕРЕНСЕ ШАРШАУ

### 1-се сәхнә

**Сәхнә төбөндә дата: «1532 йыл». Яйыҡ йылғаһына һул яҡлап ҡойған Урта Бүртә йылғаһы тамағында, уның уң ярында (хәҙерге Ырымбур өлкәһенә ҡарай) тәбиғәттең иң хозур бер төбәге. Биналары ҡыҙыл кирбестән төҙөлгән Кесе һарайсыҡ ҡаласығы һыҙатлана—Йософ мырҙа йәйләүе. Мырҙа һарайы эргәһендә нәҙек манаралы мәсет. Йәмле июнь айы, Яйыҡтың ҡусҡыллыҡҡа күмелгән яр буйҙары. Аръяҡта — үркәс-үркәс тауҙар, таҫмаланып офоҡҡа тартылған юл. Һыҙылып таң атып килә, һандуғастар өҙҙөрөп һайрай. Композитор Наил Ғәлиевтың Шәриф Биҡҡол шиғырына «Оҙата кил» йыры Венер Килмөхәмәтов башҡарыуында тирбәлеп яңғырай. Алыҫтарға бағып кемделер көткән, һандуғастар моңонан нык болоҡһоған яңғыҙ ҡыҙ һыны.**

**Сөйөмбикә.** Уф, Аллаҡай ғынам, ошондалыр, ахырыһы, һинең аҫыл ожмахың! Былбылдарын ғына тыңла: «Ожмах! Ожмах! Ожмах!» — тип сутылдайҙар бит... Ысындыр ҙа был. Сөнки ете ер, ете диңгеҙ аръяғынан килеп киткән мосафирҙар ҙа бит тыуған Башҡортостанымды, ҡитғабыҙҙың ожмахы, тип танайҙар. Их, һандуғаслы гүзәл Башҡортостаным! Ошо йәшемдә генә лә арҡыс-торҡос күп буйланым һине мин. Көньяҡтың эҫе – көйҙөргөс самум елдәре өтөп торған Үҫәргән диңгеҙенән алып (уны «Аҡәсә-би» — Каспий диңгеҙе тип тә йөрөтәләр) һалҡын-туңдырғыс ҡар буранлы Төньяҡ боҙло диңгеҙгәсә, Иҙел ярҙарынан алып Иртыш ярҙарынаса бөтә Башҡортостанымды ҡыҙырырға яҙҙы миңә, Хаҡ Тәғәлә. Сөнки ҡайҙа ғына барма— бөтә Урал буйҙары үҙебеҙҙеке. Төньяҡлап Ағиҙел, Ҡариҙел, Дим һыуҙары бергә килеп тоташҡан тошта, бөтә ҡалаларыбыҙҙың әсәһе булған изге Көн-Өфө ҡалаһында, ошо

Бөтә Башҡортостанымдың кенәзе, атайымдың бер туған ағаһы Исмәғил олатам бойороп ултыра семәрле алтын тәхеттә. Көн-Өфөнөң дүрт яғынан дүрт яҡҡа киткән дүрт юл осонда ла Исмәғил кенәздең мырҙалары—беҙҙең туғандарыбыҙ ил тотоп тора. Көнсығышта Иртышҡа ҡойған Тубыл һыуы тамағындағы Эбер-Себер ҡалаһында ла хан тәхетендә—үҙемдең Мамай-Нор-Ҡасим ағайым. Көнбайышта Ағиҙел тамағында—Айсыуаҡ олатайым. Ә иң алыҫ көньяҡтағы Яйыҡҡа ҡойған Саған йылға тамағында—Йософ атаҡайымдың ҡышлауы. Артабан Иҙел тамағы Әстерхан ханлығының ханы ла үҙебеҙҙеке — боронғо Юрматы ырыуы ханы Әлмөхәмәттең «Бала ҡарға» йырауында данланған Һалсы хан тигән улының тоҡомдары...

**Көн яҡтыра төшә, йылға аръяғындағы тауҙар араһына тартылған юл асығыраҡ төҫмөрләнә.**

**Сөйөмбикә** *(ҡулын маңлайына ҡуйып.)* Ә шулай ҙа Яйығымдан ҡала йәнемә иң яҡын йылға — анауы Дөйәтау артындағы Һаҡмар һыу. Шуның уң ярындағы Бәкәтәр ҡасабаһы. Хәйер, Бәкәтәрҙе һуңғы заманда Йәнсура батырымдың исеме менән Йәнсура тип тә йөрөтәләр. Бөтә тирә-йүнгә данланған Йәнсурамдың ауылы булғанға күрәлер. Бынан утыҙ ғына саҡрым, иртәнге сәйҙән төшкөһөнәсә ат өҫтөндә елдереп барып етерлек. Йәнсура батырымдың утлы һулышы, бейек Аҙанташҡа баҫып йырлаған моңло тауышы ошонда уҡ ишетелеп торғандай... Ләкин,.. ләкин... осоп барып ҡосағына ташланырҙай сара юҡ... Сөнки атайым ҙур инсан — Бәләкәй урҙаның кенәзгә торошло мырҙаһы, ә Йәнсурам, батыр тигән исеме илгә данланһа ла, Бикбау кенәздең бүләһе Түлебай бейҙең азамат улы ғына. Ә атайым,.. тел төбөнән тиртеүенсә, мине фәҡәт хан кейәүгә бирергә йыйына... *(Аҡ ҡайынды ҡосаҡлап, һандуғас һайрауына иҫереп баҫып тора.)* Юҡ, мин барыбер үҙемдекен итәсәкмен, Йәнсурама йәбешеп булһа ла сығасаҡмын! Эйе, сығасаҡмын! *(Уйланып.)* Бөгөн була йәйләүебеҙҙә оло һабантуй — бөтә тирә-яҡ ғәләмдән эркеләсәктәр бында. Йәнсурам да бына-бына килеп етергә тейеш. *(Аръяҡҡа тоҫҡалып, ике усын ауыҙына торбаландыртып.)* Йәнсура-а-ам, бәгерем, ниңә оҙаҡ көттөрәһең, илдән алда килмәйһең? һағынып та һарғайып бөттөм инде. *(Йырлай.)*

*Яйыҡ буйҡайҙары тугай-тугай,*
*Тугайында һайрай бер тургай.*
*Иртәләрен һайрай, кистәрен ҡаргай —*
*Һарғайып та үлһен, ти, бугай...*

**Һылыубикә күренә.**

**Һылыубикә.** Бәпесем, был ни эш? Ниңә улай, тәмле йоҡоңдо бүлеп, яр буйында яңғыҙ-яран йөрөйһөң?

**Сөйөмбикә** *(тертләп.)* Абау, ҡотомдо алдың, әсәйем. Ниңә үҙең иртәләнең?

**Һылыубикә.** Әхирәттәрең, булышсыларың ҡайҙа?

**Сөйөмбикә** *(көлөп.)* Бошонма, әсәкәйем, улар ана анауы тирәктәрҙең һәр олоно артынан һағалап торалар мине. Бер сулаға яңғыҙымды ҡалдырыуҙарын теләнем.

**Һылыубикә.** Тик шулай ҙа ҡошҡорттан хәтәр заман. Ҡояш сығышы яғында — жуңғар-мағул әтрәгәләмдәре, көн байышында үҙебеҙҙең татар-хәтәр болғана. Урыҫ шымсыларынан да тынғы юҡ. Ана тора Алабайтал кисеүе, кем кисмәҫ тиһең уны?.. Ә һин, шул тәңгәлгә текләп, күҙеңде талдыраһың...

**Сөйөмбикә.** Әсәкәйем, насарға юрамасы. Ул кисеүҙән аша сығып, бәхеткәйем киләсәк...

**Һылыубикә.** Ай-һай, оло юлдан кем килмәҫ тә кем китмәҫ...

**Сөйөмбикә.** Әсәкәйем, шулай ҙа кемдәр буласаҡ? Бөгөн һабантуйҙа, тим?

**Һылыубикә.** Атайыңдан яҙа-йоҙа ғына сарпылып ҡалды. Нурлы мәркәзебеҙ Көн-Өфөнән кенәз Исмәғил олатайың, Ҡазандан Бойорған Сәйет, йәнә Мәскәү илсеһе Кадыш Кудинов, Төркиә илсеһе Вәкил, Әстерхандан олатайың Ирзал Ураҡ хан, Һаҡмар тамағы Аҡтүбәнән Юныс ағайың, Ҡаҫмарт тамағы Ҡасанҡы-Саланан Үҫәргән бей бар... Әйткәндәй, Төркиә илсеһе, көрәш майҙанына сығарырға тип, ҡарарға имәнес әзмәүер кәүҙәле, бер ултырыуҙа бер һарыҡ итен ашап бөтөрөрлөк төрөк батырын килтергән, ти...

**Сөйөмбикә** *(йөрәкһеп).* Ә Бәкәтәрҙән юҡмы ни?!

**Һылыубикә.** Бәкәтәрҙән Йәнсура батыр бына-бына килеп етергә тейеш. Йәнсура батырһыҙ көрәш буламы ни ул? *(Ҡыҙына теклән.)* Туҡта-туҡта, ниңә һораның әле?

**Сөйөмбикә** *(оялып).* Үҙең әйтәһең дәһә, Йәнсура батырһыҙ булмай, тип.

**Һылыубикә** *(уйланып).* Уныһы улай ҙа ул... тегенеһе тегеләй шул... Саҡырылмаған ҡунаҡ кемдән дә яман тиҙәр әле?.. Төн уртаһында Ҡазан ханы Сафагәрәй юлығып ишек ҡаҡты, атайыңды тәмле йоҡоһонан уятты.

**Сөйөмбикә.** Ҡазан ханы?! Ни бысағыма йөрөй тағы?

**Һылыубикә.** Беләһең бит ҡазандарҙы: ҡотороноп бер-береһенең боғаҙын сәйнәү, хан артынан хан яңыртыу менән шөғөлләнәләр. Атайың әйтеүенсә, үҙҙәренең ҡулынан буҡлы йүкә лә килмәгәнлектән, Мәскәүҙең күҙенә тилмереп ҡарап, Василий кенәздең аяғына баш ороп, урыҫ ҡулынан яңы хан ялбаралар. Иҫеңдәме, әле генә бит шул уҡ Мәскәү килтереп суҡайтҡан Ғәбделлатиф ханды ҡыуып ебәреп, ҡырымлы Сафагәрәйҙе тәхеткә ултырткайнылар, инде уны ла, әрләп-хурлап, килгән тарафыңа олаҡ, тип быраҡтырғандар. Меҫкен Сафагәрәй кейәү, ҡатындарын, яҡындарын оҙон ылауға тейәп, бында килеп йыйылған... Ханлығын кире ҡайтарырға ғәскәр һорaптыр инде.

**Сөйөмбикә.** Тамам теңкәгә тейҙе бит инде ошо ғауғалы Ҡазан татарҙары... Әле урыҫ менән уҫмаҡлаша, әле үҙ-ара ҡырҡыша. Былтыр ҙа, шул ханға ярҙамға барабыҙ тип, Йәнсура батыр балтырына уҡ ҡаҙалдыртып ҡайтты, ә күптәре Ҡазандың Ар ҡырында ятып ҡалды. Әммә ләкин ҡәҙеребеҙҙе белмәнеләр һәм белмәйҙәр – ауыҙ асҡан һайын, башҡорт тип әйтәһе урында... нуғай тип түбәнһетәләр... Башҡорт һөйәген онтаусы тирмәнгә әүерелде был Ҡазан.

**Һылыубикә.** Тәүбә-тәүбә, атайың ишетеп ҡуймаһын, бәпесем. Әле һаман, Ҡазанға ярҙамға йөҙ егерме мең яу бирергә яйым бар, тип ҡаны ҡыҙышып йөрөй, ҡарыулашһаң, һеркәһе һыу күтәрмәй... Исмәғил олатайың ғына ауыҙлыҡлап тотмаһа...

**Сөйөмбикә.** Ҡазанды яратмайым, Исмәғил олатайым яҡлы мин.

**Һылыубикә.** Ҡазан да үҙебеҙҙеке, башҡорттоҡо. Заманында Туҡтамыш хан олатайыңдың мәшһүр улы Оло Мөхәммәт баш ҡала итеп ҡорған, беренсе ханы булған ер.

**Сөйөмбикә.** Ә ни өсөн Туҡтамыш хан олатайым була ул? Йеҙекәй бабамдың ҡан дошманы лаһа...

**Һылыубикә.** Эй бәпесем, был донъяның этлектәрен белмәйһең шул әле һин... Минең Меңле ырыуы ҡыҙы икәнем мәғлүм бит үҙеңә. Ә Үҫәргән башҡорто Туҡҡужаның улы Туҡтамыш хандың әсәһе – тап Меңле ырыуынан, тап беҙҙең үк тоҡомдан... Йәғни Ҡазан хандары ла асылында үҙебеҙҙең башҡорт...

**Сөйөмбикә.** Ә Ҡырым ҡарғаһы Сафагәрәй хан?

**Һылыубикә.** Төптән үк уйлай китһәң, ул да башҡорт затынан булып сыға шул, бәпесем. Нәҡ олатаң Туҡтамыш хандан килгән нәҫел. Ҡыҫҡаһы, ҡайһы татар ханын соҡоп ҡараһаң да, төбөндә башҡорт ята.

**Сөйөмбикә.** Ы-ы-ы... аҙмыш башҡорттар! Бөтәһе лә беҙгә яу.

**Һылыубикә.** Яҙмыштарҙан уҙмыш юҡтан аҙып та китәләр шул...

**Һарай яғынан Сафагәрәй хан яҡынлай, кесе яраууын башҡарып маташа.**

**Сафагәрәй** *(йырлай).*

*Сары талға ҡунып сайрый турғай...*
*Һы-һы-һы-һы, турғай...*

**Һылыубикә менән Сөйөмбикә пырхылдап көлгәс, Сафагәрәй хан абруйлы ҡиәфәт ала.**

**Сафагәрәй.** Бәтәч, бу Жайыҡның сандуғачлары пырхылдап көлә дә беләләр әллә?

**Һылыубикә.** Эй кейәү-кейәү, санаһын ҡыйыш тейәү... Ҡазан ҡарғалары юҡ шул бында.

**Сафагәрәй.** И биембикәм, исемә төшөрмәгез! Уҡшыйсым ғына килә... *(Сөйөмбикәгә текләп.)* Аб-бау, мона бит ул сандуғач! Сылыуларның сылыуы, нуғайның сандуғачы!

**Сөйөмбикә.** Һин үҙең ул эт ханы, кешене эткә һанама! *(Артына борола.)*

**Сафагәрәй.** Бәй, балдызбикәм, бу ни дигән сүз тағы? Бер кемгә дә «эт» дигәнем булмады! Эт ханы да түгелмен.

**Сөйөмбикә.** Ә мин ниңә эт һандуғасы булайым?

**Сафагәрәй.** Аңламыймын синләрне. Мин бит сине эт сандуғачы дип атамадым лабаса? Нуғай сандуғачы, дидем.

**Һылыубикә** *(көлөп.)* Эй кейәүкәй, «нуғай» тигәнең эт тә баһа татар-мағул телендә.

**Сафагәрәй.** Тәүбә-тәүбә, кичерегез алайса. Күзнең яуын алырлыҡ мондый саф гөлнө, былбылны, алай дип әйтмәү генә түгел, аның аяҡ астында ятып үзем эт булып аунарға, ҡойроҡ болғарға хәзермен. Аллаһ Тәгаләдән булып, язмыш үзе татлы төш итеп чығарған икән лә юлыма сине, Сөйөмбикә сылыуым. Шушы урында жиргә борон төртөргә, эзләреңне үбеп китергә рөхсәт ҡыл! Сөйөмбикә генә түгел, чын-чыннан ханбикә булырға туғансың—шәһри Ҡазанны балҡытырлыҡ нурлы шәм ҡылса иде үзеңне Ходайым...

**Сөйөмбикә** *(ҡобараһы осоп.)* Абау!..

**Сафагәрәй.** Чәчебез чәчкә бәйләнсен иде, дип телисем, жылыйсым ғына ҡала...

**Сөйөмбикә** *(ҡобараһы осоп).* Абау!..

**Һылыубикә.** Тел һөйәкһеҙ, тиһәләр ҙә, саманан ашып китте түгелме, кейәүкәй?.. Ҡырымдан эйәртеп килтергән ҡатының өҫтөнә нәҫелебеҙҙән бер түгел, ике кәләш алып, хан кейәүебеҙ булдың, өҫтәүенә урыҫ кенәзенең мәрйәһенә өйләндең... Инде балдыҙыңа күҙең ҡыҙамы? Ялпыға ла, ханға ла бер үк шәриғәт хөкөмө түгелме ни? Үҙеңде Ҡазанға саҡырып килтерткән Ҡолшәриф мулла ни ҡарай?

**Сафагәрәй.** Ҡолшәриф мулланың фатихасын алғанмын.

**Һылыубикә.** *Ләхәүлә,* биш ҡатын алырғамы?

**Сафагәрәй.** Нинди биш булсын, урыс кенәзенең ҡызы вафат та инде...

**Һарай яғында тамаҡ ҡырған тауыш.**

**Һылыубикә.** Әнә, Йософ мырҙа болдорға сыҡҡан, ҡул болғап саҡыра беҙҙе. *(Һарайга ыңғайлайҙар.)*

**Сафагәрәй.** Үзебезнең мосолманнан алырға иде ниәт, ханлығымда ғәйбәт тамырын кисергә. *(Инеп китәләр.)*

**Сөйөмбикә.** Ҡороғоро... һандуғасымды бүлдерҙе... Ҡазан өрәге... *(Аҡ ҡайынга һөйәлеп, һыу аръягына ҡарап йырлай.)*

*Ай-һай ҙа гына тигән, ай, тауышҡа*
*Ҡаҙ-үрҙәктәр ҡаса ҡамышҡа.*
*Йырлау ҙа гына түгел, ай, иларһың*
*Эскенәйем тулы һагышҡа.*

*Йәнсураҡай бәгерем, менгән атың*
*Ерәнҡашҡа икән ал бирмәҫ.*
*Һинең кеүек илдең азаматы*
*Йөрәгемә тынгы, ял бирмәҫ.*

**Аръякта ҡурай моңо, артынса йыр яңғырай.**

**Йәнсура.** Тыр-р-р, туҡтале, Ерәнҡашҡа! *(Йырлай.)*

*Һаҡмар һыуҡайҙары бигерәк һалҡын,*
*Үрҙәк сумып сығыр йылыу юҡ.*
*Илкәйемдең һылыу ҡыҙҙары күп,*
*Сөйөмбикә һымаҡ һылыу юҡ.*

**Сөйөмбикә.** Уф йөрәгем, йәнекәйем Йәнсурам!

**Боролманан Йәнсура атлығып сыға.**

**Йәнсура.** Сөйөмбикәм, һылыуым!

**Ҡосаҡлашып үбешәләр. Егет, һөйөклөһөн күтәреп алып, ҡосағында килеш зыр-әйләндереп йөрөй.**

**Йәнсура.** Аллаһ Тәғәлә беҙгә ике тамсы һыуҙай ҡушылырға ҡушҡандыр...

**Сөйөмбикә.** Ҡасан, ҡасан?!

**Йәнсура** *(туҡтап, ҡыҙҙың күҙҙәренә текләп).* Аллаһ бирһә, быйыл көҙгә үк яусы көт!

**Сөйөмбикә.** Уф, йәнекәйем, мин ҡурҡам! Атаҡайымдан ҡурҡам: һыңар балаҡлы яусыҡайыңдың һыңар аяғын ҡыҫҡартмаһа ярар ине. Мине ханға бирергә, ханбикә яһарға яҫҡана...

**Йәнсура.** Хандарҙан да ажарлыраҡ Бикбау кенәздең нәҫеле мин! Үҙемдекен итермен!

**Сөйөмбикә** *(еңел һулап).* Ауыҙыңа бал да май!

**Йәнсура** *(ҡулдарында ҡабат әйләндерә башлай).* Ә һин үҙең хәҙер үк әйт миңә, йәнем-йәнекәйем *(үбә-үбә):* ризамы? Ризамы?

**Сөйөмбикә.** Уф! Риза! Риза! *(Көскә ысҡынып, һарайсыҡҡа йүгереп кереп китә.)*

## 2-се сәхнә

**Һарай эсе, Йософ мырҙаның тәхетханаһы. Йософ мырҙа арҡы стенаға һүрәтләнгән төп милли биҙәгебеҙ Донъя Ҡуласаһы – Асаба-Астаҡ (Свастика) фонындағы сәмәрле тәхеттә ирәйеп ултыра; йәнәш креслоларҙа уң яғында – ағаһы Исмәғил кенәз, һул яғында – ҡатыны Һылыубикә һәм өлкән улы Юныс мырҙа. Һабантуйға килгән сит ил ҡунаҡтарын ҡабул ҡылырҙан алда йәшерен ғаилә кәңәшмәһе —дөйөм хәл, сәйәсәт тураһында фекерләшеү.**

**Йософ** *(Исмәғилгә).* Шулай итеп, ағайым, быйылғы һабантуйы ла килеп етте. Тирә-яҡтан халайыҡтар ағылды, Ҡорокүл буйы каруандар, тирмәләр менән тулды. Әммә, барыһынан да бигерәк, ағайым, оло башыңды кесе итеп, байрамыбыҙға ҡот һәм мәртәбә өҫтәп, бында үҙең килеүең үтә ҙур шатлыҡ. Шуға күрә лә бөтә Яйыҡ буйҙары бер тауыштан һине тәбрикләй, хатта, әнә, ишетәһеңме, һары һандуғастарыбыҙға тиклем шанлы исемеңде мәҙехләп һайрай...

**Исмәғил.** Бәрәкалла, бәрәкалла, Йософ мырҙам, ауыҙыңа һары май... Ләкин, үҙең беләһең, бер-беребеҙҙе ҡупайтып ултырыр саҡ түгел. Беҙҙең эше аҫыл ирҙәрҙе, байрамдарҙан да бигерәк, донъя ғәмдәре йөрөтә...

**Йософ.** Эйе, ағай-эне бергәләшеп хәл ҡылырҙай эштәребеҙ ҡуйырҙы. Шуға күрә лә, алдан һөйләшеп килешеү, бер төптән тороу өсөн, ошо кесе мәжлескә – Яҡын туғандарҙың табын түңәрәгенә йыйылдыҡ. Заманалар ауырайҙы...

**Исмәғил.** Башҡорт иленә кенәз булыу – майлы бутҡа ашау йәки һимеҙ ҡалъя һоғоноу түгел шул... һиңә генә еңел ул: мырҙа ғына башың менән, минән дә уҙҙырып, май эсендә йөҙгән бөйөрҙәй йәшәйһең. Әнә бит, тәхетең дә ҡайһындай! Төп тамғабыҙ Асаба-Астаҡты, Донъя Ҡуласаһын, ағайыңдан да һорамай, үҙеңдең арҡа терәгең итеп алғанһың!

**Йософ.** Мырҙа булып күпме ҡалырға мөмкин, ағайым?! Бәләкәй урҙаны бирҙең, рәхмәт, мәгәр кенәз дәрәжәһенә күтәрмәй ҡаңғыртаһың...

**Исмәғил.** Ағайыңдан алда һоғонорға ашыҡма, ашҡа бешерһең... Илебеҙҙең Бәләкәй урҙаһын төрөк менән ҡырымдан кимертмәй тотһаң, сәйәсәттә фәҡәт мине генә тыңлап эш ҡылһаң, Аллаһ бойорһа, шөһрәтле кенәз дә булырһың.

**Йософ.** Төрөк менән ҡырым – икенсе мәсьәлә... Урыҫты, урыҫты ниңә әйтмәйһең? Һыңар ҡулын көньяғыбыҙға һоноп, балыҡҡа бай Әстерханыбыҙға яҫҡана. Икенсеһе менән төньяҡлап Эбер-Себер ханлығыбыҙҙы ҡармалай...

**Исмәғил.** Урыҫ, үҙең әйтмешләй, ул – өсөнсө мәсьәлә. Урыҫ менән һаҡ эш ҡылырға кәрәк. Урыҫ менән уҫмаҡлашып түгел, ә дуҫлашып йәшәүе файҙалыраҡ.

**Йософ.** Ай-һай... Урыҫ булһа атаң — билеңдә булһын балтаң, тигәнде онотмайыҡ, ағайым. Шул кафыр менән бысаҡҡа-бысаҡ килешеп интеккән ут күршебеҙ Ҡазан татарҙарынан фәһем алайыҡ...

**Исмәғил** *(көлөп).* Фәһем, фәһем... Ғибрәт тип әйтергә кәрәк!

**Һылыубикә.** Эйе шул. Татар барҙа — хәтәр бар, атаһы.

**Исмәғил.** Үҙҙәре, йәнәһе, төрки донъяһын кафырлыҡтан ҡурсалап, урыҫҡа бармаҡ янайҙар, ә үҙҙәре иһә, шул уҡ урыҫ файҙаһына бер-береһенең боғаҙын сәйнәшеп, ханлыҡты тарҡаталар, хатта хандарын да урыҫҡа һаталар, аяҡ-ҡулдарын бәйләп... Ярҙамға ғәскәр ебәрһәк, күрәләтә урыҫтан ҡырҙырталар... Юҡ! Татар туғанға ҡарағанда урыҫ ызнаком яҡыныраҡ.

**Йософ.** Ә шулай ҙа ҡайһы яҡҡа ауышабыҙ, ағайым? Урыҫ тигәнеңдең киләшшәһе тын алырға бирмәй бит: Иҙел буйҙарынан да, Иртыш яҡтарынан да ҡыҫыпмы-ҡыҫа...

**Исмәғил.** Ауышмайбыҙ. Үҙең әйтмешләй, бер төптән торһаҡ, ҡыҫымға бирешмәбеҙ.

**Юныс.** Олатай, киҫәтергә рөхсәт ит. Төркиә, Ҡырым һәм Ҡазандан ғәйре арҡа таянысыбыҙ юҡ. Ағай-эне талашыр, атҡа менһә ярашыр, тигән бороңғолар.

**Һылыубикә.** Эйе шул, үҙебеҙҙең төрки туғандарыбыҙ. Етмәһә, өсөһөнөң дә хан-солтандары бауына башҡорт ҡаны ҡатышҡан. Ете ят урыҫ-литау йәки ҡытай-манжур түгел бит. Ҡанҡәрҙәштәребеҙ.

**Исмәғил.** Һе! Дәүләтебеҙ мәнфәғәттәрен яҡлағанда ҡан-ҡәрҙәшлек артҡа сигеп тора ул... Тарихты онотмайыҡ: үҙебеҙҙең Йеҙекәй бабабыҙ һәм Туҡтамыш бабабыҙ ни өсөн бер-береһенең башына еткән, тиһегеҙ? Ҡазан ханы Илһам бабабыҙҙы бөтә ғаиләһе менән ни өсөн Ҡазан бәктәре һәм олоғтары үҙҙәре уҡ, арбаға бәйләп һалып, Мәскәүгә һатып ебәргән? Мәскәү кенәзе Василий ни өсөн үҙебеҙҙең күҙ алдында үҙенең ҡан дошманы Ҡырым ханы Миңлегәрәй менән үбешеп туғанлашты?.. Әлхасил, ҡәҙерле туғандарым, иң элек беҙгә илебеҙҙең яҙмышын ҡурсалау фарыз.

**Йософ, Һылыубикә, Юныс** *(бер тауыштан.)* Бәрәкалла, бәрәкалла!

**Йософ.** Мин ни тим һуң? Бәйге майҙанына барырҙан элек, үтә мөһим мәсьәләләрҙе ҡап-уртаға һалып, уртаҡ фекергә киләйек, сисеү юлдарын билдәләйек, тинем дәһә. Минеңсә...

**Исмәғил.** Иң мөһимен генә тир.

**Йософ.** Әлеге лә баяғы, унының үҙеңә мәғлүм: Ҡазан – Мәскәү мәсьәләһе. Дөйөм төрки донъяһының яҙмышы ҡыл осонда.

**Исмәғил.** Кем арҡаһында, тиһең?

**Йософ.** Ҡитғаны хөсөт баҫты. Әлеге лә баяғы, яуызлыҡ Мәскәүҙән дөрә.

**Исмәғил.** Һеммм... Мәскәүҙән, тиһең инде?.. Уйламай һөйләгән — ауырымай үлгән, ти торғайны мөхтәбәр атайыбыҙ. Ҡарап-ҡарап торам да тағы ла бер ҡарап ҡуям: бәҫле бүркең аҫтында ел уйнамаймы икән, мырҙам? Ул яуызлыҡ тигәнең, бәлки, Ҡазандың үҙендәлер?

**Йософ.** Ызнакомың мәскәүский

Василий кенәз тынғы бирмәй Ҡазанға, йыл аралаш тигәндәй килеп баҫа. Хаҡ мосолман туғандарыбыҙҙы рәхимһеҙ ҡыра, ауылдарының көлөн күккә осора.

**Исмәғил.** Әнә шул хаҡ мосолмандарың үҙҙәре үк кафырҙың Муром, Тверь, Нижний ҡалаларын барып талауҙы, яндырыуҙы, кешеләрен ҡырыуҙы, ҡатындарын, бала-сағаһын ҡол ҡылып, Ҡырымға, ғосманлы Төркиәгә олаҡтырыуҙы кәсеп иткәндәр түгелме? Йоҡлап ятҡан айыуҙың өңөнә һөңгө тыҡһаң, ике күҙен ҡан баҫып, ажғырып ырғылмаҫ та ботарлап ташламаҫ тимә.

**Йософ.** Йоҡлатырһың кафырҙы! Айыуҙан ҡурҡып ятһаҡ, Ҡазан менән Ҡырымды ла ҡабып йотор, Төркиәне лә емтекләр, беҙгә лә сират етер...

**Исмәғил.** Әнә шул сират етмәһен өсөн дә бик нык уйлап эш итмәк кәрәк беҙгә.

**Йософ.** Беҙ башты баҫып уйлайбыҙ, ә урыҫ баш ҡалҡыта. Әле тағы Ҡазанды ҡазалаған, кейәүебеҙ Сафагәрәй ханды тәхетенән ҡолатҡан. *(Ишек ягына ымлап, уҫка ус һугып.)* Кем унда, керһен Сафагәрәй хан.

**Сафагәрәй керә, тәхет алдында тубыкланып баш ора.**

**Сафагәрәй.** Мәрхәмәтегеҙдән мәхрүм ҡылмағыҙ бер үк, и бөйөк ҡайнағаларым! Тәхетемне кире ҡайтарып алырға ғәскәр бирегеҙ. Мөхтәбәр Йософ ҡайнағам! Әгәр дә ки тәхетемә кире-ҡабат ултырсам, хәлбуки үзеңне ханлығымның алтын тоткасы ясармын. Былбылдай баллы авазлы, ҡояштай нурлы йөзлө, талчыбыктай нечкә билле Башҡортостан сылыуын — назлы ҡызың Сөйөмбикәне йәш ханбикә итеп алырмын, өлкән улың Юныс мырзаны Ҡазан бәге ҡылырмын!

**Юныс** *(ыргып тороп).* Бирәйек һылыуымды, бирәйек! Ғәскәр башында үҙем ҡарғып барырмын, шанлы олатайым Сура батырҙай, Ҡазанды ла алырмын!

**Һылыубикә.** Балаҡайым, атайыңдан алда атлығып сыҡма. Ололар һүҙен тыңла.

**Юныс.** Ғәфү итегеҙ.

**Исмәғил.** Эй бала-бала, йәшең баш икән шул әле... Ә һин, Сафагәрәй кейәү, «ҡайнағаларым» тип өҙәләнгән булаһың да ул, тик ғәмәлдә нисә ҡатының барлығын, уларҙың тәғәйен кем ҡыҙҙары икәнен оноттоң, буғай...

**Сафагәрәй.** Онотмадым! Өчөсө дә синең яҡын ҡәрдәшләрең. *(Бармаҡтарын бөкләп.)* Беренчесе – Мамай-Нор-Ҡасим ҡызы. Икенчесе – Ямғырчыныҡы. Өчөнчөсө... өчөнчөсө дә синең Ҡырымдағы чыбыҡ очо ҡанҡәрдәшең...

**Исмәғил.** Ә дүртенсеһе?

**Сафагәрәй.** Дүртенчесе юҡ инде... Әйттем ләсә, Ҡазанда вафат булды.

**Юныс** *(сәпәкәйләп).* Ур-ра! Тимәк, шәриғәт ҡуша – Сөйөмбикә һылыуымды ханбикә ҡылайыҡ, мин Ҡазан бәге булайым!

**Йософ.** Сеү! Маңҡатанау! Йеҙекәй бабаң нигеҙләгән Аҡтүбәнең мырҙаһы булыу аҙмы һиңә? *(Сафагәрәйгә.)* Тор, кейәү-бала, теҙҙәрең уйылмаһын. Ә шулай ҙа ҡыҙым тәтемәҫ һиңә, һин былай ҙа икеләтә-өсләтә ҡолобоҙ... тфү! — кейәүебеҙ бит... Муйыныңдағы ҡыл муйынсаҡ серегәнсе хеҙмәт итерһең. Ә былбылыбыҙ Сөйөмбикә һинән башҡа ла ханбикә буласаҡ, уның ҡунып һайрар талы бейегерәк!

**Сафагәрәй.** Ғәскәр, ғәскәр бирегез, алайса! Әжерен мең мәртәбә ҡайтарырмын!

**Исмәғил.** Былтырғылай итепме? Шул 1530 йылдың 15 июнен әйтәм. Һин кейәү-баланы яуыз урыҫ ҡылысынан һаҡлашырға ебәргән утыҙ мең яугирымды нишләттең?! Ҡазан ғәскәрен ҡәлғәң эсенә ышыҡлап, башҡортҭоҡон ҡала тышына ҡуйҙың — урыҫ уҫмағы аҫтына. Үҙең ҡәлғә башынан тамаша ҡылдың, ғәскәреңде ярҙамға сығарманың. Әллә белмәйҙәр тиһеңме?..

**Сафагәрәй.** Ҡазан олуғлары мине тишек кәмәгә ултыртты...

**Исмәғил.** Кәмәнең тишеген элек ямайҙар уны! Урыҫтар ҡайтып киткәс, Ар яланын ябып ятҡан шәһиттәребеҙҙе нишләттең? Өҫ кейемдәрен һалдыртып алып, мәйеттәрен, ерләмәйенсә, бүреләрҙән кимерттең. Шәп ҡайтарҙың әжерен! *(Ҡуҡыш күрһәтеп.)* Бына һиңә ғәскәр! Дар ағасы янай һиңә!

**Сафагәрәй.** Ә?! Бу ни бу?!

**Йософ.** Бар, башыңды юймаҫ элек, табаныңды ялтырат!

**Юныс.** Атай, еҙнәйемә теймәгеҙ! *(Сафагәрәйҙе тәрәкләп алып сығып китә.)*

**Сафагәрәй** *(барышлайы әйләнеп).* Ә шулай да мин Ҡазанның сағызаҡ оясын туздырачаҡмын! Тәхетне алачаҡмын!

**Рәхәтләнеп көләләр.**

**Йософ.** Кем унда, сәркәтип килеп етһен!

**Ҡағыҙ-кәләмен йәтешләп, сәркәтип кереп ултыра.**

**Йософ.** Ҡазан илсеһе Бойорған Сәйет менән Мәскәү илсеһе Кадыш Кудинов инһен.

**Инәләр. Сәләм бирешеү һәм алышыу. Бойорған Сәйеттең һыңар балағы ситек ҡунысынан сығарып төшөрөлгән.**

**Исмәғил.** Бәй, Бойорған Сәйетме, тиһәм *(тегенең балағына төртөп күрһәтә.)* һыңар аяҡ һайыҫҡан икәнһең дә.

**Бойорған Сәйет.** Сездә асыл мал бар икән, дип ишетеп, бөйөк Ҡазан ханлығыннан шул асыл малны алырға яучы булып килдем сезгә.

**Исмәғил.** Яусы?.. Мәскәү менән яулашыуығыҙ етмәгән...

**Бойорған Сәйет.** Фсү! Кәнис! — урыс дусларың әйтмешли. Мәскәү берлән араны яҡшыртабыз. Синең Ҡазандағы вәкилең Чура берлән берләшеп, үзебезнең Мәскәү яҡлылар фирҡәсен уҡмаштырдыҡ, Истанбул һәм Ҡырым яҡлылар фирҡәсен пыр туздырып ташладыҡ. Төрөк илә ҡырымлы йыраҡ торсон, инде урыс берлән башҡырт дус безгә.

**Исмәғил.** Тел һөйәкһеҙ, тигәндәй, матур һайрайһығыҙ ҙа ул...

**Бойорған Сәйет.** Ай Алла, кенәз, ышанмасаң, мона Кадыш Кудинов үзе дөрөсләр. Сафагәрәй ханны күсәкләп ҡудыҡ, бөйөк кенәз Василий Ивановичның үзеннән хан сорадыҡ...

**Кадыш Кудинов.** Дөрөҫ, дөрөҫ.

**Исмәғил.** Әммә Ҡазанығыҙҙың кем утынан ҡыҙғанын белеү ҡыйын. Бөгөн — Мәскәү утыны, ә иртәгә – Ыстамбулдыҡы... Ҡолшәриф муллағыҙ ни эшләй, кем утына ҡыҙына?

**Бойорған Сәйет.** Әйтәм ич, бүген безнең учағыбыз ҡызыуыраҡ, бүген безнең жылыға жылына ул. Әммә саҡ булу кирәк. Синең вәкилең Чура батыр әйтмешли, Ҡолшәриф ул – нәҡ ике йөзлө хәнжәр...

**Кадыш Кудинов.** Так точно.

**Йософ** *(Бойорған Сәйеткә).* Ғәфү ит, ярты һүҙҙән бүлдерҙек. Һыңар балағың серенең асылы нимәлә?

**Бойорған Сәйет.** Әйттем ич, синдәге бер асыл малны алырға яучылим, дип.

**Йософ.** Аҫыл малдар күп ул беҙҙә, исеме кем?

**Бойорған Сәйет.** Сөйөмбикәңне соройбоз, шәһри Ҡазан тәхетенә килен итеп төшөрмәккә. Жигетебез зерә дә шәп: Мәскәү үзе килтереп ҡуймыш Жанғәли хан димәкдә. Мона Мәскәү илчесе Кадыш Кудинов үзе дөрөсләр.

**Кадыш Кудинов.** Эйе, Жангали хан, бөйөк кенәз Василийҙың ярлығын алып, Ҡазанға килеп етте, тәхетенә ултырҙы. Сөйөмбикә ҡыҙығыҙҙы ҡатынлыҡҡа һорауы, шул турала бөйөк кенәз Василийҙан фатиха алыуы ла хаҡ.

**Бойорған Сәйет.** Жанғәли ханның үзеннән дә сезләргә айырым сәләм:

Сөйөмбикә туташны ханбикә ясасаҡ, Нуғай иленә айырым иғтибар бирелер, ә шөһрәтле Еныс мырзаны Ҡазан бәге ҡылырбыз, диде ул. Бунысы да Мәскәү белән килешелгән. Мона Кадыш Кудинов дөрөсләсен.

**Кадыш Кудинов.** Дөрөҫләйем, тап шулай.

**Исмәғил.** Тимәк, каруан юлдарыбыҙҙа Мәскәү менән арабыҙға шына булып кереүсе, сауҙабыҙға зыян килтереүсе Ҡазан хөсөтө бөтәсәк?

**Бойорған Сәйет.** Бөтәчәк, бөтәчәк. Синең бездәге вәкилең Чура батыр үзенең кешеләре берлән Ҡазан – Мәскәү юлына саҡка басачаҡ. Малларығызны турадан-тура Ҡазан аша да озата алачаҡсығыз Мәскәүгә.

**Исмәғил.** Унынына инанып уҡ етмәйем, беләм мин һеҙҙе. *(Кадыш Кудиновҡа.)* Үҙегеҙгә мәғлүм: урыҫ иленән хәбәрдар булып торабыҙ, хәлдәрегеҙҙе беләбеҙ. Һуңғы ваҡытта Ливон һуғышы арҡаһында урыҫ атлы армияһының менге аттарына ҡытлыҡ кисереүе мәғлүм. Шул уҡ ваҡытта бер нисә йөҙ мең баш йылҡыбыҙҙы баҙарға сығарыу мөмкинлегебеҙ бар. Ләкин һеҙҙең тарафтарға юлдарҙы бер яҡтан – Ҡазан, икенсе яҡтан Тын йылғаһы буйы юлбаҫарҙары бүлә. Бигерәк тә Тын йылғаһының Мәскәү яғынан килеп етеп ҡырт боролошонда. Беҙ шул бөгәлдә каруандарыбыҙҙы ҡурсаларға азаматтарыбыҙҙы ҡаңғыртабыҙ, ауыр матди сығымдар күтәрәбеҙ. Унда хатта Боролош тигән ҡәлғәбеҙҙе лә ҡорҙоҡ...

**Кадыш Кудинов.** Беләм-бәләм: Воронеж тип йөрөтәбеҙ беҙ уны, ул Боролош ҡәлғәгеҙҙе, эйе. Ҡыуаныслы яңылыҡ хәбәр ҡылайым: бөйөк кенәзебеҙ Василий унда, һеҙҙәрҙең именлеге хаҡына, шул Воронеж ҡәлғәһен нығытырға, ғәскәр ҡуйырға бойорҙо...

**Исмәғил.** Бәрәкалла, ауыҙыңа бал да май!

**Кадыш Кудинов.** Тик, бөйөк Исмәғил кенәз, бөйөк кенәз Василийҙың да бер теләгеен иҫәпкә алһаң ине. Урыҫ иле инде ныҡ ҡеүәтләнде, көнбайышҡа һуҙған ҡулы Ливонияның боғаҙынан матҡып алды. Әммә көнсығыштағы ҡулыбыҙҙы Урал тауҙары кәртәләй...

**Исмәғил.** Урал – беҙҙең Аллаһ Тәғәлә үҙе беркеткән аҫаба төйәгебеҙ.

**Кадыш Кудинов.** Беләм-беләм! Беҙ һеҙҙәрҙе, үҙебеҙгә ғүмер баҡый дуҫ илде, сикһеҙ хөрмәт итәбеҙ. Ерегеҙҙең бер ҡарышына ла кермәй, төньяҡтан урап үтәбеҙ...

**Исмәғил.** Беҙгә итәғәтлек ҡылған, яһаҡ түләгән югра ҡәүеменә баҫып керҙегеҙ, Ҡама йылғаһы буйындағы тоҙға хужа булдығыҙ...

**Кадыш Кудинов.** Ул тоҙҙан, теләһәгеҙ, һеҙҙәргә лә өлөш сығасаҡ. Затлы тауарҙарығыҙҙы тейәп, алыш-биреш ҡылырға Соликамск баҙарына килегеҙ.

**Исмәғил.** Тоҙоғоҙ беҙгә кәрәкмәҫ, үҙебеҙҙең Тоҙтүбә тауының таштоҙо баштан ашҡан. Ашығыҙға тоҙ етмәһә, беҙҙән килеп алығыҙ. Әммә әйтәһе һүҙем шул: беҙҙең менән дуҫ йәшәргә теләһәгеҙ, нәфсегеҙҙе аҙҙырмағыҙ, беҙҙең Иртыш буйҙарына – аҫаба Эбер-Себер ханлығыбыҙға ҡул һуҙмағыҙ. Дуҫлыҡ ике яҡтан да булырға тейеш. Көн-Өфө — Мәскәү ҡулға-ҡул тотоношоп йәшәһәк, бергә сәскә атырбыҙ. Бөйөк Василий кенәзгә еткерегеҙ шуны.

**Кадыш Кудинов.** Баш өҫтө, мотлаҡан еткерермен.

**Исмәғил.** Юғиһә, беләһегеҙҙер, көнсығыштан беҙгә Ҡытай дәүләте ҡул бирмәксе, манжур-жунғар кәртәләрен емереп. Беҙҙең тауҙарҙағы тимер, баҡыр, алтын-көмөш мәғдәндәренә, ер егенән урғылып ятмалы ер майҙарына күҙҙәре ҡызыша... Үҙҙәре яғынан ебәк, ҡорал, дары, сынаяҡ, сәй вәғәҙә ҡылалар. Һеҙҙең менән эш бешмәһә, шул яҡҡа йөҙ бороуыбыҙ бик ихтимал...

**Һылыубикә.** Эйе-эйе, беҙгә бөйөк Сина иленең шау ебәк еләне лә, сәйшәкәре лә танһыҡ.

**Йософ.** Хаҡ һүҙ.

**Кадыш Кудинов.** Юҡ, ярамаҫ улай. Урыҫ менән башҡорт дуҫлығы ике яҡ өсөн дә файҙалы. Аралар ҙа алыҫ түгел, үҙҙәрегеҙ әйтмешләй, ҡул бирешеп йәшәйек.

**Исмәғил** *(уйланып).* Тағы ла бер әтнәкә. Олуғ кенәз Василий Иванович беҙҙең Мәскәүҙәге илсебеҙгә ҡазанлыларҙың уға баш ороу ярлығының күсермәһен биреп ҡайтарған... Үҙенән дә өҫтәкләп: «Ниңә башҡорт Исмәғил кенәз татарҙарҙан өлгө алмай, үҙенең һәм иленең яҙмышын беҙҙең ышаныслы ҡулға тапшырмай?» — тигән.

**Кадыш Кудинов.** Әлләсе...

**Исмәғил** *(сәркәтипкә.)* Уҡы!

**Йософ.** Тейешле миҡдарын ғына. Дилбегәне ҡыҫҡа тот.

**Сәркәтип.** Бына Ҡазан ярлығынан *(уҡый.)* «Олуғ кенәз Василийның бойороғо буйынса, Сафагәрәй ханны Ҡазаннан ҡауладыҡ. Падишаһ безне бағышларға, Ҡазан йортон саҡларға, хан итеп Ҡазанға Шәйехғәлине жибәрергә була. Без Шәйехғәлидән ҡурҡабыз. Падишаһ Ҡазанға хан итеп Шәйехәүлиәр солтанның уғылы Жанғәлине бирсә иде»...

**Исмәғил.** Етәр! *(Кадыш Кудиновҡа ҡарап.)* Беҙ Ҡазан татарҙары түгел! Һәм аҫаба башыбыҙ менән бер кемгә лә бойондороҡло ла, бурыслы ла була алмайбыҙ, хан һорап та бармайбыҙ — үҙебеҙгә үҙебеҙ хужа был ерҙә! Аллаһ Тәғәлә беҙҙәрҙе ошонда һәм ошолай яралтҡан, уны боҙорға бер кемдең дә хаҡы юҡ. Ошо изге хоҡуҡты беҙ ҡулыбыҙға ҡорал тотоп ҡурсаларға әҙербеҙ. Тоғро юлыбыҙҙа беҙҙе Аллаһ Тәғәлә үҙенең рәхмәтенән ташламаҫ, амин *(доға ҡыла).*

**Кадыш Кудиновтан башҡалар.** Амин! *(Доға ҡылалар.)*

**Исмәғил.** Әммә беҙ, башҡорттар, шул уҡ ваҡытта Мәскәү менән, урыҫ туғандар менән мәңгелек дуҫлыҡҡа ант итешергә, ике яҡ өсөн дә файҙалы алыш-биреш, сауҙа ҡылырға теләйбеҙ. *(Мәскәү илсеһенә йөҙ бороп.)* Беҙҙең ожмахҡа тиң аҫыл Башҡортостан тупрағында, баяғы ер аҫты мәғдәндәренән тыш, күҙҙең яуын алырҙай йылтыр өйөр-өйөр йылҡылар, көтөү-көтөү һыйырҙар, ҡуй-һарыҡтар, һыуҙарыбыҙҙа дөйәләй дулаған, ҡуйҙай һулаған балыҡтар, урмандарыбыҙҙа алтындай ялҡ-йолҡ иткән йомшаҡ тиреле кейектәр, йәйғор ҡауырыйлы ҡош-ҡорттар мыжғып тора. Ҡурҡыу белмәҫ бөркөт йөрәкле яугирҙарыбыҙ ат өҫтөндә ҡылыс һелтәп елергә, уҡ атырға, сөймән сөйөргә маһир. Беҙ бер ваҡытта ла бер кемдән дә үҙебеҙгә кенәз йәки хан һорап бармаясаҡбыҙ, үҙ илебеҙҙә үҙ көнөбөҙҙө үҙебеҙ күрәсәкбеҙ.

**Кадыш Кудинов.** Бөйөк кенәз Василий һеҙҙәрҙе аңлар, һеҙҙәр ҙә беҙҙәрҙе яҡшы төшөнөрһөгөҙ. Бөйөк батшабыҙҙың Ҡазан сәйәсәте – ҡазанлылар өсөн генә.

**Исмәғил.** Амин, был йәһәттән үҙем дә уның яҡлы.

**Бойорған Сәйет.** Әй әттәгенәсе! *(Устарын ыуып, төшөргән балагына күрһәтеп.)* Димәк, димәк?..

**Исмәғил.** Тимәк, башҡорт иле урыҫ иленең Ҡазанға ҡуйған ханы яҡлы.

**Бойорған Сәйет** *(Йософҡа).* Жыйыммы, алайса, балағымны? Ни диб ҡайтып әйтим?

**Йософ.** Мәскәү ҡуштаны Йәнғәлиҙе мин дә хөрмәт итәмен. Хандың ҡайнатаһы булыу – миңә бик оло шатлыҡ, әммә кейәү муйынына ла — ҡыл муйынсаҡ, тип еткер.

**Юныс.** Мине Ҡазан бәге яһайым тигәнен онотмаһын!

**Бойорған Сәйет.** Ярый, ир муйынында ҡыл муйынчаҡ черемәс. Сабантуйығызны ғына ҡарим да шатлыҡлы хәбәр берлән очам Ҡазанға!

**Йософ.** Хуш иттек.

**Бойорған Сәйет, Кадыш Кудинов.** Хуш *(сығып китәләр).*

**Ишек яғынан тауыш.** Ғосманлы Төркиә илсеһе Вәкил әфәнде килеп етте!

**Йософ.** Индерегеҙ.

**Илсе инә, ҡулдарын күкрәгенә ҡаушарып, итәғәтле баш эйеп сәләм бирә.**

**Вәкил.** Солтанларның солтаны бөйөк Сөләймән ғалижанапларыннан чуҡдин-чуҡ сәләм сезләргә, ҡан-ҡәрдәшләремез шимал төрөкләренә! Күркәм сабан туйығыз ҡотло булсын! Бер уңайдан бөйөк кенәз Исмәғил ғалижанапларын да очратыуыма бик шатмын.

**Исмәғил** *(көләмһерәп).* Вәкил әфәнде аҙыраҡ ҡына яңылыша, зыян юҡ. Беҙ, шималда йәшәһәк тә, тап һеҙҙеңсә һөйләшә торған төрөк түгелбеҙ, башҡорт булып ҡалғанбыҙ.

**Вәкил.** Биниһая хөрмәтле Йософ мырзаға бөйөк Сөләймән солтаныбызның хитапнамәсен кичә үк күндергән идем. Исмәғил кенәз, Сөләймән солтанның сезләргә дә айырым мәктүбе бар иде. Форсаттан файдаланып, итәғәтле ҡолағығызға шуны уҡып ирештерсәм ни булыр? Рөхсәтме?

**Исмәғил.** Рәхим ит, ирештер.

**Вәкил** *(уҡый).* «Эй ҡеүәтле, күп санлы нуғайлар! Минең сүземне тыңлап, Ҡазанға ут күршеләр булараҡ, ҡазанлылар белән бер йөрәктән ҡушылсағыз иде! Мәскәүнең падишасы һәм бөйөк кенәзенә ҡаршы Ҡазан өчөн һәм бигерәк тә үзебезнең боронғо һәм бөйөк динебез өчөн жанығызны аями суғышығыз! Үзегезне рәнжетелүгә дучар ҡылмағыз, ҡеүәтле ҡарышығыз! Сезнең хаҡта даими ишетеп торам: динебезгә усал һөжүм ҡылыуына, аны юҡ итергә ясҡаныуына ҡаршы көрәшергә телисез икән. Һәм мона ни хаҡында бик ныҡ хәүефләнәм һәм ҡурҡам: үз-ара килешми йәшәсәгез, Ҡазанға килгән бәлә сезгә дә килер, юҡҡа чығарсыз һәм урдағыз тарҡалыр». Мәктүб тәмам.

**Юныс** *(ҡул сәпәкәйләп).* Бына бит, бына! Бөйөк төрөк солтаны беҙҙе ҡайғырта!

**Һылыубикә** *(улын кире урынына ултыртып).* Ололар барҙа телеңде тый, балаҡайым.

**Йософ** *(Исмәғилгә).* Беҙ ҙә төрөк солтанына йылы мәктүб яҙып ебәрәйек, ағайым.

**Исмәғил** *(сәркәтипкә бармағы менән ымлап).* Яҙ! «Һин, бөйөк бадиша-солтан, беҙҙе түгел, ә үҙеңде ҡайғыртаһың. Һин беҙгә батша ла түгел, етмәһә, сөнки беҙҙең ерҙә һис ни ҡормайһың, беҙҙең менән идара ҡылмайһың һәм беҙҙән бик алыҫта – диңгеҙ аръяғында йәшәйһең; байһың, көслөһөң, мөлкәттәрең башыңдан ашҡан – һис нәмәгә мохтажлыҡ кисермәйһең; ә беҙ иһә фәҡирбеҙ, барлы-юҡлы торабыҙ. Әгәр кәрәк-яраҡ менән еребеҙҙе Мәскәү батшаһы тәьмин итмәһә, бер көн дә йәшәй алмаҫ инек. Һәм уның шул игелеге өсөн беҙ хәйләкәр, алдаҡсы ҡазандарға ҡаршы уның көрәшендә уға ярҙамға килергә тейешбеҙ. Гәрсә улар, ҡазандар, менән телебеҙ ҙә, динебеҙ ҙә бер булһа ла, хәҡиҡәт яғында беҙ...»

**Йософ, Һылыубикә, Юныс** *(бер ауаздан).* Эйе, уныһы шулай!

**Исмәғил** *(яҙҙыртыуын дауамлап).* «Беҙгә мәскәүҙәрҙең ҡазандарға ҡаршы барыуына ғына түгел, ә, бәлки, һинең үҙеңә, йәғни батшаларҙың батшаһына ҡаршы барыуына ла ярҙамлашыу хәйерле...»

**Вәкил.** Ай-вай-вай... бу нә сүзең, бөйөк кенәз Исмәғил?!

**Исмәғил.** Илемдең, башҡорт иленең һүҙе был. *(Сәркәтипкә.)* Яҙ! Эйе, «...хәйерле, юғиһә беҙгә ҡаршы ла ҡубынырһың. Әллә һин ишетмәнеңме ни ҡазандарҙың мәскәүҙәргә даими ҡайһындай яуызлыҡ ҡылыуҙарын, улар еренә өҙлөкһөҙ ябырылыуҙарын һәм урыҫ кешеләрен һәләк итеүҙәрен? Һәм урыҫтар менән ике-ара шартнамәләрен өҙлөкһөҙ боҙоуҙарын, тыныслыҡҡа хыянат ҡылыуҙарын? Ә етмәһә, беҙҙәргә тумбытаһың: урыҫ яғынан ҡазандарға ни булһа, һеҙгә лә буласаҡ, тип. Ә һеҙ нуғай

тип атаған башҡорттарҙың иһә һүҙе ошолай: уға (урыҫ батшаһына) буйһоноу һәм хеҙмәт итеү беҙгә һис оят түгел — бөтә байлығы, ҡеүәте менән ул да һинең кеүек үк. Беҙҙең китаптарыбыҙҙа ла, христиандарҙыҡында ла яҙылған бит: ахыры заманда бөтә телдәр ҙә уҡмаша, бөтәһе лә бер диндә һәм бер үк дәүләт ҡулы аҫтында була...»

**Вәкил.** Ай-вай-ау...

**Йософ.** Ағайым!..

**Һылыубикә, Юныс** *(бер ауаздан).* Тәүбә-тәүбә!..

**Исмәғил** *(күҙҙәрен уҫал ялтыратып.* Яҙ! Ҡойроғо аҫтына утлы тимер ҡыҫылһын Сөләймәндең: «Уға китһә, урыҫтың христиан дине кеүек тағы ниндәй изге дин бар? Беҙҙең ҡараңғы диндәребеҙҙең бөтәһенән дә яҡшыраҡ, яҡтынан-яҡты ҡояштай нур сәсә ул». Бөттө.

**Вәкил** *(ярһып).* Аллаһу әкбәр! Иманлы Ҡазандың баш имамы Ҡолшәриф хәзрәт дөрөс әйтә: «Ун башҡыртҡа — бер иман»! Әлегәчә ислам нурын танымый суҡыр йәшисез, мәжүсилек ҡараңғылығында ҡаңғырасыз икән лә!..

**Исмәғил.** Миңә тимәгәйе, эт буғы тип атағыҙ, әммә иманыбыҙға ҡағылмағыҙ. *(Мәктүбте биреп).* Һинең бурыс, Вәкил әфәнде, аманатты эйәһенә еткереү.

**Вәкил.** Житкерермен, түкми-чәчми житкерермен! *(Сығырға ыңғайлай.)*

**Йософ** *(урынынан тороп).* Хөрмәтле Вәкил әфәнде, дөрөҫ аңлай күр беҙҙе. Сәйәсәте — сәйәсәт, әммә һабантуй ҡунаҡтарының иң аҫылы булырһың. Бергә-бергә күңел асыуҙан мәхрүм итмәгеҙ беҙҙе.

**Вәкил** *(барышлайы әйләнеп, ҡулын күкрәгенә ҡуйып).* Зур рәхмәт, Йософ мырза. Сабантуйығызда мотлаҡ буламын. Бөйөк Сөләймән солтаныбызның бер кемгә дә майдан бирмәс, бил бирмәс төрөк батырын алып килдем бәйгегезгә. Бер ултыруда бер сарыҡны ашап бөтөрә, бер чиләк шурпа эчә. Шуңа лайыҡлы батырларығыз булса, көч сынашып ҡарасыннар! *(Сығып китә.)*

**Шаңҡыбыраҡ ҡалалар.**

**Исмәғил.** *Әл-ләл-ләәә!..* Кемде ҡаршы ҡуябыҙ?

**Йософ** *(каушап, башын тырнап).* Әлләсе...

**Юныс** *(ырғып тороп).* Йәнсура батырҙы, әлбиттә!

**Исмәғилдән башҡаһы бер тауыштан.** Йәнсура батырҙы! Йәнсура батырҙы!

**Исмәғил.** Хуп! Бәйгеләрҙе бөткәнсе ҡарарға форсатым юҡ. Ике батырҙың алышынан башлағыҙ. Еңеүсегә затлы бүләк — үҙемдән!

**Йософ.** Иншалла, шулай булһын, ағайым.

### 3 - сө сәхнә

**Бәйге ҡырының тамашасылар түрендә ултырған түрәләр ике батырҙың көрәшен ҡарай: Йософ, Исмәғил, Һылыубикә, Юныс, Бойорған Сәйет, Кадыш Кудинов һәм Вәкил. Көрәш үҙе күренмәй, ләкин майҙан халҡының гөжләүе уның көсөргәнешле барышын һөйләй.**

**Юныс.** Йәнсура батыр, бирешмә!

**Вәкил.** Батырым, төрөклөгөңнө күрсәт! Нуғайны селкеп сал!

**Йософ.** Йәнсура, билен ысҡындырма!

**Вәкил.** Жаным, изге Ай башлы сөлгөңнө ныҡ бөрөп тот!

**Һылыубикә.** Уф, төрөк батыры тәнен майлап сыҡҡан бит!

**Юныс.** Шамбы һымаҡ шып-шыма!

**Исмәғил.** Төрөк шамбы булһа ла, башҡорттоң үҙлекле киндерҙән һуҡҡан Асаба-Астаҡ башлы таҫтамалйәтмәһе ҡаты! Йәнсура, кәрәген бир мөртәттең!

**Вәкил.** Бәһлеүәнем, нуғай-истәкне ҡапландырт!

**Түрҙәгеләр.** Уй-уй!..

**Бөтәһе тороп баҫа, көрәш майҙанында ҡайһылыр батыр гөрһөлдәп ауа.**

**Вәкил.** Ай-вай-ау... Нуғай аҡтығы бәһлеүәнемнең билен сындырды! *(Йөҙөн ҡаплап сүгәләй).*

**Юныс.** Ур-ра! Йәшә, Йәнсура батыр! Апкил төрөк һөлгөһөн!

**Йософ** *(күҙ йәштәрен еңе менән һөртөп).* Йөҙөбөҙгә ҡыҙыллыҡ килтермәне, иншалла. Атаһы Түлебай артынса уҡ Үҫәргәндең бейе булырға лайыҡ.

**Исмәғил.** Саҡырығыҙ батырҙы, арҡаһынан ҡағайым!

**Иптәш егеттәре менән Йәнсура батыр инә. Бер ҡулында — ике башында ла ярым Ай, Ай уртаһында йондоҙ биҙәкле төрөк батырының һөлгөһө; икенсе ҡулында – ике башы Асаба-Астаҡ (Свастика) биҙәкле башҡорт таҫтамалы.**

**Йәнсура** *(итәғәтле баш эйеп).* Бөйөк кенәз, бына еңелеүсе төрөк һөлгөһө! *(Исмәғилдең аяҡ аҫтына ташлай, Исмәғил уны тапай.)*

**Исмәғил.** Һай, афарин!

**Йософ.** Мең йәшә!

**Йәнсура.** Ә быныһы – үҙебеҙҙең шанлы еңеү таҫтамалы! *(Башҡорт таҫтамалын, биҙәкле баштарын алға һәлендертеп, Исмәғилдең муйынына һала. Майҙан «гөж!» килә.)*

**Исмәғил.** Рәхмәт, батырым. Башҡорт батшалар шәжәрәһенең ысын алтын ҡулсаһы, Бикбау кенәздең аҫыл вариҫы икәнлегеңде күрһәттең. Һиндәй батырҙары булғанда, биртенмәҫ тә, бирешмәҫ тә башҡорт биле!

**Йософ.** Бил бирмәҫ батырыбыҙға минән бүләк – уҡалы аҫыл елән, бәҫле бүрек!

**Ике һылыу ҡыҙ батырға затлы елән, бәҫле бүрек кейҙертә.**

**Исмәғил.** Минән һиңә бүләккә изге ҡомартҡы – Урал батырыбыҙҙың алмас ҡылысы! Ҡара табын башҡорттары ҡойған ысын булаттан!

**Йәнсура** *(ҡылысты үбеп, биленә тағып ала).* Рәхмәт, бөйөк кенәзем. Урал батырыбыҙҙың ҡылысы илебеҙгә намыҫлы хеҙмәт итер. Азаматлыҡ юлында йәнебеҙ фиҙа!

**Йософ** *(йылмайып).* Бына – ниндәй шәп! Инде һиңә бер генә нәмә етмәй, егетем.

**Йәнсура.** Ни нәмә?

**Йософ.** Кәләш. Һылыуҙарҙан-һылыу кәләш тейешле һиңә.

**Исмәғил.** Күҙләгән һылыуың бармы?

**Сөйөмбикә атлығып килеп сыға.**

**Сөйөмбикә.** Мин ул, мин! Мин ул уның кәләше!

**Һылыубикә.** Абау... бәпесем!..

**Йософ.** Ҡыҙым, ни ҡылығың был? Бөтә ил-ғәләм алдында...

**Юныс.** Әйттем бит...

**Сөйөмбикә.** Бирһәгеҙ ҙә, бирмәһәгеҙ ҙә барам – мин уныҡы!

**Йәнсура** *(ҡыҙ янына атлығып).* Ул минеке! *(Ҡосаҡлашып сығып китәләр.)*

**Күмәк тауыш.** *Ләхәүлә,* был ни эш?!

**Бойорған Сәйет.** Күрәләтә йөҙөбөҙгә төкөрҙө...

**Вәкил.** Әйттем бит, ун башҡыртҡа – бер иман!

**Исмәғил** *(көлөп).* Хе-хе-хе... Беҙҙең иман – намыҫыбыҙҙа, ә һеҙҙеке – ҡул осоғоҙҙа. Теләһәгеҙ – тотаһығыҙ, теләмәһәгеҙ – бираҡтыраһығыҙ.

**Йософ.** Ағайым, ул тиклем ҡуйыртмайыҡ!

**Бойорған Сәйет.** Бу ни хәл?! Шәриғәт хөкөмө буйынча...

**Исмәғил.** Сеү! Бында беҙҙең үҙ хөкөмөбөҙ. Йософ мырҙа, Һылыубикә килен, шулай уҡ Ҡазан һәм Мәскәү илселәре, ошонда ҡалып тороғоҙ *(ҡул һелтәп),* башҡаларығыҙ ат бәйгеһенә – выжт!

**«Артыҡ бүрәнә баштары» тарала лыша.**

**Бойорған Сәйет.** Зерә дә йәмсез килеп чыкты... Йә, ни ҡылабыз, кенәз?

**Кадыш Кудинов.** Сөйөмбикәгеҙҙе Жангали ханға килешкәйнек бит инде.

**Һылыубикә** *(иҙән тибеп).* Юҡ, килешеп етмәгәнбеҙ! Ҡыҙҙың үҙенән һораманыҡ!

**Йософ.** Ә мин үҙеңде алғанда һорағайнылармы һуң? Аллаға шөкөр, нисәмә бала үҫтерҙек. Мырҙа ғына булһам да, хан һыйында йәшәйһең. *(Башын тотоп.)* Их, Ҡазан ханына ҡайната булырмын, тигәйнем...

**Исмәғил.** Булырһың, әле һуң түгел.

**Һылыубикә.** Ҡазанға бирер ҡыҙым юҡ! Бәпесемдең башын ашатырғамы?

**Бойорған Сәйет.** Сылыубикә ханым, баш ашарға Ҡазанда бүреләр юҡ ич!

**Һылыубикә.** Ҡоҙғон ояһы...

**Йософ.** Тыйыл, тим! Сәсе оҙон, аҡылы ҡыҫҡа, тигәндәй, ҡыҫылма ирҙәр эшенә! Сәғәте һуҡмайынса, ауыҙыңды йомоп тот – килешеүҙе бәпесеңә белдертмә. Телеңде тешләп йөрө! Юғиһә, күрәһеңме анау балтаны – сәсеңде лә, телеңде лә башың менән ҡуша бер юлы ҡыҫҡартырмын.

**Һылыубикә** *(илап).* Ил өҫтөндә йөҙөк ҡашындай бәпесеңде... Мөхәббәтен иҫәпкә алыр инең...

**Исмәғил** *(Һылыубикәнең яурын башынан һөйөп).* Киленкәйем, хан ҡайнанаһы булырыңды онотма! Йософоңдо ла кенәз ҡылырбыҙ, Аллаһ бойорһа. Заруриәт мөхәббәттән өҫтөнөрәк! *(Бойорган Сәйет менән Кадыш Кудиновҡа.)* Бөйөк кенәз Василийға еткерегеҙ: Сөйөмбикә Йәнғәлиҙеке булыр!

**Йософ** *(елкәһен тырнап).* Әй эттәгенәһе... Йәнсураһын нишләтәбеҙ? Әлләә, тим...

**Исмәғил.** Бер ниндәй ҙә «әлләмәлләә» түгел! Йәнсура батырҙы тиҙ генә, ололап-ҙурлап, азаматтар башлығы итеп күтәрегеҙ. Баштан-аяҡ ҡоралландырып, монаятлап, ил өсөн изге хеҙмәткә – Тын йылғаһы буйындағы баяғы Боролош *(К. Кудиновка)* – урыҫтарса Воронеж ҡәлғәһенә юлландырығыҙ. Мәскәүгә барыр юлыбыҙҙы татар-урыҫ казактары баҫҡынсылығынан йән аямай ҡурсалаһын. Яраларҙы уңалтыусы иң шәп табип — ваҡыт ул.

**Йософ.** Эйе шул. Бер нисә йыл азаматлыкта интекһә, булыр-булмаҫ һөйөүенән дә һүрелер, шул арала Сөйөмбикәбеҙ шәһри Ҡазандың никахлы ханбикәһенә әүерелер.

**Бойорған Сәйет.** Хаҡ сүз. Шитыкрыты булыр, урыс дуслар әйтмешли.

**Һылыубикә менән Исмәғилдән башҡалары бөтәһе бергә.** Бәрәкалла! Алтын аҡыл!

### 4-се сәхнә

**Яңғыҙ ҡайын төбөндә Сөйөмбикә башлығындағы ҡыҙҙар төркөмө. Ҡаршы яҡтан егеттәр – Йәнсура батыр башлығындағы азаматтарҙы алыҫ хеҙмәткә оҙатыу. Ҡыуаҡлыҡтар артында егеттәрҙең менге аттары бышҡыра ла тибенә. Бөтә сәхнә китеүсе егеттәрҙең һәм оҙатып ҡалыусы ҡыҙҙарҙың халыҡ йыры «Ерән ҡашҡа»ны башҡарыуына ҡорола.**

**Йәнсура.** Егеттәр, ярһыу азаматтарым! Йыраҡ, хәтәр юлға сығырға сәғәт һуҡты, аттарыбыҙ ҙа сыҙай алмай сапсына. Көмөш өҙәңгеләребеҙгә баҫҡансы, һөйгәндәребеҙҙең күҙҙәренә яҡын килеп төбәләйек, иң мөҡәддәс һүҙҙәребеҙҙе шыбырлайыҡ.

**Ике төркөм ағылып килеп тоташа, күңелле шау-шыу.**

**Сөйөмбикә** *(һыктанып).* Йәнсурам, китәһең... Мине ҡалдырып китәһең...

**Йәнсура** *(ҡосаҡлап).* Сөйөмбикәм, һылыуым, ҡалдырмайым мин һине – йөрәгемдең түрендә алып китәм. Әйләнер ҙә ҡайтырмын, көтөп тор.

**Сөйөмбикә.** Үҙәгем өҙөләр инде...

**Ерән ҡашҡа һуҙып кешнәй.**

**Йәнсура.** Азаматтарым, ваҡыт тар! Ерән ҡашҡам саҡыра!

**Төркөмдәр үҙ урындарына ҡайта.**

**Ҡыҙҙар.**
*Йәйләүҙәргә барҙыҡ, бейәләр һауҙыҡ,*
*Баш күнәккәй, баш*
*күнәккәйҙәрҙе лә ҡулға элеп.*
*Ерән ҡашҡа атҡайым да,*
*Башын сайҡай малҡайым.*
*Алдарында һолоһо бөтһә,*
*Һыҙыла йөрәк майҡайым.*
*Эй-й... һыҙыла йөрәк майҡайым.*
*Иҫән генә йөрөп, һау ҡайтығыҙ,*
*Китәһегеҙ, китәһегеҙ инде лә ҡуҙғалып.*
*Ерән ҡашҡа атҡайым да,*
*Елдәр тарай ялҡайын,*
*Эйәрләгән егетеңде*
*Ташлап ҡайтма, малҡайым,*
*Эй-й... ташлап ҡайтма, малҡайым.*

**Егеттәр.**
*Йәйләүҙәрҙе ташлап, ҡорал алып,*
*Беҙ китәбеҙ, беҙ китәбеҙ*
*менеп тә аттарға.*
*Ерән ҡашҡа атҡайым да,*
*Алдан елер малҡайым,*
*Эйәрендә егете барҙа*
*Бойоғоу белмәҫ малҡайым.*
*Эй-й... бойоғоу белмәҫ малҡайым.*
*Иҫән генә торорноҙ, беҙ китәбеҙ,*
*Йыш яҙығыҙ, йыш яҙығыҙ*
*яуап та хаттарға.*
*Ерән ҡашҡа атҡайым да,*
*Юл ташламаҫ малҡайым.*
*Биленән эйәр төшмәһә лә,*
*Төҫ ташламаҫ атҡайым.*
*Эй-й... төҫ ташламаҫ атҡайым.*

**Егеттәр, ҡыҙҙар.**
*Йәйләүҙәрҙе ташлап киткән саҡта,*
*Тимер Ҡаҙыҡ, Тимер Ҡаҙыҡ булыр*
*ҙа юл башым.*
*Ерән ҡашҡа атҡайым да,*
*Төн юшамаҫ малҡайым.*
*Ҡом сахраһын үткәндә лә*
*Һис өшәнмәҫ малҡайым,*
*Эй-й... һис өшәнмәҫ малҡайым.*
*Тимер Ҡаҙыҡ булһа, һәй, юл башым,*
*Ерән ҡашҡа, ерән ҡашҡа*
*булыр юлдашым.*
*Ерән ҡашҡа атҡайым да,*
*Башын сайҡай малҡайым.*
*Алдарында һолоһо бөтһә,*
*Һыҙыла йөрәк майҡайым.*
*һуғыштарҙан иҫән ҡайтһам,*
*Уҡалармын ялҡайың.*
*Эй-й... уҡалармын ялҡайың.*

**Йәнсура.** Азаматтарым, аттарға!

**Ҡыҙҙар.** Хәйерле юл, хәйерле юл! *(Йүгереп килеп егеттәрҙе ҡосаҡлайҙар.)*

**Сөйөмбикә** *(Йәнсураһын ҡосаҡлап илай).* Ебәрмәйем, ебәрмәйем!

**Егеттәр төркөмө аттары яғына китә, ҡыҙҙар ҙа улар артынан ыңғайлап юғала. Яңғыҙ ҡайын төбөндә Сөйөмбикә генә ҡала.**

**Һылыубикә** *(йүгереп килеп).* Бәпесем, былбылым, был ни эшең?! Ил күҙе алдында егет муйынына аҫылындың, ғаиләне рисуай иттең... Хан дәрәжәһендәге мырҙа ҡыҙы икәнеңде онноттоң!

**Сөйөмбикә.** Уф... йөрәгем...

**Һылыубикә.** Киткәндәр артынан китеп булмай. *(Ҡыҙының арҡаһынан һыйпап.)* Онот, бәпесем, онот!

**Сөйөмбикә** *(ҡорур ҡалҡынып ҡарап).* Онотмайым! һөйөүем — һөйөү, барыуым – барыу! Башыма таш яуһа ла! Барыбер мин унытыҡы!

**Һылыубикә.** Тәүбә-тәүбә, бәпесем, һин инде хан кәләше!

**Сөйөмбикә** *(тертләп).* Ә?! Нимә?!

**Алыҫ-алыҫтан «торройк-торройк!» тигән торналар сыңрауы, артынса уҡ Йәнсураның «Азамат» йыры ишетелә:**

*Алыҫтарҙан, ай, күренгән –*
*Ирәмәлкәй тауының аҡ ташы.*
*Ҡайҙа ғына бармай, ниҙәр күрмәй*
*Ир-егеткәй менән ат башы...*

**Сөйөмбикә** *(һыҡтап).* Ҡайҙа ғына бармай, ниҙәр күрмәй...

**Һылыубикә.** Бәпесем, атайың ишетеп ҡуймаһын... Ҡазандан яусы килде, беҙ һине Йәнғәли ханға бирергә килештек...

**Сөйөмбикә.** Аһ!.. Йәнекәйем, Йәнсурам!.. *(Ҡайын олонон ҡосаҡлаған килеш һыпырылып йығыла.)*

**Шаршау.**

## ИКЕНСЕ ШАРШАУ

### 1 -се сәхнә

**Сәхнә төбөндә дата: «1533 йыл». Ҡазан ҡалаһының хан һарайы. Йәнғәли хан менән Сөйөмбикә бөгөн никахлашып, уларҙың беренсе ҡушылыу төнө. Кейәү һәм ҡыҙ икеһе ике бүлмәлә, ҡушылыуға һуңғы әҙерлек бара. Йәнғәли бүлмәһе, Йәнғәли менән Бабай.**

**Бабай** *(Йәнгәлиҙең билбауын төҙәткеләп).* Әт-тә-тә, биленддәге ал билбауың ҡалай килешеп тора!

**Йәнғәли** *(маһайып).* Бөйөк кенәз Василий атаҡайым бүләк ҡылған билбау бу!

**Бабай.** Очон нығыраҡ йәшер, башҡырт кәләшең чишә алмый жөдәсен.

**Йәнғәли.** Башҡырт – аңғра сарыҡ, диләрме әле? Үзем чишеп бирмәсәм, очон таба алмас ул.

**Бабай** *(ситкә ҡарап, ауыҙын бәлшәйтеп).* Пыш-ш-ш, синнән дә аңғырараҡ булмас инде. Тәпи басҡаныңнан алып тәрбиәләп, аҡылға ултырта алмадым, хатта үзем аңғыралана башладым... *(Йәнгәлигә.)* Аңғыраның аңғырасы ул башҡырт, аңғыра бәрән кебек. Әммәләкин бу бикәңне алай дип әйтмәс идем. Жылан аяғын ҡайчылағанға охшой ул.

**Йәнғәли** *(тертләп).* Ҡайчы?! Билбауымны да ҡайчылап ҡыймаса ярар иде, бөйөк кенәз Василий атаҡайым бүләк ҡылған билбауны!

**Бабай.** И бала, шушы мәнесезлегеңә барып, чәчләремне генә түгел, башҡа нәрсәләремне дә ағарттың бит! Жә алайса: астыңдағы туры айғырың түзә алмайынча чапчынса, үзең генә чиш тә ҡуй.

**Йәнғәли** *(көлөп).* Һи, исәүәннең исәүәне син, Бабай, ҡайда икәнеңне дә шәйләмисең! Беләсең килсә, минең айғырым атханада — кәнүшнәдә.

**Бабай.** Соң, Ҡасим ҡаласында чағында Шәйехғәли дәдәңнең жуан күтле жариәсен ҡочҡаныңда да кәнүшнәдә идеме? Шул бейәгә сикереп менгәнеңне сизми дә ҡалдың, бала ясап өлгөрдөң.

**Йәнғәли.** Һи мәнесез! Бейә түгел, ә *(ҡосағын йәйеп күрһәтә)* мона монауындый маржа иде ул. Айғырыма үзе менеп атланды, баланы да үзе ясады. Шуңа күрә ул ҡыз баланы мин алмадым, Шәйехғәли ағайымда ҡалдырдым.

**Бабай.** Бейә ни, байтал ни, маржа ни, бикә ни – один чорт: буйға алып салучысы булса, берсе дә арҡылы ятмый. Синең ханлыҡ бурычың – байталыңа айғырыңны сикертеү, Ҡазан тәхетенә вариҫ туғдыртыу. Ир бала кирәк мотлаҡ.

**Йәнғәли** *(уйға ҡалып).* Анысы шулай да ул, Шәйехғәли ағайым да ҡолағыма туҡыған иде. Әммә бөйөк кенәз Василий атаҡайымнан фатиха алмайынча... Хәзер үк Мәскәүгә илчеләр чаптыртыу кирәк!

**Бабай.** Илчеләр? Ни дип?

**Йәнғәли.** Ошбу сәғәттә кәләш ҡуйынына керергәме, кермәскәме дип.

**Бабай** *(башын ҡушҡуллап тотоп).* Я Раббым, ни ҡылайым бу пешмәгәнем берлән?! *(Йәнгәлигә.)* Баш өстө, күз ачып йомғанчы үтәлер фарманың, ханым. *(Йәнгәлиҙе кәләш бүлмәһе ишеге ягына этәреп.)* Ә син тизерәк айғырыңны байталыңа ҡавыштыр, иснәштерә торсоннар. Алай-болай кешнәшкәнче, илчеләребез Мәскәүгә барып ураячаҡ, атаҡайың Василийның фатихасын дәррәү алып ҡайтачаҡ.

**Йәнғәли** *(бармаҡ янап).* Ҡарағыз аны, мотлаҡ күз ачып йомғанчы булсын!

### 2 -се сәхнә

**Сөйөмбикә бүлмәһе, Сөйөмбикә менән Әбей. Һуңынан Юныс инә.**

**Сөйөмбикә.** Әбекәйем, бындай көнгә ҡалырмын, тип уйлағаным юҡ ине.

**Әбей.** Ни хәл итәһең, балаҡайым, башыбыҙға ла килмәгәндәр алдыбыҙға

килә шул. Аллаһ Тәғәлә бойороуылыр инде.

**Сөйөмбикә.** Атаҡайымдың касафаты, нәпсеһен тыя алманы.

**Әбей.** Эй балам, атайың нимә ҡылһын, бөйөк кенәз Исмәғил олатайың үҙе, ил хаҡына кәрәк, тип талап ҡылғас.

**Сөйөмбикә.** Ил хаҡына, ил хаҡына! Бөтәгеҙҙең һүҙе бер. Сөйөмбикә хаҡына, тимәй һис кем. Хатта мине тәпәй баҫкандан тәрбиәләп үҫтергән Әбейем дә – һин дә...

**Әбей.** Ил хаҡына йәндәрен дә бирәләр бит, балаҡайым. Ә һин гүргә кермәйһең, кейәү ҡуйынына керәһең.

**Сөйөмбикә.** Кейәү тигәнегеҙ йүнле булһасы... Әҙәм тиһәң – һыны юҡ, эт тиһәң – йөнө юҡ, шыр тиле шунда.

**Әбей.** Тәүбә-тәүбә, ишетеп ҡалмаһындар. Ханға тел тейҙереү – муйыныңа ҡылыс алыу менән бер. Бигерәк тә бына-бына ҡуйыныңа керер кейәүең тураһында.

**Сөйөмбикә.** Ҡуйыным һалҡыная, сирҡанамын мин унан... Их, теге кистә йән һөйгәнем Йәнсураны керетмәнем!..

**Әбей.** Шым! Күпме туҡыйым һиңә: мәңге онот ул исемде! Никахлы кейәүең Йәнғәлиҙе, һылап-һыйпап, иретергә әҙерлән.

**Сөйөмбикә.** Юҡ! Онотмайым Йәнсурамды! Үлгәндә лә «Йәнсурам!» тип йәнемде бирәсәкмен!

**Әбей.** Әстәғәфирулла тәүбә, ханбикәгә килешмәгән көфөр һүҙ... Сеү! Аяҡ тауышы, Юныс ағайың килә.

**Юныс инә.**

**Юныс.** Хәйерле кис, һылыуым, хәйерле кис, Әбекәй.

**Әбей.** Әйҙүк, рәхим итеп түрҙән үт, Юныс балам.

**Юныс** *(ултыра).* Ә һин ниңә ауыҙыңа һыу уртланың, һылыуым?

**Сөйөмбикә.** Нимә тип өндәшәйем, үҙегеҙ мине хан аталмыш шыр тилегә тотторғас.

**Юныс.** Улай тип әйтмә, һылыуым. һин, шыр тиле, тиһәң дә, аҫтында алтын тәхете бар бит уның. Үҙең дә тәхетле булырһың.

**Сөйөмбикә.** Тик бәхетле генә була алмамдыр... Бәхетем минең осто – бик алыҫҡа осорҙоғоҙ һеҙ уны.

**Юныс.** Үҙ бәхетеңде үҙең яһарға тырыш. «Шыр тиле»ңде йүгәнләп-ауыҙлыҡлап мен, ауыҙын шаҡарып тотоп, үҙең теләгән яҡҡа бор, ысын башҡорт һылыуы булһаң әгәр! Ҡазан ханлығын ҡалыпҡа ултыртырһың, урыҫ менән башҡорт араһына өҙләкһеҙ шына ҡағыусы, ут төртөүсе булыуынан туҡтатырһың, тыныслыҡҡа ҡот килтерерһең, бәлки.

**Сөйөмбикә.** Эй ағайым, Ҡазан ханы итеп, ҡарт булһа ла, Ҡасим ханы Шәйехғәлиҙе түгел, ә уның ошо ҡустыһы Йәнғәлиҙе ҡуйған Василийҙы тинтәк тиһеңме әллә? Уның да башы эшләй, беҙҙекенә ҡарағанда ла, моғайын, шәберәк эшләй. Быбың артында ни ятҡанын кем белә? Бәлки, яманмы-яҡшымы, мосолман донъяһын яҡлап торған Ҡазан ханлығын эстән ҡаҡшатып юҡҡа сығартыу, артынса уҡ беҙҙе лә йөгөнөкләндертеү өсөн ҡоролған хәйләләр. Хан кейәүегеҙ шул Василий рөхсәтенән тыш бер аҙым да атламай, «Василий атаҡайым» тип кенә тора, быныһын үҙ ауыҙынан ишеттем...

**Әбей.** Урыҫ булһа атаң — билеңдә булһын балтаң...

**Юныс** *(урынынан тороп).* Ярай, тәрәнгә төшөп киттек... Ә һин, һылыуым, мин әйткәндәрҙе киртеп ҡуй ҡолағыңа. Яҡшы ир-ат иле өсөн утҡа керә, ил хаҡына һин дә түҙ *(сығып китә).*

**Сөйөмбикә** *(илай).* Түҙермен, түҙермен... Бөтәгеҙгә үс итеп булһа ла түҙермен!..

**Ишек шаҡыйҙар, билбауын һөйрәлкән Йәнғәлиҙе Бабай төрткөләп индергәнендә, уныһы Әбейгә төкәлә.**

**Йәнғәли** *(йырлай).*

*Кәләшкәйем, көттеңме,*
*Зарығып ла бөттеңме?*
*Билемдәге ал билбауым*
*Бушаҡ — әллә сүттеңме?*

**Сөйөмбикә.**

*Кейәүкәйем, ник килдең,*
*Әллә көтә тип белдең?*
*Икебеҙҙең берен һайлап,*
*Әбекәйгә төкәлдең.*

**Йәнғәли.** Юҡ-юҡ, әбекәй үзеңә булсын! Мотлаҡ син, син үзең кирәк миңа!

**Бабай** *(Йәнгәлиҙең ҡолағына).* Малладис! Айғырың шәп ажғыра – сикерт, балам, байталыңа!

**Йәнғәли** *(айғыр булып кешнәп).* Иһа-һа-һа! *(Сөйөмбикәгә талпына, ләкин кинәт Әбей баҫҡан билбауына тартылып йығыла.)* Разбо-о-ой! Василий атаҡайым, миңа уҡтан аттылар!

**Бабай.** *Ләхәүлә,* тор! Уҡ та юҡ, буҡ та юҡ! Сөйөклөм, ҡарале: кейәү баланың ятағы ана анда *(Сөйөмбикә ултырған карауатҡа күрһәтеп)* – жанайы ҡуйынында!

**Әбей.** Тор, кейәү, тор.

**Йәнғәли.** Тормим! Бөйөк кенәз Василий атаҡайымның изге фатихасы килеп житмәйенчә ҡузғалмим! Илчеләр нигә озаҡлады?

**Бабай.** Илчеләр инде Ҡазанның ҡапҡа төбөндә, сине түшәккә салғанчы, монда да килеп житерләр. Бисмилла, Ҡазан ханлығы хаҡына! *(Бабай менән Әбей Йәнгәлиҙе карауатҡа күтәреп һала.)*

**Йәнғәли.** Ҡара ҡашым, жанашым, сузылып ят яныма!

**Әбей.** Ят, кейәү балам, ят. Донъяһына төкөр ҙә хәләл ефетлек бурысыңды үтәй күр. *(Сөйөмбикәне ятҡыра, Бабайҙы ҡултыҡлап ала.)* Киттек-киттек, ҡарт алаша!

**Бабай.** Их, бүлмәләре күп кенә дә дарманыбыз юҡ ҡына... Василийның фатихасын көтөп тә ятмас идек... *(Сығып китәләр.)*

### 3-сө сәхнә

**Сәхнә төбөндә дата: «1535 йыл». Ҡазан хан һарайының тәхетханаһы. Йәнғәли хан, сабатаһын түргә элеп, тәхеттә ирәйеп ултыра.**

**Йәнғәли.**

*Чабатамның башы тишек,*
*Әл дә табаны таза.*
*Ай-ли, чабатам,*
*Чабатамны яратам!*
*Чабатамны санламаган —*
*Алыр миңардан жаза.*
*Ай-ли, чабатам,*
*Чабатамны яратам!*

**Сөйөмбикә-ханбикә инә.**

**Сөйөмбикә.** Абау! Әғүзе биллаһи минә шайтан и-раззим! Тәхетенә шайтан менгәнме тип торам... Был ни хәл: сабатаңды тағы түргә элгәнһең! *(Алып ташларға итә.)*

**Йәнғәли.** Выжт! Теймә чабатама! *(Ырғып тороп, ҡылысын һурып сығара.)* Муйыныңны өзә чабам!

**Сөйөмбикә.** Сап, ҡотолормон, исмаһам. Ә һин, тинтәк, һис юғында ҡатын үлтереп данланырһың.

**Йәнғәли** *(ҡылысын кире тығып, тәхетенә ҡунаҡлап).* Юҡ инде, чапмим! Бөйөк кенәз Василий атаҡайымнан фарман килгәч, чабырмын. Ә хәзергә йөрөп тор. Бик тә эшең булмаса, чабатама киндерәү иш.

**Сөйөмбикә.** Татар түрә булһа, сабатаһын түргә элә, тип көлә сыуаштарың...

**Йәнғәли.** Соңра жылап ҡуймасыннар! Түргә элү генә түгел, тәхеткә дә ултыртырмын! *(Ырғып тороп, сабатаға ҡарап суҡына.)* Күрмисеңме, Ҡазан дәүләтен нурларлыҡ чабатам бу. Бөйөк кенәз Василий атаҡайымның дуңғызларын көткәнемдә Василий атаҡайым үзе үрдертеп биргән иде.

**Сөйөмбикә.** Эй, Раббым! Василий атаҡайың үлгәнгә лә ике йыл тула бит инде. Ә һин һаман сабатаңды эләһең, үлеккә табынаһың...

**Йәнғәли** *(ярһып.)* Үлек түгел! Үлек түгел!

**Сөйөмбикә.** Үҙең үлектер, алайһа...

**Йәнғәли.** Терек мин!

**Сөйөмбикә.** Эсеңдә йәнең булһа, арҡыры ятҡанды буй алып һалыр инең... Тәхетеңде урыҫтан ҡурсаларға тип, Башҡорт иленән Ябынсы Яҫауыл олатайым килеп еткән. Ғәскәренә аҙыҡ-түлек, ҡорал-монаят һорай. Ҡабул ҡылыуыңды көтә.

**Йәнғәли.** Көтсөн. Мин дә Василий атаҡайымның изге фарманын көтәм... ҡайсы бер ки бәндәләрнең муйынын ҡысҡартырға.

**Сөйөмбикә.** Үҙеңдекен ҡыҫҡартып ҡуймаһындар... Һарай алдында өйөлөшөп татар, ар, сирмеш, сыуаш бәктәрең шаулаша, ҡоҙғондарҙай ҡайнаша. Сабатаһын түргә элгән түрә беҙгә кәрәкмәй, башҡа хан кәрәк, тиҙәр. Василий мәрхүмдең улы яуыз Ивандан яңы хан һорарға ниәтләйҙәр. Күрәҙәсе Гәүһәршат менән Булат бәк ҡоторона...

**Йәнғәли** *(ҡылысын ҡынынан һура биреп, кире тыға.)* Керсен алар икесе, кирәкләренә бирәйем!

**Сөйөмбикә.** Эй сабата-сабата... *(Сыға.)*

**Булат бәк, Гәүһәршат күрәҙәсе инә.**

**Булат бәк.** Әссәләмәғәләйкүм!

**Гәүһәршат.** Хәйерле көн!

**Йәнғәли.** Жә, нигә ҡатып ҡалдығыз? Шыҡырыҡлағыз!

**Булат бәк.** Баш өстө, хан, хәлбуки без сайысҡаннардан түгел.

**Гәүһәршат.** Син ничектер, әммә безләр адәм телен беләбез.

**Йәнғәли.** Сүләгез, алайса. Нигә бөйөк кенәз Василий атаҡайымны үле жанға саныйсыз?

**Гәүһәршат.** Чөнки моннан ике йыл элгәре үк ҡатты бит ул.

**Йәнғәли.** Ялған! Бүген генә күрдем мин аны. Бергә йөрдөм!

**Булат бәк.** Төшөңдәме?

**Йәнғәли.** Өнөмдә! Тәмле сүләшеп ултырдыҡ.

**Гәүһәршат.** И, ханым-солтаным, алайса үзең дә мәреткә киткән икәнсең. Хәйерлегә генә булсын.

**Йәнғәли.** Минең жөмлә эшләрем дә хәйерле.

**Булат бәк.** Һе! Ҡазан ҡәлғәсенең диуарлары жимерелде, ҡапҡа төпләре череде. Урыс килсә, усырығы берлән дә аударырлыҡ...

**Йәнғәли.** Аудармас, Василий атаҡайым усыртмас.

**Булат бәк.** Белмим-белмим, Иваны ни диер икән? Хәзердән үк "Яуыз" ләҡәплиләр бит... Башҡырт иле санға суҡмый, чуваш, чирмеш, мордва да баш бирми. Ғәскәр жыйырға кирәк.

**Йәнғәли.** Хуп! Мәскәүгә илче жибәрермен, ни ҡылырға кирәклеген бөйөк кенәз Василий атаҡайымнан үтенеп сорармын.

**Гәүһәршат.** Бөйөк ханым-солтаным, аслан үз башың ҡайда?

**Йәнғәли.** Һе! Минең башым Мәскәүдә – Василий атаҡайымда.

**Гәүһәршат.** И, бөйөк ханым-солтаным, үз Ҡазаныңда алай башсыз да булғач, ханбикәңнең ҡуйынында икенче бер башыңны булса да эшләтеп, хан тәхетенә варислыҡҡа башлы уғлан туғдырып бирсәңче? Никахығызға озон ике йыл тула ич!

**Йәнғәли.** Юҡ инде, мине тәхетемнән очорторғамы?! Миңа варис кирәкми, Василий атаҡайым тәхетемә нык ябышып ултырырға бойордо!

**Булат бәк.** Алайса, тәхетең ҡашында безләр – чүп, әллә ҡачан үлек Василий атаҡайың берлән чабатаң ғына ҡот икән.

**Йәнғәли** *(ашҡынып).* Үлек түгел! Үлек түгел!

**Гәүһәршат.** И, Ходайым, Ҡазан ханлығы бөтөүенең башы шушыдыр инде. Әле генә хаҡ күрәзәлек ҡылыуым: ун алты йылдан соңра ханлығыбыз юҡҡа чыға — Мәскәү кенәзе бөтөрә... Ун алты йыл ғына ҡалды...

**Булат бәк.** Ауызыңнан жил алсын, шомло жан! Ходай орғоро күрәзәче! *(Сығып китә.)*

**Йәнғәли** *(урынынан тороп, ҡылысын һурып сығарып).* Бөтмәс, бөтөрмәсбез! Василий атаҡайым берлән без барда!

**Гәүһәршат.** Ха-ха-ха! *(Сығып китә.)*

**4-се сәхнә**

**Ҡазандың Жамиғи мәсетендә теҙелеп намаҙ уҡыйҙар, иң алда – башлап уҡыусы мәсет имамы Ҡолшәриф. Намаҙ аҙағында вәғәз тыңлана.**

**Ҡолшәриф.** Бу донъя ҡайда барадыр – анысын Аллаһ белсен. Әммә сез, хаҡ мосолманнар, үзегез күреп торасыз: яңа ханыбыздан уңмадыҡ. Сафагәрәй ханны күсәкләп ҡыуыуынҡыудыҡ та аннан киресенә килеп ҡаптыҡ: урыс Василийның дуңғыз көтөүчесен Ҡазан ханы итеп алдыҡ, тәхетебезнең ҡотон очордоҡ. Әллә тәҡдиребез ҡушты, әллә Мәскәү алдашты... Ҡазан диуарлары инде эт сикереп үтмәле, ҡәлғә эче таяҡ тығып болғаулаған сары сағызаҡ оясындай ҡайнаша, Ҡазан халҡы бер-бересен үкертеп-ачыттырып чаға... Малай ғына Иван патша хәзердән үк Яуызға әүерелде, Ҡазанны алырға ғәскәр артыннан ғәскәр жибәрә. Үсеп кенә житсен әле – ниләр ҡылмас дисегез? Ходай орғоро күрәзәче Гәүһәршатның күрәзәләүе тура килмәгәйе, дим...

**Күмәкселек.** Тәүбә-тәүбә!..

**Ҡолшәриф.** Шуның өчөн тешләрне нығыраҡ ҡысарға, тәхетебезнең очҡан ҡотон ҡайтарырға кирәктер. Кем ултыра анда: ханмы ул, әллә пацанмы, теге Иван әйтмешләй.

**Булат бәк.** Әле генә кереп чыҡтым: үтмәс ҡылычын биленә тағып алған да теше-тырнағы берлән тәхеткә ябышып ултыра. Үзе һаман Василий атаҡайы берлән саташа, биғәйни, бергә чуҡынып йөрөй...

**Ҡолшәриф.** Чуҡынсын. *(Йәмәғәткә.)* Шул чуҡынчыҡ Мәскәү яҡлылар ни уйлый? Чура батыр берлән Ҡадыш мырза, мәсәлән? Алар сорап алды бит.

**Сура.** Мәскәүҙән беҙ Шәйехғәли ханды һорағайныҡ, әммә Василий, үҙенең дуңғыҙ көтөүсеһе Йәнғәлиҙе хан итеп биреп, төп башына ултыртты...

**Ҡолшәриф.** Башҡырт иле ни шәйли?

**Сура.** Башҡорт иле лә ошондай уҡ фекерҙә. Шуға күрә Йәнғәли хандың мәрхүм атаҡайы Василий кенәз менән ҡауышыуы хәйерлелер...

**Ҡадыш.** Мин һәм башҡалар да шул уҡ теләктә. Атаҡайы ҡырыннан кире әйләнеп ҡайтмасын иде.

**Ҡолшәриф.** Мәслихәт, хуп. *(Икенсе тарафҡа.)* Ә Хаҡ-Ислам Төркиә, Ҡырым тарафдарлары? Хәйер, алар исеменнән үзем белдерим: без дә ҡадерле Жанғәли ханыбызның сөйөклө Василий атаҡайы берлән мәңге бергә ожмахтамы, тамуҡтамы ҡалуы яҡлы. Дөрөсмө?

**Күмәк тауыш.** Дөрөс, дөрөс!

**Ҡолшәриф.** Димәк, ике фирҡә дә бер төптән. Шул төпләләр тороп бассын, төпсөзләр ултырып ҡалсын. *(Барыһы ла тороп баҫа.)* Хуп мәйле, жыйыныбыз бер чыбыҡтан ҡуылған... Инде Булат бәк берлән Чура батыр жәһәт кенә ошбу шатлыҡлы тәҡдирне сарайға – ханыбызның үз ҡолағына ирештереп килсеннәр, кире чыҡмаслыҡ ҡылып. Ә безләр, эчебездән генә сүрәләр уҡып, ултырып torойоҡлар.

**Сура батыр менән Булат бәк ашығыс китә. Бер талай ваҡыттан һуң тышта шау-шыу, Гәүһәршаттың әсе ауазы: «Жәмәғәт, Ходаға доға ҡылыңыз – тиле-миле Жанғәли ханны үлтергәннәр!» Дөпөлдәп йүгергән аяҡ тауыштары, Сура батыр менән Булат бәк атлығып керә.**

**Булат бәк.** Үлтермәгәннәр, ул үзе мәреткә киткән!

**Сура.** Эйе, Василий атаҡайы янына, мәңге бергә булырға!

**Йәмәғәт.** Аллаһы әкбәр! Бәрәкалла!

**Ҡолшәриф.** Иншалла. Инде сезләргә төп яңалыҡны ирештерим: Сафагәрәй ханыбыз әйләнеп ҡайтты. Ҡәлғә ҡапҡасын ачығыз, оло ҡәдерхөрмәтләп, тәхетенә күтәреп ултыртығыз! Жанғәлидән тол ҡалмыш сөйөклө ханбикәбез Сөйөмбикәне Сафагәрәй ханыбызға йәш хатын итеп бирик!

**Йәмәғәт.** Бирик! Бирик!

**5-се сәхнә**

**Сәхнә төбөндә дата: «1547 йыл». Таң һыҙыла. Сөйөмбикә ханбикәнең йоҡо бүлмәһе. Сафагәрәй түшәктән ырғып тороп, кейенә башлай.**

**Сөйөмбикә** *(ҡалҡына биреп.)* Ханым, ҡайҙа ҡабаланаһың?

**Сафагәрәй.** Мәчеткә, мәчеткә! Мәчеттән соңра – тәхеткә!

**Сөйөмбикә.** Өс-дүрт көндә бер киләһең, уныһы ла ашыҡ-бошоҡ ҡына... Мәсетең ҡасмаҫ ине. Намаҙыңды ошонда ғына атҡар ҙа иртәнге сәйҙе бергәләшеп эсәйек.

**Сафагәрәй.** Юҡ, булмый. Дәүләт эшләре... Ҡолшәриф мулла болай да: «Бу ханыбыз Жамиғ мәчетенә күзен күрсәтмәс булды, әллә иртәнге намазын ҡалдыра инде...» – дип сүләгән. Касафат тулы азаннарының тишек төбөн ямар өчөн ашами-эчми, йоҡлами ижтиһад ҡылуымны санға суҡмилар, мәлғүннәр. Ашаған белми – тураған белә, диләр бит синең башҡыртларың.

**Сөйөмбикә.** Бәғзе ҡатындарың менән төшкә тиклем тормай ятҡаныңды ла һөйлә. *(Тора, кейенә.)*

**Сафагәрәй** *(Сөйөмбикәне яурын башынан ҡосаҡлап.)* И, назлы бикәм, әгәр дә алай булсам, бердән-бер уланымыз Үтәмешгәрәйне син түгел, алар табып бирерләр иде.

**Сөйөмбикә.** Алайһа, ултыр әле яныма.

**Сафагәрәй.** Йә, ултырдым, ди. *(Ултыра, Сөйөмбикәнең ҡулын усына ала.)*

**Сөйөмбикә.** Тыңла мине.

**Сафагәрәй.** Йә, тыңлим, ди.

**Сөйөмбикә.** Дәүләт эштәреңә ҡыҫылмайым, әммә сабыйыбыҙ Үтәмешгәрәй хаҡына киҫәтергә тейешмен.

**Сафагәрәй.** Кисәт, рәхим ит.

**Сөйөмбикә.** Үҙең әйткән Ҡазаныңдың шул тутығып бөткән тишек төбөн ямайым тип, уғата ҙурайтаһың, төпһөҙ ҡылаһың, буғай.

**Сафагәрәй** *(ҡулын тартып алып).* Ни сүзең бу?! Ҡара-ҡара, ни сүли!..

**Сөйөмбикә.** Ниңә өҙләкһеҙ яу артынан яу сабаһың, урыҫ өҫтөнә йөрөйһөң?

**Сафагәрәй.** Йөрөмим, урыс үзе баса безне. Быltыр ғына Ҡазанға кем ябырылды, Хан Ҡапҡасын яндырды? Урыс Иван түгелме?

**Сөйөмбикә.** Ә шуға тиклем кем һуң йыл һайын урыҫ еренә көйәләй һүреп керҙе, ҡоротто? Нижний Новгород, Муром, Мишәр, Гороховец, Балахана, Владимир... Тағы?.. Шуя, Юрьев, Кострома, Галич, Тотма, Вологда, Үстек, Пирем, Вятка ҡалаларын үкертеп талап, кешеләрен ҡырып хайран-вайран килтерҙе?

**Сафагәрәй** *(Сөйөмбикәне яурын башынан ҡосаҡлап.)* Һе, баһадир икән ирең. Ғорурланырға кирәк моңа!

**Сөйөмбикә.** Бәғерем әрней минең.

**Сафагәрәй.** Чуҡынчыҡ урыс өчөнмө?

**Сөйөмбикә.** Үҙеңдең татарҙарың, арҙарың, сыуаш һәм сирмештәрең өсөн. Яу итеп алып китеп, яртыһынан күберәген урыҫ мөсөнән үткәрттең. Ҡараусыһыҙ ҡалған ҡарт-ҡороһо, етем-еһере Ҡазан урамдарында илашып, хәйер һорап йөрөй хәҙер.

**Сафагәрәй.** Жыласа соң. Кем ғәйепле? Синең имансыз башҡыртларың ғәйепле. Урыс өстөнә барғанымда ғәскәрләрен бирмәделәр, посоп ҡалдылар бер читтә. Юғисә без ул чуҡынчыҡларның тәмам иманнарын уҡыта идек! Баяғы ҡалаларын, берсен-бер

ҡалдырми, үзебезнең Ҡазан ханлығына беркетә идек! Хәтта төрөк солтанының киңәшләрен дә тотми бит ул синең атайың Йософ берлән олатайың Исмәғил кенәзләр!

**Сөйөмбикә.** Унылһы миңә ҡараңғы.

**Сафагәрәй.** Исмәғилен әйтим, ике башлы дийү кеби булды бу: йыл сайын миннән ҡырҡ мең алтын, йөз батман бал, туғыз асыл тун бүләккә ҡайырып алуы житмәгән, урыс бөйөк кенәзенең дә ҡазнасын имепме-имә... Анди мөртәт жаннан нинди ярдәм көтәсең?..

**Сөйөмбикә.** Ярҙан осорға ярҙам һорамайҙар... Мәскәү яры үтә текә һәм бейек...

**Сафагәрәй.** Төрөк солтанының сүзен тотоп бергә уҡмашсаҡ, Мәскәүнең үзен пыр туздырып ала идек, мосолман донъясының дошманы яуыз Иванның башына житә идек...

**Сөйөмбикә.** Эй, ханым, үҙ әпипәңде онотоп, ете диңгеҙ аръяғындағы төрөк солтанының һыбыҙғыһына бейейһең. «Мосолман донъяһы» тигәнең дә шул төрөк солтаны инде. Ҡырым ханын да, һине лә яуыз Иванға һөслөтә лә, һеҙ ҡан ҡойошҡанды ҡарап, диңгеҙ аръяғында боҫоп тик ята...

**Ишек шаҡыйҙар. Сафагәрәй ырғып тора.**

**Сафагәрәй.** Кем ул, таң тишегеннән?

**Ҡушаҡ.** Ғәфү ҡылыңыз, үтә ашығыч хәбәр.

**Сафагәрәй.** Ә, Ҡушаҡ батыр. Кер. *(Ҡушаҡ керә, ҡулында һурғыс мөһөрлө ҡағыҙ.)* Ни хәбәр, кемнән?

**Ҡушаҡ.** Мәскәүдән. Яуыз Иванның Ҡазан бәге Ҡадышҡа, башҡырт бәге Баубәккә, бөйөк кенәз Исмәғилнең Ҡазандағы вәкиле Чура батырға атап язған ярлығы...

**Сафагәрәй** *(күҙҙәрен аҡайтып).* Атап язған? Олуғ Сафагәрәй ханның башы ашамы?!

**Ҡушаҡ.** Яуыз Иванның йәшерен чапҡынын Ҡазан ҡапҡасы төбөндә тотоп алдыҡ...

**Сафагәрәй.** Башын чаптығызмы соң?

**Ҡушаҡ.** Ҡарбыздай тәгәрләде. Ләкин эш анда түгел...

**Сафагәрәй.** Уҡы. Хәйер, мөһим урыннарын ғына әйтеп бир. Ваҡытым тар.

**Ҡушаҡ.** Яуыз Иван Ҡадыш илә Чураға рәхмәт әйткән...

**Сафагәрәй.** Бәдбәхет! Ни өчөн?

**Ҡушаҡ.** Алар яуыз Иваннан Ҡазан өстөнә ғәскәр жибәрүен сорағаннар, син олуғ Сафагәрәй ханны, шулай уҡ яҡыннарыңнан булған утыз Ҡырым бәген яуыз Иванға тотоп бирергә вәғәдә ҡылғаннар. Яуыз Иван аларға...

**Сафагәрәй** *(түҙемһеҙләнеп).* Ни дигән?

**Ҡушаҡ.** Ханны тотоп үлтерергә бойорған. Үзе тиздән Ҡазан өстөнә киләчәген исбатлаған.

**Сафагәрәй** *(Сөйөмбикәгә).* Мона синең Чура абыйың, башҡыртларың... һич кенә дә дошманнарымнан ким түгел! *(Аяҡ тибеп.)* Тотоп килтерегез сатлыҡ жан Чураны!

**Ҡушаҡ.** Без аларның барысының да ауызына келәп тығып, аяҡ-ҡулларын бәйләп салдыҡ. Теге бүлмәдә генә.

**Сөйөмбикә.** Ханым, ҡыҙмай тор. Ете үлсәп, бер киҫергә кәрәктер. Мәсеткә бараһың бар, намаҙыңды ҡалдырма.

**Ҡушаҡ.** Чураның ҡалтасыннан бер уч көмөш чыҡты, Мәскәү көмөшө. Анысын нишләтәбез?

**Сафагәрәй.** Чүмечкә салып иретегез! Тамағына ҡойорға!

**Ҡушаҡ.** Ханым, күз ачып йомғанчы үтәлер! *(Сығып китә.)*

**Сафагәрәй** *(устарын ыуалап.)* Чура-чура, бичура, ҡулыма ҡаптың син, чыра! Мәскәү көмөшөн йотоп, чырадай сызып янарсың!

**Сөйөмбикә.** Ханым, намаҙ сулаһы етә. Ҡолшәриф мулла ни әйтер?..

**Сафагәрәй.** Хода бойорса, Ҡолшәрифнең үзен дә! Теле озая башлады...

*(Устарын ыуып.)* Мона Чура абыйының тамағына ҡыҙдырылған Мәскәү көмөшөн ҡоям да... *(Ашығып сығып китә. Йәнәш бүлмәлә язаланыусыларҙың йән газабы ишетелә.)*

**Сөйөмбикә.** Уф... кисерә күр инде беҙҙе, Хоҙайым! *(Урынга ауа.)*

**6-сы сәхнә**

**Сәхнә төбөндә дата: «1549 йыл». Ҡазан ханы Сафагәрәй ирәйеп тәхеттә ултыра, ике яғында айбалталы ике һаҡсы. Ишек төбөндә лә шундай уҡ икәү. Тышта, һарай алдында, халыҡ гөжләй.**

– Хан үзенең Ҡазан халҡын онотто!

– Тамағыбыз ач, өс-башларыбыз ялангач!

– Үзенең жараннарын – утыз Ҡырым бәген генә симертә!

– Ҡырымлылары бөтә тирә-яҡ ауылларны талап йөрөй, түзәр әмәл ҡалмады!

– Хатта башҡыртларға барып життеләр, малларын талап ҡайттылар!

– Арлар, чирмешләр, чуашлар баш күтәрә – Мәскәү Яуыз Иванының әләме астына ағыла!

– Ә хан Ҡазан бәкләренең башын кисә, тамаҡларына ҡызған ҡурғаш илә көмөш ҡоя!

– Ҡорал юҡ, монаят юҡ, ғәскәребезнең яртысы ҡырылып бөттө, ҡалғаны ҡачып тарала – ҡәлғәне саҡлар да кеше ҡалми башлады.

– Яуыз Иван ябырылса, кем ҡаршы торор икән?

**Гәүһәршат** *(асы ауаз).* Килсә – килсен, кирәгебезне бирсен иде тизерәк!

**Сафагәрәй** *(һиҫкәнеп).* Ҡушаҡ!

**Ҡушаҡ.** Әү, олуғ ханым? *(Елтерәп инә.)*

**Сафагәрәй.** Бу ни хәл, ни жанжал?

**Ҡушаҡ.** Сарай алдына бозоҡбаш жаннар сырыған, саҡчыларыбызны таптап узарға итәләр.

**Сафагәрәй.** Бозоҡ башларын кисегез бер ничәсенең!

**Ҡушаҡ.** Саҡчыларның ҡулы барми – үзебезнең әти-әни, диләр... Ә аларның үзләренең башына житә алмибыз – ханлыҡның ҡулы ҡыҫҡарды...

**Сафагәрәй.** Бозоҡбашларны мөмкин ҡәдәр алдаштырып тороғоз. Шул арада бәкләребезнең берсен-бер ҡалдырми тәхет төбөнә өйөр — кемнең кем икәнен исләренә төшөрим.

**Ҡушаҡ.** Бик өйөрөр идем дә... бәкләребезнең күпчелегеннән жилләр искән шул. Ханның ҡылычы берлән көмөшлө чүмеченнән өркөп, тәмам юҡҡа чыҡҡаннар...

**Сафагәрәй.** Жир ярығыннан булса да табып килтерегез!

**Ҡушаҡ.** Жир ярығы бик жыраҡта шул, ханым. Ҡул житмәслек яҡларға олаҡҡаннар.

**Сафагәрәй.** Кемнәр алар, ҡайдалар?

**Ҡушаҡ.** Үзең белгән Бойорған Сәйет, Илсыман бәк, Ғабдулла Бахшилар башҡырт илендә Йософ ҡайнатаң ҡанаты астына посҡаннар, Яуыз Иванға ярлыҡ язып, синең өскә яу чаҡырып яталар... Ҡотҡочоларның зур төркөмө Мәскәүдә, яуыз Иванның үзенең жылы ҡуйынында. Йәғни мәсәлән *(ҡуйынынан ҡагыҙ алып),* Табай бәк илә Хажибирде уғлан, Тәүкил бәк, Ағыш муллазадә, Чапҡын мырза, Мамыш Хафиз, Адаш вә Ғәликәй чапҡыннар, Ҡанчура, Борнаш, Тереғол, Көбәк бәкләр, Ислам мырза, Әбәкче, Хангилде, Шаһчура, Бикчура, Ҡулыш, Ғәликәй мырзалар, Байтал, Ватай-Мамай, Көнкүрчеләр һәм башҡалар, һәм башҡалар, урыс хезмәтенә ялланып, Яуыз Иванға Ҡазанны алуда ярдамлашырға ун меңлек татар ғәскәре туплағаннар...

**Тыштағы шау-шыу көсәйә.**

**Ҡушаҡ.** Ишетәсеңме, олуғ ханым?

**Сафагәрәй.** Жанжал башлыҡлары кемнәр?

**Ҡушаҡ.** Үзең беләсең: Булат бәк,

Ҡолшәриф мулла, Мурали бәк, Ходайғол уғлан... Лаф ороп, тәхет ҡашына үткәрүне дәғүәлиләр...

**Сафагәрәй** *(уйланып).* Үткәрегез берсен.

**Ҡолшәриф мулла керә, күкрәгенә ҡулдарын ҡаушарып, баш эйеп сәләм бирә.**

**Ҡолшәриф.** Әссәләмәғәләйкүм, олуғ ханым!

**Сафагәрәй** *(йөҙөн сыйырып).* Вәғәләйкүм, Ҡолшәриф. Ни йомош? Сарай ҡапҡасын ҡағырға батырчылыҡ иттеңме? Башың икеме әллә?

**Ҡолшәриф.** Халыҡ ҡаға, олуғ ханым, нурлы шәһри Ҡазан халҡы. Ә халыҡның башы ике генә түгел — меңәрләгән!

**Сафагәрәй.** Үзеңнең башыңны ҡайғырт – әһле Ислам дип тормамын! Анауы балтачым «керт!» иттереп төгәлләр.

**Ҡолшәриф.** Алладан ҡурҡ! Балталарыңның йөзө чыйырылыр, тәхетең түңкәрелер, олуғ ханым.

**Сафагәрәй.** Бәдбәхет, жылан тел!

**Ҡолшәриф.** Жыландай телемне чығарып сүләргә жибәрделәр дә мине сиңа, олуғ ханым! Биғәйбә, ил аһәңен житкерәм.

**Сафагәрәй.** Сүлә! Әммә телеңне ҡысҡа тот!

**Ҡолшәриф.** Ҡысҡасы шул: төрөк солтаны берлән Ҡырым ханының тәртәләре арасында, ҡорчаңғы тайдай ҡойроҡ чәнчеп, терт-терт юртыуыңны туҡтат. Ханлығыбызны ҡоротоучы Ҡырым чирүеңне ҡайтарып жибәр. Ҡулыңны озон сузма – урыс патшасы берлән килеш. Аның берлән суғышып йәшәү ҡот килтермәйәчәк безгә. Башҡыртларны үзеңә нығыраҡ тарт; ар, чирмеш, чуаш халайыҡларының хәленә кер. Шунсыз ханлығың мандымас, тәхетең жимерелер. Һаман да болай барсаң, бердән-бер варисың Үтәмешгәрәйгә ни ҡалдырырсың икән?

**Сафагәрәй.** И, мескен, кем өчөн кемнең башы ауырта, имеш! Әгәр дә мин урысҡа ҡаршы тормасам, мәчет манараңны да, һәм үзеңнең башыңны да ҡысҡартмаслар дисеңме ни? Бар, жәмәғәт дигән сарыҡларыңа аңғарт: башларын жуймаслары борон бу тәңгәлдән табан ялтыратсыннар! *(Ҡолшәриф сыға.)* Ҡушаҡ!

**Ҡушаҡ** *(елтерәп инә).* Әү, олуғ ханым?

**Сафагәрәй.** Ғәскәргә бойороғом: баҡырышҡан бу ике аяҡлы сарыҡ көтөүен типкеләп таратсыннар!

**Ҡушаҡ.** Ғәскәр юҡ, олуғ ханым.

**Сафагәрәй.** Ә?! Нәрсә?

**Ҡушаҡ.** Ғәскәребез баяғы Ҡолшәриф муллаға ҡушылып китте. Сарай алдында балталары өйөлөп ятып ҡалған...

**Сафагәрәй** *(башын тотоп).* Нишлибез?

**Гәүһәршат керә.**

**Гәүһәршат.** Күрегез, күрәзәлегем дөрөскә чыға! Яуыз Иван ғәскәре берлән Ҡазан өстөнә килә. Быйыл уҡ булмаса да, йәренгә баш салачаҡ Ҡазан халҡы. И, Раббым, ханлығыбызның ғөмөрө ни бары ике йыл ғына ҡалды... Өф! – тәхетеңнән оч, гонаһ шомлоғо!

**Сафагәрәй.** Кем үткәрде бу яуыз ҡотҡочоно? *(һаҡсыларға.)* Айбалтағызны айҡағыз, шаҡшы башын тәгәрләтегез!

**Һаҡсылар.** Тәгәрләтер идек тә ул, ачлыҡтан киселгәнбез, өйдә балачағабыз үлә...

– Айбалтабыз да үтмәс...

**Балталарын иҙәнгә һалып, Гәүһәршат менән сығып китәләр.**

**Ҡушаҡ.** Күрәзәче яңылышмы: Яуыз Иван, чынлап та, безнең өскә килергә ҡүәт жыя...

**Сафагәрәй** *(ырғып тороп).* Йәнузаҡларыңны ал да дәррәү Арча яғына жилдерегез – хан ғәскәре тупларға! Жәһәт!

**Ҡушаҡ сығып йүгерә. Албырғанып торған хан эргәһенә ҡайнағаһы Юныс инә.**

**Юныс.** Был ни хәл, кейәүем, һарайыңда һаҡсы юҡ? Сәсе-башы ялбыраған Гәүһәршат ҡына һине *ләғнәтләп* уҙҙы.

**Сафагәрәй.** Гәүһәршатмы? Битемә ҡара яғып китте, ҡәһәр төшкөрө...

**Юныс.** Ысынлап та, кейәүем, йөҙөң аларған. Хандың ханына боҙоҡ булыу килешмәҫ. Ҡош-ҡорт күҙенә салынмаҫың элгәре йыуыныуханаңа кер, көҙгөгә баҡ та баш-күҙ ал.

**Сафагәрәй.** Ярар, ҡайнағам, ярар *(кереп китә).*

**Икенсе ишектән Булат бәк башын һона.**

**Булат бәк.** Олаҡтымы? Тәһәрәт алырғамы?

**Юныс.** Эйе.

**Булат бәк.** Тәүәккәлләдек! Хәйерле сәғәттә, изге ниәттә! *(«Йылт!» итеп йыуыныуханаға инеп китә.)*

**Юныс.** Хәл ҡылдыҡ!

**Йыуыныуханала дөбөр-шатор нимәләр ауғаны ишетелә, иҙән уртаһында ҡатып ҡалған ағаһы эргәһенә Сөйөмбикә инә.**

**Сөйөмбикә.** Абау, ни булды унда, ағайым? Ниҙер гөрһөлдәп ауҙы... Сафагәрәйем ҡайҙа?

**Юныс.** Шунда инде, ҡайҙа булһын! Иҫерек бит, һөрлөгөп йығылғандыр.

**Сөйөмбикә.** Иҫерек? Әле генә апайныҡ ине бит. Уф, йөрәгем... Артынан инәйек!

**Юныс.** Хан артынан инеп йөрөү ярамаҫ. Хәҙер үҙе айҙай балҡып килеп сығыр, бошонма.

**Булат бәк** *(йыуыныуханан сығып).* Бу ни хәл, ханыбыз аяҡ сузған... Йыуынып ҡына торғанында жан биргән...

**Сөйөмбикә ҡысҡырып илай, кешеләр йүгерешә.**

**Ҡолшәриф.** Жылама, сөйөклө ханбикәм, жылама. Аллаһ Тәғәләнең хаҡ тәҡдиредер. Үтәмешгәрәйеңне хан итеп иғлан ҡылырмыз. Ул балиғ булғанғача, ханлыҡ берлән үзең идара ҡылырсың... *(Ҡултыҡлап алып сығып китә.)*

**7-се сәхнә**

**Сәхнә төбөндә дата: «1551 йыл». Мәскәү батша һарайының тәхет залы, йәш батша Яуыз Иван илселәрҙе ҡабул ҡылырға тейеш. Батша тәхетенең һул ҡул яғында ике кресло (батшаға яҡыныраҡ — Елена шәүләһе, арыраҡ батшабикә Анастасия ултырырға тейеш); уң ҡул яғында бер кресло (митрополит Макарийҙың урыны). Иван үҙе юҡ, төпкө ике ишектән бер юлы Анастасия һәм Макарий керә, тәхет алдына үтеп, аяғөҫтө иҫәнләшеп һөйләшә. Ике янда ла ишектәр: береһе – оло ишек (илселәр инергә), икенсеһе кесерәк — батша ишеге. Ярым ҡараңғылыҡта батша ишегенән инеп килеүсе мәрхүмә Елена шәүләһе күренә, тегеләрҙең һөйләшеүен тыңлап тора. Тора-бара, шәүләлегенән уҙып, тереләрсә аралаша башлай. Ике ҡатын әрепләшкәндә Макарий, тын ҡалып, ҡулындағы кескәй Инжилына йомолоусан.**

**Макарий.** Ҡхым, ҡхым, хәйерле көн, бөйөк батшабикә.

**Анастасия** *(ҡырыҫ ҡына).* Хәйерле.

**Макарий.** Һаулыҡҡайың арыумы, бөйөк батшабикә, ул-был ереӊ ауыртмаймы?

**Анастасия.** Унһын бөйөк батшаңдан һораш, атаҡай. Минең ҡайһы ерҙәремде ауырттырғанын ул белә.

**Макарий.** Ҡхым, ҡхым... Батша ҡулы ҡағылған тән тамуҡта янмаясаҡ.

**Анастасия.** Ул һин әйткән тамуҡҡа барып еткәнсе, быныһында көл булырмын, ахырыһы.

**Макарий.** Тәүбә-тәүбә *(тирә-яғына ҡарана).*

**Анастасия.** Атанан күргән – уҡ юнған, тиме әле ҡырағай башҡорт Семеон Бекбулатович? Хаҡ әйтә, стервец, гәрсә поганый булһа ла.

**Макарий.** Ул инде поганый түгел, мин уны суҡындырҙым.

**Анастасия** *(уйланып.)* Иванымдың шаҡшы атаһын әйтәм... мәрхүм бөйөк кенәз Василийҙы...

**Елена** *(яҡынлай биреп).* Тотондо инде, тотондо ҡайнатаһы менән ҡайнанаһының һөйәктәрен сәйнәргә.

**Анастасия.** Ҡатындан туймаҫ айғыр булған, тинеләр... Никахлыһы өҫтөнән йөрөп ҡырҡ кәнизәкте быуаҙытыуы етмәгән, законлы ҡатыны Соломония Сабурованы, теге... Макар быҙауҙарын ҡыуаламай торған донъя ситендәге монастырға бикләтеп, һарай кәнтәйе Елена Глинскаяға законһыҙ рәүештә ҡушылған...

**Макарий** *(күҙ алдына).* Тәүбә-тәүбә! Кенәз Андрей Курбский был хаҡта дөрөҫ шикәйәтләй: «И тогда зачался нынешний Иоанн наш, и родился, в законопреступлению и во сладострастию, лютость»... Йәғни ҙә ки ошо Иван батшабыҙҙың яуызлығы ана шул гонаһлы яралыуынан килә... Кисер мине, Хоҙай *(суҡына).*

**Елена** *(ярһып, Анастасияға).* Һин үҙең кәнтәй! Ун биш йәше лә тулмаған Иванымдың дыуамал отороғона йәбешеп сыҡтың!

**Анастасия** *(иғтибар итмәй).* Ҡайным Василийҙы әйтәм. Һылыуҙарҙанһылыу Соломонияны *(Елена яғына бармаҡ төртөп)* бына кемгә алмаштырғанын күрегеҙ!

**Елена.** Әрпешйән! Һин һәпрәнән ни ерем кәм?!

**Анастасия.** Бот тиһәң – бото, күт тиһәң – күте юҡ, тигәндәй, ылғый ҡорошҡан ҡолға. Ниməһенә генә ымһынды икән?

**Елена.** Хәстрүш! Һинең кеүек түшәлеп кенә ятманым, һәр эшендә ныҡлы таянысы булдым. Беҙ бөтә Рүсиә ерҙәрен бергә туплау, Мәскәүебеҙҙе Рүстең мәркәзе ҡылыу өсөн йәнебеҙҙе аяманыҡ.

**Анастасия.** Ха-ха-ха! 1521 йылда Ҡазандың поганый ханы Сәхибгәрәй менән Ҡырым поганыйы Мөхәммәтгәрәй хан Мәскәүгә дөрөп килгәндә ни эшләнегеҙ? Ҡаланың һәм халҡының яҙмышын Хоҙайғол исемле поганый башҡорт менән суҡынсыҡ кейәүегеҙ Петрға тапшырып, себендәй генә йәнегеҙҙе ҡурсалап, урмандағы бесән кәбәне аҫтында йәшенеп ятманығыҙмы? Рүсиәне Ҡырымға буйһондорған мәсхәрәле шартнамәгә ҡул ҡуйып, шул поганый Мөхәммәтгәрәй ханға тоғролоҡҡа ант итмәнегеҙме? Һарайығыҙҙа поганый Мөхәммәтгәрәй хандың һүрәтен изге иконаға йәнәш ҡуйып табынманығыҙмы? Ха-ха-ха!

**Макарий.** Етте-етте! Улары булды ла үтте, Хоҙайға шөкөр. Икенселәй ҡабатланмаһын өсөн, поганый баштарҙы күберәк киҫергә, тим.

**Елена.** Киҫте-е-ек, киҫте-е-ек! Ҡазан ерҙәрен йыл аралаш барып бөлдөрөүҙән тыш, үҙебеҙҙең аралағы боҙоҡбаштарҙы ла мөнтәп бөтөрҙөк. Кенәз Василий Шемячичты, Берсе-Бикләмешевте өйҙәрендә үк тураҡлап дөмөктөрҙөк. Шуйский, Воротынский, Максим Грек, Вассиан Патрикеев кеүек баш бирмәүсе баярҙарҙы әҙәм балаһы бармаҫ ерҙәргә һөрҙөк.

**Макарий.** Эйе... хатта митрополит Варлаамды ла...

**Елена.** Бөтәһе лә Рүсиәнең бөйөклөгө, бүленмәҫлеге хаҡына! 1510 йылда – Псковты, 1513 йылда – Волоцкий төбәкте, ә 1521 – 22 йылдарҙа Рәзән, Новгород-Северский кенәзлектәрен яулап алып, Мәскәүгә ҡуштыҡ. Литва бөйөк кенәзлегенән Смоленскиҙы йолоп алдыҡ. Василийымдың ғүмере буйына өҫтөнән тимер көбәһе, башынан торҡаһы төшмәне, ҡылысын да сөйгә элгән сәғәттәре аҙ булды.

**Анастасия.** Уның ҡарауы, Иваның ҡылысын һалмайынса менеп ята ла

таң атҡансы эттәй ыҙалап сыға. Анауы анаһы кеүек, мине лә ҡорошҡан ҡолғаға ҡалдыра инде... Уныһы ғына етмәгән, төн сыҡҡансы әллә нисә тапҡыр, ҡылысын шауҙырлатып, эргәмдән төшә лә, анаһынан ҡалған иҫке кресло алдында тубыҡланып, аҡылдан яҙғандай илай-илай доға ҡылып, анаһының шәүләһе менән һөйләшә.

**Елена.** Һин үҙең һерелдәк шәүлә! Тереләрҙән-тере мин! Ниңә доға ҡылмаһын: атаһынан өс йәшендә генә ҡалып, үҙем ҡарап үҫтерҙем. Шуйскийҙарҙың, Курбскийҙарҙың хөсөтөнән ниҙәр генә күрмәнек! Нисәмә-нисә йылдар буйына бөтөн Рүсиә менән идаралыҡты бына ошо иңдәремә йөкмәнем.

**Митрополит.** Изгелегең өсөн Хоҙай үҙе ярлыҡаһын, анаҡай.

**Елена.** Ҡырым хандары әллә нисә тапҡыр яндырып үтте Рүсте. Бигерәк тә поганый Ҡазан теңкәгә тейҙе өҙләкһеҙ. Ниһайәт, уныһын ауыҙлыҡлап, поганый Сафагәрәй ханды ҡыуҙыртып, тәхетенә үҙебеҙҙең Ҡасим ҡурсаҡ ханлығынан көтөүсебеҙ Йәнғәлиҙе ултыртып иркен һулағайныҡ, ике йыл үтер-үтмәҫтән үк, Ҡырым яҡлы поганыйҙар уның башына етеп, Мәскәүҙең ҡан дошманы Сафагәрәйҙе ҡабат хан яһанылар. Ояларын барып туҙҙырырға хәл юҡ ине — теште ҡыҫып түҙергә тура килде. Сөнки шул йылда кенәз Семен Бельский, окольничий Иван Ляцкийҙар Польшаға ҡасып китеп, Сигизмунд короле беҙгә ҡаршы һуғышҡа ҡоторттолар, ул килеп Гомелде алды, Радоғоштың көлөн күккә осорҙо. Йыл оҙай һуғыштан һуң, саҡ солох төҙөшкәйнек, отороғо ҡалҡҡан Семен Бельский тағы төрөк солтанына һатылып, төрөк-ҡырым ғәскәре менән ябырылды... *(Анастасияға.)* Һинең кеүек, ат аяғындағы тышауҙай, батшамдың бот араһында уралып ятманым мин.

**Анастасия.** Аслан кемдәргә уралыуыңды беләбеҙ...

**Елена.** Ә бына һин, башҡаларға уралмайынса ла, Иванымды мөрәхәтһендерә алмайһың. Күрербеҙ, бөтәһе алда әле.

**Анастасия.** Күрәҙәсеме әллә һин, гонаһ шомлоғо ҡәйнәм?

**Елена.** Үтәләй күрәм һине. Ха-ха-ха! Ана, бер дюжина көндәштәре теҙелгән – бөйөк батшабыҙ, минең ҡөҙрәтле улым, береһе артынан икенсеһен алмаштыра. Никахлыларынан ғына ла Анастасия Романовна Захарьина-Юрьева, Мария Темрюковна Черкасская, Марфа Васильевна Собакина бер-бер артлы «теге донъя»ға эрәүәләр уның аша, ә Анна Алексеевна Колтовская менән Анна Васильчиковалар монастырға бикләтелгән. Ахыр килеп, уларҙың бөтәһен Кремль һепереүсеһенең тол ҡатыны Василиса Мелентьева алмаштырған. Ә һин ҡайҙа? Хи-хи-хи!

**Анастасия өндәшмәй, креслоһына сүгә.**

**Макарий.** Күрәҙәлек ҡылыу гонаһ, анаҡай!

**Елена.** Әммә алдыңдағын самалап эш ҡылыу һис тыйылмаған. Хатта поганый Ҡазанда ла мәшһүр күрәҙәсе бар – уларҙың мәрхүм Ибраһим ханының ҡыҙы, мәрхүм Мөхәммәтәмин хандың һеңлеһе Гәүһәршат. Күрәҙәләүҙәре бермә-бер тап килеп тора. Баяғы хәйерһеҙ утыҙ алтынсы йылда ул, бөтә Ҡазан халайығына шом һалып: «Күрерһегеҙ: теүәл ун алты йылдан һуң Ҡазан ханлығы тамам юҡҡа сығасаҡ, Ҡазанды урыҫ аласаҡ!» – тигәйне. Ә был иһә Христос тыуған йылдан алып тап мең дә биш йөҙ илле икенсе йылда була тигән һүҙ. Минең күрәҙәләүемә бермәбер тап килә ул. Ҡыҫҡаһы, киләһе йыл Иваным Ҡазанды алғас...

**Макарий, Анастасия.** Бирһен Хоҙай, бирһен Хоҙай! *(Суҡыналар.)*

**Елена.** Эйе, мең дә биш йөҙ илле икенсе йыл Иваным Ҡазанды алғас, минең күрәҙәлегемдең дөрөҫлөгөнә лә инанырһығыҙ бер юлы.

**Макарий.** Ә шулай ҙа...

**Елена.** Янама, янаһын янғанмын инде, ха-ха-ха! Бына һиңә лә, ҡарт дуңғыҙға, тамуҡ киҫәүе булаһы ғына ҡалды.

**Макарий** *(тертләп).* Ауыҙыңдан ел алһын, анаҡай. Изге Рүсиәбеҙ йөкмәткән бынауы изге тәремде *(муйынындағы тос алтын тәреһен тотоп һелкетә)* Хоҙайыбыҙ һыҙған тура юлдан арымай-талмай илтеү йәшендә әле мин. Шөкөр, быуындарым ҡатмаған, билем бәлйерәмәгән.

**Елена.** Күрәм, дуғалай бөгөлгәнһең, ә аяҡ-ҡулың, майланмаған арба күсәреләй, шығырлапмы-шығырлай... Эй, был ғүмер, күҙ алдымдан нисәүегеҙ берәм-берәм эрәүҙе: Варлаам, Сергей атаҡайҙар һәм... бына инде һин, атаҡай... Тәрегеҙ, тим, шул ҡәҙәре ауырмы?

**Макарий.** Дәүләтебеҙҙең оло йөгөн йөкмәп барабыҙ, анаҡай. Әммә шуны баһалау, әжерен ҡайтарыу юҡ...

**Елена.** Бахырланма, атаҡай. Литваға хәрби сәфәрҙәрҙең, Ҡырымға сапҡындарҙың улъяларынан иң кәттәһен кем ҡуш услап ҡарманы? — Сиркәү! Былтырғы Ҡазан яуы табыштарының ҡалъяһын да кем һоғаланып һоғондо? Сиркәү! Ашаған белмәй; тураған белә, тиҙәр баяғы поганый башҡорттар.

**Макарий.** Сиркәүгә ул бишләтә лә хәләлдер, анаҡай. Кем изге Рүсиәне Куликово һуғышына рухландырҙы? Сиркәү! Яуыз Мамайҙы еңеүгә кем күтәрҙе? Сиркәү! Поганый Ҡазанды алғанда ла тәре тотоп сиркәү алдан барасаҡ. Изге Константинополь ҡорамдарын үҙҙәренең поганый кәкре Айҙары менән вәхшәтләгән антихристарҙың тоҡомдарының һөйәге өҫтөндә бына ошо *(муйынындағы тәреһен тотоп һелкей)* изге тәре сафтары рәт-рәт ҡалҡынасаҡ! *(Суҡына.)*

**Елена** *(суҡынып).* Бирһен Хоҙай, бирһен Хоҙай!

**Үҙҙәренең креслоларына ултырышалар.**

**Елена** *(ишек ягына ҡарап).* Иваным юҡсы һаман...

**Макарий.** Батшабыҙҙың эштәре зерә ҡуйы, анаҡай. Үҙең әйтмешләй, Ҡазанды аласаҡ батша бит. Әле генә килешләй абайлап үттем: Царь-колокол эргәһендә поганый Ҡазан ҡәлғәһенең ишаратын әтмәләгәндәр ҙә, шуның өҫтөнә ғәскәр менән ябырылып, шау-гөр килеп һуғыш уйыны уйнайҙар.

**Елена.** Эй, Хоҙайым, бер аҙ тыйып торһаңсы шул уйындарын!.. Береһе башын яра, икенсеһе аяғын, ҡулын ҡаймылдырта...

**Анастасия.** Ҡәлғә башында тере татарҙы ишаратлап, холоптарымдың өҫтө-башы йыртыла, ҡабырғалары һына...

**Макарий** *(йылмайып).* Һуғыш һыныҡһыҙ булмаҫ. Ағас ҡырҡҡанда табы оса, тиҙәр бит. Ә бөгөн унда ҡәлғә башында ысын-ысындан казанский тере татарҙар тора, һеҙҙең холоптар түгел.

**Елена.** Абау! Ниндәй тере татарҙар? Әллә баяғы Сөйөмбикә тигәнегеҙ ҡаланы килеп баҫтымы?!

**Макарий** *(көлөп).* Хафаланма, анаҡай, Сөйөмбикәнең ҡулы ҡыҫҡарҙы хәҙер. Ҡазандағы беҙҙең яҡлылар ҡыҫҡартты. Шул уҡ күрәҙәсе Гәүһәршат, Бойорған Сәйет һәм башҡалар... Ә Царь-колокол янындағы ҡурсаҡ ҡәлғә башына әсир төшкән Ҡазан уғландарын баҫтырҙыҡ, Ҡырымдан яңы хан һорарға китеп барғандарында тотолғандар... Таяҡ тығып болғатҡан йылан ояһы хәҙер Ҡазан. Кемде хан итергә тип, анаһы — улын, атаһы ҡыҙын белмәй бер-береһен сағыша.

**Елена.** Ҡазан халҡы борон-борондан бушбоғаҙлыҡ ҡылыусан, бер-береһенә яла яғыусан ине шул.

**Макарий.** Сөйөмбикәгә лә улар табаҡ-табаҡ бысраҡ ауҙаралар икән.

Сөйөмбикә үҙенең йәнуҙағы Ҡушаҡ менән уйнаш ҡыла, Ҡушаҡҡа ҡатын булмаҡсы, уның менән берләшеп, улы Үтәмешгәрәйҙе үлтермәксе, тип ғәйбәтләйҙәр, ти. Сөйөмбикәнең фармандарын кирегә һаплайҙар икән. Ә был беҙгә мас ҡына: олуғ батшабыҙ Иван Дүртенсе ғали йәнәптәре хәҙер, форсаттан оҫта файҙаланып, Ҡазан ҡаршыһында изге сиркәүле Зөйә ҡәлғәһен ҡороу, ғәскәр туплау ғәмендә...

**Елена** *(суҡынып).* Хоҙайым, хәйерлегә булһын инде...

**Анастасия.** Әйтәм бит, ҡылысын да һалмай, тип...

**Оло ишек артында шау-шоу, олуғ батша Ивандың тауышы: «Адашев, илселәрҙе елтерәт!» – «Хәҙер, олуғ батша ғали йәнәптәре!» Иван атлығып килеп инә, билендә — ҡылысы. Анастасия, Макарий урындарынан торалар, Елена ҡуҙғалмай.**

**Иван** *(йүгереп килеп тәүҙә Еленаның, шунан һуң Анастасияның ҡулын үбә).* Иҫәнмеһең, анаҡай. Иҫәнмеһең, кәләшкәй. *(Макарийҙың ҡулындағы тәрене үрелеп ялай.)* Хуш килдең, изге атаҡай. *(Тәхетенә ултыра.)*

**Елена.** Оҙаҡланың, көттөрҙөң...

**Иван.** Анаҡай, ҡылығым ҡаты булды.

**Макарий.** Ҡылысың үттеме һуң, хе-хе-хе...

**Иван.** Татар муйынынамы? һе! Өсөһөнөң башын аяҡ аҫтарына бына ошолай *(елкәһенә ҡул төйҙәһен һелтәп күрһәтә)* – керт! – кәбеҫтә күсәнеләй ауҙарҙым. Башлыҡтарыныҡы тәгәрмәстәй тәгәрләне!

**Елена.** Хоҙайым, кисер гонаһтарыбыҙҙы! Балаҡай, атаҡайың ундай уҡ түгел ине...

**Иван.** һе! Атаҡайым Ҡазанды ла алмаған шул. һеҙ, ярай, икегеҙ тиң теге донъяға эрәүҙегеҙ ҙә ҡотолдоғоҙ, ә мин алты йыл буйына Ҡазан ҡурҡынысы аҫтында яуыз опекундарым ҡулында интектем...

**Макарий.** Әммә бирешмәнең – ҡоростай сынығып өлгөрҙөң, олуғ батша ғали йәнәптәре.

**Иван.** Әлбиттә! Андрей Шуйскийҙың башын киҫтерттем, әшнәләрен әҙәм аяғы баҫмаған яҡтарға олаҡтырттым. Хоҙайға шөкөр, ҡорос ҡылысым ҡулда. Теңкәгә тейгән поганый Ҡазандың да, Ҡырымдың да башына етәсәкмен!

**Елена.** Яҙа һелтәнеп ҡуйма бер үк, балаҡай...

**Анастасия.** Әйтәм бит...

**Макарий** *(бүлдереп).* Ә мин әйтәм, Хоҙайыбыҙҙың изге сәғәте һуҡты! Икенсе изге Византияның антихристарҙан ҡон алыу ҡылысын олуғ батшабыҙ Иван Дүртенсе ғали йәнәптәре ҡулына Христос үҙе тотторҙо! Изге ҡылыс!

**Иван** *(ҡулын, алдатҡыс нәмә суҡландыртҡандай, югары тәңгәлдә һелкеп).* һәм ҡалъя, изге атаҡай, һәм ҡалъя! Ошо көндә йөҙәрләгән татар бәге, муллалары, поганый Ҡазандарынан ҡасып килеп, минең усымды ялай. Ҡазан муйынына ҡылысымды тиҙерәк сабыуымды һорай. Шанлы ғәскәрем менән барып Ҡазанды алышырға ант итә. Табынымдан ҡалған ваҡ-төйәк ҡалъяға ана шулай һатып та алам мин ул канальяларҙы!

**Анастасия.** Өйөр-өйөр килеп һатылалар шул. Намыҫтары юҡ икән мөртәттәрҙең.

**Иван.** Бото һуҡыр тин ул поганый намыҫының! *(Ишек ягына.)* Кенәз Петр Серебряный, килтер әле поганый ярлыҡтарын!

**Фолианттар тотоп талмас Петр Серебряный керә, Иван тәхете һәм Макарий креслоһы араһына баҫа.**

**Петр.** Тыңлайым, олуғ батша ғали йәнәптәре.

**Иван.** Талмаслап уҡып ташла әле

баяғы бәғзе бер һайланма урындарын.

**Петр.** Баш өҫтө, олуғ батша ғали йәнәптәре. Бына Ҡазан мосолмандарының Бойорған Сәйетенең, йәғни үҙебеҙҙең изге атаҡай митрополит Макарий дәрәжәһендәге дин башлығының һәм йәнә Илсыман бәк, Ғабдулла Бахши тигән ил тотҡаларының бөйөк батшабыҙға ярлығы. Уҡыйым: «Ханыбыҙ Сафагәрәйҙе алып ташлар өсөн ғәскәреңде ебәрһәң, Ҡазан ҡапҡаларын асып ҡуйырбыҙ... Әммә кәрәк-яраҡтарыбыҙға аҡсабыҙ юҡ. Илсең аша беҙгә көмөш тәңкәләр ебәреүеңде бик үтенеп һорайбыҙ...»

**Иван** *(ҡул һелтәп).* Сафагәрәйҙәре дөмөктө инде, баҡыры ла ярап ятыр.

**Петр.** Башҡорттарҙың Нуғай тигән Бәләкәй урҙаһынан, Йософ кенәздең улы Ғәли мырҙанан: «Һинең хаҡыңа Ҡырым өҫтөнә яу йөрөнөм... Миңә кеш тун ебәрһәң ине...»

**Иван.** Һыуыр тун да еткән.

**Петр.** Ә бына ҙур урҙанан – Исмәғил кенәздең үҙенән: «Беҙгә яу булған Ҡазанды тар-мар ҡылабыҙ, һин дә яу сапһаң ине... Мин һинән ҡара төлкө бүрек теләйем...»

**Иван.** Быныһына бүрек янына тун да ҡушып бирегеҙ.

**Петр.** Белекбулат тигәндәре: «Һинең өсөн Ҡазан менән һуғыштым... Аҫ тун менән ҡорос көбә кәрәк ине...»

**Иван.** Ҡырым үләкһәләренән һалдырып алған тутыҡ көбәләрҙең береһен ебәрегеҙ.

**Петр.** Арыҫлан уғландың ярлығы: «Ҡазан һеҙгә яу булған кеүек, беҙгә лә яу. Мин хәҙерендә Ҡазанды яуларға барамын... Миңә алтын ялатылған ҡылыс, һыуһар тун, балыҡ теше, ролдуға ебәрһәң ине...»

**Иван** *(ҡул һелтәп).* Ярар, етәр. Ас ҡорһаҡтары тулмаҫ. Ә шулай ҙа ҡатҡан-ҡотҡан киҫәктәрҙе ырғыта торорға кәрәк.

**Елена.** Өргән һәр эткә ҡалъя ырғыта башлаһаң, атаҡайыңдың утыҙ йыл буйына бөртөкләп йыйған ҡаҙнаһы ла етмәйәсәк.

**Макарий.** Эйе, бөйөк батшам. Эйелгән башты ҡылыс сапмай, тиһәләр ҙә, ул эйелгән баш-поганыйҙарҙың тора-бара баш күтәреүҙәре лә ихтимал. Дәһшәтле Мамай яуҙарын онотмайыҡ.

**Елена.** Атаҡай Макарий хаҡ әйтә. Заманында Рүсиәгә баш эйеп килгән поганый башҡорт Олуғ Мөхәммәт тигәндәре аҙаҡ Ҡазанды бина ҡылды ла ҡан дошманыбыҙға әйләнде.

**Иван.** Уның ҡарауы, ҡазанлылар шул Олуғ Мөхәммәт хандың бүләре Илһам ханды беҙгә башы-тояғы, нәҫел-нәсәбе менән Иуданың утыҙ көмөш тәңкәһе хаҡына һатып ебәргәндәр... Ә хәҙергеләре уғата ҡомһоҙораҡ: үҙ ҡорһаҡтарын күпәйтеү хаҡына, ханды ғына түгел, бөтә ханлыҡты ла һатырға әҙерҙәр...

**Петр.** Олуғ батша ғали йәнәптәре, әгәр рөхсәт ҡылһағыҙ, ошо урында мин фәҡирегеҙ ҙә ҡыҫылырға баҙнат итәм: «Татар – атаһын һатар» тигән мәҡәл йөрөй Ҡазандың үҙендә үк...

**Иван.** Афарин, кенәз, афарин!

**Адашев Алексей инә.**

**Адашев** *(баш эйеп).* Олуғ батша ғали йәнәптәре, Ҡазандан, башҡорттоң Ҙур һәм Бәләкәй урҙаларынан илселәр килеп етте, керергә сират торалар.

**Иван.** Ҙур урҙанан башлат.

**Адашев.** Баш өҫтө, олуғ батша ғали йәнәптәре *(сығып китә).*

**Оло ишек асылып, Адашевтың иғланы яңғырай: «Ҙур урҙа кенәзе Исмәғилдән илселәр – Байтирәк бей менән Тимер уғлан!" Илселәр тәхеттәге Иван ҡаршыһына килеп, итәғәтле баш эйә.**

**Байтирәк.** Көн-Өфө ерҙәренең батшаһы...

**Тимер** *(әлеп алып).* Эбер-Себер ерҙәренең батшаһы...

**Икеһе бер ауаздан.** ...һәм бөтә Ҙур урҙаның яҡты көнәсәһе Исмәғил кенәздән Мәскәүҙең һәм бөтә Әрәсәйҙең мәртәбәле олуғ батшаһы Иван ғали йәнәптәренә һәм бөтә Әрәсәй халайыҡтарына бөтә башҡорт халайыҡтары исеменән ҡоростай иҫәнаманлыҡ, бөтмәҫ-төкәнмәҫ бәхет-бәрәкәт, илегеҙгә именлек, уңышлы эштәр теләгән еткереп, игелекле үҙ ҡулығыҙға Исмәғил кенәздең ярлығын тапшырабыҙ. *(Иван өндәшмәй ала ла эргәһендәге Петрға бирә.)*

**Байтирәк.** Исмәғил кенәз, бынан тыш, телдән еткерергә лә бойорҙо: үҙегеҙ беләһегеҙ, башҡорт иле борондан уҡ урыҫ иленә таяныс һәм дуҫ булырға тырышты. Башҡорт иле урыҫ иленә тоҫҡалыусы татар-монгол яуҙарына ла кәртә һәм ҡалҡан булды. Ошо көндәрҙә лә башҡорт иле көнсығыштан темеҫкенеүсе манжур һәм ҡытай баҫҡынсыларын, аҙғын ҡаҙаҡ урҙаларын урыҫ иленә үткәрмәй тотҡарлап тора. Әммә беҙҙең ике араға эренләткес шырау булып ҡаҙалған, башҡорт-урыҫ дуҫлығына зыян килтергән фетнәләр ояһы Ҡазан бар. Олуғ кенәз үҙенең шанлы эштәрендә бына шул хаҡта уйланһын ине, тине бөйөк Исмәғил кенәз *(Иван башын һелкеп ризалығын белдерә.)*

**Тимер.** Исмәғил кенәз һинең менән ихлас дуҫлығының билдәһе итеп һәм ғәскәреңдең иң төп ихтыяждарын ҡәнәғәтләндермәккә ҡулдан килгәнсә өлөш керетәйем тип беҙҙең менән бергә илебеҙҙең оло сауҙа каруанын – дүрт мең дә ете йөҙ һатыусыһын юлландырҙы. Улар әле Коломнала көтөп тора.

**Иван.** Хуп! Тауарҙарығыҙ ниндәй?

**Байтирәк.** Әйтәйек, һыбайлы ғәскәрегеҙгә кәрәкле илле мең баш яҡшы ат бар.

**Иван, Елена, Макарий бер-береһенә ҡәнәғәт ҡарашалар, Анастасия уйға сумып ултыра.**

**Иван.** Афарин, башҡорттарым! Кенәз, бер ыңғай мыйыҡҡа урайыҡ: Исмәғил дуҫымдың был ярлығында ниҙәр бар?

**Петр** *(өҙөк-өҙөк иншалай).* «Ҡазан миңә йыл һайын ҡырҡ мең алтын, йөҙ батман бал, туғыҙ аҫыл тун яһағы түләп тора. Шуға ла ҡарамаҫтан, икебеҙҙең араһындағы эренләткес шырауҙы алып ташлар өсөн, һинең менән бергәләшеп яу сабырға әҙермен... Минең изге хыялым – Ҡазандың һиңә, һинең Ҡазанға баҫҡынлыҡтарын туҡтатып, ҡитғала ысын тыныслыҡ, дуҫлыҡ мөхите тыуҙырыу. Ул саҡ беҙҙең икебеҙҙең сауҙа каруандары юлы һеҙҙең аша Литваға са, беҙҙең аша Ҡытайғаса имен һуҙылыр ине...»

**Макарий.** Ысынлап та, изге хыял.

**Елена.** Башҡорттар үҙҙәре үк әйтмешләй: «Иләнмәгән-һуҡмаған – ҡайным, һиңә киндер ыштан»ға оҡшай шул...

**Тимер.** Бергәләшеп һуғайыҡ: буйлығын – беҙ, арҡауын һеҙ.

**Көлөшәләр.**

**Иван.** Әйткәндәй, беҙ белгән «нуғай» урҙалары булып та, ниңә үҙегеҙҙе «башҡорттар» тип атайһығыҙ?

**Байтирәк.** Сөнки беҙҙең дөйөм халыҡ – башҡорттар, ә әлеге ике урҙаны ла нигеҙләүсе бабаларыбыҙ – башҡорттоң Үҫәргән ырыуы...

**Тимер.** Эйе. Яҙыҡ динле боронғо үҫәргәндәр бүре-эткә табынғанлыҡтан, Сыңғыҙ хан яуындағы илбаҫар татар-монголдар уларҙы «нуғай» йәғни, улар теленсә, «эт» тип атағандар...

**Байтирәк.** Шуны көллө тирә-яҡ ҡәүемдәр ҡабул ҡылып, көллөбөҙгә Нуғай урҙаһы исемен йәбештергәндәр...

**Тимер.** Һеҙ урыҫтарҙың ләҡәпләүенсә, алман-ҡармандар ҙа немец,

йәғни «телһеҙ» булып йөрөгән кеүек...

**Башҡорттарҙан башҡа, бөтәһе лә хахылдап көлә.**

**Иван.** Ҡәҙерле башҡорттарым, Исмәғил дуҫыма ярлыҡ яҙып өлгөрткәнсе, ҡунаҡһарайҙа ҡунағым булып тороғоҙ.

**Байтирәк, Тимер.** Рәхмәт! Баш өҫтө, тәҡсир! *(Икенсе ишектән сығалар.)*

**Оло ишек асыла, Адашевтың ауаҙы: «Бәләкәй урҙа кенәзе Йософтан илселәр – Байһуңғар бей менән Үҫәргән уғлан!» Илселәр инә, баяғылай итәғәтле сәләмләп туҡтала.**

**Үҫәргән.** Аҡтүбә һәм Һарайсыҡ ерҙәренең батшаһы...

**Байһуңғар.** Һәм Әстерхан ерҙәренең батшаһы...

**Икеһе бер ауаздан:** ...һәм бөтә Бәләкәй урҙаның яҡты көнәсәһе Йософ кенәздән Мәскәүҙең һәм бөтә Әрәсәйҙең мәртәбәле олуғ кенәзе һәм батшаһы Иван ғали йәнәптәренә һәм бөтә Әрәсәй халайыҡтарына бөтә башҡорт халайыҡтары исеменән тапташтай сәләмәтлек, урғылып сыҡҡан шишмәләй бүҫкәрмәҫ ырыҫ-бәхет, ил именлеге, бәрәкәтле хәрәкәттәр теләгән еткереп, Йософ кенәздең ошо ярлығын игелекле үҙ ҡулыңа тапшырабыҙ. *(Иван ярлыҡты ала ла Петрга тоттора.)*

**Үҫәргән.** Заманында һинең мөхтәрәм атаң олуғ кенәз ғали йәнәптәренә уның литва һуғышында оло хеҙмәттәр күрһәткән, олуғ кенәз Василий ғали йәнәптәренән яҫауыл дәрәжәһен алған Ябынсы Яҫауылдың улы буламын һәм һин ғали йәнәптәренә лә атайым һымаҡ уҡ хеҙмәт итергә әҙермен!

**Иван.** Рәхмәт, рәхмәт. Инде килеп минең менән бергә Ҡазанды алышһаң, полковник та булырһың. Шундай данлы атайың ҡайҙа хәҙер? Үҙенең Ҡасанҡый-Сала ҡасабаһында аҡ һаҡаллы бей булып ғүмер һөрәме?

**Үҫәргән.** Ҡазан ҡалаһына яу башы булып китте ул. Унда уны Япанча бәк тип беләләр.

**Иван.** Йәл, йәл... Ҡазанға китеүе, тим... Атайыңа сәләм әйт: беҙҙең яҡҡа сыҡһын һәм, шанлы атаҡайыма тоғро хеҙмәт иткәне кеүек, миңә лә хеҙмәт итһен. Ҡуш усы тулы алтын да көмөш, ауыҙ-мороно бал да май булыр.

**Үҫәргән.** Баш өҫтө, әйтермен.

**Байһуңғар.** Ә мин – һин олуғ батша ғали йәнәптәренә итәғәтле һәм изге уйлы Әстерхандың Ямғырсы хан улымын. Беләһең, ханлығыбыҙ һин олуғ батша ғали йәнәптәренең теләктәшлеһе Йософ кенәз урҙаһы менән берлектә. Әммә Төркиә солтаны Сөләймән, һәммәбеҙҙе үҙ ҡулы аҫтына ҡармаларға яҫҡанып, өҫтөбөҙгә Ҡырым сиреүен һөстөрә, илебеҙгә үлем, бәлә-ҡаза килтерә...

**Иван.** Һин әйткән ул Төркиә – Рүсиәнең дә ҡан дошманы. Бергәләгән – яу ҡайтарған, тигәндәй, бер төптән эш йөрөтһәк, Төркиәнән дә үс алырбыҙ, иншалла.

**Үҫәргән.** Беҙҙең Бәләкәй урҙа, үҙең беләһең, Бохара менән уңышлы сауҙа итә. Әммә беҙҙең Әрәсәйгә сығарырҙай аҫыл малдарыбыҙ ҙа мул: өйөр-өйөр йылҡы, көтөү-көтөү һарыҡ, ҡаҡлаған һәм тоҙлаған батша балығы, Яйыҡ йылғабыҙ башында йыуып алынған алтын ҡомо... Илдәребеҙ бәрәкәтенә ике-ара хеҙмәттәшлекте үҫтерергә ниәтләп, көнәсәбеҙ Йософ кенәз һынамаҡҡа беҙҙең менән кесе каруан юлландырҙы, унда ике йөҙ һатыусы, өс мең баш яҡшы ат, байтаҡ алтын ҡомо бар.

**Елена.** Бәрәкалла, бәрәкалла! Алтын ҡомона ла эйә табылыр.

**Байһуңғар.** Ләкин, ғәфү итегеҙ, Дон буйында боҫоп ятмыш казактарығыҙ шашынды. Юлбаҫарлыҡ ҡылып, каруандарыбыҙҙы талайҙар.

**Үҫәргән.** Эйе шул. Беҙҙең өсөн

Мәскәү юлы – яу юлына әүерелде. Ҡырым татарҙарының, Ҡазан татарҙарының йөҙәтеүе етмәгән, инде килеп урыҫ казактары ла кереште.

**Иван.** Казактарыбыҙҙы ауыҙлыҡларбыҙ. Ә Ҡырымдың да, Ҡазандың да татарҙарын бергәләшеп дөмөктөрһәк, шәп булыр.

**Үҫәргән.** Быйыл да шул Дон бөгәләндә каруаныбыҙҙы талағандар, кешеләребеҙҙе ҡырғандар. Тере ҡалғандары хәҙер һинең ҡулда икәнлеген ишеттек. Йософ кенәзебеҙ шул хаҡта ла ярлығында ентекле яҙған, әммә телдән дә иҫкәртергә лә мәртәбәле яуабыңды үҙ ҡолаҡтарыбыҙ менән ишетеп ҡайтырға ҡушты.

**Иван** *(Петрга әйләнеп ҡарап).* Кенәз, мәғлүм итсе беҙгә Йософ дуҫымдың алтын һүҙҙәрен.

**Петр** *(урыны-урыны менән тәржемәләй).* «Минең дуҫым олуғ батша Иванға Йософ кенәздән сәләм ебәреп, һүҙем шул: Ҡазан бәктәре бынан элек Сафагәрәй ханды ҡыуалап, һинең атаң Василий кенәздән Шәйехғәли хандың туғаны булған Йәнғәли ханды Ҡазанға хан итеп алғайнылар, Ҡазандың яҡшы кешеләрен беҙгә ебәреп, беҙҙең илә яҡынлашыуҙы үтенгәйнеләр. Тәңренең тәҡдире буйынса, Йәнғәли ханға үҙебеҙҙең ҡыҙыбыҙ Сөйөмбикәне биреп, ҡоҙа булышҡайныҡ. Сафагәрәй хан Ҡазандан ҡасҡас, Булат бәк, йорт исеменән уға ярлыҡ ебәреп, уны Ҡазанға ҡайтарҙы. Һинең дуҫың беҙҙең кейәүебеҙ булған Йәнғәлиҙе үлтерҙеләр; минең ҡыҙымды Сафагәрәйгә бирҙеләр. Сафагәрәй беренсе мәртәбә Ҡазанға килгән сағында уның менән бергә ни бары утыҙ кеше генә килгәйне. Шунан һуң нисәмә йылдар үткәс, әллә ни саҡлы ялпы-яланғас Ҡырым сиреүен саҡырып килтерҙе. Ҡазандыҡыларҙы төрлөсә ҡыҫа башланы. Ҡазан кешеләре унан шул тиклем ҡыҫынҡылыҡ күреүгә сыҙай алмайынса, икенсе тапҡыр ҡыуаланылар уны... Әммә ләкин өсөнсө тапҡыр уны Ҡырымдан саҡырып алып тәхеткә ултырттылар... Көтмәгәндә уның үлемен ишеттек... Хәҙерендә беҙҙең һиңә тоғро һүҙебеҙ шул: киләсәктә һинең илә дуҫ булһаҡ ине. Шәйехғәли хандың туғаны Йәнғәли илә яҡынлашҡайныҡ. Ләкин уға Алланың ошондай асы яҙмышы иреште. Бына хәҙерендә беҙ һинең тоғро дуҫың Шәйехғәли илә дуҫлыҡта һәм яҡынлыҡта булаһыбыҙ һәм дә уға үҙебеҙҙең ҡыҙыбыҙҙы бирәһебеҙ илә...

Быйыл беҙҙең кешеләребеҙ Мәскәүгә һатыу итергә барғайнылар. Ҡайтҡан саҡтарында Тында тороусы һеҙҙең казак һәм сәврүктәрегеҙ ябырылып, уларҙың ҡайһыларын ҡырып, аҡсаларын талағандар, ҡайһыларын тотоп һиңә илткәндәр. Һинең янда тере булған беҙҙең кешеләребеҙ, төркөм башында Ҡорат Толобай, Бурансы, Йәнсура, Байкилде, Намаҙ, Көнтыуған, Хафиз булдығы хәлдә, ун бер кеше. Бына мин ошо кешеләрҙе сапҡыныбыҙ Байһуңғар илә бергә ебәреүегеҙ хаҡында һиңә баш орамын... Минең өс йөҙ мең яуым бар. Һигеҙ улым бүленеп, быларҙың һәр береһенең унар мең яуҙары бар. Шулар һис бер ваҡыт һинең кешеләрең өҫтөнә барғандары юҡ»...

**Иван** *(тамаҡ ҡырып).* Ҡһыммм, аңлашылды... Әйтелгән кешеләрҙең барыһы ла иҫән-һау, туранан-тура минең ҡарамағымда. Баштарынан бер бөртөк сәстәрен дә төшөртмәй, үҙегеҙ менән ҡайтарып ебәрербеҙ. Каруанығыҙҙы талаған һәм яуызлыҡ ҡылған казак һәм сәврүктәрҙең кәрәгенә бирербеҙ. Хөрмәтле илселәр, әйтерегеҙ бөттөмө?

**Үҫәргән.** Олуғ батша ғали йәнәптәре, кисерегеҙ, бер генә һорауым бар.

**Иван.** Йә, тыңлайым.

**Үҫәргән.** Көнәсәбеҙ Йософ кенәз ярлығында һаналмыш кешеләребеҙ араһында Бәкәтәр ҡалаһы азаматы – яҡын туғаным Йәнсура ла бар икән. Шуның терелеген үҙ күҙҙәрем менән күрергә ине, әгәр ҙә мөмкин булһа...

**Иван** *(оло ишек ягына).* Керетһендәр, әйтегеҙ! *(Үҫәргәнгә ҡарап.)* Дондан Мәскәүгәсә ҡаңғырып килеп еткәнсе, азаматығыҙ шаҡтай таушалған, әлбиттә...

**Елена.** Үҙегеҙ үк әйтмешләй, юл аҙабы – гүр ғазабы бит...

**Петр.** Әммә эсендә йәне бар – шапшаҡтай.

**Йәнсураны алып керәләр. Йәнсура аптырап ҡарап тора ла Үҫәргәнде ҡосаҡлай.**

**Йәнсура.** Һаумы, ағайым! Һинең яҡты йөҙөңдө лә күрер көнөм бар икән!

**Иван.** Туғандарҙың бәхетле минуттары! Ҡунаҡһарайға ҡайтығыҙ, туйғансы һөйләшегеҙ.

**Үҫәргән, Байһуңғар, Йәнсура** *(бер ауаздан).* Аллабыҙҙың ҙур рәхмәте яуһын һиңә, олуғ батша ғали йәнәптәре! *(Гөрләшеп сыгып китәләр.)*

**Макарий.** Вәт басурмандар, уларҙа ла кешелек хисе бар икән!

**Иван.** Шуға күрә лә әйтәм бит: ҡалъя һоғондороу ҙа яҙыҡ түгел.

**Елена.** Ай-һай, еткерә алырһыңмы?

**Иван** *(ҡылысын һура биреп, кире тыга).* Етмәгәненә ҡылысым етә минең!

**Оло ишектән Адашевтың тауышы: «Поганый Ҡазан илселәре Ҡолшәриф мулла менән түбәнлек Йәнбарис Растов, Хоҙайғол уғлан менән Мурали бәктәр олуғ батша ғали йәнәптәренең итек саңдарын ялап баш орорға килгәндәр, үткәргәме?" Ултырҙаштар бер-береһенә мәғәнәле ҡараша.**

**Иван.** Инһендәр!

**Әйтелгән дүрт илсе, йүгереп килеп, шыңшып илай-илай, Ивандың кәкре башлы ҡыҙыл итеге осона баш ора.**

**Иван.** Ҡалҡытығыҙ серек күсәндәрегеҙҙе, тыңлайым.

**Дүртеһе лә тубыҡлана, дүртеһе лә һүҙ башларға тырыша, буталыш.**

**Иван.** Берәмләп һәм сиратлашып һайрағыҙ.

**Ҡолшәриф.** Бөтөн Рүсиәнең олуғ падишасы, олуғ кенәзе булған мәрхәмәтле Иван Васильевич! Ҡазан жире Аллаһныҡы, шулай уҡ син олуғ кенәзнеке; без исә Аллаһның, шулай уҡ синең ҡолларыңмыз; син, падишаһымыз, безнең турада, шулай уҡ барча Ҡазан жире турасында ҡайғыртып, безгә падишаһ бирсәң һәм дә киләчәктә безгә ничек булырга кирәклекне аңғартсаң иде!.. *(Ивандың аяҡ осона сәсәп йыгыла.)*

**Йәнбарис** *(ялгап).* Башларында Ходайғол уғлан һәм Мурали бәк булған хәлдә, бөтөн Ҡазан йорто, муллалары, сәйетләре, шәйехләре, шәйехзадәләре, муллазадәләре, имамлары, хажилары, хафизлары, бәкләре, уғланлары, мырзалары... *(Ивандың аяҡ осона сәсәп йыгыла.)*

**Хоҙайғол** *(ялгап).* Эчкеләре һәм тышҡылары, йорттағы һәм йортноң тышындағы казаклары, шулай уҡ чуаш, чирмеш, муҡшы, тархан, мишәрләре вә бөтөн Ҡазан жире... *(Ивандың аяҡ осона сәсәп йыгыла.)*

**Мурали** *(ялгап).* Син олуғ падишаһның аларны бағышлауыңны, аларға булған ачуыңны бөтөрөүеңне, Ҡазанға хан итеп үзеңнең дусың Шәйехғәлине жибәрүеңне, Үтәмешгәрәй ханны исә, анасы Сөймбикә берлән бергә, үз яныңа Мәскәүгә алдыртуыңны үтенәләр... *(Ивандың аяҡ осона сәсәп йыгыла.)*

**Иван.** Тимәк, Үтәмешгәрәй ханығыҙҙы һәм Сөйөмбикәне минең ҡулға башкөллә тапшыраһығыҙ?

**Дүртеһе бергә.** Бирәбез! Аяҡ-ҡулларын бәйләп килтереп салабыҙ! *(Ҡабат йығылалар. Дүртеһе тиң баш ҡалҡытмай тик ята, тынлыҡ.)*

**Иван.** Әллә мәрткә киттеләр инде... Адашев, төрт осаларына!

**Адашев, елтерәп килеп, аяғы менән дүртеһенә лә төртә лә кире китә.**

**Ҡолшәриф, Йәнбарис, Хоҙайғол, Мурали** *(берҙәм баш кәшкәйтеп, тубыҡланып, бер ауаздан ослайҙар.)* Олуғлардан олуғ падишаһымыз, без ҡолларыңны рәхимле ярлыҡасаң иде, баш ороп, без шул хаҡта табынабыз! *(Илашып, Ивандың аяҡ осона йығылалар.)*

**Иван.** Тороғоҙ, иң бәхетле ҡолдарым булырһығыҙ. Мәскәү мәрхәмәте киң — ярлыҡау алырһығыҙ. Һеҙҙең кеүектәргә Рүсиә еренең уртаһынан Ай мәсетле Ҡасим ханлығын да ҡороп биргәнбеҙ. Барығыҙ, ҡайта һалып вәғәҙәгеҙҙе үтәгеҙ. Үҙегеҙ һораған Шәйехғәли ханды бирермен һеҙгә хан итеп!

**Дүртеһе** *(бер ауаздан).* Мәрхәмәтле падишаһымыз, сезнең өчөн чәчебез берлән жир сеперергә әзербез! *(Эйелә-бөгөлә сығып китәләр.)*

**Иван ырғып тора, иҙән уртаһына баҫа. Башҡалар ҙа торалар.**

**Иван** *(ҡанға буялып ҡыҙарған ҡылысын ҡындан һурып сығарып, юғары күтәреп айҡай).* Ур-ра! Ҡазан минеке хәҙер! Ханлығын да, хандарын да башытояғы менән миңә һаттылар! Волганы аша сығам да поганый Ҡазанды алмайынса ҡайтмайым!

**Шаршау.**

## ӨСӨНСӨ ШАРШАУ

### 1-се сәхнә

**Сәхнә төбөндә дата: «1551 йыл». Ҡазан хан һарайының тәхетханаһы. Яҡшы кейендерелгән, алтын таж кейгән дүрт йәшлек хан Үтәмешгәрәй тәхетендә уйнап ултыра, янындағы креслола — әсәһе, ханлыҡ идарасыһы Сөйөмбикә, түбәһендә алтын башлыҡ.**

**Үтәмешгәрәй.** Әсәкәйем, тышта уйнағым килә.

**Сөйөмбикә.** Сабыр ит, ҡолонсаҡҡынам. Хан кешегә көйһөҙләнергә ярамай. Ханлығыбыҙҙың бер килке эштәрен бөтөргәс, баҡсала икәүләшеп уйнарбыҙ.

**Үтәмешгәрәй.** Ниндәй эш, бабайҙарҙың баштарын ҡыҫҡартыуmы?

**Сөйөмбикә.** Көфөр һүҙ һөйләмә, улым. Хандың эше – баш ҡыҫҡартыу түгел, ә баш һандарын арттырыу, ил менән идара ҡылыу.

**Үтәмешгәрәй.** Ошо тәхеттә атайым бахыр ултырғанда кешеләрҙең баштарын ҡыҫҡартҡан, тамаҡтарын көмөш ҡойоп бөтәштергән, тиҙәр бит һуң. Ҡушаҡ абыйым әйтә.

**Сөйөмбикә.** Атайың иҫке хан ине, ә һин яңы хан булдың. Яңы хандың ҡылығы ла яңыса. Һәр нәмәлә тәртип булырға тейеш. Тәртип тупһанан башлана: бына атайың заманындағы айбалталы әзмәүерҙәр ҙә, ингән берәүҙең ҡотон осортоп, икеһе ике яғында һерәйеп тормай хәҙер. Тәхет ҡотон, ҡурҡыу түгел, һоҡланыу бәрәкәтләй ул.

**Үтәмешгәрәй.** Һоҡланыу тигәнең кем ул, эргәндә гел уралған Ҡушаҡ абыймы?

**Сөйөмбикә** *(көлөп.)* Эй ҡолонсағым, миңә түгел, хан эргәһенә керә бит ул, хан әмерен алырға.

**Үтәмешгәрәй.** Хан кем ул?

**Сөйөмбикә.** Һин үҙең, үҙең, ҡолонсағым. Башыңа алтын таж кейеп, хан булып ултыраһың да!

**Үтәмешгәрәй.** Хан ни тиһә лә, әмере үтәләме?

**Сөйөмбикә.** Һис һүҙһеҙ, еренә еткереп үтәлә.

**Үтәмешгәрәй.** Алайһа, Ҡушаҡ миңә хәҙер үк бер ус өрөк, бер ус Әстерхан сәтләүеге килтерһен.

**Сөйөмбикә.** Баш өҫтө, олуғ ханым. Ҡушаҡ!

**Ҡушаҡ** *(елтерәп инә).* Әү, ханбикәм?

**Сөйөмбикә.** Һине ханбикәң түгел, ә олуғ хан үҙе саҡырта.

**Ҡушаҡ** *(Үтәмешгәрәйгә баш эйеп).* Тыңлим, олуғ ханым.

**Үтәмешгәрәй.** Хәҙер үк миңә бер ус өрөк, бер ус сәтләүек!

**Ҡушаҡ.** Йәғни... йәғни мәсәлән?

**Сөйөмбикә.** Хан әмере ҡыҫҡа: кисә Бохара каруаны килтергән емештәрҙең сифатын үҙе тикшереп белгеһе килә.

**Үтәмешгәрәй.** Бер аяғың бында, икенсеһе тегендә булһын!

**Ҡушаҡ.** Баш өстө, олуғ ханым! *(Елтерәп сығып китә).*

**Үтәмешгәрәй.** Күҙ асып йомғансы килтереп еткермәһә, Ҡушағыңдың башын киҫерменме икән? Әллә тамағына көмөш кенә ҡойорғамы? Их, ҡыҙғанам бит әле шуны...

**Тулы тоҡтар йөкмәгән ике әзмәүерҙе эйәртеп, Ҡушаҡ инә. Тоҡтарҙы тәхеттең ике янына ҡуялар.**

**Ҡушаҡ.** Рәхим итә күр, олуғ ханым. Бересендә – өрөк, икенчесендә – чәтләүек. Иң сифатлы, ләззәтле.

**Үтәмешгәрәй** *(һәр тоҡтан берәр ус алып, кеҫәләренә сумыра.)* Ҡалай күп! Нисек ашап бөтөрәйем бер үҙем? Әйҙәгеҙ, күмәкләшеп мөнйөйөк!

**Килтереүселәр пырхылдашып көлә.**

**Сөйөмбикә.** Ханыбыҙ тикшермәккә өлгөләр алды. Ҡалғандарын ҡаҙнаға кире илтегеҙ.

**Әзмәүерҙәр тоҡтарҙы йөкмәп сығып китә.**

**Ҡушаҡ.** Тыңлим, тағын да ни бойороҡлар бар, олуғ ханым?

**Сөйөмбикә.** Күҙгә төшкән дегәнәк булды был урыҫтың Зөйә ҡәлғәһе. Нисек көл ҡылырға шуны!.. Шымсылар ебәрелдеме? Мәғлүмәт алындымы?

**Ҡушаҡ.** Алынды. Яуыз Иван Шәйехғәли ханны шул Зөйәгә беркеткән, киләчәктә Ҡазан ханы ҡылырға...

**Үтәмешгәрәй** *(Ҡушаҡҡа сәтләүек атып.)* Һәй, мәмәй ауыҙ! Ҡазан ханы – мин, мин!

**Ҡушаҡ.** Һич сүзсез, һич сүзсез син үзең, олуғ ханым! *(Сөйөмбикәгә.)* Атаҡайың Йософ кенәз дә килешкән шуның берлән. Шәйехғәлине Ҡазан тәхетенә менгереп, сине аның хатыны ҡылмаҡҡа димләгән... Киләсе йыл Яуыз Иван Ҡазанны алачаҡ, ди...

**Сөйөмбикә.** Ҡара ниәтен өҙөргә!

**Ҡушаҡ.** Һич шиксез!

**Сөйөмбикә.** Рәсәй менән килешергә лә дуҫлашып йәшәргә теләйбеҙ, тигән ярлығым Мәскәүгә ирешкәнме? Ул тарафтан ни хәбәр?

**Ҡушаҡ.** Ярлығың тапшырылған, әммә аннан жавап юҡ. Шунысы аныҡ мәғлүм: Яуыз Иван киләсе йыл яз башыннан уҡ Ҡазан өстөнә ҡузғалырға жыйына...

**Сөйөмбикә.** Атаҡайымдан ғәскәр һорап сапҡынсы ебәргәйнем...

**Ҡушаҡ.** Ғәскәр юҡ. Фәҡәт башҡырт азаматлары килә — Чулман суын кичкәннәр. Жанчура дигән башлыҡларыннан хәбәр бар.

**Сөйөмбикә** *(һиҫкәнеп).* Ә?! Йәнсура?

**Ҡушаҡ.** Эйе, Жансура. Нигә, танышың идеме әллә, ханбикәм?

**Сөйөмбикә.** Ә... юҡ... Бала сағымда шундай малай бар ине... Һағауылдарҙы ныҡ иҫкәрт: тоҡкарлыҡһыҙ үткәрһендәр Ҡазанға.

**Ҡушаҡ.** Баш өстө, ханбикәм.

**Сөйөмбикә.** Иншалла. Зөйә ҡәлғәһен алырға, урыҫ тамырын төбөнән киҫергә кәрәк. Илде ҡоралландырығыҙ.

**Ҡушаҡ.** Илне?! Ҡазна сай — сөңгө сатып алырлыҡ та аҡча юҡ.

**Сөйөмбикә.** Уф... Үтәмешгәрәйем бәлиғ булғансы тип йыйған алтын тәңкәләрем бар ине, алығыҙ.

**Ҡушаҡ.** Анысы андый да ул, мона ҡәлғә диуарларыбыз жимерек...

**Сөйөмбикә.** Һиплегеҙ. Йәҙрә яуҙыртырға туптарҙы теҙеп ҡуйығыҙ.

**Ҡушаҡ.** Их, ханым вә ханбикәм, аларын ҡайдан алиҡ соң?

**Сөйөмбикә.** Был ни тигән һүҙ?! Ҡазан ханлығының суйын туптары, баҡыр туптары етерлек.

**Ҡушаҡ.** Житәрлек иде дә ул... Бәкләрең вә уғланнарың ул тупларны урысҡа сатып эчкән!

**Сөйөмбикә** *(урынынан ҡалҡынып, әсенеп).* Ә?! Уф, йөрәгем! *(Йығыла башлай, уны Ҡушаҡ килеп ҡосаҡлап ала.)*

**Үтәмешгәрәй** *(ырғып тороп).* Әсәкәйем, тәхетең дә, алтын тажың да кәрәкмәй! Был алтын таж тигәндәре бик ауыр! *(Башындағы тажды атып бәрә.)*

**Ҡушаҡ.** Ханбикәм, ҡәдерлем, йөрәгеңә алма инде барсын да! Барысы да уңалыр!

**Тышта – дөбөрләү. Ишек шартлап асыла, Гәүһәршаттың әсе тауышы: «Айбалталы мәхлүҡләр, тотҡарламағыз мине, ханға әйтәсе сүзем бар! Күрәзәчелек ҡылдым – барығыз да сатлыҡжан! Үтәмешгәрәй илә аның анасы Сөйөмбикәне Яуыз Иванға сатҡансығыз!**

**Гәүһәршат** *(сәсе-башы туҙғыған хәлдә атлығып керә, Сөйөмбикәне ҡосаҡлап торған Ҡушаҡты күреп, күҙен яман аҡайта).* Жәмәғә-ә-әт, ни күрәм?!. Көпә-көндөз тәхетханада, ханыбызның күзе алдында, зина ҡылып яталар! Үз күзләрем берлән күрдем: Сөйөмбикә берлән Ҡушаҡ уйнаш ҡыла!

**Тышта шау-шыу, тауыштар:**

– Уйнашчыларны тотоғоз! Таш ороп үлтерегез!

– Юҡ! Сөйөмбикә берлән Үтәмешгәрәйне Иванға тотоп бирергә! Ҡушаҡның жанын жәһәннәмгә очорорға!

**Ҡушаҡ сығып ҡаса. Сөйөмбикә, улын ҡосаҡлап, тәхеткә әүшәреләй.**

**Сөйөмбикә** *(илап).* И, Илаһым, күрәһеләрем бар икән... Ниңә тыуҙым был донъяға?!. Ниңә килдем ҡоҙғондар ояһына?!.

**Үтәмешгәрәй** *(сарылдап илай).* Әсәкәйем, илама...

**Сөйөмбикә.** Ҡушаҡ!

**Бөкөрәйеп бөткән Әбей инә.**

**Әбей.** Әү, ни булды, балаҡайым?

**Сөйөмбикә.** Үҙемдең форсатым юҡ, ҡолонсағымды алып сыҡ та баҡсала уйната тор.

**Әбей баланы етәкләп сыға. Баштан-аяҡ ҡораллы Йәнсура инә.**

**Йәнсура.** Әссәләмәғәләйкүм, олуғ Үтәмешгәрәй хан! Аһ, тәхете буш икән дә... Хәйерле көн, ханбикә Сөйөмбикә!

**Сөйөмбикә** *(албырғанып).* Уй, кемде күрәм? Йәнсурам... Һинме был?!

**Йәнсура.** Мин, мин, Сөйөмбикә һылыуым! *(Ҡосаҡларға итә, ләкин Сөйөмбикә этәрә.)* Оло афәттәргә тарыуыңды ишеткәс, ете ер, ете һыу аша осоп килеп еттем.

**Сөйөмбикә.** Осоп барып ҡаршы ала алманым, ҡанаттарым ҡаналы... Уф... Атайым ғәскәр ебәрҙеме, ебәрәме?

**Йәнсура.** Атайың Ҙур урҙаға, Исмәғил кенәз ҡаршына, барып ҡайтҡайны... Ике урҙа берләшеп, йөҙ егерме мең ғәскәр менән урыҫ өҫтөнә дөрөргә өгөтләгәс, Исмәғил кенәз яман итеп ажғырған. «Артыңды уйлап эш ҡыл! Яуыз Иванға яу асһаҡ, үлектәребеҙҙе күмергә кәфенлек тә етмәҫ!» – тип кире бороп ҡайтарған... Шунан һуң мин, үҙемдең иң ышаныслы азаматтарымды йыйып, һине алып ҡайтырға тип атлыҡтым. Төкөр был Ҡазанына – ҡоҙғондар ояһына! Йәмле

Яйыҡ буйҙарың, Һаҡмар буйҙарың һағынып-зарығып көтә һине. Әүәлгеләй, илебеҙҙең былбылы булып иң юғары талпынырһың, Үтәмешгәрәйеңде лә хур итмәбеҙ. Егет ҡорона кергәс, Аллаһ бойорһа, Сура олатайы кеүек, дер-һелкетеп Ҡазанды алып бирербеҙ, тәхетен ҡайтарырбыҙ... Остоҡ, былбылым! Ҡазан артында ҡарурманда азаматтарым көтә!

**Сөймбикә.** Эй, Йәнсурам, Йәнсурам! Әле лә элеккеләй – егет килеш икәнһең. Ә күпме һыуҙар аҡты, елдәр иҫте... Сәстәребеҙгә сал да ҡуна башланы...

**Йәнсура.** Ә һин һаман былбылһың, йөрәгемә ҡунып һайраған аҫыл ҡошһоң, Сөйөмбикәм... *(Ҡосорға итә.)*

**Сөймбикә** *(этәреп).* Юҡ, ярамай... Аҡҡан һыуҙар ҙа, елдәр ҙә кире ҡайтмаҫ... Хан анаһы, ил менән идара ҡылыусы мин, Йәнсураҡайым... Үтәмешгәрәйемдең тәхетен бәхетле ҡылырға бурыслымын!

**Йәнсура.** Ҡылайыҡ һуң!

**Сөйөмбикә.** Ханлығыбыҙға урыҫҡандошман янай – миңә ғәскәр, ғәскәр кәрәк, Йәнсурам! Азаматтарыңды килтер, Йәнсура батыр! Ҡушаҡ батыр менән ҡушарлап ҡуш ҡанатым булырһығыҙ. *(Ишек ягына.)* Кем унда, Ҡушаҡты саҡырығыҙ!

**Әбей инә.**

**Әбей.** Балаҡайым, Ҡушаҡ батыр юҡ инде... Фетнәселәрҙән өркөп, үҙенең Ҡырым сиреүен алып ҡасты.

**Сөйөмбикә.** Эй, Раббым, ҡанатым ҡайырылды...

**Йәнсура.** Мин бер үҙем ҡуш ҡанатың булырмын. Әйҙә, остоҡ!

**Сөйөмбикә.** Юҡ! Үтәмешгәрәй хан китһә, Ҡазан ханлығы бөтә. Таш яуһа ла, беҙ бында ҡалырға тейеш.

**Йәнсура.** Алайһа, азаматтарымды килтерәм, фетнәселәрҙең йәндәрен йәһәннәмгә осорам!

**Сөйөмбикә** *(турайып).* Килтер!

**Йәнсура ашығып сығып китә. Сөйөмбикә, йөрәкһеп, ишекле-түрле йөрөй.**

**Сөйөмбикә.** Йәнсурам ҡалай үҙгәргән, сырайына һыр ҡунған... Хәйер, үҙем дә шулаймындыр... Икебеҙ ике ер ситендә... Йәшлегебеҙ киҫелде, гөлсәскәләй ҡороно... *(Йырлай. Могаийын, Сәлих Сәйҙәшев көйө.)*

*Йәмле Яйыҡ буйҙарында*
*Ҡалды баллы таң гынам.*
*Йәнем һөймәҫ сит илдәрҙә*
*Ситлектәрҙә ҡаңғырам.*

*Аҡкош инем йәйләүҙәрҙә,*
*Шоңҡар инем ҡышлауҙа.*
*Ҡанаттарым ҡайырылды,*
*Аяҡ-ҡулым тышауҙа.*

*Атаҡайым аҙаштырҙы,*
*Һатты гәзиз башымды.*
*Алтын ситлек ҡыҫаһында*
*Агыҙамын йәшемде.*

*Аҡ яулыҡ, зәңгәр шәл,*
*Үтә гүмерем бигерәк жәл.*
*Баҙарҙарҙа һатыла торган*
*Малдар кеүек беҙҙең хәл...*

**Ишек төбөндә шау-шыу, башыкүҙе аларғандарҙың бер төркөмө тәхетханаға бәреп керә. Араларында – ғауғалы Мурали һәм Хоҙайғол, Ҡолшәриф, Петр Серебряный.**

**Мурали.** Ханбикә, выжт! Идаралығың тамам!

**Хоҙайғол.** Ҡайда Үтәмешгәрәйең?

**Әбей.** Бында, алып инеп киләм бит. *(Үтәмешгәрәйҙе етәкләп керетә.)*

**Мурали.** Сөйөмбикә, Үтәмешгәрәй, тыңлағыҙ. Шушы мәлдән башлап сез хан да, идарачы да түгел. Тәхетхананы ябабыз. Ҡазан халҡы сезнең икегезне дә мәрхәмәтле олуғ патшамыз Иван Васильевичка тапшырырға ҡарар ҡылды.

**Ҡолшәриф.** Шәйехғәли хан ҡуйынына керәсең, яңадан ханбикә буласың!

**Хоҙайғол.** Көш-ш-ш Мәскәүгә!

**Петр.** Эйе, мәрхәмәтле патшамыз Иван Васильевичның фарманы буйынча, сезне алырға килдем.

**Сөйөмбикә.** Аһ!.. *(Үкһеп-буҫлыгып йығыла, уны күтәреп торғоҙалар ҙа, ике яғынан ҡултыҡлап, ишеккә ыңғайлаталар. Үтәмешгәрәй сарылдап илай, уға һарай ҡатын-ҡыҙҙары ҡушыла.)*

**Әбей.** Йәмәғәт, сеү! Шым ҡалығыҙ! Ханбикәгеҙ сеңләп хушлаша!

**Тауыштар:**

– Ни ди? Чеңли, диме?

– Ни икән ул чеңләү? Безнең татарда юҡ ласа ул?

**Ҡолшәриф.** Һәй, хәсисләр, шуны да белмисезме? Башҡыртның ҡайғылы жырауы ласа ул сеңләү!

**Сәхнә шым ҡала, Сөйөмбикә сеңләй.**

**Сөйөмбикә.**

*Эй, Хоҙайым! Осорһаңсы ошонда*
*Әсәм телен белгән осҡор ҡошоңдо!*
*Осһон ине ул ҡош атам-инәмә,*
*Ҡыҙҙарының хәсрәткәйен һөйләргә...*

*Хоҙай орһон Шәйехгәли яһилды –*
*Бысаҡһыҙ ҙа телгеләне йәнемде!*
*Төшһөн уға ләғнәтем! һәм – бәддоға*
*Мине һатып ебәргән ҡазандарға!..*

**Петр** *(күҙ йәштәрен һөртөп һамаҡлай).*

*Шомланмасы, бер үк, ханбикә һылыу!*
*Иламасы нескә талдай һығылып!*
*Илтмәйбеҙ бит һине мәсхәрәләргә –*
*Мәскәү үҙе көтә һине һағынып!*

*Бөйөк хөрмәт ҡаҙанырһың Урыҫта –*
*Ултырырһың һарайҙың иң түрендә!*
*Ҡолдарыңа бойороусы булырһың,*
*Булғаныңдай ошо Ҡазан ерендә.*

*Йәш егеттәр – хан улдары күп беҙҙә –*
*Кейәү һайлап алыу һинең ирektә.*
*Һинең кеүек гүзәл гөл бит иң яуыз*
*Батшаның да таш бәгерен иретә...*

**Сөйөмбикә** *(алтын башлығын атып бәрә).*

*Сафагәрәй, хужам, һөйөклө ханым!*
*Өҙөлөп һөйгән һылыу ханбикәңде күр!*
*Мал хәлендә әйҙәлә ул... Эй, ханым,*
*Ҡол булғансы, алһын ине мине гүр!*

*Улың менән бергә беҙҙе илтәләр*
*Ытырғаныс телле урыҫ иленә...*
*Эй, бәгерем, беҙҙе һатҡан Ҡазандың*
*Урыҫ ене һуҡһын биртек биленә!*

*Ҡарышырлыҡ хәлем инде ҡалманы,*
*Ҡазаныңды фетнә уты ялманы...*

*Аһ, бәгерем! һөйөклө ханым минең!*
*Асы сеңләүемә ҡолаҡ һалһаңсы,*
*Тәрән ләхетеңде миңә асһаңсы,*
*Мәңгелеккә ҡуйыныңа алһаңсы!..*

**2-се сәхнә**

**Сәхнә түңәрәге әкрен генә әйләнә. Иң алдан – Петр, уның артынан – ике ҡатындың ҡултыҡлап оҙатыуындағы Сөйөмбикә, ә иң арттан мыҡты ир-егет Үтәмешгәрәйҙе күтәреп бара.**

**Петр** *(туҡталып).* Ханбикәм, соңғы тапҡыр Ҡазаныңа күз салың, ҡайғыңны түгеп ҡалың.

**Сәхнә – әйләнеүҙән, кешеләр атлауҙан туҡтай: алыҫта асылған панорамаға текләйҙәр. Унда – мәсет манаралары сурайған Ҡазан ҡалаһы.**

**Сөйөмбикә.**

*Хәсрәтемде илап кемгә түгәйем?*
*Улымамы – гонаһһыҙ сабыйыма?*
*Атамамы? – Ул Йайыҡ аръяғында!*
*Һөйләйемме ант боҙған ҡазандарға,*
*Сабый ханын дошманга һатҡандарға?..*
*Ләғнәт яуһын, ләғнәт шаҡшы ҡалаға! –*
*Тик шул теләк булыр минән Аллаға!..*

*Ҡазан, Ҡазан! Туҡталды һиндә аҙан!*
*Шулдыр инде башыңа етер ҡазаң!..*
*Ҡуҡырайтып манаралар теҙмәһен,*
*Ханың тажы ауғанын да һиҙмәйһең!*
*Бигәйни, һин — етем ҡалған*
*тол ҡатын...*
*Сәсен йолҡоп илар хәлдә дәүләтең...*
*Аһ!.. – ҡушылып сеңлә миңә, гүр-ҡала, –*
*Шанлы көндәреңде инде үрт ала!..*

**Петр.** Да-а-а... Шәһри Ҡазанның көннәре санаулы ҡалды...

**Ҡала өҫтөн, ысынлап та үрт алғандай, ҡанһыу-ҡыҙыл шәүлә томалай. Сәхнә түңәрәге хәрәкәткә килеп әйләнә, кешеләр баяғы атлауҙарын дауамлай.**

**Шаршау.**

## ЭПИЛОГ

**Салланған мыйығын, ҡаштарын, сәсен ап-аҡ бәҫ ҡаплаған кенәз Петр Серебряный буш офоҡҡа бағып тора.**

**Петр.** Сөйөмбикәнең асы ҡарғышы төштө – мәғрур Ҡазан ҡалаһы тармар ҡылынды. Ҡазан ханлығы ер йөҙөнән юйылды. Күрәҙәсе Гәүһәршаттың күрәҙәләүе көнө-йылынаса тептеүәл тап килде. Бәндәләргә ғибрәт булһын ине был...

**Ут һүнә.**

**Шаршау.**

12 июль, 2004 йыл.

**Авторҙан.** *Уҡыусыларға тәҡдим ителгән был әҫәр ("Сөйөмбикә һылыу") түбәндәге сығанаҡтарҙан аҙыҡланып яҙылды:*

1. Татар тарихы китапханәсе. Һади Атласи. Себер тарихы. Сөенбикә. Ҡазан ханлығы. Ҡазан, Татарстан китап нәшриәте. – 1993.

2. Сказание о царстве Казанском. М., 1959.

3. Казанская история. М. – Л., 1954.

4. И. К. Кирилов. Цветущее состояние всероссийского государства. Изд. "Наука", М., 1977.

5. Алтон С. Доннелли. Завоевание Башкирии Россией 1552 – 1740. Страницы истории империализма. Уфа, 1995.

6. Әхмәтзәки Вәлиди Туған. Башҡорттарҙың тарихы. Төрк һәм татар тарихы. Өфө, "Китап", 1994.

7. Чокан Валиханов. Избранные произведения. Изд. "Наука" – Главная редакция восточной литературы. М., 1986.

8. Шәжәрәләр: "Үҫәргән тәүәрихе" (Үҫәргән батшалар шәжәрәһе) һәм "Родословная таблица потомства кн. Исмагила в Орде Больших Ногаев" һ.б.

9. Сәғит Мираҫ. Башҡорт тарихына бер ҡараш. "Ватандаш" журналы, 1996/1 – 3; 1997/1 – 3.

10. Академия наук СССР – Институт истории СССР. Сибирское отделение АН СССР – Институт истории, филологии и философии. Полное собрание русских летописей, том тридцать шестой. Сибирские летописи, часть 1 – группа Есиповской летописи. М., "Наука", 1987.

11. Посольские книги по связям России с Ногайской Ордой (1551 – 1561 гг.). Казань, Татарское книжное издательство, 2006.

12. И.В. Зайцев. Астраханское ханство. М., Изд. Фирма "Восточная литература" РАН, 2004.

**Земфира СӘХИПОВА**

## *Робағиҙар*

*Ауыҙ асып һүҙ әйтергә ҡыйманым,*
*Кеше хәтерен һаҡлар өсөн тыуғанмын.*
*Бар михнәттәрҙе эсемә йыйғанмын,*
*Йыйғандарҙан робағиҙар ҡойғанмын.*

***

*Тура әйтеп, кешеләрҙән һүгеләм,*
*Тура әйтеп, ҡан йәшемә түгеләм.*
*Әйтмәй ҡалһам, йөҙөларымдан яҙам,*
*Бер хатаға юл ҡуйҙым, тип үкенәм.*

***

*Урамдарҙан үтәм, һүтәм йомғаҡ,*
*Йомғағына уйҙар уралған:*
*Ата улды белмәй, инә – ҡыҙҙы.*
*Ниңә донъя шулай боларған?*

***

*Ике заттың ҡушылыуы – ғәҙәти хәл.*
*Пар күгәрсендәр шикелле иң тәүге мәл.*
*Тик йыш ҡына – ниҙә икән мәсьәлә –*
*Пар күгәрсендәр кәкүккә әйләнә?*

***

*Тормош бүлгәс, була бары: алды – арты.*
*Урталыҡта баҫып тороу аптыратты.*
*Артын хурлап, алдын күрә белмәгәндәр,*
*Хәбәр һөйләп, халыҡты тик албырғатты.*

---

*Земфира Сәхипова (1940) Көйөргәҙе районы Ермолаевка ауылында тыуған. Стәрлетамаҡ педагогия институтын тамамлай. Мәскәүҙәге Милли мәктәптәр институты аспирантураһында уҡып, кандидатлыҡ диссертацияһын яҡлағандан һуң, шунда эшкә ҡала. Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған уҡытыусыһы, «Салауат Юлаев» ордены кавалеры, бихисап дәреслектәр һәм методик ҡулланмалар, балалар өсөн ике китап авторы. Мәскәүҙә йәшәй, Рәсәй Мәғариф һәм фән министрлығының Федераль белем үҫтереү институтында эшләй.*

***

*Аттан күсеп, машинаға ултырҙыҡ,*
*Беҙгә лә килде бәхет, тип ҡупырҙыҡ.*
*Бензин хаҡы ат хаҡына әйләнгәс,*
*Тимер атты саҡ-саҡ һатып ҡотолдоҡ.*

***

*Намыҫ нимә? Намыҫ бит ул –хозурлыҡ,*
*Намыҫлы тип танылыу – ҙур ғорурлыҡ.*
*Намыҫһыҙҙың күҙе – төҫһөҙ быяла,*
*Түгел хатта тәҙрәгә ҡуйырлыҡ.*

***

*Хәтерем юҡ,  тип  һуңғы ваҡыт зарланам,*
*Төш ашаһам, иртәгеһен онотам.*
*Тик ни ғәжәп: бала сағым, балтырған*
*Хәтеремдән алыҫ китмәй бер тотам?*

***

*Ояттан үлем көслө, тип йәшәлгән.*
*«Яңы тормош» ҡапыл һуҡты бәкәлдән:*
*Оятһыҙлыҡ көслө хәҙер үлемдән,*
*Уныһына ла инде яйлап күнелгән.*

***

*Метроларға төшһәм, иҫем китә*
*Йәштәрҙең ҡылығына:*
*Ул ҡосошоу, ул үбешеү –*
*Ҡарайым ҡырын ғына.*
*Улар өсөн миңә оят*
*(Һанамайҙар сүпкә лә) –*
*Был ғибрәтте нисек әле*
*Эскалатор күтәрә?*

***

*Түҙемлегә күп әләгә һынауҙар.*
*Түҙемлене әле һаман һынайҙар:*
*Арттырһалар пенсионерҙың аҡсаһын,*
*Һәммә  яҡтан ҡыҫыу яғын ҡарайҙар.*

***

*Ҡартайҙым, тип үкенмәгеҙ:*
*Ҡартлыҡ – фәһем, таяныс.*
*Ҡартлыҡ килмәй һәр кемгә лә,*
*Шуныһы бит аяныс.*

**Зөфәр САБИРЙӘНОВ**

## *Ҡоштоң пар ҡанаттары*

*Мәңге бергә татар, башҡорт –*
*Ҡоштоң пар ҡанаттары.*
*Ҡәрҙәш итте беҙҙе дуҫлыҡ,*
*Яттарға ҡаратманы.*
*Туғанлашып матур йәшәү –*
*Башҡорт, татар йолаһы.*
*Әйтерһең дә, бер әсәнең*
*Беҙ игеҙәк балаһы.*
*Ҡунаҡ булып бер-беребеҙгә*
*Йыраҡ түгел бараһы.*
*Ут күршегә кергән кеүек*
*Беҙҙең һуҡмаҡ араһы.*
*Татар, башҡорт һәр саҡ бергә:*
*Сәждәгә ятҡанда ла,*
*Килгән яуҙы кире ҡағып,*
*Йорт-илгә ҡайтҡанда ла.*
*Берҙәмлекте утлы көрәш*
*Юлдарында һынаныҡ.*
*Ғәрәсәттәр кискәндә лә*
*Һығылманыҡ, һынманыҡ.*
*Ҡоштарҙың пар ҡанаттарын*
*Дауылдар ҡайырмаһын.*
*Яҙмыш һынауҙары беҙҙе*
*Дуҫлыҡтан айырмаһын.*

## *Йәйғорҙарҙа ҡара төҫтәр юҡ*

*Был донъяла күпме төҫтәр балҡый,*
*Күҙ алдымда ағы-ҡараһы...*
*Кемдәр әйтер: аҡ төҫ – аҡ бәхеткә,*
*Ә ҡараһы – күңел яраһы.*
*Күрәсәкте төҫтәр билдәләмәй,*
*Ҡараһы ла миңә килешкән.*
*Биләүемә ҡәҙәр ҡара булған,*

---

*Зөфәр Сабирйәнов (1935) Балтас районының Иҫке Балтас ауылынан. Хәрби авиация училищеһын һәм ситтән тороп Башҡорт дәүләт университетын тамамлай. Матбуғатты үҫтереүҙәге хеҙмәттәре өсөн «Рәсәй Федерацияһының атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре», «Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре» исемдәренә лайыҡ була. Өфөлә йәшәй.*

Сабый сағым кеүек бер иштән.
Ярай әле, ҡалған ҡара көнгә
Әсәйемдең ҡара икмәге.
Бер телемен ун ҡабымға бүлеп,
Кемгә генә хәйер итмәнем.
Һуғыш осоро сабыйҙарын беләм:
Ҡара гүргә китте итәктән.
Аҙмы бөгөн иҫән ҡалғандарын
Ҡара яҙмыш йөрөтә етәкләп.
Төҫтәрҙе мин иртә айырғанмын,
Ҡаралары таныш бишектән.
Һарыуҙарым ҡайнай, аҡ-ҡараны
Айырмаған нотоҡ ишетһәм.
Бел һин, кешем, ҡара күңел менән
Йәшәүе лә – күңел яраһы.
Изге ҡиблаң гел яҡтыға булһа,
Уңала ул яҙмыш яраһы.
Ер-күгемдә ғәжәп бер мөғжизә:
Йәйғоромда ҡара төҫтәр юҡ.
Иман нуры кеүек илаһи ул,
Ҡаралтырҙай уны көстәр юҡ.
Нур-ҡөҙрәттән яратылған донъям,
Нурҙан башҡа булмай яҡтылыҡ.
Мин уларға мәңге табынырмын,
Яҡты нурҙа йөҙөм аҡлығы.

## Кил һин

Күңелемә һәр саҡ ниҙер етмәй:
Моңһоуланам көҙөн ҡоштар китһә;
Селләләрҙә ҡойон ямғыр көтәм,
Йәйге сыуаҡ танһыҡ, ҡыштар етһә:
Күңелемә һәр саҡ ниҙер етмәй.
Хафаланам, инештәрем кипһә,
Сәскәләрҙе өтһә зәһәр ҡырау,
Бәгремдән әсе елдәр үтһә.
Ниҙер етмәй миңә. Төнгө күктә
Ай ҙа яңғыҙ,
Тоям һағыштарын.

*Яңгыҙлыктың, беләм, булмай наҙы.*
*Һагыш тулы йөрәк кагыштарым.*
*Ниҙер етмәй кеүек. И, мөхәббәт,*
*Кил һин миңә нурлы яҙым булып.*
*Ғүмерлеккә кал һин йөрәгемдә*
*Мәңге балкыр һөйөү тажым булып.*
*И, мөхәббәт, кил һин наҙым булып.*

## *Кеше булмышы*

*Йәй селләлә һагынабыҙ*
*Кыштың һалкынын.*
*Картлык килһә, юкһынабыҙ*
*Йәшлек ялкынын.*
*Таң һарылһа, айлы кисте*
*Ихлас көтәбеҙ.*
*Түргә уҙһак, ак тәхеткә*
*Өмөт итәбеҙ.*
*Белмәй микән әллә кеше*
*Хәләл өлөшөн?*
*Йәшәһә лә алтын тауҙа,*
*Көтә көмөшөн.*
*Комһоҙлокта изгелек юк –*
*Тәүбәһеҙ заман.*
*Иман нурын һирпей бары*
*Изге уҙаман.*
*Хәләллектә бәхет табыу –*
*Кеше булмышы.*
*Насип булган яҙмыштарҙан*
*Юктыр уҙмышы.*

**Фәрит ЯҠШЫҒОЛОВ**

## *Рухи көсөм*

*Кем инде һин, кем инде:*
*Йырҙарың моңло-зарлы.*
*Һөйгән йәрһеҙ ҙә ҡалғанһың,*
*Йорт-ҡураларың ярлы!*

*Әммә рухым имгәнмәгән –*
*Ул үҙе бөтмәҫ байлыҡ.*
*Донъя малы – дуңғыҙ ҡаны –*
*Белмәй әйтмәгән халыҡ!*

*Киләсәгем шуға яҡты,*
*Шуның менән мин көслө.*
*Шуға, тимен, миңә бер кем*
*Ҡуялмаясаҡ "өслө".*

*Аҡты ҡаранан айырам,*
*Күңелем саф – аҡ төҫлө.*
*Килер заман: быным өсөн*
*Ҡуярҙыр миңә "бишле".*

## *Благоварым*

*Һағындыра тыуған яғым,*
*Благоварым яҡтары.*
*Ялан аяҡлы үттеләр*
*Һиндә бала саҡтарым.*

*Һарайлы, Балышлы йылғам,*
*Благоварым яҡтары.*
*Һуңғы ҡыңғырау моңонда*
*Ҡалды үҫмер саҡтарым.*

*Беренсегә ғашиҡ булдым –*
*Благоварым яҡтары.*
*Һөйөү уттарында яндым –*
*Мөхәббәт усаҡтары.*

*Ҡәҙерле лә, тәмлерәк тә*
*Благоварым икмәге.*
*Байрамдарҙа ҡунаҡ итә*
*Ҡыҙҙар тауы итәге.*

*Благоварым, тыуған яғым,*
*Һинһеҙ мин – утһыҙ күмер.*
*Сит ерҙәрҙә бер яраҡһыҙ*
*Үтмәһен ине ғүмер.*

---

*Фәрит Яҡшығолов. Благовар районының Һарайлы ауылынан. Хаҡлы ялда.*

## «Ағиҙел»гә – 90 йыл

# Нәфис әҙәбиәт:
## хыял, ысынбарлыҡ, тормош талабы

### *Дәүер көҙгөһө лә, дәүер һулышы ла — әҙәбиәт*

*(Таңсулпан Ғарипова һәм Фәрзәнә Аҡбулатова менән әңгәмә)*

***Әҙәбиәт теге йәки был идеяға битараф була аламы? Ниндәйҙер идеяға хеҙмәт итеү бер яҡлылыҡҡа алып килмәйме?***

**Фәрзәнә АҠБУЛАТОВА:**

– Әҙәмдең эске донъяһы менән эш иткәнлектән, әҙәбиәткә, ғөмүмән, битарафлыҡ хас түгелдер, тим. Битараф әҙәбиәт тә, артыҡ идеологиялаштырылған әҙәбиәт тә халыҡты ылыҡтырмай. Уҡыусы тетрәнеп тә, һыҙланып та, көлөп тә, ҡыуанып та, йәғни кисерештәр эсендә ҡайнап үҙенең күңелен һуғара. Ә көсләп тағылған идеялар әҙәбиәт менән идара итә башлаһалар, бер һүҙһеҙ уны буйһондороп, һутын һурасаҡтар. Был осраҡта үҫеш тураһында һүҙ алып барыуы ситенерәк. Социалистик реализм үткән быуат әҙәбиәтенең айырылғыһыҙ һәм төп идеяһы булды. Ҡайһы бер ҡалыптары – эшсе һәм крәҫтиәнде мотлаҡ төп ыңғай герой итеп ҡылыҡһырлау, «өлкән ағай»ҙың роленә баҫым яһау, байҙың һәм мулланың әҙәм аҡтығы һәм иҙеүсе синыфы икәнен фашлау. Шул талап үтәлмәй икән, китап нәшер ителмәйәсәк. Тоталитар режим саф сығанаҡтарҙы быуҙы, бына шуға ла күп әҫәрҙәр бөгөн актуаллеген юғалтты. Иҫкермәй торған китаптар аша беҙ әле лә үҙебеҙгә көс алабыҙ. Улар күңелдә тыуған һорауҙарға яуап бирә.

Кешегә, ныҡ баҫып йәшәр өсөн, терәк бағаналары кәрәк. Алға атлар өсөн ул ориентир эҙләй. Тормош мәғәнәһен аңлар өсөн тормошта үҙ эҙен ҡалдырған шәхестәр менән ҡыҙыҡһына, улар эшмәкәрлегә аша күңел яңғырашын табырға тырыша. Ысынлап та, көслө шәхестең идеялары йылдар үткәс тә әҫәрҙәрҙә ҡайта-ҡайта сағылыш таба. Ә бит бындай ялҡынлы идеялар беҙ йәшәгән быуаттың емеше түгел. Улар тарих төпкөлөнән килә. Яңы тигәнебеҙ ҙә ҡайһы бер һүҙҙәре үҙгәртелгән, ҡайһы бер юлдар өҫтәлгән боронғо идея булып ҡуя.

**Таңсулпан ҒАРИПОВА:**

– Идея тигәндә идеология төшөнсәһе күҙ уңында тотола торғандыр, сөнки идея әҫәргә ҡағыла, ә идеология иһә – сәйәси төшөнсә, һәр дәүләт ҡоролошоноң өҫҡормаһы. Әлбиттә, һәр әҫәр үҙ ваҡытына, үҙ халҡына, үҙ мөхитенә ҡарата ижад ителә. Мәҫәлән, Лев Толстой беҙҙең көндәрҙә йәшәһә, үҙенең бөйөк таланты менән бөтөнләй икенсе әҫәрҙәр яҙыр ине. Заман башҡа – заң башҡа. Айырым бер әҫәрҙең умыртҡа һөйәге – ул идея. Идея булмаһа, фәлсәфә юҡ. Фәлсәфәһеҙ

әҫәр – тоҙһоҙ икмәк: күрер күҙгә матур булһа ла, ашағы килмәй... Ә инде идеологияға килгәндә, совет әҙәбиәте 70 йыл буйы социалистик реализм ҡыҫаһында йәшәне. Һөҙөмтәһе һәммәбеҙгә асыҡ. Коммунистик идеологияға буйһонмаған әҫәрҙәр закондан тыш тип иғлан ителде. Әммә шул бер үк шарттарҙа дөйөм кешелек ҡиммәттәрен өҫтөн ҡуйған әҫәрҙәр ҙә яҙылды. Ауырлыҡ менән булһа ла, улар ҙа уҡыусыға етә алды. Миңә ҡалһа, йәмғиәттә намыҫ ирке юҡ икән – ундай ҡоролош бөтә. Кешелек вауҡына хеҙмәт итерҙәй әҫәрҙәр тыуҙырырға һәләтле түгел. Был йәһәттән үҙ ваҡытында Эрнест Хемингуэйҙың әйткәне фәһемле кеүек: «Донъяға яҡшы яҙыусы бирә алмай торған бер генә сәйәси система бар: ул да булһа – фашизм. Фашизм – ул бандиттар тарафынан уйлап сығарылған ялған. Ялғанларға теләмәгән яҙыусы фашистик йәмғиәттә йәшәй ҙә, ижад итә лә алмай».

**Фәнил КҮЗБӘКОВ**:

– Идеологияны кешеләрҙең йәмғиәт ағзаһы, шәхес булараҡ бер-береһенә, ысынбарлыҡҡа, башҡа халыҡтарға, илдәргә булған мөнәсәбәтен сағылдырған тотороҡло ҡараштар, идеялар системаһы тип күҙаллаһаҡ, әлегеһе мәлдә күпселек өсөн уртаҡ булырҙай бындай күренеш бар, тип әйтә алмайбыҙ. Коммунистик идеологияның кире эҙемтәләре тураһында күп әйтелде, күп яҙылды. Ниһайәт, океан аръяғындағы идеологтарҙың тиҫтәләрсә йылдар буйына бәпләгән хыялы тормошҡа ашты: совет ҡоролошона, уның идеологияһына емергес удар яһалды. Бөгөн килеп шуныһы асыҡлана: иғлан ителгән һүҙ иреклеге менән баҙар иҡтисады үҙенән-үҙе генә барлыҡ проблемаларҙы хәл итә алмай икән. Демократия өлгөһө, цивилизация алдынғыһы иҫәпләнгән Америка Ҡушма Штаттары һайлаған юл да көрсөккә килтереп терәне. Ҡыҙғаныска ҡаршы, кешелектең күпселеген ылыҡтырырҙай идеология әле табылмаған. Үткәндән һабаҡ ала ла белмәйбеҙ. Йыш ҡына йыуынты һыу менән бергә сабыйҙы ла түңкәреп ҡуябыҙ, бер сиктән икенсе сиккә һуғылабыҙ. Бигерәк тә шуныһы аяныс: социалистик реализм әҙәбиәтен тулайым юҡҡа сығарырға тырышыу тенденцияһы бөгөн дә үҙен ныҡ һиҙҙерә. Эйе, элгәре әҙәбиәт билдәле идеологияға хеҙмәт итте. Әммә шул ҡыҫалар эсендә лә «Тымыҡ Дон», «Василий Теркин», «Француз теле дәрестәре», «Оло Эйек буйында», «Ярлыҡау» кеүек йөҙҙәрсә әҫәр яҙылды бит. Һуңғы егерме йыл эсендә айырым-айырым уңыштар булһа ла, дөйөм алғанда, улар күпкә ҡайтыш. Был – тема ваҡлығында ла, геройҙарҙың үҙ артынан әйҙәрлек йә иһә ғибрәт алырлыҡ шәхес булмауында ла, художестволылыҡ кимәлендә лә, әҙәби тәнҡиттең тешһеҙлегендә лә сағыла. Баҙар идеологияһы әҙәбиәткә лә ныҡлы үтеп инде. Әҫәр геройҙары ғына түгел, әҙиптәрҙең байтағы ла тормошҡа еңел ҡараш, уйһыҙ мөнәсәбәт, бөгөнгө менән генә йәшәргә ынтылыу менән характерлана.

***Әҙәбиәт торошо, әҙәбиәт кимәле нимә менән билдәләнә? Нимәгә туранан-тура бәйле? Әҙәбиәт тарихын яҙыу, әҙәбиәт ғилемен үҫтереү, көндәлек әҙәби тәнҡит ни дәрәжәлә актуаль?***

**Фәрзәнә АҠБУЛАТОВА:**

– Әҙәбиәт – мотлаҡ ваҡыт иләге аша үтә торған эшмәкәрлек емеше. Һәр дәүерҙең дә һүҙ сәнғәтен, ғәҙәттә, бер нисә исем аша ғына баһалайҙар. Ҡалғандарының исеме онотолоуға дусар була, тимәк, әҙәбиәт кимәлен, торошон ижадсының таланты билдәләй. Теге йәки был яҙыусы үҙ дәүере өсөн ниндәй һүҙ әйткән, типик ваҡиғаны, геройҙы ниндәй образ аша биргән, уның үҙ замандаштарына биргән

яңылығы һәм асышы нимәнән ғибәрәт тә ниндәй әхлаҡи принциптарҙы алға һөргән? Йәғни үҙ асыштары менән быуатының һүҙ сәнғәтенә яңы биҙәк төшөргән авторҙарҙың ижады килер быуындарҙа ла ҡыҙыҡһыныу уятасаҡ.

Беҙ совет осоро әҙәбиәте тураһында бик күп һөйләй алабыҙ, беҙҙе уҡытҡан, үҫтергән дәүер булған өсөн генә түгел, әлбиттә. Әҙәбиәт үҫеше өсөн совет йылдарында, ысынлап та, бик күп нәмә эшләнде, ижадсыларҙың өр-яңы быуыны ҡурпып-ҡалҡып сыҡты, әҙәбиәттең тәрбиәүи әһәмиәте көслө булды, ижадты үҫтереүҙең яңы юлдары асылды. Советтар Союзы әҙәбиәте, Рәсәй батшалығынан айырмалы, милли республикаларҙан сыҡҡан әҙиптәр тауышы менән байытылды. Улар Рәсәйҙән ситтә лә танылыу алып, «дөйөм совет әҙәбиәте» тигән һүҙбәйләнеште нығытты. Әммә миллилек юйылманы. Ҡырғыҙ әҙәбиәте, тибеҙ икән, Сыңғыҙ Айытматовтың әҫәрҙәре күҙ алдына килә; Дағстан, тиһәк – Рәсүл Ғамзатов. Башҡорт совет әҙәбиәтен Мостай Кәримһеҙ, Зәйнәб Биишеваһыҙ күҙ алдына килтереп булмай. Ҡаҙаҡта Абайҙың юлы бөйөк. Әлбиттә, беҙ атаған халыҡтарҙа улар юғарылығында яҙған бүтән ҡәләм оҫалары ла барҙыр. Тик әҫәрҙәре тәржемә аша беҙгә килеп етмәгәс, улар тураһында һүҙ йөрөтә алмайбыҙ. XX быуат әҙәбиәте Советтар Союзында күп милләтлелектең нимә икәнен әҙәбиәт өлгөһөндә бик асыҡ күрһәтте. Тимәк, һүҙ сәнғәтенең үҫешендә дәүләттең роле һәлмәк. Инде килеп һүҙ сәнғәте һайығыуға табан бармаймы, ни өсөн беҙ бөгөн Рәсәй әҙәбиәтен балҡытыр шундай яңы исемдәрҙе атап, кинәнеп һөйләй алмайбыҙ? Бындайыраҡ һорауҙарҙы хәҙер йыш ҡына ишетергә тура килә.

Ә, дөйөм алғанда, әҙәбиәт халыҡтың рухи, аҡыл кимәлен билдәләй. Үҙе лә, бер һүҙһеҙ, ошо төшөнсәләр аша билдәләнә. Әҙәбиәт тарихын яҙыу халыҡтың рухи сығанағына мөрәжәғәт итеүгә бәрәбәр, унда «тарих» тигән һүҙ бар бит әле. Ағас тамыр йәйеп кенә үҫә-ныҒына, хатта тамыр ғына ла аҙ, уны һуғарырға шифалы ямғыры ла кәрәк. Тарих өсөн әҙәбиәт тә ана шул ямғыр тамсыларына бәрәбәр. Ҡараш киңлеген, күҙаллауҙы, төплө анализ, һығымталар яһауҙы һәм дәлилдәр менән нығытыуҙы талап иткән әҙәбиәт ғилеменә һәр кем тотоноп китә алмай. Беҙҙә әҙәби торошҡа күҙәтеүҙәр яһала, ләкин улар башлыса һүрәтләү, маҡтау, сюжетты һөйләп биреүгә ҡоролған була. Урыҫ әҙәбиәтенең үҫеше тарихына күҙ һалһаҡ, унда беҙ Белинский, Добролюбов һымаҡ хеҙмәттәре бөгөн дә әһәмиәтен юғалтмаған мәртәбәле ғалимдар менән осрашасаҡбыҙ. Үҙ дәүере менән бәхәскә ингән, ҡыйыулыҡтары, ҡалыплашмаған һүҙ әйткәндәре өсөн уларға замандаштарының мөнәсәбәте лә бер төрлө генә булмаған. Хатта ҡайһы бер фекерҙәре сәйәси яҡтан бик ҡурҡыныс тип ҡабул ителгән. Йәғни, әҙәбиәткә таянып, улар әҙәби һүҙҙән дә көслөрәк фекерҙе ишеттергәндәр. Пушкин да рецензиялар яҙған, әҙәбиәт ғилемен үҫтереү йәһәтенән йөкмәткеле һүҙен әйткән.

Ә бына тәнҡиткә килгәндә, ул беҙҙә, ғәҙәттә, бер яҡлы ғына ҡабул ителә. Тәнҡитсе күҙ алдыбыҙға теге йәки был әҫәрҙе әрләүсе, битәрләүсе-бөтөрөүсе һымаҡ ҡына килеп баҫмаймы икән? Әгәр ҙә берәйһен «тәнҡитсе» тип таныштырһалар, бер генә яҙыусы ла уға һоҡланыу һәм мөхәббәт менән баҡмаҫ ине… Тәнҡитсе тигәнебеҙ ҙә бит әҫәрҙең мотлаҡ уңышлы яҡтарына туҡтала, шунан һуң ғына етешһеҙлектәре тураһында һүҙ ҡуҙғата ла баһа. Шулай ҙа… Шулай ҙа бөгөн тәнҡиттең иң уңышлы сараһы – әҫәрҙе әҙәби секцияла тикшереп, бөтөн фекерҙәрҙе шунда авторға әйтеү, тием. Сөнки автор матбуғат сараһында баҫылған тәнҡит мәҡәләһен бик ауыр кисерә, уны тәнҡит тип түгел, ә объектив булмаған фекер, яманлау, фашлау һымағыраҡ ҡабул итә. Ниндәй генә юлдар эҙләһәк тә, бер нәмә асыҡ: әҙәбиәт тәнҡитһеҙ үҫешмәй, ул барыбер баһалы һүҙгә

мохтаж булып ҡаласаҡ. Юғиһә, әҙәби талап тигән нәмә юҡҡа сығып, бөтәһе лә үҙағышына ғына ҡуйылһа, беҙ иллюзия менән йәшәп китер инек. Тәнҡитсенең дәлилләгән бер-ике генә һүҙе лә ана шундайыраҡ тенденциянан арынырға, һалҡын аҡыллылыҡҡа, талапсанлыҡҡа йүнәлеш биреүе ихтимал. Көндәлек әҙәби тәнҡитте әҙәбиәт тарихын, ғилемен үҫтереүҙең бер тармағы тип ҡарағанда, ул актуаль булып ҡаласаҡ. «Әҙәбиәт тураһында бөгөн ниндәйерәк фекерҙәр яңғырай?» тигән һорауҙы бирмәгән бер генә иждадсы ла юҡтыр. Әҙәбиәт ғилеме бөгөн тәрән аналитик фекерле ғалимдарға мохтаж.

**Фәнил КҮЗБӘКОВ:**

– Бөгөнгө әҙәби процесты аңлау-аңлатыуҙа, әлбиттә, көндәлек әҙәби тәнҡиттең әһәмиәте бик ҙур. Ваҡыт үтеү менән ул да әҙәбиәт тарихы өсөн фактҡа әүереләсәк, әҙәбиәт ғилемен үҫтерешеүгә күпмелер булышлыҡ итәсәк. Әҙәби процесҡа иһә уның йоғонтоһо төрлө осорҙа төрлөсә. Хәл иткес роль уйнаған мәлдәре лә булған (Виссарион Белинский заманын иҫкә төшөрөү генә лә етә). Бөгөн ул әҙәби процестың айырылғыһыҙ бер өлөшө булһа ла, ҙур эш башҡара, тип әйтеүе ҡыйын. Ҡыҫҡаһы, дәүеребеҙҙең көҙгөһө лә, һулышы ла булған әҙәбиәт – йәмғиәттең рухи торошон асыҡлаусы ла, формалаштырыусы ла күренеш ул. Тап ошонан сығып әҙәбиәткә ниндәйҙер талаптар ҡуйырға, йәмғиәттең хәлен билдәләргә мөмкин.

Һинең, Фәрзәнә, «объектив әҙәби тәнҡитте ижади берекмәнең секцияһында уңышлы ҡулланып булыр ине» тиеүең бик ҡыҙыҡлы.

Әлбиттә, унда ла «Һин миңә теймә, мин һиңә теймәйем» принцибы үҙен һиҙҙерәсәк, әммә киң массаға сығармайынса һөйләшеп ҡарау зыянға булмаҫ ине. «Аңлағанға – ишара» тигәндәй, рухиәтебеҙ мәнфәғәттәренән сығып эш иткәндә, алымдарҙың ҡайһыһы ла ыңғай һөҙөмтә бирер ине. Шулай ҙа, үҙ ҡаҙаныбыҙҙа ғына ҡайнамайыҡ тиһәк, принципиаль мәсьәләләрҙе халыҡҡа еткермәйенсә һис кенә лә ярамаҫ. Һеркәһе һыу күтәрмәҫтәрҙең хәленә инәйек тип, дөйөм әҙәби процесты күҙ уңынан ысҡындырмайыҡ.

***Тулыһынса тиерлек алдыҡҡа ҡорола барған донъяла, ысын ҡиммәттәр менән ялғандары урын алышҡан бер заманда, саф тойғоларҙы яһалмалыҡ ҡыҫырыҡлап сығарғанда әҙәбиәт ни эшләй ала? Ыңғай һөҙөмтәләр бармы? Булһа, уларҙы нисек билдәләргә? Үлсәмдәр нимәнән ғибәрәт?***

**Фәрзәнә АҠБУЛАТОВА:**

– Әҙәбиәт – уҡыусы менән тормош, йәшәйеш, эске донъя тураһында үҙенсәлекле һөйләшеү, сөнки һәр әҫәрҙә яҙыусы үҙенең эске донъяһын аса. Ә бына тасуирлағаныңды уҡыусың һин теләгәнсә аңлаймы ла һин теләгәнсә күрәме – быныһы бүтән мәсьәлә. Иждадсы бер төрлө уйлап яҙа, ә уҡыған кеше уны үҙенсә ҡабул итә, бөтөнләй икенсе рәүештә күрә. Ҡай саҡ берәй персонаж тураһында уҡыусы фекерен ишеткәндән һуң: «Ысынлап та шуны әйтергә иткәйнемме, ысынлап та шулай һүрәтләгәйнемме ни?» – тип аптырап та китәһең. Хатта ки, үҙең өсөн асыш яһайһың. Ни өсөн мин фәһем итеп күрһәтергә теләгән кире персонаж унда ыңғай тойғо уятҡан да, ни өсөн ыңғай геройымдың ынтылышын ул бүтәнсәрәк аңлаған? Әҙәбиәт уйҙырма менән ысынбарлыҡ араһында тора. Унда ваҡиғалар әйләнеше тиҙерәк тә, хис-тойғолар йыһаны ла сағыуыраҡ. Былар бөтәһе лә әҙәбиәттең кеше күңеленә тәьҫир итеүсе иң «матур» ҡорал булыуы тураһында һөйләй. Шуға ла ул кеше күңелен һуғара, хатта дауалай ҙа. Тормоштан әҙәбиәт юғарыраҡ торорға тейеш. Беҙ бит тормоштоң һынау икәнен бик яҡшы беләбеҙ. Был турала Ҡөрьән-Кәримдә күп тапҡырҙар әйтелә. Әҙәбиәттең бөйөк

бурысы – йәнгә тәьҫир итеү, юҡҡамы ни ул «әҙәп» һүҙе менән тамырлана. Ялғанлыҡ, ырыялыҡ, монафиҡлыҡ шулай уҡ кешелек йәшәүенән айырылғыһыҙ. Әҙәм балаһы үҙ юлын үҙе һайлай. Еңелерек юлдан барырғамы, әллә ҡаршылыҡтарға ҡаршы күкрәкте ҡуйырғамы? Күктә осоусы ҡош тубына күҙ һалһаҡ, иң көслө ҡоштоң ғына һауа йыртып алдан барғанын күрербеҙ. Тормошта ла шулай түгелме ни? Шуға ярашлы, һәр нәмәнең үлсәме лә бар. Һәр кемдең үҙ өлөшө. Ҡыйынлыҡты кисергәнә өсөн – үҙ әжере. Хыянатты ғәфү иткәнә өсөн – үҙ әжере. Сабырлыҡтың – үҙ әжере. Ә әҙәбиәт әҙәм балаһына тормош юлы һайларға йәки намыҫ-иман төшөнсәләренә табан йөҙөн борорға булышлыҡ итә ала.

Уның рухландырыу сығанағы икәнлеге лә күптәргә мәғлүм. Салауаттар, Корчагиндар, Маресьевтар тураһында әҙәбиәт тетрәндергес итеп һөйләне, был геройҙар беҙ белгән һәм белмәгән кешеләргә алға барырға ярҙам итте. Киләсәктә лә шулай булыр, әҙәбиәт күңелде сафландырыр. Танылған яҙыусыбыҙ Барый Ноғоманов спорт аша үҙен донъяға таныттырған башҡорт улы Ирек Зарипов тураһында бынамын тигән әҫәр яҙҙы: үҙ ваҡытында, үҙ мәлендә. Юғиһә, шулай ҙа була, ҡай саҡ үҙебеҙҙең ҡан-ҡәрҙәшебеҙҙең ҡаһарманлығы тураһында икенсе милләт вәкилдәре яҙғас ҡына, уны белә-таный башлайбыҙ.

Үҙгәртеп ҡороуҙар Рәсәй әҙәбиәтендәге таяныс-ҡиммәттәрҙе ҡаҡшатты. Яңғыҙлыҡ темаһының һиҙелерлек урын алыуын да шунан күрәм. Яңғыҙлыҡ та бер төрлө генә түгел, ә ике халәттә: меҫкен яңғыҙлыҡ һәм «кәнәғәтһеҙлек» эсенә йәшеренеп, үҙенә айырым мөнәсәбәт талап иткән эго-яңғыҙлыҡ һымаҡ аңлашыла. Тәүгеһе – тормошто башлыса ҡара яҡтан ғына күргән, унан дүнгән, унда үҙен таба алмаған, үҙ-үҙенә ышанысын юғалтҡан геройҙың сараһыҙ яңғыҙлығы. Икенсеһе үҙенә тиңдәр таба алмаған бөйөк яңғыҙлыҡ һымаҡ күҙаллана. Образдар эсендә йәшәргә була, ул һине хатта реаллектән тағы ла алыҫҡараҡ алып китеп аҙаштырыуы мөмкин. Кемдер бер үҙе ҡояшты ҡоса ала, кемдер – үҙе бейеклек. Матди яҡтан етешкән, алға киткән көнбайыш илдәрендә кеше яңғыҙлыҡ сиренә дусар, тиҙәр. Уларҙың барыһын да рухландырғы, йыуатҡы килә. Исламда яңғыҙлыҡ төшөнсәһе юҡ. Бер Аллаһҡа ғына хас сифат ул.

Эйе, хәҙер Ислам ҡиммәттәре тураһында һүҙ алып бара башланыҡ. Ул беҙгә йәшәү мәғәнәһе тураһында уйланырға ныҡ ярҙам итә. Пәйғәмбәребеҙ тоғро дуҫы Әбүбәкер менән, мөшриктәр эҙәрлекләүенән ҡасып, Саур тигән тауҙа мәмерйәгә инеп йәшенәләр. Мөшриктәр бөтөнләй яҡын килгәс, Рәсүлдең юлдашы: «Эй, Аллаһ Рәсүле! Береһе генә өҫкә үрләһә лә, улар беҙҙе күрәсәктәр», – ти. Рәсүл яуап бирә: «Өсөнсөһө Аллаһ булғанда, нишләп һин икәүһе тураһында ғына уйлайһың?»

«...(Аллаһ уға ярҙам итте) Мөшриктәр ҡыуған саҡта ул бит уны ҡотҡарғайны инде, һәм улар икәү генә ине. Икеһе лә мәмерйәгә инеп йәшеренделәр, һәм үҙенең юлдашына ул әйтте: «Һин ҡайғырма, Аллаһ беҙҙең менән!» (Ҡөрьән, 9:40).

Исемдәре онотолоуға дусар ителеп, тиҫтә йылдар телгә алынмаған оло дин әһелдәре тураһында яҙмаларҙың йышыраҡ күренә башлауы шатландыра. Ҙур эштәр эшләгән шәхестәребеҙҙе художестволы һүрәтләү аша биреү шулай уҡ иманға, әхлаҡи ҡиммәттәргә халыҡтың иғтибары артыуына булышлыҡ итә. 90-сы йылдарҙан «коррупция» тигән һүҙ ҡулланылышҡа инеп китте. Ул Рәсәй йәмғиәте өсөн элек тә үтә ят күренеш булмаған, ләкин шул дәрәжәлә тамыр йәймәгәйне. Киң масштабтағы енәйәттәрҙе юғары даирәләрҙә ултырған вазифалы кешеләрҙең йәки олигархтарҙың исемдәре менән бәйләнеләр. Коррупция, ришәүәтселек менән көрәш дауам иткәндәй, ләкин Рәсәй алда һанап үтелгән насар нәмәләр буйынса һаман да донъяла тәүге урындарҙы биләй. Бөгөнгө йәш

быуынды, ҡапма-ҡаршылыҡлы ҡараштар быуыны, тип әйтергә була: кемдәрелер тамаҡ туйҙырыр өсөн анһат кәсеп эҙләй, енәйәткә бара, бәғзеләре был мәсьәләгә тик «хәләл» менән «харам» үлсәме аша ғына баға. Ҡыҙыҡ донъяла йәшәйбеҙ. Рәсәйгә лә бер төрлө генә ҡарап булмай. Мосолман республикаларында, мәҫәлән, Ислам, уның ҡиммәттәре менән ҡыҙыҡһыныу көсәйгәне һиҙелә. Артабан нисек булыр… Һәр хәлдә, кеше робот та, ҙур аппараттың шөрөбө лә, технократия ҡоло ла түгел. Рух, йән тигән төшөнсәләргә иғтибар артыр, тип уйлайым.

Әҙәбиәттең бер үҙенсәлеге – ижадсы ваҡыттар, дәүерҙәр менән һөйләшә ала. Шулай булғас, ул төрлө осор кешеләренең күңелен бәйләүсе түгелме? Беҙ Румиҙы уҡып, донъяны бөгөн яңынан асабыҙ икән, киләсәк быуындарҙың да шуны эшләйәсәгенә шик юҡ. Эйе, әҙәбиәт – ижадсының күңел үлсәме. Ниндәй дөрөҫлөктө еткерә, ниндәй идеяны алға һөрә ул?

Башҡорт прозаһында бөгөнгө заманыбыҙ, уның кешеләре тураһында күберәк уҡығы килә. Үткән ваҡиғалар ҡыҙыҡһыныу уята, ләкин яҙыусы ҡай саҡ үҙ ваҡытынан алдараҡ та барһын ине. Мәжит Ғафури әйткәнсә:

*Бер аҙым алъа баҫам да әйләнәм мин артыма,*
*Ҡайҙа баҫҡандар икән тип, күҙ һаламын халҡыма.*

**Фәнил КҮЗБӘКОВ:**

– Әҙәм балаһы, башлыса, хис-тойғолар ҡоло булғанға үҙ заманының проблемаларын ҡуйыртыбыраҡ, үҙенең шәхсән күҙлеге аша, йәғни субъектив рәүештә ҡабул итә. Ләкин, нисек кенә булмаһын, әҙәбиәт – хыял иле, үҙендә рухи ҡиммәттәрҙе һаҡлап ҡалырға бурыслы. Алдынғы әҙәбиәт, образлы һүҙ тылсымы ҡан замандарҙан алып, кешеләге кешелелекте күрһәтергә ынтылған, тап шул нигеҙҙә ул бәндәнең аңлы йән эйәһе булараҡ ҡына түгел, ә юғары рух илсеһе сифатында ла камиллаша барыуына булышлыҡ иткән. Гомерҙың «Илиада»һында Ахилл башта уйһыҙ үс алыусы, ҡон ҡайтарыусы итеп күҙаллана. Әммә улын юғалтҡан атай (дошман!) кисерештәрен күргәндән, йөрәге аша үткәрә алғандан һуң ул, тетрәнеп, үҙендә кешелек сифаттары юғалып бөтмәүен асып һала. Урал батыр ҙа үҙенең ҡаһарманлыҡтары менән генә түгел, ә Шүлгәндең яуызлыҡтарын ғәфү итә алыуы, кисерә белеүе, уға изгелек юлын һайларға һәр саҡ мөмкинлек ҡалдырыуы, мәрхәмәтле, кешелекле булыуы менән тағы ла бөйөгөрәк. Ҡараңғылыҡта ҡалған кешеләргә юл күрһәтеү өсөн йөрәген йолҡоп алған Данко һуң! Улар, Данко һымаҡтар, янған йөрәген тапап үтәсәктәрен белгән халәттә лә үҙ ниәттәренән кире ҡайтмай. Сөнки кемгәләр ошондай ролде үтәргә кәрәк. Уның батырлығы был ауыр мәлдән сығыу өсөн генә түгел, кешелек хаҡына фиҙакәрлек өлгөһө булыу өсөн дә бик мөһим. Шунһыҙ Кешене, ундағы юғары рух яралғыһын һаҡлап ҡалып булмаясаҡ.

Әҙәбиәт тарихы күрһәтеүенсә, әҙипмен тигән әҙип, урамда ниндәй дәүер булыуына ҡарамаҫтан, үҙ миссияһына тоғролоҡ һаҡлаған, рух илсеһе булып сығыш яһаған.

***Баҙар иҡтисады шарттарында әҙипкә хөкүмәт тарафынан ярҙамъа өмөтләнергә кәрәкме? Бындай ярҙам ижад иреклеген сикләмәйме?***

**Фәрзәнә АҠБУЛАТОВА:**

– Көнбайышта яҙыусы үҙенең гонорарына йәшәй ала, ә быны беҙҙә күҙ алдына килтереүе лә ҡыйын. Хөкүмәт рухи өлкәгә иғтибар бирергә тейешле, ошо ҡиммәттәрҙе пропагандалаусы, үҫтереүсе, һаҡлаусыларҙы иғтибарҙан

ситтә ҡалдырырға тейеш түгел. Әҙәбиәткә ҡағылмаған һәр төрлө саралар өсөн әллә күпме миллионлап аҡса сарыф ителә. Әҙәбиәткә бындай ярҙам булғаны бармы икән? Мәскәү нәшриәттәре ҡайһы бер авторҙар менән уңышлы эшләй, улар ҙа – килем алыу маҡсатында – детектив, эзотерик, мистик әҫәрҙәргә баҫым яһай, антигерой темаһы ҙур ғына урын алып тора. Ләкин уларҙы зауыҡ тәрбиәләүсе, рухты сафландырыусы нәфис әҙәбиәт тип атап булмай бит.

«Баҙар иҡтисады шарттары» тигән һүҙгә таянып, хөкүмәт рухиәт донъяһын тотошлайы менән килем, алыш-биреш өлкәһенә ҡайтарып ҡалдырмаҫ, тип уйлайым. Мәҙәни өлкә хөкүмәт ярҙамына һәр саҡ мохтаж. Ни ҡәҙәр осонғанда ла, патриотик тойғо һәм юғары идея менән әллә ниндәй шәп сара ла уҙғарып булмай хәҙерге көндә… Матди ярҙам алмаған әҙип шул хәтлем ижад иркенлегендә йәшәйме ни! Һис кенә лә улай түгел. Ә инде һүҙ, ижад иркен төрлөсә ҡыҫырға була. Аҡсаһыҙ ҙа. Чиновниктарға ғына ҡарайыҡ әле: ришүәт алмаһындар, ғәҙеллек һағында торһондар өсөн уларға нисә тапҡыр эш хаҡтарын арттырҙылар икән? Шул уҡ ғәҙеллек принцибы бүтән тармаҡтарға ла ҡағылырға тейештер бит. Ләкин, үҙегеҙ беләһегеҙ, «донъя көрсөгө», «ил көрсөгө» һымағыраҡ аңлайышһыҙ дошман барлыҡҡа килде. Күп кенә уңышһыҙлыҡтарҙы хәҙер шул тотоп һәм күреп булмаҫ дошманға япһара ла ҡуялар.

**Таңсулпан ҒАРИПОВА:**

– «Баҙар иҡтисады» тигәндән, ғөмүмән алғанда, бөтә донъя ошо иҡтисадта йәшәй. Күпселек илдәрҙә яҙыусылар ошонан башҡа формацияны белмәй ҙә. Баҙар иҡтисады яҙыусынан да әүҙемлек, ҙур талант эйәһе булыуҙы талап итәлер. Әммә уларҙа хөкүмәт менән яҙыусы бәйләнеше, дөрөҫөрәге, ижадсы менән нәшриәт араһындағы бәйләнеш контракт аша хәл ителә. Шарт: китап уҡымлы булырға тейеш. Бының, яҡшы яғы булған кеүек, насар яғы ла юҡ түгелдер – төрлө зауыҡлы уҡыусы бар бит. Юғары интеллектҡа эйә уҡыусыларҙың күпселекте тәшкил итмәүе лә бар. Үҙ заманында Рәсәй ни өсөн донъяға бөйөк яҙыусылар биргән? Сөнки улар, бай синыф вәкилдәре булараҡ, дәүләт, нәшриәт, сәйәсәт ҡыҫымынан башлыса азат булған. Ә бына бөгөн, беҙҙең заманда, аҙ һанлы халыҡ ижадсыларына, әлбиттә, хөкүмәт ярҙамы кәрәк. Мәҙәниәт, әҙәбиәт – халыҡтың йөрәге. Йөрәк тибеүҙән туҡтаһа, ил менән ни булыр? Ярҙам булһа ғына, талант сәскә ата. Һәм мин, бындай ярҙам ижадсыны сикләйҙер, тип уйламайым. Меценатлыҡ эше киң үҫеш алған йәмғиәттәр исемдәре бөтә донъяға билдәле художниктар биргән. Бөйөк гуманизм идеяларын алға һөргән яҙыусының ижад емеше – һәр заман һәм ҡоролош уҡыусылары өсөн танһыҡ күренеш.

Таланттарҙың ҡәҙерен ҡәбере генә күрмәһен тиһәк, талантты ваҡытында аңларға һәм баһаларға кәрәк.

**Фәнил КҮЗБӘКОВ:**

– Тормош кешене төрлөсә һынай, шул иҫәптән әҙипте лә. Улай ғына ла түгел – тулайым йәмғиәт тә, хөкүмәт тә үтә бындай һынауҙы. Баҙар иҡтисады шарттарына беҙ, этелеп-төртөлөп, яраҡлашырға мәжбүрбеҙ. Хөкүмәт, власть иһә ошоға тиклем башлыса Совет осоронда тупланған байлыҡты таратыу, бүлешеү менән генә мәшғүл булды. Мәктәп, торлаҡ, юлдар һалынһа ла, яңы сәнәғәт объекттары, ауыл хужалығы ҡоролмалары төҙөлмәне тиерлек. Йәғни халыҡтың йәшәү кимәлен күтәреү өсөн иң кәрәклеһе, артабанғы күтәрелеш өсөн нигеҙ булырға тейешлеһе эшләнмәне.

Рәсәй Фәндәр акдемияһының Иҡтисад институты директоры Р. Гринберг белдереүенсә, Рәсәйгә баҙар шарттары кире ҡайтыу, йәмғиәтте демократлаштырырға маташыу башланыу менән, беҙҙә йәмғиәткә ҡаршы булған хөкүмәт барлыҡҡа килде. Был фекер менән академик Г. Осипов та килешә. Ул Рәсәйҙә хоҡуҡи дәүләттең юҡҡа сығыуын, йәмғиәттең серегән байҙарға һәм үтә фәҡирҙәргә бүлгеләнеүен һыҙыҡ өҫтөнә ала. (Миллиардерҙар һаны буйынса Рәсәй донъяла дүртенсе урынды биләй. Ә бит сит ил миллиардерҙары, ҡағиҙә рәүешендә, кәм тигәндә биш-алты быуын эшмәкәрлеге иҫәбенә барлыҡҡа килһә, Рәсәйҙә улар алдыҡ юл менән хосусилаштырыу нигеҙендә ике-өс йыл эсендә үрсене.)

Тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, бөгөн Рәсәй халҡының иң бай ун проценты менән иң ярлы ун процентының килеме 40:1 тигеҙләмәһенә тиң (өс-дүрт йыл элгәре генә ул 18:1 ине). Йәғни ун процент иң байҙарҙың табышы ун процент иң ярлыларҙыҡынан ҡырҡ тапҡырға артығыраҡ. 1985 йылда был күрһәткес 5,3:1 ине. Кешелек тарихы иһә шуны иҫкәртә: был нисбәт 10:1-ҙән артып китһә, йәмғиәттә антагонистик тетрәнеүҙәр ҡотолғоһоҙ. Сирек быуат буйы халыҡ ошоноң өсөн иң ҡаты һынауҙарға дусар ителдеме ни?! Айыҡ аҡыллы аналитиктар иҫәпләүенсә, йәмғиәттә өмөтһөҙлөк көсәйә бара.

Быңдай хөкүмәттән һиҙелерлек ярҙамға иҫәп тотоп буламы? Әҙиптәрҙең, журналистарҙың гонорары арттымы? Китап сығарыу киңәйҙеме? Ижад кешеләренең йәшәү шарттарын яҡшыртыу буйынса аныҡ ҡына саралар күрелдеме?

Халыҡ өсөн эшләгән хөкүмәт үҙенең ысынында ла халыҡ өсөн бөгөн иң кәрәге менән шөғөлләнеүен халыҡҡа аңлайышлы телдә еткереү өсөн тәү сиратта матбуғатты, әҙәбиәтте тулыһынса файҙаланырға тейеш ине бит. Ғәмәлдә тейешенсә файҙалана алмай икән, тимәк, был мөмкинлекте ҡуллана белмәй йә власть өсөн быны кәрәге юҡ.

Хоҙай осҡоно ҡағылған ижад кешеһенә иһә иң мөһиме – эшенең тейешенсә баһаланыуы ҡиммәт. Әҙиптәрҙең күпселеге өсөн хөкүмәт тарафынан күрһәтелгән ярҙам – яңы ижади үрҙәргә дәртләндереү сараһы ғына ул.

***Әҙәбиәт менән сәйәсәт, әҙәбиәт менән фәлсәфә, әҙәбиәт менән халыҡ ниндәй мөнәсәбәттә?***

**Фәрзәнә АҠБУЛАТОВА:**

– Әҙәбиәт менән сәйәсәт – тоташмаған, ә ҡушлаш барған ике айырым донъя, тип ҡарау дөрөҫ үк булмаҫ ине. Ысын әҙәбиәт эске донъяның формалашыуына булышлыҡ итә, тимәк, сәйәсәткә лә йоғонто яһамай ҡалмай. Хәл иткес түгел, әлбиттә. Ә бына сәйәсәттең әҙәбиәтте үҙ ҡыҫымында тоторға тырышыуы тураһында әллә күпме һөйләргә була. Бөгөнгө көндә урыҫ әҙәбиәтенең «титандары» тип йөрөтөлгәндәре араһында ла сәйәси эҙәрлекләүгә тарығандары, хөкөм ителгәндәре байтаҡ булған. Пушкиндың хакимдарға арналған шиғырҙары, фашлау һүҙҙәре, күтәргән идеялары әле килеп иҫкергәнме ни? Һис кенә лә юҡ. Аҡмулланы, Бабичты уҡып беҙ хәҙер ҙә һиҫкәнәбеҙ. Һүҙ маһирҙары һөргөнгә ебәрелгән, дарға ла аҫылған. Башҡорт тарихына күҙ һалайыҡ, ысын оҫта ниндәй генә фажиғәләргә дусар булмаған. Кинәйәләп әйткәндә, һәр сәйәсәткә бәйле «Буранбайҙың яҙған хаттары» өҙөлмәй дауам иткән.

Шәреҡ шиғриәте, ғөмүмән, фәлсәфәгә нигеҙләнә. Үҙен һәр яҡлап алдынғы һанаған тәкәббер Көнбайыш та шәреҡ шағирҙарын «хәҡиҡәт иленә индереүселәр» тип атарға мәжбүр булған, юғары шиғриәтте унда, бер һүҙһеҙ, таныйҙар,

баһалайҙар, тием. Шәреҡтең ғалимдары ла шағир ҙа, фәйләсуф та булған. Фараби, Әбү Ғәли Сина, Руми һ.б. – хикмәт эйәләре, улар әйтеп ҡалдырған ҺҮҘ бөгөнгө фәлсәфәүи мәсьәләләрҙе хәл итеүҙә лә ярҙамсы көс һәм сығанаҡ булыуҙан туҡтағаны юҡ.

Элек-электән шиғриәтебеҙҙә фәлсәфә төп урынды биләгән. Ғөмүмән, беҙҙең халыҡ философ ҡарашлы булыуы менән айырылып тора. Был традиция өҙөлә күрмәһен. Рухи мираҫыбыҙға күҙ һалайыҡ әле. Эпос, легенда, әкиәт-ҡарһүҙ, ҡобайыр – осо-ҡырыйына сыҡҡыһыҙ рухиәт донъяһы. Был тиклем хазиналыҡ тағы ла ҡайһы халыҡта бар икән әле? Телдең байлығы һүрәтләүҙә, ҡылыҡһырлауҙа ныҡ сағыла. Әллә ниндәй нескәлектәргә, тәрәнлектәргә төшөп китергә була. Беҙгә яҡын, ҡәрҙәш иҫәпләнгән бүтән төрки телле халыҡтарҙа улар хатта юҡ та. Иң-иң ябай ҡулланыштағы «таҡа аптыратты», «шыпа ашамай», «шөйлә бушты һөйләй» тигәнде тәржемә итеп ҡара әле. Бынан тыш та әлеге һүҙҙәрҙең әллә нисә вариантын табырға була. Үкенеслеһе шул: телебеҙ урыҫ теле йоғонтоһонда һайыға бара. Йәш быуындың яҙғандарын уҡығанда, уларҙың урыҫса уйлауы-фекерләүе тойола. Башҡорт телендә камил яҙыр өсөн бик күп ваҡыт талап ителәсәк. Беҙ бөтәбеҙ ҙә ошо юлды үттек һәм үтәбеҙ, тиһәм, дөрөҫөрәк булыр. Тел – үткән дә, бөгөнгө лә, киләсәк тә. Етмәһә, хәҙер телдең ҡулланыш даирәһен тарайтыу өсөн Үҙәктә ҡайһы бер саралар ҙа эшләнә. «Телдең тәмен белеп һөйләй» тибеҙ бит телде яҡшы белгән кеше тураһында. Ошо тәмде юғалтмаҫҡа ине!

Әҙәби әҫәрҙәр нәшер ителеп тора. Күп төрлөлөк араһынан, әлбиттә, уҡыусы һайлап уҡырлыҡ әҫәрҙәр таба. Уҡый, эҙләй, яһалмалылыҡты ла тиҙ тойоп алыусан. Әҫәр ниндәйҙер әҙер ҡалыпҡа һалынған булһа, уҡыған кеше уның аҙағы нисек тамамланасағын белеп ултырһа ла, әлбиттә, әллә күпме ваҡытымды бушҡа әрәм иттем, тип үкенесен белдерәсәк. Бындай китап әҙәбиәттән ситләштерә генә. Әҙәбиәттә тормош дөрөҫлөгө һәм тормошто раҫлаған көс булырға тейеш. Рәмил Ҡол-Дәүләт, Рәйес Түләктең яҙғандары ни ҡәҙәр көнүҙәк ине. Бөгөнгө тормошта барған процестарҙы әҙәби күҙлек, әҙәби иләк аша бик үткәрмәйбеҙ йәки бик һаҡ ҡына үткәрәбеҙ. Беҙҙә барыбер һағайыумы, баҙап ҡалыумы бар. Шул уҡ ваҡытта күңел халәтен, кисерештәр донъяһын сағылдырған бик матур әҫәрҙәр ижад ителә. Тарихыбыҙға дөрөҫ баһа бирергә тырышыу ҡыуандыра. Үткәндәрҙең күпме билгеһеҙ биттәре асылды. Биттәр асыла һәм күҙебеҙ ҙә асыла бара, тип өҫтәйек.

Халыҡтың әҙәбиәткә мөнәсәбәте яҡшы. Һүҙ сәнғәтенә борондан килгән ихтирамды замандың кире елдәре бик үк юҡҡа сығара алманы. Әле мин яҙыусы һәм уның вариҫтары тураһында бер нисә һүҙ әйткем килә. Ижад әһеленең үҙенең өйөндә телгә һәм әҙәбиәткә мөхәббәт һалынһын, һәм ул иң матур, иң дауамлы йолаға әйләнһен ине. Хатта туған телде һаҡлау буйынса иң ялҡынлы шиғри һүҙен әйткән әҙиптең өйөндә һин шылтыратҡан саҡта башҡортса яуап биреүсе булмауы ихтимал. Әлбиттә, абстракт халыҡты тәрбиәләүе еңелерәк… Мин Яныбай Хамматовтың ейәнсәре Алһыуға һоҡланам. Олатаһы уның йөрәгенә туған телгә булған һөйөүҙе һалған. Алһыу үҙе лә ҡыҙҙары менән тик башҡортса ғына һөйләшә. Был уның өсөн өҫтөнлөклө тел. Туған телгә мөхәббәт талапсанлыҡты ла, яуаплылыҡты ла эсенә алғанын үҙ миҫалында күрһәтә оло яҙыусының ейәнсәре. Ҡайһы бер әкиәттәрҙе урыҫсанан башҡортсаға үҙе тәржемә иткән, уларҙы китапсыҡ итеп үҙе биҙәгән, үҙе төпләгән. Алһыу Хамматова тигән табиптың әҙәбиәткә мөнәсәбәте бына шулай. Әҙәбиәткә һөйөү һинең ниндәй һөнәр эйәһе булыуыңа ҡарамай шул.

**Фәнил КҮЗБӘКОВ:**

– Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, туған телебеҙҙә аралашыусылар арта төшкән һымаҡ булһа ла, телебеҙ ярлыланғандан-ярлылана бара. Был – бер ниндәй ғилми тикшеренеүһеҙҙәрһеҙ ҙә билдәле булған хәҡиҡәт. Радио, телеинтервьюларға ғына иғтибар итәйек. Урыҫ һүҙен ҡатыштырмай һөйләгән башҡортто ишетермен, күрермен тимә! Ә бит мәктәптәрҙә, насармы-яҡшымы, башҡорт теле дәүләт теле булараҡ та, туған тел йәһәтенән дә уҡытыла килде. Бөгөнгө тенденция иһә тел файҙаһына түгел: башҡорт теле бөгөнгө мәктәптәрҙә тәү сиратта ата-әсәләр инициативаһы менән ҡыҫырыҡлана. Проблемаға ентекләберәк иғтибар иткәндән һуң шундай һығымта яһарбыҙ: дөрөҫөрәге **тел ярлыланмай, ә шул телде ҡулланыусыларҙың дөйөм мәҙәни кимәле түбәнәйә бара.** Миңә ҡалһа, дәүерҙең трагедияһы ла шунда: Кеше булып ҡалыу өсөн билдәле бер мәҙәни кимәл кәрәк, ә беҙ, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, шул кимәлде юғалта барабыҙ.

***Бөгөнгө ыңғай герой... Кем ул? Нимәгә табына, нимәне инҡар итә? Үҙенә ылыҡтырырлыҡ сифаттарға эйәме?***

**Таңсулпан ҒАРИПОВА:**

– Герой... Ыңғай герой... Ошо хаҡта уйланып ултырғанда инглиз яҙыусыһы Адисон Диозефтың әйткәне иҫкә төштө: «Әҙәби геройҙар ғына йәшәгән дәүләттә йәшәп ҡарарға тура килгән кешенең хәлен күҙ алдына килтереү ҙә мөмкин түгел. Эйе, беҙ, яҙыусылар, әҫәр көндәлек тормошҡа йоғонтоло булһын, кешегә тәрбиә бирһен тип, ваҡиғаларҙы сағыуыраҡ, характерҙарҙы отошлораҡ яһарға тырышабыҙ. Сәпкә тейҙерәйем тиһәң, мылтыҡты бит өҫкәрәк төҙәйһең. Геройҙарҙың тормошо – ул ҡылдан нәҙек, ҡылыстан үткер сират күперенән үтеү, упҡын ситендә бейеү. Әммә ыңғай герой кәрәк. Мәҫәлән, Цвейг: «Герой булыу – Хаҡ Тәғәлә ҡушҡан яҙмышың менән алышыу», – тигән. Маңлайына яҙылған яҙмыштан көслөрәктәр булмаһа, тормош үтеп сыҡҡыһыҙ ҡара урман йә һаҙлыҡ булыр ине. Бөгөнгө ыңғай герой – ул заманы хаҡында уйланыусан, ер, ил яҙмышына битараф булмаған, намыҫлы кеше. Был иһә яҙыусының үҙенең граждандлыҡ һәм патриотик булмышынан килә. Мәҫәлән, Нехлюдов Себергә һөрөлгән Катюша артынан китә икән, был бит – Толстойҙың үҙенең граждандлыҡ позицияһы. Ошо йәһәттән ҡарағанда, иң ҙур ыңғай герой – яҙыусы үҙе. Сөнки әҫәр һәм уның геройҙары яҙыусы булмышынан, уның идея-эстетик ҡарашынан, уның мәңгелек ҡиммәттәргә мөнәсәбәтенән ярала.

**Фәрзәнә АҠБУЛАТОВА:**

– Бөгөнгө ыңғай геройҙы асыҡ ҡына төҫмөрләүе лә ҡыйын. Ул бит коммунизм төҙөүсе түгел. Шулай булғас, уның көрәше, идеяһы нимәнән ғибәрәт булырға тейеш? Моғайын, сәйәсәттән алыҫыраҡ торалыр һәм бурҙар, коррупционерҙар, йәғни төрлө кимәлдәге енәйәтселеккә ҡаршы көрәшеүсе итеберәк һүрәтләнәлер. Хатта Рәсәйҙең юғары власть эшелондарында коррупционерҙар фашланған дәүерҙә йәшәйбеҙ, ришәүәтселек көнүҙәк булып ҡала. Хоҡуҡ һаҡлау органдарында эшләүселәр, оперҙар, полиция тураһында ниндәй генә сериалдар сығарылмай. Енәйәттәрҙе бер-бер артлы уңышлы асып ҡына тороуҙары менән хайран итәләр. Шуға ҡарамаҫтан, уларҙы «тормошсан герой» тип ауыҙ тултырып әйтеүе ҡыйын, ғәҙәти көнитмешебеҙҙә халыҡ ошондай хәстәрҙе күрәме? Йәмәғәтселек үҙен ғәҙелһеҙлектән ни ҡәҙәр яҡланған-һаҡланған итеп тоя? Улар идеаллаштырылған образдар һымаҡ күҙ алдына баҫа. Артабан геройҙар исемлеген зиннәтле йорттарҙа көн күреүсе эшҡыуарҙар синыфы менән дауам итергә

була. Барыһы ла эш-ҡылыҡтары менән оҡшаш, типик геройҙар һәм башлыса Мәскәү, Санкт-Петербург тирәһенән алыҫ китмәйҙәр. Ниндәй һуң ул герой! Бына шундай: сыбарыраҡ, таплыраҡ ул. Ситтәнерәк ҡарағанда һоҡланыу ҙа уяталыр, гәрсә, яҡындан килеп баҡһаң, уның ысынбарлыҡтан, халыҡтан алыҫ торғанын аңлайһың. Башлыса хыялдағы геройҙар.

***Владимир Путин шундай тәҡдим индерҙе: «Рәсәй уҡыусыһы мотлаҡ белергә тейешле 100 китап исемлеген булдырырға кәрәк...»***

**Фәрзәнә АҠБУЛАТОВА:**

– Идея һәйбәт. Рәсәй мәғариф системаһында эшләүсе яуаплы хеҙмәткәрҙәрҙең үҙҙәренән: «Федерациябыҙҙағы ҡайһы республика әҙиптәрен беләһегеҙ?» – тип уларҙың исем-шәрифтәрен һорашһалар, моғайын, күпселеге яуап бирергә ауырһыныр ине. Беҙҙә шәреҡ менталитеты өҫтөнлөк итә, шиғри һүҙ – уның дауамлы булмышы. Шуға ла шиғриәттәге гүзәл үрнәктәрҙе күрһәтеү бик мәғкүл. Ниндәй әҫәрҙәр ваҡыт һынауын үтте? Ҡол Ғәли ҡалдырған ҡомартҡы. Аҡмулла, Бабич, Рәшит Назаров, Рәми Ғарипов, Мостай Кәрим – был исемлекте мотлаҡ тултыра торған исемдәр. Башҡорт донъяһын һәр яҡлап улар асып күрһәтте, әҙәбиәтебеҙҙе яңы фекер-образ менән байытты. Йылдар үткәс тә уларҙың ижадтарына халыҡтар мөрәжәғәт итәсәк. Замандаштарыбыҙҙан был исемлеккә инергә тейешлеләр тураһында йәмәғәтселек менән фекер алышырға кәрәктер. Был бик тә яуаплы эш.

**Таңсулпан ҒАРИПОВА:**

– 100 китап... Ул хаҡта уйланғаным юҡ һәм ошо йәшемә еткәнсе үҙемдең нисә китап уҡығанымды ла белмәйем. Белмәйем, сөнки һанаманым. Унан һуң бишәр, унар тапҡыр уҡыған китаптарым бар һәм улар тураһында: «Ваҡыт табып, шуны йәнә уҡып сығырға ине!» – тип ҡуйғандарым да юҡ түгел. Вольтер әйткән бит: «Яҡшы китапты беренсе тапҡыр уҡып сыҡҡас, яҡшы дуҫ тапҡандай булабыҙ; шуны уҡ икенсегә ҡулға алғанда иҫке дуҫты күргән кеүек шатланабыҙ». Миңә ҡалһа, китап, ул ниндәй халыҡ, ниндәй милләт кешеһе тарафынан ижад ителһә лә, башта үҙ ерендә, үҙ телендә уҡыусыларҙың һөйөүен яуларға тейеш. Ундай китап, башҡа телдәргә тәржемә ителһә лә, шундай уҡ һөйөүгә лайыҡ була – уҡыусы ниндәй илдә йәшәһә лә, ниндәй телдә һөйләшһә лә – ул шул уҡ кеше. Шуға күрә, башҡорт әҙәбиәтенә килгәндә, халҡында киң популярлыҡ менән файҙаланылған әҫәрҙәрҙе һис икеләнмәйенсә башҡа халыҡтарға тәҡдим итергә, әлеге «йөҙ китап» исемлегенә индерергә булалыр. Ә иң мөһиме – талантлы яҙыусылар үҙенән һуң килер быуындар хаҡында ҡайғыртырға, үҙҙәренә Хоҙай тарафынан бирелгән йәшәү ваҡытын киләсәк өсөн фиҙа итергә тейеш икәндәрен онотмаһын ине. «Киләсәк быуынға беҙ ни ҡалдырабыҙ?» – Һәр ижадсы алдында торған иң ҙур һорау элек тә, хәҙер ҙә ошо.

***Тәрбиә... Шәхес тәрбиәләү... Милли тәрбиә... Дини тәрбиә... Ижад кешеһен маҡсатҡа ярашлы тәрбиәләү мөмкинме? Әҙәби тәрбиә тигән һүҙ сәйер яңғырамаймы?***

**Фәрзәнә АҠБУЛАТОВА:**

– Бәләкәй балаға берәй шәп шиғыр уҡыһаң, ул татлы ризыҡ ашағандан да нығыраҡ ҡыуана. Матур һүҙ баланың ихлас шатлығы менән баһалана. Фәүзиә Рәхимғолованың шиғырҙары кескәйҙәр күңеленә ана шулай тәьҫир итә ине.

Шағирә үҙе лә самимилыҡтан сыҡманы шикелле. «Әҙәби тәрбиә» һүҙбәйләнеше сәйерерәк яңғыраһа ла, унда мәғәнә ята. Сөнки әҙәбиәт кеше күңеле менән эш итә бит. Ә кешенең эске донъяһына тәьҫир итмәй тороп, ниндәй тәрбиә тураһында һүҙ алып барырға була? Беҙ бит роботтар үҫтермәйбеҙ. Ләкин ҡай саҡ шундай шик тә тыуып ҡуя…

Әле лә балалар өсөн яҙған бик матур әҙиптәр бар. Мин һоҡланып бөтә алмайым. Бына улар ысын тәрбиәселәр. Тәьҫир итеү көсөнә эйә иң елле авторҙар кемдәр һуң? Йәш быуын менән күберәк ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙ уңышлы эшләй, тип әйтергә була. Кәтибә Кинйәбулатова, Гөлфиә Юнысова, Фәрзәнә Ғөбәйҙуллинаны һәр мәктәптә тиерлек беләләр. Гүзәл Ситдиҡованың Интернетта «Балалар өсөн башҡортса әҫәрҙәр» битен алып барыуы оҡшай. Кешеләр ҙә бик әүҙем ҡатнаша унда. Замана балаһы менән электрон бәйләнешһеҙ ҙә булмай, хатта ки бөгөнгө көндә ул – иң йоғонтоло сараларҙың береһе. Шул балалар араһынан бына тигән зыялылар үҫеп сығыр киләсәктә.

Бөгөн әҙәбиәт тураһында нимә генә әйтһәләр ҙә, күпселек уға битараф түгел. Кемдер матур шиғри юлдарҙы – блокнотына, кемдер күңел дәфтәренә теркәп ҡуйған булыр. Иң вайымһыҙ тигәнебеҙ ҙә бер нисә юлды яттан белә. Сөнки тап шул образдар теҙмәһен ул үҙенең ҡайһы бер һорауҙарына яуап тип таба, күңел ауазы итеп яңғырата. Ә шулай ҙа, тәрбиә тигән саҡта, мин дини тәрбиәне иң алға ҡуйыр инем. Дин, ғөмүмән, йәшәүҙең бөтөн өлкәһен үҙ эсенә ала. Әҙәбиәт, тел, тарих тигәндә лә, беҙ уларға диндең йоғонтоһон тоясаҡбыҙ. Һәм уның аша бөтөн һорауға яуап табып була. Беҙ хәҙрәттәр менән әле ныҡлап бәйләнеш урынлаштыра алғаныбыҙ юҡ. Атеистик тәрбиә ҡаныбыҙға һеңгәнлектән, «Ислам» тигән бер һүҙ генә лә төрлө уйға һалып ҡуялыр бәғзеләрҙе. Донъя кимәлендәге ғилемгә эйә дин әһелдәребеҙ ҙә юҡ тиерлек. Сөнки был мәктәптә өҙөклөк барлыҡҡа килде. Уны ҡайтанан аяҡҡа баҫтырыр өсөн ваҡыт кәрәк. Үҫеп сыҡҡан хәҙрәттәребеҙ – һуңғы ике тиҫтә йыл емеше. Әлегә ниндәйҙер традиционлыҡ тураһында һүҙ йөрөтөргә иртәрәк. Ә бит кешенең хәле төрлөсә булып китеүе бар, дин өмөтһеҙлектән дауалай, икеләнгән, ҡурҡҡан кешеләрҙең һорауҙарына яуап бирә, уға юл күрһәтә. «Тура юл» тигән һүҙ Ҡөрьәндә нисәмә тапҡырҙар ҡабатлана. Шәхес тәрбиәләүҙә ирҙәрҙең өлөшө тос булырға тейеш. Үткән быуаттарға күҙ һалһаҡ, дин әһелдәренең иң шәп, иң яуаплы тәрбиәселәр булғанын күрербеҙ. Эйе, матур тәрбиә өлгөләрен улар миҫалында һөйләй алабыҙ. Балалар мәктәптә фән тауына үрләр, билгеләнгән бейеклекте яулар өсөн имтихан бирә. Тормош шулай уҡ имтихан. Ул һынау артынан һынау биреп кенә торасаҡ. Уларға ҡаршы торорлоҡ көс тураһында диндән нығыраҡ аңлатҡан бер нәмә лә юҡ.

Атеистик темаға ҡағылып, үҙебеҙ уҡыған осорҙо телгә алайым әле. Дәреслектәрҙәге ҡайһы бер һүҙбәйләнештәр хәтерҙә ныҡ уйылып тороп ҡалған икән: «Фанатик дин әһелдәре, фанатик ауыл ҡарттары, наҙан халыҡ» һ.б. Беҙ фанатизмды күрмәнек-белмәнек, ләкин ышанырға тейеш инек. Хатта тере муллаларҙы ла күрмәнек. Ә «фанатизм»ды башҡа һеңдергәндәр. 80-се йылдар аҙағында мин дин буйынса ҡайһы бер һорауҙарҙы бирә башлағас, бер танышым: «Ҡара уны, фанатик булып китмә», – тип әйтеп ҡуйҙы. «Кемдәр һуң улар фанатиктар? Ҡайҙа улар? Күрһәт береһен генә булһа ла!» – тигәс, ул үҙе лә аптырап китте. Хәйер, һәр заманға күрә һүҙбәйләнештәр, терминдар табылып тора. Хәҙер «традицион Ислам» тигән һүҙ килеп инде. Йәнәһе, Урал-Волга буйы мосолмандарының традицион Исламы бар. Был – ситтән индерелгән термин, бер башҡорт та, татар ҙа улай тип һөйләмәгән. Үҙәк матбуғат саралары шулай яҙа башлаһа, Үҙәк телевидение шулай тылҡыһа, беҙ уны мотлаҡ һүҙ әйләнешенә индерергә тейешбеҙ,

тип уйлай башлайбыҙ. Әгәр ҙә беҙ Әбү Хәнифә мәҙһәбенән икән, шулай тип асыҡ әйтергә кәрәк, ниңә икенсе халыҡ әйткәнде тутыйғош һымаҡ ҡабатлап ала ла китәбеҙ. Был дин ҡуҙлегенән бидғә тип баһаланмаймы икән?

«Һәр халыҡ үҙ тарихын үҙе яҙырға тейеш» тигәнде беҙ уңышлы атҡара башланыҡ һымаҡ. Ә тамырҙарыбыҙ бик тәрәнгә китә. Кешенең үҙенә булған ышанысы нығыуҙа үткәндәр ҙә ярҙам итә.

Тарихтың шәхес тәрбиәләүҙәге әһәмиәте тураһында күп һөйләргә була, тик беҙ үҙ тамырҙарыбыҙға әлегәсә бер яҡлыраҡ ҡарайбыҙ. Ғөмүмән, төркиҙәр тарихы аҙ өйрәнелгән. Европа халыҡтары был йәһәттән бик алда бара, һәм беҙ күберәк улар тарихын өйрәнәбеҙ. Өйрәнергә мәжбүрбеҙ. Төрки халыҡтары тарихсылары дөйөм тарихтарын әле яҙмаған. Хатта бәғзе ҡәрҙәш ғалимдар «юрған»ды күберәк үҙ яғына тартырға маташа, үҙенең халҡының ғына мәртәбәһен күтәрергә итә. Шулай ҙа айырым хеҙмәттәргә күҙ һалһаҡ, төрки ҡәбиләләренең ҡатлаулы осор үткәнен күреп таң ҡалабыҙ. Төрки ҡағандары ата-баба, тарих, һыу тураһында онотолмаҫ һүҙҙәрен әйтеп ҡалдырған, ирек һөйөр төркиҙәр ниндәй ҙур ерҙәр биләгән. Ләкин хәнйәр ҙә ике яҡлы. Иркенлек тарҡаулыҡҡа ла алып килә, дәүләттең ойошоп эш итеүенә кәртә лә була икән.

Октябрь революцияһынан һуң, «өлкән ағай»ҙың гегемонлығына нығыраҡ баҫым яһау, синыфтар көрәшендәге ролен арттырып күрһәтеү маҡсатында, аҙ һанлы халыҡтарҙың боронғолоғо инҡар ителде. Хәҡиҡәтте боҙоу был халыҡтарҙа кәмһенеү комплексын тыуҙырҙы. Дәреслектәрҙә, әҙәбиәттә, доға тиерһеңме: «томана башҡорт» (бында һәр төрки халҡы үҙ исемен яҙҙы), «ҡараңғы ауыл» һымағыраҡ юлдар йыш осраны. Йәғни идара итеүсе власть тотош империя халҡын, тормош Октябрҙән һуң ғына башланған, тип ышандырырға тырышты. Уға тиклем донъяны дер һелкеткән төркиҙәр тураһында ләм-мим. Был комплекс әле лә йәшәй. «Һәр халыҡ үҙ тарихын үҙе яҙырға тейеш» тигән фекерҙең дөрөҫлөгөнә йәнә лә инанабыҙ: бына бит әле килеп ниндәй боронғо ҡаласыҡтар, ҡасабалар табыла. Айырым бер көстәр факттарҙы кире ҡағырға тырышыу ғына түгел, был эште алып барыусыларға кәртә ҡуя, төрлө саралар аша һөжүм итергә маташа. Беҙ ҡай саҡ улар алдында аҡланырға, нимәлер аңлатырға, ваҡытыбыҙҙы сарыф итергә мәжбүрбеҙ. Юҡ, эшләргә, тайпылышһыҙ алға барырға кәрәк. Дәлилдәр беҙҙең тарихсыларыбыҙ ҡулында.

Әҙәбиәт тарих менән эш итә, ләкин уны һис кенә лә алмаштырмай, ул тарихты бәйән итеүсе түгел. Әҙәбиәт ниндәйҙер айырым дәүер кешеләренең ынтылышын, көрәшен, инаныуын, теге йәки был ситуацияла эске донъяһын, рухын асып күрһәтеүҙе маҡсат итеп ҡуя. Былар һәр саҡта ҡыҙыҡ һәм фәһемле. Ана шул юлда тоғролоҡ күрһәттеләр ҙә инде арҙаҡлы яҙыусылар Яныбай Хамматов, Булат Рафиҡов, Әхиәр Хәкимов, Ноғман Мусин. Бөгөнгө көндә Спартак Ильясовтың тарих биттәрен бәйән итеүе, үҙ ҡарашын асыҡ белдереүе, фекер тәрәнлеге һоҡландыра. Ул тормош дөрөҫлөгөн күңел инаныуы аша һүрәтләй. «Һүҙ һәм эш берлегенең үрнәге» тип өҫтәһәм дә, ағай асыуланмаҫ. Ижадсыларҙың хеҙмәте «иләк» аша үтеп, ваҡыттың төрлө кәштәһенә һалына барыуын әйткәйнем инде. Хатта беҙ «халыҡ шағиры» тигән исем алған ҡайһы берәүҙәрҙең дә онотола барғанын күрәбеҙ. Ләкин уларҙың да хеҙмәте үҙҙәренән һуң килгән быуын өсөн файҙалы сығанаҡ булды. Әҙәбиәт үҫеше шулай дауам итәлер.

Урта, йәш быуын араһында ла юғары маҡсатҡа ынтылып, бик етди яҙғандары бар, ләкин уларға туҡталмайым. Эшләй бирһендәр.

Демократия бик үҫешмәгән илдәрҙә һүҙ ирке бик ҡыйбат торғаны берәүгә лә

сер түгел. Илебеҙ тышҡы донъяға асыла бара. Хәҙер матди яҡ, кеҫә ҡалынлығы күп нәмәне хәл итә. Ә бына фекерләү даирәһенә килгәндә, уны элеккесә билдәләп ҡуйылған ниндәйҙер бер ҡоршауҙар эсенә индерергә тырышыу юҡ түгел. Динебеҙҙе ниндәйҙер һөҙгөстәр аша үткәреп, фәҡәт ундағы төрлө зарарлы ағымдарҙы ғына барлап сығыуҙы мөһимерәк күргәндәр ҙә бар, ләкин эске йөкмәтке ундай барлауҙарҙан байымай бит. Әҙәбиәт был йәһәттән күпкә ирекле, тип әйтә алам. Башты сүкеп тороусы юҡ. Ижад емештәре тиҫтә-тиҫтә китап булып нәшер ителә, ваҡытлы матбуғатта ла даими сығып тора. Әҙәби әйләнеш бара, уны тағы ла ҡоласлыраҡ итер өсөн, башҡа республикалар менән тәржемә өлкәһендә хеҙмәттәшлекте көсәйтеүгә лә йүнәлеш алырға ине.

Яҙыусы Довлатовтың әкиәте иҫтән сыҡмай әле. Бер батша рәссамға һүрәт яһарға ҡуша: «Нимә төшөрһәң дә төшөр, тик бәләкәс һоро ҡамҡаны төшөрмә», – ти. «Ҡалған бөтә нәмәне лә төшөрә аламмы?» – «Эйе, тик бәләкәс һоро ҡамҡаны ғына төшөрмә», – тип ҡабатлай батша. Бер йыл үтә, ике, өс йыл… Батша вәғәҙә ителгән һүрәтте талап итә. Рәссам оҙаҡ өндәшмәй тора. Шунан: «Мин уны яҙа алманым..» – ти. «Ни өсөн?» – «Мин тик бәләкәс һоро ҡамҡа тураһында ғына уйлайым...» Бына шулай: ҡайһы бер кәртәләрҙе беҙгә кемдәрҙер ҡуя, ә ҡайһыларын үҙебеҙгә үҙебеҙ ҡуябыҙ. Ижадсы эске – фекерҙәр һәм тойғолар – донъяһын үҙе күргәнсә, үҙе аңлағанса асһын. Һәйбәт китап иһә бер быуындың ғына түгел, әллә нисә быуындың күңел ихтыяжына яуап бирәсәк. Һоро ҡамҡаларға әллә ни иғтибар итмәҫкә лә мөмкин. Әҙәбиәт бит ул кешене һиҙҙермәй генә тәрбиәләй. Уның көсө лә шунда.

**Фәнил КҮЗБӘКОВ:**

– Әҙәби тәрбиәне, моғайын, ғаиләләге, мәктәптәге, юғары уҡыу йортондағы тәрбиә менән сағыштырып булмайҙыр. Күпмелер дәрәжәлә, әлбиттә, аталып киткән институттарҙың да әҙәби тәрбиә биреүҙә үҙ өлөшө бар (бәлки, әсәйеңдең бишек йыры ижад донъяһы ишектәрен асып ебәргәндер). Әммә ысын мәғәнәһендәге әҙәби тәрбиә, асылда, ғөмүми әҙәби процесс аша, донъя әҙәбиәте ирешкән камилдә үҙләштереү аша бара торғандыр. Бына ошондай юғарылыҡҡа күтәрелә алған әҙип кенә бөгөнгө заман шәхесен тәрбиәләүҙә һис шикһеҙ төп ролдәрҙең береһен башҡара. Беҙҙең атаҡлы сәсәндәребеҙ үҙ дәүеренең иң алдынғы аҡыл эйәләре, тәрбиәселәре булып сығыш яһай алыуҙарының «сер»ен дә мин ошонда күрәм: улар үҙҙәренә тиклемге атаҡлы милләттәштәренең ижадын ентекле белгән, уға нигеҙләнгән, артабан үҫтергән. Тап шул нигеҙҙә Һабрау сәсәндән тамырланған сәсәнлек традицияһы, милләтте милләт итеп тәрбиәләүҙә төп рухи терәк булараҡ, халыҡтың рухи һыуһынын һуғара-һуғара Ерәнсә, Ҡобағош, Мәхмүт, Ҡарас, Салауат Юлаев, Байыҡ Айҙар, Буранбай, Ишмөхәмәт Мырҙаҡаев, Аҡмулла, Ғәбит Арғынбаевтар аша Мөхәмәтша Буранғоловҡа килеп етә һәм ҡағыҙға төшөрөлә.

Уйлауымса, Шәйехзада Бабич, Рәми Ғарипов, Мостай Кәримдең милләткә булған йоғонтоһо милли рухлы булыуҙарына һәм үҙ заманы мәҙәниәте, әҙәбиәтенең иң юғары камилленә күтәрелә алыуҙары менән аңлатыла. Сәсәндәр мәктәбен, әле аталған классиктар мәктәбен үҙләштермәй тороп, милли шиғриәтте (әҙәбиәтте) яңы бейеклеккә күтәреү мөмкин түгел.

**Әңгәмәне Фәнил КҮЗБӘКОВ ойошторҙо.**

# ТАУҘАР ХӘТЛЕ ЭШТӘР АТҠАРҒАНДА*

*(Әнүр Вахитовтың тыуыуына – 80 йыл)*

## *1. Даны буйынса таныулы ағай*



«...Ҡар ҡарайып, ҡыйыҡтарҙан беренсе тамсы тамыуы була, быйыл ҡайһы яҡҡа барыу, яңы ерҙәр, яңы кешеләр күрәсәгем тураһында уйлана-хыяллана башлайым... Яңы йыр, ҡары һүҙ[1] ишетеремде ҡыуанып көтәм. Халыҡ тыуҙырған аҫыл моң-көйҙәр ҡолағымды алдан уҡ иркәләй башлай...» Әнүр Вахитовтың «Яҡты күңел» тигән хикәйәләр һәм хикәйәттәр китабының (Өфө, 1981) тәүге битендәге ошо юлдарҙы уҡығас уҡ, таныш ашҡыныуҙар, таныш кисерештәр, тип уйланым. Шулай булмай һуң, был һүҙҙәрҙе әйткән герой миңә һөнәрҙәш, фольклорсы булып сыҡты бит. Шул һөнәрҙәшемсә әйткәндә, минең дә эшем шундай: «Йыл да йәй буйы ауылдар буйлап йөрөйөм, сәсәндәр, ҡурайсылар менән осрашам, боронғоно – бөгөнгә, бөгөнгөнө киләсәккә ялғап йәшәүсе күпте күргән аҡһаҡалдар менән һөйләшәм» (10-сы б.). Һәм йыш ҡына Әнүр Вахитовтың «Танышыу» тигән хикәйәтендәге күпте күргән, күпте ишеткән, күпте кисергән Әхмәҙулла бабай ише ил ҡарттары, бындай эште хуплап ул әйткән һүҙҙәрҙе ҡабатлағандай итә. Ул ҡарт иһә фольклор йыйыусыһы егетте урамдан үтеп барған еренән үҙе үк саҡырып индереп, ни йомош менән йөрөүен һорашып алғас, уға бына ни ти: «Һәйбәт эш менән йөрөйһөң икән, улым. Кешегә үҙ аҡылы ғына етмәй. Башҡаларға ла, боронғоға ла таянырға кәрәк. Ата-бабаларыбыҙ рухын да аңларға кәрәк» (17-се б.).

Хәйер, бер мин генә түгел, китапты уҡыған һәр кем үҙен уға һөнәрҙәш тип иҫәпләй алыр, моғайын. Сөнки, әҫәрҙән әҫәргә күсә килә, һин уға эйәреп Еҙем, Мәндем буйҙарын ҡыҙыраһың, Аҡъегет ҡаяһына үрмәләйһең, Баланторам һыртын елеп уҙаһың, Шәрип урманына юлығаһың, Шафиҡ ҡойоһонда һыуһын ҡандыраһың. Уның менән бергә аҡһаҡалдар, ил ағалары менән осрашаһың. Улар һиңә лә ҡары һүҙ, йырҙар ишеттерә... Яҙыусының ихтыяры, әҫәрҙәренең илаһи тылсымы үткәндәргә хөрмәт менән ҡарарға, бөгөнгө тормоштоң күреп тә, күнегеп тә бөткән ғәҙәти күренештәрен яңыса баһаларға мәжбүр итә, шул хәҡиҡәтте күңелгә төйнәй бара.

Халыҡ ижады ынйыларын бөртөкләп йыйыусыларға шундай тойғо таныш: боронғоно яҡшы белгән сәсән телле, йыр-моңға бай кешегә барып етергә әле

---

**Журнал варианты.*

*Ҡары һүҙ — борон ауыҙ-тел ижадын халыҡ үҙе иң әүәл олонан ике төргә бүлеп йөрөткән: һөйләп башҡарылыусыларын — ҡарыһүҙ (ҡарһүҙ), көйләп башҡарыла торғанын әйтем тип атаған. Теҙмә телмәр (шиғыр) рәүешендәге бөтә әҫәрҙәр ҙә көйләп башҡарылған. Сөнки шиғри телмәр үҙе лә, көй ҙә магик көскә эйә тип белгәндәр.*

байтаҡ юл үтәһең бар, ә ул инде һинең күптәнге танышыңа әүерелә. Сөнки, үҙең күрмәһәң дә, даны менән осрашып өлгөрәһең.

Әнүр Вахитовтың үҙен күреп белгәнгә тиклем, мин дә уның даны менән таныш инем инде. Ара-тирә гәзит-журнал биттәрендә, «Йәш көстәр» альманахында ошондай имза менән шиғырҙар, мәҡәләләр баҫыла тора ине. Ә үҙе менән осрашыу көтмәгәндә булды.

1961 йылдың көҙө. Шаулы студент тормошон башлап ҡына торған сағыбыҙ. Көндәрҙән бер көндө теҙмә (расписание) буйынса «Башҡорт халыҡ ижады» тигән дәрескә инеп ултырыуыбыҙға, башын уңға һала биреп, көмөрәйеңкерәп, әммә етеҙ атлап, һары сәсле йәш кенә ағай килеп инде. Күҙлеген сисеп, ҡағыҙҙарын өҫтәлгә һалды ла:

– Һаумыһығыҙ! Мин Әнүр Вахитов булам, – тине.

– Бәй, – тип ҡуйҙым мин, ғәжәпкә ҡалып.

– Әллә белмәй инеңме? Теге мәлдә беҙгә консультациялар биргән, унан имтихан алған уҡытыусы ла инде, – тине миңә парталаш булған яңы танышым Юныс Латипов, терһәге менән ҡабырғама төртөп.

– Таныуын таныным да ул, – тигән булдым. Ысынлап та, теге мәлдә, йәғни ҙә башҡорт теле һәм әҙәбиәте буйынса имтихан алдынан, тап ошо ағай абитуриенттар алдында сығыш яһағайны. Ауыҙ тултырып, сығыш яһағайны, тим. Сөнки белдереүҙә «консультация» тип яҙылһа ла, уның һөйләгәндәре һис тә генә ҡәҙимге консультацияға оҡшамағайны.

Аптыратҡаны шул булды. Мәктәптә уҡығанда, Сәғит Агиштың «Нигеҙ» тигән ҡалын ғына әҫәрен (уны мин бишенсе синыфта саҡта уҡып сыҡҡайным) башҡорт әҙәбиәте тарихындағы тәүге роман тип атай торғандар ине. Унынсыны тамамлағандан һуң, бер йыл колхозда эшләп, өс йыл буйы танкымда Ҡараҡом бархандарын гиҙгән арала, ундай фекер иҫкереп өлгөргән булып сыҡты. Бәй, беҙ йәшәгән йөҙйыллыҡтың 20-се йылдарының башында уҡ Ғәйнан Хәйри тигән йәп-йәш яҙыусы башҡорт әҙәбиәте тарихында беренсе булып «Боролош» тигән романын ижад иткән булған икән. «Ул саҡта Хәйри, бына әле генә һалдаттан ҡайтҡан егеттәр, һеҙҙең тиҫтерегеҙ генә булған». Консультантыбыҙ шулай тигәс, беҙ, хәрби кейемдәге егеттәр, бер-беребеҙгә ҡарашып алғайныҡ...

Артабан ни ишетәбеҙ? Дауыт Юлтый, Афзал Таһиров, Имай Насыри, Һәҙиә Дәүләтшина тигән романсыларыбыҙ ҙа булған, имеш. Улар барыһы ла шәхес культы заманында репрессияға дусар ителеп, исемдәре лә, әҫәрҙәре лә тыйылған булған икән. Ошондай яҙмышҡа дусар ителгән Ғабдулла Амантай тигән үҙе шағир, үҙе фольклорсы-ғалим, Ғәббәс Дәүләтшин, Төхфәт Йәнәби кеүек әҙиптәребеҙҙең дә шундай уҡ яҙмышҡа дусар ителеүе, шәхес культын фашлау һөҙөмтәһендә генә, әҙәбиәтебеҙгә уларҙың исемдәрен кире ҡайтарырға форсат тыуыуы хаҡында һөйләп, консультантыбыҙ беҙҙең аңыбыҙҙа, саҡ ҡына бүрттерә биреп әйткәндә, тотош революцияға тиң түңкәрелеш яһаны. Ошо йәш кенә уҡытыусының өлкәнерәк берәү менән бергә (ул беренселәрҙә «Иҫке төрки теле» тигән дәрес алып барасаҡ Абдулла Нәбиулла улы булған, имеш) күҙлеге аша үтә һынамсыл ҡарап, имтихан алыуы ла иҫтә. Шулай булғас, уны танымау ҡайҙа?! Ә бына исем-шәрифен, дөрөҫөрәге, ошо егеттең Әнүр Вахитов булыуын бер мин түгел, күптәр белмәй ине әле. Бәлки, таныштырып та тормағандарҙыр. Әйтһәләр ҙә, имтихан хаҡында баш ватып йөрөгән абитуриенттың хәтерендә ҡалмаһа – ни ғәжәп. Әле бына үҙе менән таныштырғас, башҡалар ҙа, моғайын, мин кисергәнде кисергәндер. Шулай булмай һуң, тере яҙыусыны тәүге күреүебеҙ ине бит беҙҙең.

Уҡытыусыбыҙ иһә башҡорт халыҡ ижады тураһында инеш әңгәмәһен башлап

та ебәрҙе. Тәүге дәрестәрҙән үк ул беҙгә бер серле һандыҡты асып, бына ҡарағыҙ, үткән быуындарҙан шундай-шундай хазиналар мираҫ булып ҡалған, тип уларҙы алыҫтан ғына берәм-берәм күрһәтә биреп, беҙҙе ҡыҙыҡтырғас ҡына, кире һала барғандай итте. Артабан, мәле еткәс, таратып бирермен әле, тигән кеүек, һәр осрашҡан һайын, әлеге затлы хазиналарҙы яҡынығараҡ килтереп, хатта үҙебеҙгә лә тоттороп ҡаратҡандай, хис уятыр ине. Уларҙың байтағын экспедициялар ваҡытында үҙе һәм беҙҙең ише студенттар табып алып ҡайтҡан икән.

## *2. Хәтергә уйылып ҡалған дәрес*

Беҙ студент саҡта башҡорт халҡының ауыҙ-тел ижады буйынса XX быуаттың 50-се йылдарында донъя күргән өс томлыҡ «Башҡорт халыҡ ижады» туплаһынан, ара-тирә сыҡҡан әкиәт йыйынтыҡтарынан башҡа, бер ниндәй ҙә баҫма юҡ ине. Улары ла мәктәп биргән белемде йә әрме хеҙмәтендә, йә колхоз ҡырында тоҙлап килгән беренсе курс студенттары ҡулына бик үк эләгеп тә бармай ине. Хәҙерге аҡылым менән мин шуға төшөндөм: йәш булһа ла, Әнүр ағайыбыҙ шуны яҡшы аңлаған, ахырыһы. Быны шунан сығып әйтәм: яңы теманы иғлан иткәс тә, иң әүәл уға ҡағылышлы һәр әҫәрҙең йөкмәткеһе менән ҡыҫҡаса ғына таныштырып сыға торғайны. Бындай ысулды ҡулланыуына, бәлки, һуғыш арҡаһында, мәктәптәр дәреслеккә ныҡ ҡытлыҡ кисергән заманда, уҡытыусыларының ауыҙына ҡарап ҡына ултырыуын иҫенән сығармауы сәбәпсе булғандыр. Бәлки, Сәйетбаба урта мәктәбен тамамлағандан һуң бер йыл Толпар ете йыллыҡ мәктәбендә уҡытыусы булып эшләп алған осорҙа туплаған тәжрибәһе лә үҙенекен иткәндер. Әммә ул, беҙ уҡыу түгел, исемен дә белмәгән әҫәр менән таныштырғанында, йөкмәтке һөйләү менән генә сикләнмәй ине. Һәр әҫәрҙең темаһын һәм идеяһын төптән асыҡлап, уларҙың художестволы асылыш кимәлен дә билдәләй бара торғайны. Семинарҙарҙа беҙҙән дә шуны талап итер ине.

Ысын уҡытыусы, остазға хас талапсанлыҡ Әнүр Вахитовтың ҡанынан килеүе лә бик ихтимал: уның атаһы Хисмәт ағай ҙа уҡытыусы булған. Быны беҙ байтаҡ йылдар үткәс кенә белдек. 1964 йылда «Совет Башҡортостаны»нда баҫылып сыҡҡан «Яҡты күңел» тигән хикәйәһендә аң-белем таратып, яҡты тормошҡа саҡырып, ауылдаштарының күҙен асыусы изге күңелле уҡытыусы Хисмәт образы һынландырылған. Шул образ менән танышҡас, уҡытыусыбыҙҙың атаһы менән осрашҡандай булғайныҡ та инде. Фольклор буйынса лекцияһында уҡытыусыбыҙ ауыҙынан, атанан күргән уҡ юныр, тигән мәҡәлде йыш ишетә инек. Хикәйә менән танышҡас, ул үҙе шул мәҡәлдең тере кәүҙәләнеше кеүек тойолдо.

...Йылдар үткәс, Әнүр Вахитов имзаһы менән «Урал толпары» тигән хикәйәт донъя күрҙе. Хикәйәттә, быға тиклем әйтелгәндән аңлашылыуынса, бик тә фәһемле ваҡиға бәйән ителә. Ғүмере буйы сит ерҙә ерһенә алмаған Зөлхизәнең сәләме бәхиле булып уның кеүек үк ирекһеҙләп, ҡыуып алып килтергән Күк толпар Уралға ҡайта. Әхмәҙулла бабай хикәйәтен тыңлаусы егет шул толпарҙың бөгөнгө нәҫеле менән осраша. Бында ат образы ла тыуған ер тойғоһоноң быуын-быуын күсәгилешен кинәйәләй. «Ир ҡанаты» хикәйәһендә лә ат образына һалынған шул уҡ идея тағы ла тәрәнерәк асыла. Хикмәт шунда: хикәйәнең һуңғы өлөшөндә тасуирланған бәйгелә ал бирмәгән Ир ҡанаты менән Ҡашҡа тигән ике юрға 1812 йылғы Ватан һуғышында легендар Абдрахман батыр менән француз яуын туҙҙырып ҡайтҡан Ерәндең һәм шул заттан сығып, Бөйөк Ватан һуғышы ғәрәсәттәрен кисергән Ерән бейәнең нәҫеленән була. Ә. Вахитовтың «Урал толпары» хикәйәте менән «Аҡбуҙат» эпосы араһындағы оҡшашлыҡ, уртаҡлыҡ һәм шуларҙағы айырмалыҡ кимәлендәге ауаздашлыҡ архетипик характерҙа булғанға оҡшай. Бындай башланғысты «Ир ҡанаты» хикәйәте, яҙыусының бүтән

хикәйәттәре хаҡында ла әйтергә мөмкин. Ябайлаштырып әйткәндә, был ауаздашлыҡ әҙәби хикәйәт тигән жанрҙың фольклорға нигеҙләнеүенән килә. Ә бындай нигеҙләнеш үҙенән-үҙе хасил булмай. Ул яҙыусының тыуған фольклорыбыҙ хаҡында, китапта баҫылған текстар буйынса ғына түгел, халыҡ араһына сығып, уны йәнле булмышында өйрәнеүенә, фольклор йыйыусы, фольклорсы-тикшереүсе тәжрибәһенә эйә булыуына ла, ә уға тиклем халыҡ ижады хаҡындағы төшөнсәне инә ҡарынында саҡта уҡ һәм инә һөтө менән аңһыҙ рәүештә (подсознание кимәлендә) зиһененә, күңеленә һеңдереүенә бәйләнгән.

Бабайҙарҙы әңгәмәгә йәлеп иткәндә, яҙыусының геройы юҡҡа ғына фольклорҙың тәбиғәтен белеп, фольклорсыларҙың  тәжрибәһенә таянып эш итмәй икән. Йыр-моң йыйыусы, ғәҙәттә, тота килеп һораша башламай, һүҙ эйәрә һүҙ китеп, телгә алынған урын, ырыу исемдәрен, бер сулаһын табып, асыҡлауҙы үтенер булыр. «Танышыу» тигән хикәйәттең геройы тапҡан йомғаҡ осо «Йәй ташы» тигән һүҙ була. Шуның мәғәнәһенә барып еткәнсе, фольклорсы егетте албырғатып, ул һүҙҙе уға өс тапҡыр ишеттереп өлгөрәләр. Ҡойоп ямғыр яуған мәлдә ят ауылға килеп ингәс тә, уның сәләмен алған ир-ат төркөмөнән берәү: «Әйҙүк, әйҙүк, Йәй ташы!» – тип әйҙүкләй. Асыҡ тәҙрәнән башын тығып: «Әйҙүк, улым, сәй эсеп сыҡ, – тип әйҙүкләгән «сал һаҡаллы, киң яҡты йөҙлө, ҡырған башына түбәтәй кейгән» Әхмәҙулла ҡарт: «Әйҙүк, Йәй ташы!» – тип мосафирҙы өйөнә үк саҡыра. Әммә үҙ алдына ғына: «Тағы йәй ташы!» – тип ғәжәпләнгән егеткә ул һүҙҙең мәғәнәһен тиҙ генә асыусы булмай әле. Улай ғына ла түгел, уны һаман мосафирға ҡайтарып, мәғәнәһенең осон йәшерә төшкәндәй итеп, Әхмәҙулла бабай: «Йәй ташы тип әйттем дә, яңылышмағанмын икән. Һәйбәт эш менән йөрөйһөң, улым, бик килешә, бик», – тип егеттең ниндәй ниәт менән йөрөүен: «Һеҙҙе, боронғо башҡорт тарихын, боронғолар күңелен бик яҡшы белә, тигәйнеләр», – тип тәғәйен генә тап үҙенә төбәп килеүен белеп алғас. Дөрөҫ, бабайҙың: «Ана, һин беҙгә килеп етер-етмәҫтән ямғыр ҙа ҡойоп һалды...» – тип әйткәне әлеге йомаҡ һүҙҙең яуабына йәбешкә (шуның мәғәнәһенә яҡын һүҙ) кеүек аңлашылғандай итә. Ни өсөн тигәндә, мәжүси башҡорт борон, йәй ташы ярҙамында ямғыр яуҙырып була, тип белгән. Ундай таштарҙың береһен, Белорет районының Архангел яғына яҡын ерендәгеһен, һынына ҡарап, ҡатайҙар Ҡолоҡайташ, йәғни ҡолонсаҡҡа оҡшаған таш, тип атаған. Ғафури районы ерендәгеһен табындар Һыйырташ тип белә. Ситтән ҡарағанда ятҡан һыйырҙы хәтерләтеүсе был таш эргәһендә Быҙауташы ла булған.

XIX быуат урталарында «Башкирская русалка» тигән баш аҫтында В.И.Даль башҡорттоң «Заятүләк менән Һыуһылыу» иртәгенең бер версияһын үҙенең бәйән итмешендә баҫтырып сығара. Шул яҙманың инешендә әйтелеүенсә, Бөрйән ырыуы ерендәге Шүлгәнташ мәғәрәһенә (уны Шүлгән ауылы халҡы Таш йорт тип кенә атай) инер ерҙә эт ҡиәфәтендәге йәй ташы торған. Йәй таштары хаҡында Башҡорт иленең һәр төбәгендә лә ишетергә була. Ундай ташты башҡорт тылсымлы вә изге таш тип, уның ҡөҙрәтенә инанған. Йәнәһе лә, ҡоролоҡ булған саҡтарҙа уға һуҡһаң, ямғыр яуа була. 1961 йылда Абзан ауылы ҡарттарынан ишетеүемсә, Инйәр ныҡ ҡайтып, бүрәнәләр аҡмай башлағас, башҡорттоң ошо инанысына ышанып, сплавконтора начальнигы булған урыҫ кешеһе трактор ярҙамында шул йылға буйындағы йәй таштарын әйләндертеп ҡараған.

Ә.Вахитовтың хикәйәттәрендә телгә алынған ер-һыу исемдәренә ҡарағанда, ил ҡыҙырып йөрөгән геройының әле әйтелгән йәй таштары хаҡындағы был мәғлүмәттәр мәғлүм булыуына иманым камил. Шуға күрә лә мосафирға Әхмәҙулла бабайҙың «Йәй ташы» тип өндәшеүенән, аҙаҡ ошо һүҙҙе ямғыр яуыуына бәйләп телгә алыуынан сығып: «Һәй, уратып-сурытҡан был һүҙ – бары лаҡап һүҙ генә

икән дә», – тип уйларға ерлек бар. Ысынлап та, халыҡта хәҙер инде шаяртыу мәғәнәһен алған бер инаныс бар. Әгәр ҙә мәгәр оҙаҡ ҡына ситкә сыҡмай торған кеше берәй яҡҡа ҡуҙғалһа һәм шул мәлдә ямғыр яуһа, уның хаҡында: «Йәй ташы ҡуҙғалды инде!» – тиҙәр. Берәйһе ситтән килгән саҡта ямғыр яуһа ла, хикәйәттән аңлашылыуынса, уны Йәй ташы тип атайҙарҙыр, ахыры.

Әммә хикәйәттә телгә алынған йәй ташының мәғәнәһе көтөлгәндән башҡа һәм тәрәнерәк булып сыҡты. Әхмәҙулла бабай, халыҡтан ишеткәненә һылтанып, ҡасандыр борон бик ҡаты ҡоролоҡ булып, бөтәһе лә интеккән бер мәлдә Нәғим тигән байҙың бөтә халыҡ һыулаған берҙән-бер йылғаны быуып, тирә-яҡты һаҙлыҡҡа әүерелдереп, үҙенең мал-тыуарына йәшел көтөүлек яһауына, ни заман үтеүенә ҡарамай, әсенеп һөйләй торғас, һүҙҙе боронғо бер аҡһаҡалға биргәндәй, уның хикәйәтен бәйән итә. Уныһының да мәғәнәһе ике ҡатлы булып сыға. Шуны аңлатам тигәнсе, шул аҡһаҡал исеменән Әхмәҙулла «Урал батыр» эпосының беҙгә мәғлүм икенсе версияһына вариант булырҙай бер әҫәрҙең һуңғы эпизодын һөйләп ташлай. «Урал батыр»ҙың 1956 йылда Троицк ҡалаһында Исмәғил Рәхмәтуллиндан Әхнәф Харисов яҙып алған шул версияһы буйынса, Урал батыр ен-пәрейҙе, дейеүҙәрҙе ҡырып бөткәс, халыҡ, байманда йәшәп, сикһеҙ ишәйеп китеү сәбәпле, эсәр һыуға мохтажлыҡ килеп тыуа. «Урал батыр, был ауыр хәлде күреп, берҙән-бер көндө ҡынынан ҡылысын тартып ала ла, баш өҫтөндә өс тапҡыр һелтәп, аяҡ аҫтындағы ерҙе уйҙыра саба. Шунан:

– Бына ошо ерҙә ҙур һыуҙың башы булыр! – ти. Үҙе шунда уҡ өлкән улы Иҙелде саҡырып килтереп: – Бар, улым, аяғың тартҡан яҡҡа сығып кит тә халыҡ араһында йөрө, иллә-мәгәр берәй ҙур ағым һыуға барып етмәйенсә артыңа әйләнеп ҡарайһы булма! – ти.

Атаһы һымаҡ ауыр кәүҙәле Иҙел, аяғының тәрән эҙен ҡалдыра-ҡалдыра, көньяҡҡа ҡарай сығып китте, ти. Атаһы уның артынан күҙ йәштәрен мөлдөрәтеп ҡарап ҡалды, ти. Сөнки ул Иҙелдең кире әйләнеп ҡайтмаясағын белеп тора ине, ти.»

Шулай булһа ла, кешелек хаҡына, тереклек хаҡына Урал батыр Һаҡмар менән Яйыҡ тигән улдарын да төрлө яҡҡа оҙата, уларҙың да Иҙел-Ағиҙел һымаҡ уҡ кире ҡайта алмаҫын белә-күрә бара батыр был юлға. Һәр улы ла, йылға булып, сарсаған илде һыуға туйындыра.

«Урал батыр улдарының һыу табып, үҙҙәренең йылға булып ҡалғаны» мотивы Әхмәҙулла бабай телгә алған аҡһаҡал һөйләүе буйынса, былай интерпретациялана: «Ҡоролоҡ дауам иткән. Аҡһаҡал көнө-төнө илде килгән афәттән ҡотҡарыу тураһында уйлана һәм ырыуҙағы ир-егеттәрҙе йыйған да былай тигән: «Был ҡоролоҡ, уландар, беренсе тапҡыр түгел. Боронораҡ та булған бындай бәлә. Әле Урал батыр тере саҡта ошондай яман афәт килгән ил өҫтөнә. Шунда Урал батыр үҙ улдарын саҡырып, ил өсөн һыу табырға ҡуша. Үҙе кибеп, үлеп барған донъяға һуңғы тамсы һыуын бөркә лә тәгәрәй һәм үлә. Ә улдары таң менән юлға сығырға булып йоҡларға яталар. Ағиҙел түҙмәй, бик тынғыһыҙ була ул. Энеләре ял итергә ятҡас, ашығып юлға сыға. Һәм төнө менән, һыу кеүек ай яҡтыһында, тауҙар араһынан, үҙәндәр буйлап бара ла бара. Тауҙарҙы, ҡаяларҙы ярып сыға, ярып үтә алмағанын урап китә... Ай яҡтыһында көмөш кеүек нурланып ҡала уның юлы. Ошо көмөш нурҙарҙан ынйылай урғылып тере һыу аға... Яйыҡ менән Уй иртәнсәк таң һарыһы менән юлға сығалар. Улар сыҡҡанда, ҡараһыу томан ағылған. Ана шуға ла уларҙың юлы ҡараһыу була. Улар ҡараңғыла аҡрын ғына йәнәшәләп баралар. Береһе томан аҡҡан кеүек яй ғына, икенсеһе уның ыңғайына уйланып ҡына баралар ҙа баралар... Бына шулай өс туған өс һыу юлы һала һәм шул китеүҙәренән тыуған ерҙәренән мәңгегә айырыла...» (15-се б.).

Аҡһаҡал исеменән Әхмәҙулла бабай бәйән иткән иртәк өҙөгө, тәү ҡарамаҡҡа, ҡоролоҡтан ҡотолоу темаһын ғына күтәрә. Әммә аҡһаҡалдың көтөлмәгән һығымтаһы уны, ирекһеҙҙән, икенсе төрлө ҡабул иттерә. Бына нисек бирелә уның был һығымтаһы: «Был аҡылды шуға һөйләйем: донъяның тотҡаһы – ир-егет!» (15-се б.).

Тимәк, «Урал батыр» исемле эпостың И. Рәхмәтуллин иртәк рәүешендә һөйләгән күләмле генә версияһының сюжетынан илдә килеп тыуған метереологик шарттар талап иткән бер мотивты ғына алып, аҡһаҡал: «Улым, һиңә әйтәм, киленем, һин тыңла!» – тигәндәй иткән һәм үҙенең шул маҡсатына ирешкән. Аҡһаҡал һөйләгәндең кинәйә генә икәненә, ә ул кинәйәнең «аңлағанға – ишара» юҫығында ишетелеүенә Йәйташ атлы егет тиҙ төшөнә.

Артабан тап шул егеттең һыу юлын асырға йөрьәт итеүен beлəбеҙ. Хикәйәттең шул өлөшө менән таныша башлауыбыҙ була – аҡһаҡал һөйләгән эпос өҙөгөнөң тағы бер һәм берәгәй эстетик тәғәйенләнеше барлығына төшөнәбеҙ. Һыу юлын быуған ҡая ташты тумырып бөттөм тигәндә генә, Нәғим бай ялсылары тарафынан Йәйташ үлтерелә. Тимәк, эпос өҙөгө ошо фажиғәне алдан иҫкәртеүсе увертюра хеҙмәтен дә үтәй. Йәй ташының мәғәнәһе лә шунда ғына тамам асыла. Хикәйәт һәм уның авторы өсөн ул һис кенә лә метеорологик шарттар менән идара итеү мөмкинлеге биреүсе тылсымлы ташты түгел, ә игелекле вә изгелекле кеше тигәнде аңлата, имеш. Йәйташ тигән егеттең һәләкәтенә тәбиғәт үҙенсә яуап биреү теләгенән, ел күтәрелеп, ҡойма ямғыр башланыуға, быулығып ятҡан йылға, шул егет тарафынан йоҡартылған таш кәртәне емереп, шарлап аға башлауға ҡыуанған иртәксе аҡһаҡал: «Беҙгә изге ямғыр, донъяны йәшәртеүсе йәшен булып Йәйташ ҡайтты!» – тип ҡысҡыра. Артабан хикәйәт: «Шунан аҙаҡ башҡорт ерендә һәйбәт күңелле кешене «Йәй ташы» тип ҡаршы ала башлағандар,» – тип хәбәр итә (17-се б.).

## *3. Аманат*

«Әнүр Вахитовтың әҫәрҙәренә хас һәм уларҙы бер шәлкем итеп туплау форсатына эйә булған уртаҡ идея бармы?» – тип һораусы булһа, һис икеләнмәйенсә: «Бар, бар, бар!» – тип әйтер инем. Шулар араһынан бөгөн айырыуса актуаль булған проблемаға туҡталғы килә.

Бөгөн күптәр, үкенескә ҡаршы, төшөнөп бөтмәһәләр ҙә, ә күптәре, бер ни ҙә булмағандай, ғәфләттән сыға алмағанда, башҡорт өсөн йәшәүҙең үҙе кеүек актуаль проблема бар. Ул – ер яҙмышы. Татар-монгол, Алтын урҙа, Нуғай, Ҡазан, Әстерхан, Себер хандары ла, рус батшалары ла (һуңғылары сикләй-сикләй барыуҙарына ҡарамаҫтан) башҡорттоң ер биләүгә аҫабалыҡ хоҡуғы барлығы менән иҫәпләшкән. Былдай хоҡуҡ Рәсәйҙә бүтән бер генә халыҡҡа ла тәтемәгән. Шул иҫәптән – хатта рустарға ла. Тарихсы Әнүәр Әсфәндиәров билдәләүенсә, уларҙың бары ун процентлабы ғына – унда ла кенәз, граф кеүектәре генә – эйә булған ундай хоҡуҡҡа. Аҫабалығыбыҙҙы 1917 йылда Октябрь түңкәрелеше осоронда «Ер тураһында» тигән декреты менән бары Ленин ғына юҡҡа сығара. Ә революцияға тиклем былай булған: башҡорттоң ергә аҫабалыҡ хоҡуғын танып, Иван IV бабаларыбыҙға «Жалованная грамота» биргән, бүтән батшалар шуны, үҙ заманына яраҡлаштырып, яңырта барған. Шәжәрәләр ҙә башҡорттоң аҫабалығын раҫлаусы юридик документ көсөнә эйә булған. Ана шуға күрә лә Тарихи Башҡорт иленең ҡайһы төбәгенә килеп ултырмаһындар, ят бауырҙар шул ике документ артынан йылдар, быуаттар буйы һунар иткән. Бына бер миҫал.

Стәрлетамаҡ – Өфө трассаһында «тауыш биреп» торам. Бер машина үтә бирҙе лә, арты менән килеп, ҡаршымда туҡтаны.

– Әйҙә, ултыр, Әхмәт ағай!

Кабинанан һонолған баштың эйәһе шулай тине. Мин белмәйем, ул таный. Икеләнер ваҡыт түгел. Бындай саҡта:

– Күктән теләгәнде ерҙән бирҙе Хоҙай Тәғәлә! – тип рәхмәт әйтеп, тиҙерәк ултырыу яғын ҡарайһың. Мин дә шулай иттем. Таныша һалдыҡ. Көйөргәҙе егете икән. Һүҙгә әүәҫ кенә. Ул-был хаҡында һөйләшә торғас, һүҙҙең осо әлеге лә баяғы шәжәрәгә килеп төртөлдө. Ана ни ти егет? Былай ти: «Борон башҡорттар йәйләүгә сыҡһа, Ырымбур казактары килеп, йорттарын тентей торған булған. Улар бигерәк тә шәжәрә менән «Жалыуаннай»ҙы эҙләгән. Таба алмаһалар, утта юҡ булһын, әйҙә, тип, тотош ауылды үртәп киткәндәр. Шуға күрә лә олатайҙар ул документтарҙы эсе-тышы туҙ менән көпләнгән имән һандыҡҡа һалып, ауылдан ҡырҙа, тау-таш араһында йәшереп тотҡан. Уның ҡайҙалығын ауылда бер-ике кеше генә белгән. Улар ҡартайыуға шәжәрә сере ышаныслылығы һыналған тағы бер-ике кешегә тапшырылған. Әллә шулар араһында берәй ышанысһыҙ кеше булған, әллә яттар, аңдып тороп, серҙе асҡан, әллә ни – беҙҙең шәжәрәле һандығыбыҙҙың ҡайҙалығын белеүсе кеше хәҙер юҡ...»

Шул һүҙҙәрҙе ишеткәс тә, Әнүр Вахитовтың «Аҡһаҡал аманаты» тигән хикәйәте хәтергә килде. Унда ауылдың ерен һалдырып алмаҡсы булған Әлимбайҙың был мәкерле уйы, бары шәжәрә арҡаһында ғына, барып сыҡмай. Тәүҙә ул, шәжәрәгеҙҙең мөһөрө юҡ, тип уны һанламаҫҡа итә. Уға мөһөр ҡуйҙырырға киткән Хәсән атлы аҡһаҡал менән уны оҙатып барыусы егеттәрҙе уҡтан үткәрмәксе була, әммә ҡарт туҡмалып, үлем сигенә етһә лә, шәжәрәне ауылдаштарына изге аманат итеп еткерә. Бына шулай үҙ ғүмере иҫәбенә шәжәрәне ҡотҡарып, ауылдаштарының аҫабалығын һаҡлап алып ҡала. Ана ниндәй баһа бирә хикәйәт геройы, ошо ваҡиғаны бәйән итеүсе Әхмәҙулла ҡарт, Хәсән бабайҙың подвигына: «Хәсән аҡһаҡалдың ҡаһарманлығы арҡаһында беҙгә килеп еткән ошо шәжәрә – хәҙер бер бәләкәй генә ҡомартҡы, – тип һүҙен йомғаҡланы Әхмәҙулла бабай, – тик уның мәғәнәһе беҙ уйлағандан ҙурыраҡ, улым. Еребеҙ тарихы, халҡыбыҙҙың бәхет өсөн, үҙ өлөшө өсөн көрәше сағыла унда. Ана шуның өсөн был яҙыуҙың ҡәҙере ҙур беҙгә. Боронғоларҙың килер быуынға аманаты – көрәш булған. Шуның йәнле шаһиты был яҙыу-шәжәрә. Мин Октябрь көндәрендә, һуңыраҡ колхоз төҙөгәндә, яңы тормош ҡорғанда, фашистарға ҡаршы һуғыш йылдарында ул көрәштең тере ҡатнашсыһы, шаһиты булдым... Шуға һаҡлайбыҙ беҙ был шәжәрәне.» (24-се б.) Тимәк, хикәйәт – яҙыусының абстракт фантазияһы ғына түгел. Ул хәҡиҡәтте аса: борон шәжәрәнең тарих та, ергә хужа булыуҙы гарантиялаусы юридик документ вазифаһын үтәүен дә аңлата.

Бары башҡорттарҙың ғына Урал–Яйыҡ–Иҙел араһын бер итеп, шунда ер юҡ ерҙә – ер, һыу юҡ ерҙә – һыу хасил итеп, тыуған ил, Атайсал – ватан тип аталған ошо ерҙе, яулашыр ерҙә яулашып, алышыр ерҙә алышып, көрәшер ерҙә көрәшеп, даулашыр ерҙә даулашып, яттарҙан ҡурсалап, йәнен аямаған ҡаһармандарыбыҙҙы данлаған милли эпосы бар. Тимәк, был тирәлә йәшәүсе башҡа ҡәүемдәр, – Америка халҡы һымаҡ, йыйылма халыҡ. Тимәк, башҡорт Урал – Иҙел (Волга) – Алтай ареалын әлмисаҡтан бирле төйәк иткән, биләп торған, Тыуған ил, Ватан тип белеп, ятҡа бирмәй, ҡанын да, йәнен дә йәлләмәгән бик боронғо ҡәүем.

Тимәк, үҫеп килгән йәш быуындарға шуларҙы ла күндерергә тейешбеҙ. Шулар аша ни өсөн аҫаба икәнебеҙҙе, башҡорт өсөн ер, тамаҡ туйҙырыр өсөн, мал көтөр, иген, йәшелсә үҫтерер урын ғына түгел, Тыуған ил, Ватан да. Уны яттарға бирмәҫ өсөн тәнен, көсөн аямаған, кәрәк икән йәнен дә фиҙа ҡылған ата-бабаларыбыҙҙың изге һөйәге мәңгелеккә төйәк иткән уны. Шуға ла был ил – Тыуған ил генә түгел, ғәзиздән дә ғәзиз ил! Башҡорт өсөн был ер – ваҡытлыса көн итеү

урыны түгел: беҙ ошо ерҙең тупрағынан яралған, ошонда түл йәйгән. Китер еребеҙ ҙә ошо. Ҡайһы бер ҡәүемдәрҙән айырмалы рәүештә, башҡорттоң һаҡлыҡҡа бүтән (прозапас) иле, ватаны юҡ.

Ғөмүмән, сама саманан уҙмаҫ, тип кенә, яҡынса ғына дөйөмләштергәндә лә, Әнүр Вахитовтың бөтә әҫәрҙәрен, математиктар теле менән әйткәндә, уртаҡ знаменателгә килтерергә була: улар барыһы ла тыуған ер, тыуған ил, милләт, тел яҙмышы өсөн борсолоуҙарҙан, шул яҙмыш өсөн бөтәбеҙҙең дә яуаплы икәнебеҙҙе, мыжыҡланмай ғына, ыжымай ғына, ҡайта-ҡайта хәтергә төшөрөүҙән тора. Ә былар уның илһамлы зиһене тыуҙырған хикәйәт һәм хикәйәләренең бөгөн дә актуаль булыуын, эстетик һәм тәрбиәүи әһәмиәте баһалап бөткөһөҙ икәнде аңлата.

## 4. Аманатҡа тоғролоҡ

Башҡорт фольклорында сит ырыуҙан ҡыҙ алыу – дуҫлыҡ билдәһе, һәләк булған аҡһаҡалды, батырҙы ырыуҙар сигенә ерләү – төрлө ҡәүемдәр татыулығы ырымы тип баһалана. «Йөҙимән» хикәйәһендәге Ҡатай ырыуы егете Таңатарҙың Табын ҡыҙын алыуы һәм, ике ырыуҙы яттарҙан ҡурсалап йөрөп, үлемен тапҡас, уның сик буйына ерләнеүе лә шундай мәғәнәгә эйә. Ә «Самауыр төҙәтеүсе», «Партизан һуҡмағы», «Алтын билбау» ише хикәйәттәр халыҡтар дуҫлығы идеяһы менән һуғарылған.

Поэтик ижады һәм мәғрифәтселек эшмәкәрлеге ярҙамында башҡорт менән ҡаҙаҡты моңдаш иткән, моңо аша уй-фекер берлегенә ирештергән, үҙе иһә ике халыҡты ла тиң күргән, шуға ла Башҡорт илендә генә түгел, ҡаҙаҡ сәхрәһендә лә үҙ кеше булған мулла Мифтахетдин бине Камалетдин әл-Башҡорди, йәғни Мифтахетдин Аҡмулла образы ла шул яҡтан асыла. Ул иһә халыҡтар дуҫлығы идеяһы таратыусы ғына түгел, шул дуҫлыҡты ғәмәли нығытышыусы булып кәүҙәләнеш ала. Самауырсы әйтеүенсә, «башҡорт менән ҡаҙаҡтың элек әрепләшеп йәшәүҙәре, барымтаға барыуҙары, ҡарымта яһауҙары хаҡында күп ишетә ул» (49-сы б.). Ошо хаҡта яҡшы хәбәрҙар булыуын иҫәпкә алғанда, үҙ өҫтөнә мәғрифәтсе шағирҙың ни тиклем хәүефле һәм ауыр миссия атҡарыу бурысын алырға йөрьәт итеүенә төшөнөүе ҡыйын түгел. Был миссияны ғәмәлгә ашырыуға ул халыҡтың күҙен асыу, аңын таҙартыу юлы менән өлгәшергә теләгән. Теләү менән генә сикләнмәгән ул, ошо изге эшкә ихлас тотонған да. Быны Аҡмулланың граждандлыҡ ҡаһарманлығы тип баһаларға мөмкин.

Ошо изге юлдан тайшанмауҙы үҙенең йәшәү маҡсаты итеп ҡуйып, уға өлгәшеү теләгенән, хикәйәт авторы күрһәтеүенсә, ул яҙмышының үҙен хәл итмәле киҫкен ике бололош яһай. Уларҙың береһе – «Стәрлебаш мәҙрәсәһенең бик данлыҡлы бер хәлфәһе ... Шәмсетдин Зәки» танылған шағир һәм остазы булыуға ҡарамаҫтан, Аҡмулланың унан ситләшеүе. Сөнки ул хәлфә Иҙел башында үткән һабантуйҙа шәкерт шағир Мифтахетдинға осраған сәсән әйтмешләй, «үҙе лә һуҡыр, халыҡты ла һуҡырлыҡҡа» өгөтләгән (68-се б.). Хикәйәт геройы булған самауырсы әйтмешләй иһә, «кешенең холоҡ-фиғеле уҡымышлылыҡҡа ҡарап ҡына үҙгәрмәй... Шәмсетдин Зәки.., мосолманлыҡҡа өндәп, күккә ынтылған халыҡты ғәфләт йоҡоһона оҙатҡан. Мифтахетдин Аҡмулла иһә, «хәлфә булыу ҡәҙерен белеп, донъя көтөр урынға, халыҡ араһына сығып киткән.., халыҡтан өйрәнәм, тип, күктән төшкән», йәғни ер тормошон яҙа башлаған (47-се б.). Аҡмулланың икенсе киҫкен боролошо, хикәйәттә әйтелеүенсә, әлеге Иҙел башы сәсәненең: «Халыҡты тыңла. Халыҡтан өйрән... Халыҡтың йыры, ҡобайыры, тарихы Стәрлебаш мәҙрәсәһе бирмәгән аҡылды бирә ул», – тигәнен тотоуы булыр. Шул уға Иҙелбашындағы һабантуйҙа, сәсәндәрҙе тыңлай торғас, «ярһыуын баҫа

алмай»(ә мин уның үҙен: «Данлыҡлы Стәрлебаш мәҙрәсәһенән Шәмсетдин хәлфә Зәки шәкерте Ҡөрьән-хафиз Мифтахетдин Камалетдин улы», – тип таныштырыуынан (47-се б.) сығып, ярайһы маһая биреп, тип өҫтәй алам) майҙанға сығып та, «эй, шәкерт, бында бит мәсет мөнбәре юҡ!» кеүек репликаларҙы бүтәнсә ишетеүҙән ҡурсалай. Шуға ла, «Самауыр төҙәтеүсе» тигән хикәйәт геройы һүҙҙәре менән әйткәндә, халыҡ Аҡмулланы «ил шәме» тип таный.

Әнүр Вахитовтың «Самауыр төҙәтеүсе» тигән хикәйәтенең геройы өсөн самауыр төҙәтеү – ҡарамаҡҡа йән аҫырау сараһы ғына. Асылында иһә был һөнәр уға халыҡ менән яҡындан аралашырға, ҡулынан эшен төшөрмәйенсә лә әңгәмә ҡорорға, иң мөһиме, Аҡмулла шиғриәтен, ул күтәргән идеяларҙы пропагандалауға форсат бирә. Ана ни хаҡында һөйләй ул: «Башҡорт хаҡында йыр-шиғыр һөйләп ҡаҙаҡ араһына сығып китә, ә ҡаҙаҡ араһынан туғандаш халыҡ хаҡында башҡорттарға шиғыр алып ҡайта. Ошо йылдарҙа уға Аҡмулла тип, йәғни халыҡты яҡлаусы, уҡымышлы, тип исем ҡуша халыҡ, ә ғүмеренең һуңғы йылдарында ул, байға бармаҡ төртөп күрһәтеп көлөп, ярлыға яр булып, ил гиҙеп йәшәгәндә зинданда ултырып сыға, әммә ул халыҡ дуҫы, ил шәме булыуҙан туҡтамай. Йәндәре көйгән ҡайһы берәүҙәр уны (кеше) яллап үлтерәләр. Бына кем Аҡмулла... Бына мин шул кешенең исеме, шиғыры онотолмаһын тип, хәлфәлегемде ташлап, самауыр төҙәтеүсе булып йөрөп ятам» (79-сы б.).

Шулай итеп, самауыр төҙәтеүсе кеше Аҡмулланың ижадын, идеяларын пропагандалаусы ғына түгел, үҙе лә уның юлын ҡыуыусы булып һынлана. Аҡмулла ла хәлфә йә указлы мулла булып, мәсет тотоп тороуҙан ил гиҙеүҙе артыҡ күргән. Аҡмулла ла – һөнәрмән, был да – һөнәрмән. Аҡмулла менән яҙмыштарының уртаҡ икәнен һөйләргә онотмаған, «уның исеме, шиғыры онотолмаһын» тип изге юлға сыҡҡан самауырсы үҙен Аҡмулла тип атамай. Әммә, кем белә, бәлки, тап шундайҙарҙы хөрмәтләп, Аҡмулла тип йөрөткәндәрҙер. Күрәһең, халыҡ «Аҡмулла» тигән һүҙҙе яңғыҙлыҡ исемен алмаштырыусы лаҡап-исем тип кенә белмәгән. Уға «кеше аңын ағартыусы» мәғәнәһендәге баһа төшөнсәһен дә һалған, уның изге эшен хуплауын да белдергән.

Әле телгә алынған геройҙар фонында Сәмиғулла («Тәрәнуй»), Биктимер («Аҡъегет»), аҡтар командирына ғашиҡ булған ҡыҙ («Ҡәһәр бағанаһы») ниндәйҙер кимәлдә диссонанс булып тойола. Сөнки улар, үҙ йәндәрен аяу маҡсатында, халыҡҡа хыянат итеүҙән тартынмай. Шуға ла халыҡ ҡәһәренә дусар булалар. Шундай кире күренештәрҙе фашлауы, уларға халыҡтың хөкөм сығарыуын күрһәтеүе илгә, халыҡҡа тоғролоҡ тойғоһоноң изге тойғо икәнен Ә. Вахитовҡа тәрәнерәк асыуға булышҡан.

Хикәйәттәр ҡарт кеше ауыҙынан һөйләтелә. Бында ла тәрән мәғәнә бар. Ул дуҫлыҡ, туғанлыҡ, бабалар йәдкәре тигән изге аманатҡа тоғролоҡ хаҡында ҡайғыртыуҙы аңлата. Әхмәҙулла ҡарттың телен сискән егеттең уны ихлас тыңлап, ишеткәндәрен беҙгә еткереүсе булып сығыш яһауы уҡ изге аманаттың ышаныслы ҡулдарға күсеүен кәүҙәләндерә.

Миңә ҡалһа, Әнүр Вахитовтың хикәйәләре лә изге аманатҡа тоғролоҡ идеяһы менән һуғарылған. «Һынау яҙы» хикәйәһендә, мәҫәлән, йәш агроном Шәрип Мөхтәров ҡарт профессорҙың ғүмерлек хыялын тормошҡа ашырыу, Ташҡабырға тигән яманаты сыҡҡан баҫыуҙы мул уңыш бирергә мәжбүр итеү теләге менән яна. Хикәйәнең «Элек шөкәтһеҙ, арыҡ күренгән Ташҡабырға уға яҡынайғандан-яҡыная бара ине» тигән һүҙҙәр менән тамамланыуы егеттең үҙ теләгенә ирешәсәгенә шик ҡалдырмай. Шуға ла унда беҙ үткән быуындар аманатына тоғро яңы быуын кешеһенең һынын танийбыҙ. Ошо яҡтан Шәрипкә Рафиҡ («Тәү тойғо») менән Шакир ҙа («Йәйләүҙә») яҡын.

Аманатҡа тоғролоҡ,тыуған ер тойғоһо кеүек изге төшөнсәле идеяны яҙыусы ат образы аша ла оҫта асыуға өлгәшкән. Бығаса телгә алынған «Урал толпары» хикәйәте бәйән итеүенсә, әсирлектәге хужабикәһе яҙмышына дусар ителгән Күк толпар, форсаты сығыу менән, тыуған еренә ысҡына. Тыуған тупраҡ тигәндә, ул әкиәттәге ел еткермәҫ ерән атты хәтерләтә. Белеүебеҙсә, фольклор йыйыусы егет Әхмәҙулла менән әңгәмә ҡорған арала шул толпарҙаң бер вариҫы урамдан үтеп китә. Бынан ҡаҙаҡ ерен ерһенмәй, ҡасып ҡайтҡан Күк толпарҙан түлле мал сығыуына, унан ҡалған нәҫелдең дә ошо ерҙе генә үҙ итеүенә төшөнәбеҙ. Тыуған ер тойғоһоноң көсәгилешен автор ат яҙмышы аша бына шулай кинәйәләй.

«Ир ҡанаты» хикәйәһендә лә ат образына үҙәк урын бирелә. Ул да – тыуған ер идеяһын асыуға тәғәйен. Хикмәт шунда: хикәйәнең һуңғы өлөшөндә тасуирланған бәйгелә ал бирмәгән Ир ҡанаты менән Ҡашҡа тигән аттар 1812 йылғы Ватан һуғышында легендар Абдрахман батыр менән француз яуын туҙҙырып ҡайтҡан Ерәндең затынан килеп сығып, Бөйөк Ватан һуғышы ғәрәсәттәре уртаһында йөрөп ҡайтҡан Ерән бейәнең нәҫеленән була. Шулай итеп, был юлайы ат образында яугирлыҡ ҡаһарманлығы традицияларының көсәгилешлегенә ишара яһала. Шул арҡала атҡа булған мөнәсәбәт шул ҡаһарманлыҡҡа, героик үткәндәргә мөнәсәбәт мәғәнәһен ала. Бына ни өсөн алдынғы комбайнсы Нурғәленең ғүмер буйы ат тәрбиәләп, ат яратыуын, йылҡы малының бәҫе төшкәндә лә, данлыҡлы Ерән бейә затын ҡурсалап алып ҡалған Мөхәмәтулла ҡарттың эшен ҡабул итеп алыуын аңлауы ҡыйын түгел.

Әнүр Вахитовтың геройҙары килер быуындарҙа йылы хәтирә ҡалдырыу теләге менән йәшәй. Ат йәнле Мөхәмәтулла ла, ҡасып-боҫоп ғүмер итергә мәжбүр булған сағында ҡарағас урманы үҫтергән Шәрип тә, мәғрифәт орлоғо сәсеүсе Аҡмулла ла, уның һүҙҙәрен илдән-илгә таратыусы самауырсы ла үҙ-үҙен ҡорбан итеп, ырыу шәжәрәһен һаҡлап ҡалған Хәсән аҡһаҡал да, уҡытыусы Хисмәт тә ана шундайҙар рәтенә инә. «Үрмәксе Сәлимйән», «Шәүлә», «Мәрхәмәт инәй» хикәйәләренең үҙ-үҙен генә ҡайғыртыусы геройҙары фонында улар ҡалдырған иҫтәлектең мәғәнәһе тағы ла баҙығыраҡ балҡығандай.

Әнүр Вахитов бер үк проблеманы бына шулай төрлө яҡлап яҡтырта, геройҙар яҙмышындағы төйөндәрҙе төрлөсә сисә. Мөхәббәт темаһына яҙылған хикәйәләре лә шуға миҫал («Рәшә», «Ҡуш тирәк», «Сәйер бәхет», «Онотолған моң», «Ынйыы сәскәһе»).

Иң элек шуны әйтеү фарыз. Әнүр Вахитовтың геройҙары яратыусы булып ҡыланыуҙы белмәй: яраталар икән, улар үлеп яраталар, мөхәббәт менән шаярыуҙың ни икәнен дә белмәйҙәр. Үҙҙәре яратып та, ятаҡаны шул хисте баһалай белмәһә, мөхәббәт хаҡына тип, ғорурлыҡ тойғоларын ҡорбан итмәйҙәр («Рәшә», «Ҡуш тирәк»); шул уҡ ваҡытта башҡалар бәхете хаҡына үҙ тойғоларына баш була беләләр («Сәйер бәхет», «Минең моңом»); оҙон-оҙаҡ йылдар үтеп тә, һуңлап булһа ла, тәүге хистәренә тоғро ҡалалар һәм ахырҙа ҡауышыу бәхетен татыуға ирешәләр («Онотолған моң», «Уҙған ғүмер – аҡҡан һыу», «Ынйыы сәскәһе»).

## *5. Һүҙ ҡәҙере һәм...*

Әнүр Вахитовтың геройҙары быҫҡыуҙың ни икәнен дә белмәй: улар ялҡынланып яныусан. Үҙ ялҡындарынан башҡаларға яҡты ла, йылы ла, ут та бирә беләулар. Һүнгән саҡта ла, иң юғары нотаға еткәс кенә, кинәт өҙөлгән моңдо хәтерләтәләр. Ауыл (ырыу) шәжәрәһен башҡорттоң аҫаба еренә яҫҡынған дошманға бирмәҫ өсөн, Хәсән аҡһаҡалдың саңғы менән текә ҡаянан һикереп ҡасыуы («Аҡһаҡал аманаты»), Вәлиәхмәт ҡарттың йәштәр менән уҙышып бесән сабыуы

(«Вәкәт аҡланы»), туҡһанды үткән Мөхәмәтулланың бәйгеләә йөрәге ярылыуы («Ир ҡанаты») уҡыусы күңелендә ана шундай тойғо ҡалдыра ла инде. Берәй саҡ берәйһе: «Әҙәби әҫәрҙәрҙә ғорурлыҡ тойғоһо нисек бирелә?» – тип баш вата ҡалһа, мин уға: «Әнүр Вахитовтың әҫәрҙәрен уҡырға тәҡдим итәм», – тип яуап бирер инем. Ысынлап та, уның геройҙары ғорур булыуҙары менән айырылып тора. Үҙҙәренең хаҡлы икәнлектәрен иҫбатлай алмаһалар, улар ситкә китһә-китә, әммә намыҫтарына, принциптарына хыянат итеүҙе белмәй («Алтын билбау», «Юл өҫтө», «Шәрип урманы», «Йөҙимән», «Уҙған ғүмер – аҡҡан һыу», «Рәшә»). Үкенескә ҡаршы, «герой ситкә китә» мотивы саманан тыш ҡабатланыуы ғына эсте бошора. Шул арҡала холоҡ-ҡылыҡтары йәһәтенән дә, башҡа яҡтарҙан да төрлө булған персонаждар ҙа бер-береһенә бер туғандар кеүек оҡшап ҡуйғылай, ә уларҙың образдары бер үк ҡалыпҡа һуғылған скульптур портретты хәтерләткеләй. Бындай тойғо ыңғай геройҙарҙың образдарынан ғына түгел, кирәләренеке менән танышҡанда ла тыуа («Үрмәксе Сәлимйән», «Мәрхәмәт инәй», «Партизан һуҡмағы»).

Ә. Вахитов, ғәҙәттә, хикәйәттәрен Әхмәҙулла бабайҙың теле сиселеүгә сәбәп булырҙай моментты әҙерләүсе ситуацияны тасуирлауҙан йә туранан-тура уның тура телмәренән башлау алымын файҙалана. Хикәйәләрендә иһә төп ваҡиғаны тасуирлауға күскәнсе, хикәйәсе геройының төрлө-төрлө фәлсәфәүи уйланыуҙарын теркәй. Ә уның геройҙары йә мәңгелек күсәгилеш («Быуын-быуын донъя»), юғалтыуҙарға ҡарамай, хәҡиҡәтте иҫбатлау зарурлығы («Ҡуш тирәк»), үҙ-үҙенә баһа биреү, нәфсенең зыяны («Мәрхәмәт инәй»), кешенең сәйер яҡтарына күнеккәс, уның ҡәҙимге кешесә эш ҡылыуына сәйерһенеү («Сәйер бәхет») хаҡында уйлана. Тасуирланаһы ваҡиға шул уйҙарҙың осона ялғана һәм уларҙы иллюстрациялай башлай. Ә инде Әхмәҙулла ҡарт ауыҙынан мәғлүм булған һәр ваҡиға бөгөнгө аша үткәндәрҙе, үткәндәр үтә бөгөнгөнө баһаларға, йәшәү мәғәнәһен асыҡлауға булыша. «Кеше һәр ваҡыт килер көн менән йәшәргә тейеш. Килер көн – килер бәхет ул. Был – кешенең бер таянысы. Икенсе таянысы – үткән юлы. Үткәнгә ҡарап фәһем алырға тейеш кеше. Халыҡ бит бөгөнгәһө менән генә йәшәмәй. Уның үткәне булмаһа, бөгөнгәһө, ә бөгөнгәһө булмаһа, киләсәге булмаҫ ине,» – ти яҙыусы Әхмәҙулла ҡарт исеменән («Тәрәнуй»).

«Яҡты күңел» йыйынтығы, минеңсә, авторҙың фольклорҙы тәрән аңлауын да, уны ижади файҙалана алыу оҫталығын да күрһәтә. Унда  халыҡ ижады поэтикаһы менән һуғарылмаған бер генә әҫәр ҙә юҡ.

Хикәйәттәрендә лә, хикәйәләрендә лә Ә. Вахитов мәҡәлдәрҙе йыш ҡуллана. Улар ҙа әҫәрҙең фәлсәфәүи айышын арттырыуға булыша. Әнүр Вахитовтың геройҙарына сәсәнлек һәләте, шиғри күңел хас. Улар йә йыр һуҙа, йә ҡобайыр ҡоя. Ситуацияһына ҡарап, художестволы тәғәйенләнеше йәһәтенән ҡарағанда, улар төрлө-төрлө бурыс атҡара.

Йырҙар ниндәй маҡсат менән ҡулланыла һуң? Башта ошо һорауға яуап эҙләп ҡарайыҡ. Яҙыусы үҙенең бер хикәйәтен «Салауат күпере» тип атаған. Шул атаманы уҡығас уҡ, «Салауат булғас, бында һүҙ тарихи 1773 – 1775 йылдарға ҡағылмай ҡалмаҫ ул» тигәнерәк уй баштан  йүгереп үткәндәй булды. Тик автор шул тиклем дәүер буйы батшабикәнең тәхетен дер һелкеткән тарихи ваҡиғанан ниндәйерәген художестволы итеп үҙләштерер? Уныһын хикәйәт исеменә ҡарап ҡына күрәҙәләү – ситен. Әммә әҫәрҙе уҡырға башламаҫтан уҡ, уҡыусының күҙенә бәрелеп торһон тигән кеүек, беренсе абзацта уҡ яҙыусы цитата рәүешендә халыҡ йырынан бер куплет бирә. Шул үҙенән-үҙе иғтибарҙы тарта. Бәй, уны беҙгә күптән таныш Әхмәҙулла бабай һуҙа, имеш:

*...Теләмеш тә тигән яман һаҙҙың*
*Сәсле түңгәк икән күтере;*
*Шул һаҙҙарҙан үтә түтә юлҡай –*
*Салауатҡай ирҙең күпере...*

(60-сы б.)

Ҡармаҡ һалып, беҙгә «Танышыу» хикәйәтенән таныш йәш фольклорсыны эйәртеп ҡайтырға булғас, Әхмәҙулла уны «түтә юл» менән алып ҡайтмаҡсы була. Был йырҙы шул тәҡдименән һуң йырлап ебәрә лә инде. Бабайҙың үҙ телмәрендә лә, йыр тексында ла «түтә юл» телгә алына. Тәү ҡарашҡа беренсеһенең телдән ысҡыныуы йырҙы хәтерләргә мәжбүр иткәндер ҙә йыр шуның менән үҙенең ролен атҡарып та ҡуйғандыр һымаҡ тойола. Әммә шул куплеттың үҙ эсендә «түтә юл – Салауат күпере» бәйләнеше булыуы беҙҙе был тойғонан бик тиҙ арынырға мәжбүр итә. Баҡтыниһәң, Әхмәҙулла ҡарт, ғәҙәтенсә, төп темаға кинәт кенә алып инеп китмәç өсөн, уны сит-ситтән генә, ҡырлатып ҡына, тыңлаусыһын бер аҙ албырғатып ҡына күсмәк булған икән – ә һүҙ айышы Салауат Юлаев ғәскәренең, әҙәм үткеһеҙ күтерле һаҙ аша ике көн, ике төн эсендә күпер һалып, ҡамауҙан ҡотолоуын бәйән итеүгә ҡайтып ҡала.

Шуныһын да әйтергә кәрәк: автор тарафынан риүәйәтсе итеп тәғәйенләнгән Әхмәҙулла бабай был юлайы үткән тарихты өйҙә ултырған килеш түгел, ваҡиға булып үткән урында, ҡасандыр Салауат ғәскәре күпер йәйеп, шуның аша үткән күтерле һаҙлыҡ өҫтөндә, һөйләй. Ә был уның тыңлаусыһына, фантазияһын эшкә егеп, ул ваҡиғаны бөтә фажиғәле героик асылында йәнле рәүештә күҙ алдына килтерергә форсат бирә.

Шулай итеп, «Салауат күпере» хикәйәтендә йыр – Әхмәҙулла бабайҙың юлдашын да, Ә. Вахитовтың уҡыусыһын да сюжет ҡалыбына һалынған ваҡиғаны ҡабул итеүгә көйләүсе, уның төп пафосын һәм мотивын алдан аңғартыусы үҙенсәлекле увертюра кимәлендәге һүҙ ялғаусы бурысын үтәүсе композиция алымынан ғибәрәт. «Юл өҫтө» хикәйәһендәге йырҙың да эстетик тәғәйенләнеше шуға ҡайтып ҡала. Бынан тыш, йыр был хикәйәттә һәм «Тәрәнуй» тигәнендә геройҙың социаль протесын сағылдыра. Әхмәтхан байҙың ҡыҙы Сәлимәгә ғашиҡ булып, уны алып ҡасҡаны өсөн Себер юлыҡҡан Сәйеттең («Юл өҫтө») йыры тәүҙә:

*Башҡорт иле мәңге юлда икән,*
*Ҡайҙа илтә икән улдарын?*
*Оҙатыр ҙа инем, һай, шатланып,*
*Тик бәхеткә илтмәй юлдарым, –*

тибындағы моңһоу һәм төшөнкөл хистәрҙән торһа, аҙаҡ ул, иленә ҡайтып, ҡалалағы йәшерен революцион ойошма ағзалары менән аралаша торғас, өмөт йырын һуҙа. Улай ғына ла түгел, бәхетте яңғыҙ табып булмауына, яңғыҙҙың бәхете – бәхет түгел икәненә, күмәкте бәхетле итмәйенсә, айырым кеше бәхетле була алмаясағына төшөнгән кеше булараҡ, бына бындай йырҙы үҙ итә:

*Башҡорт күкрәгенән үткән юлдар*
*Себерҙәрҙә генә туҡталмаç.*
*Кире һүрелмәйек инде берләр* (бер ҙә. – **Ә. С.**),
*Юлъа сыъайыҡ тип уҡталъас.*

Ә. Вахитовтың әҫәрҙәрендә йырҙың эстетик бурысы әйткәндәр менән генә сикләнмәй. Йыр уның хикәйәтендә геройҙың артабанғы яҙмышы менән таныштырыусы, уның тәржемәи хәле хаҡында мәғлүмәт биреүсе өҫтәлмә сара

хеҙмәтен дә үтәй («Шәрип урманы»), мөхәббәт хисен әйтергә ҡыйынһынған ғашиҡ өсөн шул илаһи хисен аңлатырға ярҙам итә («Рәшә», «Тәүге йыр»), онотола төшкән үткәндәрҙе яңынан кисерергә, хәтирә яңыртыуға ла булыша, геройҙы яңы аҙым яһарға этәреү ҡеүәһенә лә эйә («Онотолған моң»). Ә, дөйөм алғанда, Ә. Вахитов йырҙы әҫәрҙәренә лирик көйләнеш биреү өсөн дә оҫта файҙалана.

Ҡобайыр формаһын иһә Ә. Вахитов хикәйәләренә лә, хикәйәттәренә лә индерә. Бары беҙҙең генә халыҡтың ауыҙ-тел поэзияһына хас булған был жанр ҡалыбының ул әҫәрҙәрҙә ҡулланылышы халыҡ эпостары йоғонтоһонан килә булыр. Башҡорт халҡының «Аҡбуҙат», «Ҡара юрға», «Аҡһаҡ ҡола» тигән ҡобайырҙары бар. М.Ғафуриға иһә 1909 йылда Асылыкүл янында «Һоро юрға» тигән ҡобайыр ҙа осраған. Әнүр Вахитовтың сәсән телле геройҙары ҡойған ҡобайырҙар тап шундай әҫәрҙәргә хас романтик күтәренке рух менән һуғарыла. Шул эпик ҡобайырҙарҙағы һымаҡ уҡ, Ә. Вахитовтың әҫәрҙәрендә лә ҡобайыр ат йәнле башҡорттоң яратҡан атына поэтик алғышынан ғибәрәт. Ғүмерен йылҡы тәрбиәләүгә бағышлаған Мөхәмәтулла ҡарт Саптар атҡа алғыш әйткәндә, уның буйһынын, етеҙлеген, аҡыллылығын, түҙемлелеген маҡтау менән генә сикләнмәй, уның данлы сығышын да иҫенә төшөрә. Был аттың ата-бабалары иһә Парижды баш һалдырыуҙа ҡатнашҡан. Шулай аттың сығышын хәтергә төшөрөп, йылҡы психологияһын яҡшы белгән был йылҡысы сәсән халҡыбыҙҙың «Азамат кантон» тигән йырындағы:

*«Ҡайҙа ла ъына бармай, ниҙәр күрмәй*
*Ир-егеткәй менән ат башы», –*

тигән мәҡәл вазифаһы үтәмәле һүҙҙәрҙең мәғәнәһен конкретлаштырғандай итә.

Алғыш та – һүҙ магияһына инаныу емеше. Мөхәмәтулланың – Саптар атҡа, Зөлхизә әбейҙең Күк толпарға әйткән алғышы ла – шуға миҫал. Боронғоларҙың инанысы буйынса, ғөмүмән, поэтик һүҙ магик көскә эйә. Ә изге теләктән торған алғыш – доға көсөнә эйә, тип белгәндәр. Беҙҙең миҫалдарҙа ат алғышы – ат доғаһы Саптар атҡа ла, Күк толпарға ла уларға бик тә яуаплы бурыс йөкмәтелгән саҡта, тәүгеһен – яуға, икенсеһен тотҡонлоҡтан илгә оҙатҡанда әйтелә. Мәғлүмдер ки, йылҡы малы изге теләкте, йылы һүҙҙе, иркәләүҙе бик тә яҡшы аңлай.

Тимәк, Әнүр Вахитовтың хикәйә, хикәйәттәрендә ҡобайыр – ҡобайыр ғына түгел, ул ҡобайырҙан мөһимерәк вазифа атҡара һәм әҫәрҙең дөйөм йөкмәткеһенә, пафосына килешеп, йәпләшеп кенә тора. Уларҙа ҡобайыр шулай уҡ ваҡиғалар ағышын бер ни тиклем тотҡарлай биреүгә йә уның ағышын талғынлаштырыу эффекты тыуҙырыуға, тимәк, хикәйә йә хикәйәткә ул эпосҡа хас башланғыс өҫтәүгә лә хеҙмәт итә.

## 6. Шиғыр теле менән

Күп ҡәләмдәштәре кеүек үк, Әнүр Вахитов та әҙәбиәт майҙанына шиғриәт аша килде. Әммә «аша килде» тигән һүҙбәйләнештән сығып: «Ә-ә, шиғриәт уға әҙәбиәткә килеү юлында бер этап ҡына, хикәйәт, хикәйә жанрҙарын һәм әҙәбиәт ғилеме өлкәһен үҙләштереү өсөн күпер йә баҫҡыс ҡына булған икән,» – тип уйларға ярамай. Ни өсөн тигәндә, 50 - 60-сы йылдарҙа ваҡытлы матбуғат та, «Йәш көстәр» альманахы биттәрендә шиғырҙарын йыш-йыш баҫтырып тороп та, 70-се йылдарҙа был эшен һирәкләтә төшөп, сәсмәүерҙең әлеге жанрҙары өҫтөндә эшләгән һәм әҙәби-ғилми тикшеренеүҙәргә мөкиббән киткән дәүерендә лә шиғриәт толпары (Пегас) Әнүр Вахитовты ташлап китмәне. Ул үҙе лә уның ял – ҡойроғон тарап, янбашынан һөйөп, һырт буйынан һыйпап, «Ир ҡанаты» хикәйәһендә үҙе әйтмешләй:

*Ай, ат икән, ат икән,*
*Ир ҡанаты – ат икән,*
*Ҡанатлы иргә ҡаушау, ҡурҡыу,*
*Артҡа сигеү – ят икән, –*

тип кәрәк саҡта уға егеттәрсә һикереп менгән саҡтары була торҙо. Быға – хатта уның хикәйәт һәм хикәйәләре лә дәлил. Уларҙың күптәрендә башына хәсрәт төшкәндә лә, шатлыҡ-ҡыуаныстар кисергәндә лә, әйтер һүҙен тәьҫирлерәк итергә теләгәндә лә, алғыш әйткәндә лә, уның геройы, тәьҫирләнеп китеп, йә йыр һуҙа, йә ҡобайыр ҡоя.

Ҡарамаҡҡа, хикәйәт, хикәйәләрендә Ә. Вахитов халыҡ йырҙарын стилләштереүҙән ары китмәй. Уның теге йә был персонажы башҡарған йырҙың оҙон көйлө халыҡ йырҙарына хас унға – туғыҙ үлсәменә ҡоролоуы, ижек етмәҫтәй урында, йөкмәткегә ҡамасауламай торған өндәр йә «та», «тә» кеүек ярҙамсы һүҙҙәр ҡыҫтырып йә иркәләтеү, кесерәйтеү төшөнсәһе биреүсе – ҡай, – кәй тибындағы ялғауҙар өҫтәп, үлсәмде теүәлләп ебәреүҙәр, йә «йөрәктәре хайран ярһығас» рәүешендә яңғыҙлыҡ төшөнсәле һүҙҙе лә куплеттә ҡулланыу осраҡтар, йә һүҙ бараһы объектты тәүҙә, «яман һаҙ» тип берлектә атап та, шунда уҡ, «шул һаҙҙарҙы» формаһында куплеттә ҡабатлаған һымаҡ миҫалдар һәм йыр башҡарылған шарттың һүрәтләнеше лә шул тойғоно көсәйтә. Ана «Салауат күпере» хикәйәтендә риүәйәтсе ролен атҡарыусы Әхмәҙулланиндәй шартта нисек йырлай башлай. «Ул, усаҡтағы торонбаштарҙы һүндерә-һүндерә, аҡрын ҡына көйләй башланы», – ти яҙыусы йәш фольклорсы исеменән («Яҡты күңел». 60-сы б.). «Шәрип урманы» тигәнендә шул уҡ ҡарттың йыр башлауы былай тасуирлана: «Әхмәҙулла бабай тамағын ҡырып алды ла күҙҙәрен ҡыҫты, ҡулдарын ике тубығына һалып, ҡайҡая төштө һәм килешле генә тауыш менән йырлап ебәрҙе». Ә уға тиклем ҡарттың ҡурайын гөжләтеп ала (Шунда уҡ. 93-сө б.). Ҡурайҙың телгә килеүе генә түгел, телгә алыныуы уҡ оҙон көйлө башҡорт йыры яңғырауы эффекты тыуҙыра.

Әммә йыр строфаларына иғтибар итегеҙ. Әйтеләһе төп фекер башҡорт халыҡ йырҙарының һәр куплетында һуңғы ике юллыҡта әйтелә булыр. Йырыбыҙҙың был үҙенсәлегенә рус тикшеренеүселәре лә иғтибар иткән. Мәҫәлән, рус телле уҡыусыларға башҡорт ҡурайы хаҡында тәүләп мәғлүмәт биргән яҙыусы һәм лексикограф Владимир Даль 1843 йылда «Москвитянин» тигән журналда «Башкирская русалка» тигән баш аҫтында «Заятүләк менән Һыуһылыу» иртәгенең авторлаштырылған вариантын баҫтыра. Шуның инешендә башҡорт халҡының инаныстары, мифтары, фольклоры, этнографияһы буйынса ҡайһы бер мәғлүмәттәр биргән. Йырҙарыбыҙ хаҡында иһә бына ни тигән: «Нынешние башкирские песни состоят из отрывистых четырехстиший, в которых обыкновенно два первых стиха заключают в себе картину, басню, притчу, а два последние – применение, сравнение» (Даль В.И. Башкирская русалка /Башкирия в русской литературе/ Сост., авт. предисл. и коммент. М. Г. Рахимкулов. – Уфа,1989. – Т. 1. – С. 176).

Ошо күҙлектән Ә. Вахитовтың геройҙары йырлаған йырҙарға иғтибар итһәк, шуға төшөнөрбөҙ. Бәй, улар В. И. Даль әйткәндең киреһе икән дә баһаң: һәр куплеттың һәр юлы төп фекер менән бәйле. Бына Әхмәҙулла бабай беренсе осраҡта йырлаған йырҙың тексы:

*...Теләмеш тә тигән яман һаҙҙың*
*Сәсле түңгәк икән күтере;*
*Шул һаҙҙарҙы үтә тутә юлҡай –*
*Салауатҡай ирҙең күпере...*

Икенсе осраҡтан миҫал:

*Ғүмерем үтте елдәй бушҡа иҫеп,*
*Ниҙәр әйтер икән башҡортом...*
*Килер саҡта берәү белер әле –*
*Ҡараъас та аъас ултырттым.*
*Ҡараъас та аъас төбө ҡырас,*
*Ҡырас төптә ята яҫы таш.*
*Яҫы ташҡа ошо йырҙы яҙҙым,*
*Йөрәктәрем хайран ярһыъас...*

Куплетының дүрт юлының да төп йөкмәтке менән туранан-тура бәйләнештә булыуы, уны асышыуға буйһондоролоуы был йырҙарҙың әҙәби шиғыр ҡануны буйынса авторҙың үҙе тарафынан ижад ителеүе тураһында һөйләй. Башҡа әҫәрҙәрендәге йырҙар ҙа («Тәрәнуй», «Ташбилбау», «Рәшә», «Тәүге йыр»), – әле миҫалға килтергәндәре кеүек үк, индивидуаль ижад емеше, автор ижады. «Урал толпары» хикәйәһендә – Күк толпарға, «Ир ҡанаты» хикәйәһендә Саптар атҡа төбәп әйтелгән алғыш-ҡобайыр хаҡында ла шуны уҡ әйтергә була. «Ир ҡанаты» хикәйәһендә «һүҙҙе еткереп һөйләгәне, һамаҡлап та ебәргәне өсөн «шырмый» тигән ат алған, асылында сәсән телле Мөхәмәтулла ҡарт исеменән бирелгән ҡобайыр фольклор белгестәре дидактик ҡобайыр тип атаған төркөмгә ингән әҫәрҙәр рухында ижад ителгән.

«Һүҙ хаҡында баллада» хикәйәте менән «Ир ҡанаты» хикәйәһендә күтәргән һүҙ ҡәҙере проблемаһы Әнүр Вахитовтың шиғриәтендә лә ҡабатлана. Халыҡта «Ата белһәң – мылтыҡ, ата белмәһәң – шылтыҡ» тигән мәҡәл бар. Һүҙ ҡәҙере проблемаһының Ә. Вахитов ижад иткән шиғри әҫәрҙәрҙә хәл ителеше лә шуға оҡшаш юҫыҡта хәл ителә. Ул да, яйын белеп кенә, шуға ярашлы һүҙҙе үҙ мәлендә әйтә белһәң генә ауыҙ асыуың аҡланыуы хаҡында фәлсәфәүи уйлана:

*Һүҙҙәр ҙә бит хас кешеләр кеүек:*
*Берәүҙәре тора ҡысҡырып,*
*Икенсеһе – артыҡ баҫалҡы ла,*
*Өсөнсөһө – хатта ҡурҡыныс...*
*Тик барыбер һүҙҙәр донъяһына*
*Кеше хужа, кеше аҡылы.*
*Һүҙ бит үҙе – кеше асылы һәм*
*Кеше бөйөклөгө, ялҡыны.*

(Һүҙ. 41 -се б.)

Шуға ла Әнүр Вахитовтың лирик геройы бына ни хаҡында хыял итә:

*Һүҙем!*
*Һиңә эйә булһам ине,*
*Үҙ йәйәмә һалъан уҡ һымаҡ!*

(Һүҙ. 42-се б.)

Ошо хыял өҫтөнә: «Кире ҡайтһа ине, һәр көнөмдө Тығыҙыраҡ итер инем мин», – тип хыялланыу («Һәр көн миңә ниҙер өҫтәп тора...» 50-се б.), ә бушҡа исрафланған көндәре өсөн: «Ҡот осорлоҡ. Күпме ғүмер уҙған, Күпме көсөм бушҡа тирелгән», – тип көйәләнеүе, «Рәми иҫтәлегенә» тигән шиғырында: «Һиңә ҡарап фәһем алғас белдем Күп көнөмдөң бушҡа уҙғанын», – тип үрһәләнеүе һәм, һүҙгә ҡуйған талабы һымаҡ, үҙенең мөмкинлектәрен дә рациональ реализациялау хаҡында:

*Һин онотма шуны: таш түгелмен,*
*Таш түгелмен, әммә һалҡынмын.*
*Кешеһенә күрә ҡатымын һәм*
*Һүнмәҫ өсөн янъан ялҡынмын –*
*Шуны йәшәү тиһәм, хаҡлымын, –*

тигәне («Йәшәү». 44-се б.) «һүҙ ҡәҙере» проблемаһы сиктәрен аша үтеп, ғөмүмән, мәсьәләне уның лирик геройының йәшәү кредоһы, йәшәү ғәме юҫығына күсерә. Ә ул кредо, ул ғәмде шағир бына нисек асыҡлап ҡуя:

*Шуъа ла мин, мәңгелеккә тиеп,*
*Мобилизацияланъан кешемен.*

(«Мин байрамды кире ҡаҡмайым һис...» 53-се б.)

Шуға ла ул кемдәрҙеңдер мыҫҡыллы ауыҙ йырыуына ла, башҡаһына ла иҫе китмәй, «Халҡым – үҙемдеке, ана шуға үҙемдеке тиеп» эшләй. Үҙенә тапшырылған эште, байға көнләксөләккә ялланған кеүек, илке-һалҡы атҡарыусыларҙың үҙҙәренән көлә һәм ғорур рәүештә шуны белдерә:

*Ялланманым, ҡай берәүҙәр кеүек,*
*Юҡ, халҡыңа булмай ялланып.*
*Ана шуъа уның алдында мин*
*Ябай эшсе булып ҡаламын.*

(«Ялланманым». 45-се бит)

Шуға ла лирик геройҙың тынғыһыҙлығын һәм: «... мин булам бер ут, бер – һыу (Йәшәү – шунһыҙ йәшәү түгел)», – тип белдереү яһауы («Тупраҡ». 47-се б.) һис тә бушҡа оран һалыу, декларатив фекер булып тойолмай. Уны, «Тормош» тигән шиғырҙа әйтелгәненсә, еңел-елпе елкендермәй («Еңел килһә еңеү – тәмһеҙ тойҙом»), башҡаларҙың уңышы көнләштермәй, киреһенсә, уларҙың алға сығыуына булышыуҙы изге эш тип белә («Артта ҡалһа, дуҫҡа ҡул бирҙем. Мине уҙғандарҙы дәртләндерҙем, Ҡыуып еткәненә юл бирҙем». 49-сы б.).

Юҡ-юҡта Ә. Вахитовтың лирик геройының һуғыш осоро балаһы икәне үҙен һиҙҙертә. «Зәңгәр күкте һөйә күңелем...» тигән шиғырҙа ул, уратып-сурытып тормаҫтан, шулай ти:

*Һуъыш һүҙен һигеҙ йәштән беләм,*
*Һигеҙ йәштә инде телемә.*
*Һигеҙ йәштә айырылышыу булып,*
*Ҡайъы булып инде өйөмә.*

(38-се б.)

Һигеҙ йәшендә һуғыштың айырылышыу һәм ҡайғы булып өйгә инеүен аңлаған лирик геройға өҫтәл дә («Атай өҫтәле». 24-25-се б.), стеналағы карта ла («Бер карта бар,» 37 – 38-се б.) уға атаһын хәтерләтә, ә атаһын хәтерләү – һуғыш йылдарын. Оноторлоҡмо ни атаһын тартып алып, бала көйө генә олоғайырға мәжбүр иткән был яман афәтты! Ана бит лирик герой үҙе үк шуны геүаһлай. Ә ул былай ти:

*Яҙҙан тормай кеше ъүмерҙәре,*
*Бына йәй ҙә, бәлки, үтәлер...*
*Онотмайым миңә ҡанат ҡуйъан*
*Туъыҙынсы майҙың иртәһен.*
*Бала көйө олоъайъан инем,*
*Онотолъан ине ҡыуаныу...*

(«9 май көнө әйтелгән теләк». 58-се б.)

Һуғыш темаһына саҡ ҡына ҡағылһа ла, Ә. Вахитовтың тел төбөнән унын һуғышты күрә алмауы, донъяла, илдә именлек көҫәүе айырым-асыҡ төҫмөрләнә.

Һигеҙ генә йәштән атайҙан ҡалған кескәй Әнүргә нужа һурпаһын тормош туҫтаҡлап-туҫтаҡлап эсерә. Бары шул саҡта күңелендә тыуған сәм, башҡаларҙан үҙен кәм тип белмәү тойғоһо, уға етемлек тигән афәтҡа ҡарамайынса, теш ҡыҫып булһа ла, серәнә биреп, алға, тик алға барырға көс бирә. Әммә яҙмыш бер киреләнһә, эҙ яҙҙырырға ирек бирмәүсән шул. Ир етеп, ғаилә ҡороп, үҙе атай булыу бәхетен кисерә башланым тигәндә генә, шул сәбәптән ул тағы ла эҙләнергә тотона. Бары, үҙе әйтмешләй, мәңгелеккә үҙ-үҙен мобилизациялай алыуы ғына уны ир иңе күтәргеһеҙ ҡайғылар алдында бөгөлөп төшөргә ирек бирмәй. Ана бит, холҡо, ынтылыштары, йәшәү принциптары, баш эймәүсәнлеге менән авторҙың үҙ образына төкмә-төк тура килгән лирик геройы бәхет хаҡында нисегерәк фәлсәфә һата. Ул, боронғолар өйрәткәнсә, барына шөкөр итеп, юғына өмөт итә, заман өйрәткәнсә, яҡты киләсәккә күҙ төбәп йәшәүен белдерә.

*Нәҫелемдә зарлы ҡәрҙәшем юҡ,*
*Шаһит шуға яҡты яҙмышым!*
*Таңъы ысыҡ төҫлө ъәмһеҙ бит ул*
*Беҙҙә кешеләрҙең һаъышы...*
*Шуъа башты ъорур йөрөтәмен,*
*Яҡты көндәй яҡты сырайым.*
*Яҡшы беләм килер көндәремдең*
*Бөгөнгөнән матур булырын...*

Кем белә, 1958 йылда яҙылған был юлдарҙа, бәлки, яҡты киләсәк хаҡына нужаларға сыҙарға өйрәткән рәсми идеология менән бәхәс, уға йәшерен ирония ла әйтелгәндер (һәр хәлдә бөгөн ул шулайыраҡ та аңлашыла). Ни генә тимә, Әнүр Вахитов тормошта ирониялап һөйләшә белә ине. Унын аҫтыртын төртмә теллелегенең күптәргә оҡшап етмәгәне лә мәғлүм. Был һәләте шиғырҙарында ла сағылмай ҡалманы. «Эт йәнле кеше», «Этврач» шиғырҙары шуға миҫал, вузды бөтөрөп ҡалала ҡалып ҡағылып-һуғылып йөрөгән белгестәрҙән ул шулай тип көлә:

*Беҙҙең менән бер үк йылды*
*Бөттө вузды ветврач...*
*Һәм ауылъа китмәҫ өсөн*
*Булып ҡалды этврач.*

Ә инде «Эт йәнле кеше» тигәнендә ялағайҙың карикатур һынын бик тә оҫта һүрәтләй. Ғәбделғәни урамда осраған түрәһенең этен үбә, ҡулъяулығы менән унын туҙанын һөртә. Ахырҙа Ғәбделғәниҙең, ялағай ғына түгел, ике йөҙлө булыуы ла фашлана. Унын ҡыланышына «Һиңә бөгөн ни булған?» тип ғәжәпһенгән иптәше унан шундай яуап ала:

*«Эткә түгел, үҙенә, – ти, –*
*Төкөрөр инем, туъан...*
*Начальнигым шул, туъан.»*

(18-се б.).

Үҙенең шиғырҙарында Ә. Вахитов, япраҡтары, ботаҡтары туналғанда ла, «Көс-ҡеүәтен раҫлап тормоштоң,.. Ихлас кереп йәшел сатырын» өр- яңынан япраҡ, ботаҡ ебәргән ағас образына йәнәшәлек принцибы буйынса, тамыры өҙөлмәһә, кешенең дә йәшәү ҡеүәте хаҡында ла уйлана. Ә тамыр тигәндә, ул халыҡ

менән үҙен бер иткән телде күҙ уңында тота («Тамырҙарым». 10 – 12-се б.). Йә ул «Тәүрат» йә «Ҡөрьән-Кәрим» әйткәндәргә таянып, кешенең тупраҡтан яралыуы хаҡында фәлсәфә һата башлай, һәм изге эш өсөн үҙ-үҙен ҡорбан ҡылырға әҙер тороуын белдереп, былай ти:

*Тыуһын, тимен, минән һуңъылар*
*Минән һәйбәтерәк тупраҡтан.*

(«Тупраҡ». 47-се б.)

Әнүр Вахитовтың лирик геройы – ғашиҡ кеше: ул тормошто һөйә, ул эште ярата, ул дуҫтарын ярата. Ул матурлыҡҡа ғашиҡ. Һөйгәне хаҡына барыһына ла түҙергә, барыһына ла барырға әҙер:

*Һалдың утҡа, һалдың һыуъа мине,*
*Инде ниҙәр һинән көтәйем?*
*Мин тормоштан өмөт иткәндәрҙең*
*Һиңә бирер инем бөтәһен!*

(«Һалдың утҡа...» 99-сы б.)

Һөйгәненең бер ҡарашына зар-интизар лирик герой. Әммә «Бер баҡмаһа, берәй бағыр, Сабыр итәйем, тимен», – ти («Күрер әле». 90-сы б.). Ә инде оҙатып ҡуйыу бәхетенә ирешкәс, һөйгәненең ҡәҙимге кисте маҡтауына (Шундай матур, яҡты кис, тинең, Ә бит ғәҙәттәге кис ине...) ғашиҡ егет һөйөнөп бөтә алмай («Хәтереңдәме...» 89-сы б.).

Әнүр Вахитов ғүмеренең ахырынаса шиғриәткә булған мөхәббәтенә тоғро ҡалды. Ғилми-тикшеренеү институтында хеҙмәттәше булған өлкән дуҫының шиғриәте хаҡында һүҙ алып барғанда, Рауил Бикбаев та дөрөҫләй быны. «Ҡайһы саҡта беҙ бүлмәлә икәүҙән-икәү генә ҡалғанда, блокноттарынан шиғырҙар уҡып аптыратып та ҡуя ине. Улар Әнүрҙең үҙенсә күңел көндәлеге булған икән. Үкенескә ҡаршы, ни сәбәптәндер, үтә баҫалҡылыҡтанмылыр, шиғырҙарын үҙе иҫән саҡта китап нәшриәтенә бирмәгән...» Был китап сыҡты. «Тамырҙарым» тип атала ул. «(Төҙөүсеһе – Әмир Әминев, баш һүҙҙе Рауил Бикбаев яҙған).

Шиғырҙарын әҙәбиәт һөйөүселәр йылы ҡаршы алыуға ҡарамаҫтан, Әнүр Вахитов 60-сы йылдарҙың урталарында прозаға күсте. Уның хикәйәләре, хикәйәттәре республикабыҙ матбуғат биттәрендә, төрлө йыйынтыҡтарҙа донъя күрҙе. Алма-Атыла, Чебоксарҙа, Ҡазанда ла баҫылғаны бар. Әнүр Вахитов – «Салауат күпере», «Ҡайын суҡтары», «Шәжәрә», «Яҡты күңел», «Сейәлетүбә» тигән китаптарҙың авторы. Шулай ҙа, Әнүр Вахитов үҙе әйтмешләй,

*Моңдо усҡа йәшереп буламы ни,*
*Бер көйрәгәс аҫыл йөрәктә?*

(«Ҡумыҙ тыңлағанда тыуған уйҙар». 81-се б.)

Юҡ, булмай моңдо усҡа йәшереп. Шуға ла үҙенең ҡыҫҡа ғына ғүмере буйы уның йылғыр ҡәләме осонан шиғри һүҙ ағылыуҙан туҡтаманы. Хикәйәт һәм хикәйәләренә лә улар ана шул сәбәптән килеп ингеләгән дә инде. Әнүр Вахитовтың хикәйәт, хикәйәләренең персонаждары ауыҙынан яңғыраған һәм, асылда, авторҙың үҙ ижады булған шул йыр һәм ҡобайыр өлгөләре уның шиғыр йыйынтығына индерелһә, бер ҙә яҙыҡ булмаҫ ине. Ана, халҡыбыҙҙың бөйөк шағиры Мостай Кәрим шулай иткән бит. Уның «Оҙон-оҙаҡ бала саҡ» әҫәре буйынса эшләнгән инсценировка, «Прометей» трагедияһы өсөн яҙылған йырҙары, шиғырҙары, мәҫәлән, уның шиғыр йыйынтыҡтарына ла инә торҙо бит.

## 7. Ғилем юлында

Уҙған йөҙ йыллыҡтың нәҡ урталарынан алып Ә. Вахитов ваҡытлы матбуғатта төрлө йыйынтыҡтарҙа әҙәбиәттең актуаль проблемалары хаҡындағы ғилми мәҡәләләре, рецензиялары менән сығыш яһай башлай. Әҙәбиәт ғилеме өлкәһендәге тикшеренеүҙәре лә айырым йыйынтыҡтар рәүешендә донъя күрә торҙо. «Эпик киңлектәрҙә» (Өфө, 1968) тигән тәүге ҙур хеҙмәте менән Мәскәүҙә рус телендә сыҡкан «Башҡорт совет романы» («Наука», 1978) тигән монографияһында ул башҡорт романының бер планлы хроника тибындағы тәүге өлгөләрҙән күп планлы, киң ҡоласлы, мөһим проблемалар күтәргән эпик күренеш булып етешеүен яҡтыртты. Уның асыҡлауынса, әҙәбиәтебеҙ быға фольклор традицияларын, милли прозаның тәүге тәжрибәләрен үҫтереү аша, туғандаш әҙәбиәттәрҙең шифалы йоғонтоһо ярҙамында өлгәшә.

Әле һүҙ барған хеҙмәттәрҙә ҡаралған проблемалар «Ижади портреттар» (Өфө, 1976), авторҙашы Ишбулды Вәлитов менән берлектә яҙылған «Зәйнәб Биишева ижады» (Өфө, 1980) тигән китаптарында, Динис Исламов, Хәким Ғиләжев, Яныбай Хамматов, Зәйнәб Биишеваларҙың ижади эволюцияһын, башҡорт романистикаһына индергән өлөштәрен анализлау аша конкретлаштырылды. «Таланттың асылы» (Өфө, 1972) китабында ғалим башҡорт прозаһының тарихына ҡағылышлы күҙәтеүҙәре менән уртаҡлаша. Унда әҙәби проза жанрҙарының үҙ-ара, халыҡ прозаһы, ҡобайыр, эпик ҡомартҡылар һәм заман менән мөнәсәбәтенә иғтибар ителә. Шулай итеп, башҡорт прозаһының бөгөнгө кимәлгә күтәрелеү юлы күҙ алдына баҫтырыла.

Башҡорт әҙәбиәт ғилемендә бәләкәй һәм урта жанрҙарҙың тыуыуы, формалашыуы, милли йөҙө хаҡында әлегәсә махсус тикшеренеүҙәр күренгәне юҡ ине. Ә Вахитовтың «Офоҡтар киңәйгәндә» тигән китабы был тәңгәлдә тәүге етди хеҙмәт тип баһаланыуға лайыҡ. Был китапта, Бөйөк Октябрҙән һуңғы дәүерҙәрҙә донъя күргән бай фактик материалдарға төрлө яҡлап анализ яһау һөҙөмтәһендә, нәҫер, хикәйә, очерк, повесть жанрҙарының төп айырмалыҡтары, үҙҙәренә генә хас һыҙаттары, хәҙерге осорҙағы төп билдәләре яҡтыртыла. Нәҫер хаҡында һүҙ алып барғанда, мәҫәлән, автор был жанрға кинәйә менән һуғарылған, романтик образлы, публицистик пафослы әҫәрҙәр инеүенә ныҒыраҡ баҫым яһап, уны проза менән яҙылған лирик шиғыр тип ҡарауҙың нигеҙһеҙ булыуын раҫлай. Ә очерк жанрының, ул документаллыҡҡа таянһа ла, художестволы дөйөмләштереүгә лә хоҡуғы булыуын яҡлай.

Прозаны тикшергәндә, Ә. Вахитов яҙыусыларыбыҙҙың тарихилыҡ принцыбын үҙләштерә барыуының һәйбәт һөҙөмтәләр биреүенә баҫым яһай. Тарихилыҡ принцибының күҙәтелеүе ғилми хеҙмәт өсөн дә зарури. Уның монографиялары был талапҡа яуап биреү өлгөһө булды. Шул арҡала ғалим жанрҙарҙың барлыҡҡа килеүен, үҙ-ара тығыҙ бәйләнештә йәшәүҙәрен, билдәле бер система барлыҡҡа килтереүҙәрен, үҙгәреүсәнлектәрен дөрөҫ яҡтыртыуға ирешә.

Башҡорт прозаһы жанр һәм стиль йәһәтенән беренсе мәртәбә шулай киң планда тикшерелде. Тимәк, асылда, Әнүр Вахитов был өлкәлә башлап юл ярыусы булды. Ә башлап юл ярыу, һәр кемгә мәғлүм, еңелдән түгел. Үтәһе ара оҙон булһа – бигерәк тә, һис икеләнмәй, шуны раҫлап була: Әнүр Вахитовтың ғилми хеҙмәттәре башҡорт әҙәбиәте ғилеменең етди ҡаҙанышы ине.

Ә. Вахитов – поэзия тураһында ла төплө фекер йөрөтөүсе белгес. Уның Ғ. Туҡай, Д. Юлтый, Ш. Фидаи, Р. Ниғмәти, Ғ. Сәләм, Х. Ғиләжев, Р. Бикбаев һәм башҡалар ижады тураһындағы мәҡәләләре – шуға миҫал. Шуныһын да әйтмәй булмай: Ә. Вахитовҡа әҙәби күренештәрҙе теләгән йүнәлештә, теләгән ҡәҙәр тәрән итеп анализлау, аныҡ дөйөмләштереү маһирлығы хас ине. Бында, минеңсә,

уның үҙенең дә әҫәрҙәр яҙыуының бер ыңғай һөҙөмтәһе күренә: прозаны ул – прозаик булараҡ, шиғырҙы – шағир булараҡ, уларҙың асылын төптән аңлап, нескәлектәренә төшөнөп анализлай.

Хикәйәт яҙамы, әллә хикәйәләр ижад итәме, Ә. Вахитов уларҙы, ғәҙәттә, цикл рәүешендә ойоштора. Әхмәҙулла бабай хикәйәсе булып ҡатнашҡан хикәйәттәр был йәһәттән бигерәк тә айырылып тора. Шуға күрә һәр цикл менән танышҡас, ҙурыраҡ, эпик ҡоласлыраҡ әҫәрҙәр уҡығандай булаһың. Хатта айырым хикәйә йә хикәйәттәре повесть тойғоһо ҡалдыра («Уҙған ғүмер – аҡҡан һыу», «Ир ҡанаты»).

Ә. Вахитовтың әҫәрҙәре, ғилми хеҙмәттәре республикабыҙҙа ла, үҙәк матбуғатта ла ыңғай баһа ала килде. Яҙыусы һәм ғалим өсөн ҙур ҡыуаныс был.

Байтаҡ йылдар Ә. Вахитов Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтында эшләне. Әммә фәһемле биографияһы, ижады, ғилми хеҙмәттәре менән ул һаман уҡытыусы булып ҡалды. Ә университетта ул уҡытҡан, фольклор экспедицияларына алып сыҡҡан студенттар араһынан байтаҡ ҡына әҙәбиәтсе, фольклорсы, ғалим, яҙыусы, журналист, атҡаҙанған уҡытыусылар үҫеп сыҡты. Шуға миҫал итеп филология фәндәре докторҙары: халыҡ шағиры Рауил Бикбаев, шағир, публицист, тел ғалимы Рәшит Шәкүр, әҙәбиәт белгесе һәм прозаик Роберт Байымов, тел ғалимы һәм прозаик Зиннур Ураҡсин, фольклорсы Әхмәт Сөләйманов; филология фәндәре кандидаттары, дәүләт эшмәкәрҙәре: Сәбилә Сөләйманова, Миҙхәт Мәмбәтов, тел ғалимдары Мөхәмәтхәй Әхмәтов, Урал Нәҙерғолов; филология фәндәре кандидаттары һәм шағирҙар: әҙәбиәт белгесе Вафа Әхмәҙиев, тел ғалимы Миндияр Дилмөхәмәтов; шағирҙар Сафуан Әлибай, Ирек Кинйәбулатов, прозаиктар Тайфур Сәғитов, Мөнир Ишбулатов; күренекле публицист Марсель Ҡотлоғәлләмов һәм тағы бик күптәрҙең исем-шәрифтәренән торған теҙмә төҙөргә булыр ине. Уларҙың һәр береһенең үҙ юлын һайлауында уҡытыусыбыҙ Әнүр Вахитовтың да өлөшө бар.

1958 йылда БДУ-ны тамамлағанда, Ә. Вахитов үҙенең һабаҡташтарына «Балҡып уҙһын ғүмер» тигән шиғыр бағышлаған. Был әҫәрендә йәш шағир киләсәктә һәммәһенең дә ижади эшләп, уҡыусыларынан мәшһүр белгестәр үҫеп сығыуын юрай. Унда шундай юлдар бар:

*Берәүҙәрҙең һөйгән уҡыусыһы*
*Юлдар ярыр яңы йондоҙъа...*
*Үтер йылдар, ҙур бер ъалим һиңә:*
*«Уҡытыусым!» – тиеп өндәшер.*

Бәй, һабаҡташтарының һабаҡташы ул үҙе ла баһаң! Ана шуға ла был изге теләктәрҙең бер адресаты – ул үҙе. Һәр хәлдә, «һабаҡташтар»ҙан һалдырып теләгәне уның үҙенең алдына ла килде, юрағаны юш булды. Әле иҫкә алған уҡыусылары ла, шул исемлеккә һыймағандары ла Әнүр ағайыбыҙҙың үҙен һәр саҡ хөрмәт иттек, уға һәр саҡ «Уҡытыусым!» тип өндәштек. Улай өндәшмәгән сүрәттә лә, уның алдында үҙебеҙҙе һаман уҡыусы кеүек хис иттек. Быға ул үҙен һаман да уҡытыусыларса тотоуы менән өлгәште. Шуға ла бөгөн беҙ яҡты иҫтәлеге алдында сал башыбыҙҙы эйәбеҙ... Шуныһы ҡыуандыра: бөгөн уҡытыусы Әнүр Хисмәт улының уҡыусылары ишәйгәндән-ишәйә, артҡандан-арта. Сөнки уның хикәйәттәре, хикәйәләре, шиғырҙары был буталсыҡ донъяла намыҫты маяҡ итеп йәшәргә өйрәтә, ғилми хеҙмәттәре иһә нәфис әҙәбиәт аша матурлыҡты тойоу, уны таныу, дөрөҫ аңлау серҙәрен төшөндөрә.

**Әхмәт СӨЛӘЙМӘНОВ,**
**филология фәндәре докторы.**

## *«АҒИҘЕЛ» ЖУРНАЛЫНЫҢ 2012 ЙЫЛҒЫ ЛАУРЕАТТАРЫ*



**Йомабикә**
**ИЛЬЯСОВА –**
*«Йыһандарҙа мәңгелек бер тәртип» шиғырҙар шәлкеме өсөн (№11)*



**Рәмил**
**ЙӘНБӘК –**
*«Бер мәлем дә, беләм, кире ҡайтмаҫ…» шиғырҙар шәлкеме өсөн (№8)*



**Гөлнур**
**ЯҠУПОВА –**
*«Ҡатындар» трилогияһы өсөн (№7 – 8, 2009, №10 – 12, 2010, №10 – 12, 2012)*



**Раят**
**ВӘЛИЕВ –**
*«Күләгәле утрау» мажаралы повесы өсөн (№3 – 4)*



**Хажи**
**ӘХМӘТЙӘНОВ –**
*«Бер ғүмергә һыйған биш дәүер» публицистик мәҡәләһе өсөн (№10)*

***Лауреаттарҙы ихлас күңелдән ҡотлайбыҙ***
***һәм алдағы көндәрҙә лә ижади осоштар теләйбеҙ!***

## «АҒИҘЕЛ» ЖУРНАЛЫНЫҢ 2012 ЙЫЛҒЫ ЙӨКМӘТКЕҺЕ


*Баш мөхәррир һүҙе*

**Әминев Әмир.** 2012 йыл – Рәсәй тарихы йылы. ...1

**● СӘСМӘ ӘҪӘРҘӘР**

**Бәҙретдинов Сәлимйән.** Хан ҡыҙы. Ҡисса. ...7
**Вәлиев Раят.** Күләгәле утрау. Мажаралы повесть. ...3 – 4
**Ғиниәтуллин Талха.** Өс хикәйә. ...6
**Ғәйнуллина Таңһылыу.** Ҡартымды юғалтҡас... Хикәйә. ...3
**Ильясов Спартак.** Сағымдағы олоу. Бәйән. ...1
**Ильясов Спартак.** Тәҡдир. Хикәйә. ...5
**Ирғәлин Хәмит.** Алыҫ Көнсығыш ҡиссаһы. ...1
**Мифтахов Риф.** «Утын ҡырҡтым өс ағас...» Хикәйә-хәтирә. ...5
**Ринат Камал.** Беләҙекүл. Роман. ...6
**Сәғитов Рәсүл.** Ғәҙел кеше. Хикәйәләр. ...9
**Хафизов Сәғиҙулла.** Өйҙәш ҡатын. Повесть. ...8
**Хужин Мәхмүт.** Яңғыҙ сағыл. Эссе. ..2
**Әминев Әмир.** Йондоҙ сәскә. Повесть. ...5
**Яҡупова Гөлнур.** Трилогия. Ҡатындар. Кесе йыһан – Оло йыһан. Өсөнсө китап. ...10 – 12
**Яруллин Ғималетдин.** Зимагур. Повесть. ...11

**● ШИҒРИӘТ**

**Амангилдин Дауыт.** «Уҡтар» циклы. Шиғырҙар. ...11
**Бикбаев Рауил.** Үҙем генә беләм. Шиғырҙар. ...5
**Булгакова Дилә.** Яҙ етәкләп килдең. Шиғырҙар. ...7
**Ғәбиҙуллина Фәниә.** Һуңлаған осрашыу. Шиғырҙар. ...3
**Дәүләтбирҙина Тәнзилә.** Иң матур мәлем... Шиғырҙар. ...3
**Закиров Мөхәммәт.** Дауылдарҙы тыйыу файҙаһыҙҙыр... Шиғырҙар. ...12
**Зөлҡәрнәева Шәүлиә.** Кемдәр улар. Шиғырҙар. ...4
**Зөфәр Вәлит.** «Тәҙрәләрҙе йәнә көҙҙәр сиртә, Күңелдәргә күсә балҡышы...» Шиғырҙар. ...9
**Ильясова Йомабикә.** «Ғаләмдәрҙә мәңгелек бер тәртип». Шиғырҙар. ..11
**Илбаев Мөхәммәт.** Йыһанға сәфәр. Шиғырҙар. ...10
**Күсмәйева Мәрйәм.** Мәскәү йүкәләре. Шиғырҙар. ...3
**Йосопов Тимер.** Яҙҙарымды һағынам. Шиғырҙар. ...2
**Күзбәков Фәнил.** Торналар сыңы. Дастан. ...6
**Кәримов Марат.** Ҡала ҡайыны. Шиғырҙар. ...7
**Ҡарамышева Таңһылыу.** «Рәхмәт яуһын, рәхмәт яуһын!» Шиғырҙар. ...4
**Ҡотоева-Ғәйнуллина Гөлназ.** Бәхетлемен! Шиғырҙар. ...7
**Лилиә Һаҡмар.** «Күңелдә – янартау». Шиғырҙар. ...10
**Ләйсән Кәшфи.** Онотма мин барын. Шиғырҙар. ...4
**Мифтахов Риф.** «Хыялланам йондоҙ ҡабыҙырға...» Шиғырҙар. ...7
**Мәүлит Ямалетдин.** Робағиҙар. ...2
**Мортазин Ҡамса.** Исерткес мәл. Шиғырҙар. ...12
**Нәзиров Марис.** Үрләгәндә ғүмер түбәһенә... Шиғырҙар. ...1
**Рауил Шаммас.** Аҡыл, тиһең... Шиғырҙар. ...5
**Рамай Ҡаһир.** Көндәрем китте аяҙға... Шиғырҙар. ...1
**Рәмил Йәнбәк.** «Бер мәлем дә, беләм, кире ҡайтмаҫ...» Шиғырҙар. ...8
**Рәшит Шәкүр.** Уйҙарымда – көн сыуағы. Шиғырҙар. ...1
**Салауат Әбүзәр.** Моң. Шиғри хәтирә. ...2
**Салауат Рәхмәтулла.** Ниндәй заман? Шиғырҙар. ...2

**Ситдиҡова Гүзәл.** Күҙгә Инйәр. Шиғырҙар. ..........6
**Суфияров Фәрит.** Уҙғанды юлламаным. Шиғырҙар. ..........9
**Таһирова Әнисә.** Асылыкүл. Шиғырҙар. ..........8
**Туғыҙбаева Факиһа.** Тормош ағасы. Шиғырҙар. ..........12
**Хафизов Рафаил.** Ил өҫтөндә. Шиғырҙар. ..........6
**Хәлфетдинова Гөлнара.** Бүлгеләнгем килмәй... Шиғырҙар. ..........9
**Хәкимйән Радик.** Тыуған илем. Шиғырҙар. ..........11
**Әминева Нәжибә.** Теләп торам. Шиғырҙар. ..........3
**Әсәҙуллина Әлфиә.** Хәтер күпере. Поэма. ..........5
**Әхмәҙин Әфтәх.** Күҙгә уйҙар. Шиғырҙар. ..........10

## ● ӘҘӘБИӘТ ҒИЛЕМЕ

**Иҡсанов Мөнир.** Хәҙерге башҡорт шиғриәтендә жанр. ..........4

## ● ӘҘӘБИ ТӘНҠИТ

**Басирова Лилиә.** Мостай Кәрим һабаҡтары. ..........6
**Гәрәева Гөлфирә.** Бөгөнгө повесть. ...3
**Гәрәева Гөлфирә.** Хәҙерге прозала дин әһеле образы. ..........11
**Поварисов Суфиян.** Башҡорттоң баллы һүҙе. ..........1
**Поварисов Суфиян.** Алла рухы, пәйғәмбәр теле менән *(Ғайса Хөсәйеновтың «Ҡанлы илле биш» романының тел үҙенсәлектәре).* ..........10
**Хәбиров Әнғәм.** Донъя – нағыш, ә күңелдә – һағыш... *(Мәүлит Ямалетдиндың һуңғы йылдарҙағы шиғриәтенә бер ҡараш).* ..........5

## ● ӘҘӘБИ МИРАҪ

**Өмөтбаев Рауил.** Аманатҡа юҡ ул хыянат. ..........8
**Өмөтбаев Рамаҙан.** Ирәндектең күкһел томаны. Роман. ..........8 – 9
**Хажиева Бибинәғимә.** Гөлбаныу. Повесть. ..........4

## ● ШИШМӘЛӘР

**Айытҡолова Айгөл.** Һинһеҙ йәшәгәнмен. Шиғырҙар. ..........8
**Аҡбутина Земфира.** Башҡортостан. Шиғырҙар. ..........1
**Иҡсанов Мөнир.** Тибә йөрәк. Шиғырҙар. ..........1
**Кашапова Зәлифә.** Ҡояш төҫлө балҡый күңелем. Шиғырҙар. ..........3
**Кәрим Булат.** Аҫыл минуттар. Шиғырҙар. ..........5
**Ҡолмөхәмәтов Рамаҙан.** Атай йорто. Шиғырҙар. ..........3
**Малбаев Фәнир.** Тальян моңо. Шиғырҙар. ..........5
**Шаммасов Алмаз.** Быуаттар «аһ»ы. Шиғырҙар. ..........8
**Әхмәтрәхимова Олеся.** Йомро-йомро йомғағым... Шиғырҙар. ..........8
**Яҡупов Сәлмән.** Һыҙланыу. Шиғырҙар. ..........5

## ● ПУБЛИЦИСТИКА

**Йәнғәлин Әхмәт-Гәрәй.** Башҡорттар китте һуғышҡа. ..........1
**Йыһаншин Сабир.** Туған телдә уҡытыу проблемалары. ..........7
**Күзбәкова Рәйсә.** Милли мәғариф: мөмкинлектәр һәм бурыстар. ..........4
**Рәшит Сабит.** Егән буйҡайҙарын буйланым. ..........7
**Саҙрыев Миҙхәт.** Ауылһыҙ ил – бөлгән ил. ..........1
**Хамматов Хәлил.** Салауат батыр – халыҡ хәтерендә. ..........5
**Әсфәтуллин Салауат.** Тарихҡа яңы «аңлатма»мы был? ..........1
**Әхмәтйәнов Хажи.** Бер ғүмергә һыйған биш дәүер. ..........10

## ● БЕҘҘЕҢ ЮБИЛЯРҘАР

**Бикбаев Рауил.** Шағир яҙмышы *(Хәсән Назарға 70 йәш).* ..........1

**Ноғоманов Барый.** Йәшлек дуҫтарымдың береһе *(журналист һәм яҙыусы Эдуард Әгзәмигә 75 йәш).* ........................11
**Шәрипов Сабир.** Калугала йәшәй ҡәләмдәш. ....................................................6
**Әмиров Рәиф.** Күктәргә яҙылған ер яҙмышы *(Әсхәл Әхмәт-Хужага 70 йәш).* ......................................................................6

## ● БЕҘҘЕҢ КАЛЕНДАРЬ

**Ғәбитов Таһир.** Баҫалҡылыҡ, егәрлелек менән *(Раил Байбулатовтың тыуыуына 75 йыл).* ................................................6
**Ғәбитов Таһир.** Повестар оҫтаһы *(Рәйес Низамовтың тыуыуына 80 йыл).* ........... 7
**Исмәғилева Бүләк.** Тел байлығы – күңел байлығы. .......................................6
**Исхаҡова Фәниҙә.** Ҡурайға арналған ғүмер *(Ғата Сөләймәновтың тыуыуына 100 йыл).* .....................................................9
**Ҡотоева Гөлназ.** Ғүмер шаңдағы *(Динә Талхинаның тыуыуына 60 йыл).* .............7
**Нурғәлин Зиннур.** Тел ғилемен нигеҙләүселәрҙең береһе *(Ғәббәс Дәүләтшиндың тыуыуына 120 йыл тулыу айҡанлы).* ......................................................................9
**Мәхмүтов Әхмәт.** Нескә тойғоло шағир *(Хөсәйен Ҡунаҡбайҙың тыуыуына 100 йыл).* ............................................................2
**Мәхмүтов Әхмәт.** Яуҙарҙа сыныҡҡан әҙип *(Нәжиб Иҙелбайҙың тыуыуына 100 йыл).* ...........................................................3
**Мәхмүтов Әхмәт.** Заманының шанлы йырсыһы *(Шамун Фидаиҙың тыуыуына 110 йыл).* ......................................................6
**Поварисов Суфиян.** Әҫәрҙәрендә – Хоҙай хозуры... *(Ғәлимйән Ибраһимовтың тыуыуына 125 йыл).* ......................3
**Сабирйәнова Сәнә.** Йәшәү мәғәнәһен фәндә тапты *(Нәжибә Мәксүтованың тыуыуына 80 йыл).* ..................................11
**Сабиров Ш.** Яҡты исеме – сәнғәт йылъяҙмаһында *(Илшат Йомаголовтың тыуыуына 80 йыл).* ..........................................2
**Сөләймәнов Әхмәт.** Бәҫле әҙип, әҙле ғалим *(Кирәй Мәргәндең тыуыуына 100 йыл).* ..........................................................7
**Сөләймәнов Әхмәт.** Тауҙар хәтле эштәр башҡарғанда *(Әнүр Вахитовтың тыуыуына 80 йыл).* ................................12
**Хөсәйенов Ғайса.** Талантлы ижадташым *(Ким Әхмәтйәновтың тыуыуына 80 йыл).* ......................................................2
**Шәрипова Зәйтүнә.** Балҡыштарға бай ғүмер *(Роберт Байымовтың тыуыуына 75 йыл).* .......................................................1

## ● САТИРА ҺӘМ ЮМОР

**Абушахманов Әхтәм.** Атай һабаҡтары. Юморескалар. ............................3
**Кәбир Аҡбаш.** Һатылалар. Шиғырҙар. ...........................................3
**Мар. Сәлим.** Замана мәҫәлдәре. .........9
**Соколов Леонид.** Балыҡсылар... Юморескалар. ...................................9
**Әминев Марат.** Хикәйәләр. .........10

## ● СӘНҒӘТ

**Аҡбулатова Фәрзәнә.** Мәкәримдең мөхәббәте. ................................................11
**Ғәйнуллина Таңһылыу.** Нурлы ижад. .......................................................................6
**Ҡолмөхәмәтова Миләүшә.** Бейеү алиһәһе Рәшиҙә. ...........................................8
**Әхмәр Ғүмәр-Үтәбай.** Талант ҡояш нуры кеүек: бер урынды болот ҡаплаһа, ул икенсе урындан сығып балҡый... *(Рәссам Абрек Абыҙгилдинга 75 йәш).* ...11

## ● ҠӘЛӘМДӘШТӘР ТӨҪӨ

**Баһуманова Миңниса.** Маһир хикәйәсе. Ут алырға инәм күршемә. ...............9
**Мостай Кәрим.** Көндәлектәр. .....10
**Мусин Ноғман.** Динис юлы. ................4
**Юлдашбаев Азамат.** «Күк беҙҙеке икән – беҙҙеке...» *(Ер шарының Ғилман Ишкининһыҙ әйләнеүенә бер йыл).* ...................2

## ● ДУҪЛЫҠ КҮПЕРҘӘРЕ

**Имдат Авшар.** Йән өшөткөс төш. Хикәйә. ..................................................1

**Манойлов Панде.** Илгә бирелгәнлек. Шиғырҙар. ...2
**Сәлихов Әхәт.** Йәшәүҙән ҡурҡмаған, үлемдән өркмәгән *(ҡырым татар шағиры Бәкир Чобан-заданың тормошо һәм ижады).* Бәкир Чобан-зада. Шиғырҙар. ...11

**● МУЗЕЙҘАР – МӘҘӘНИӘТЕБЕҘ КӨҘГӨҺӨ**

**Әхмәтшина Гөлфирә.** Мәктәп ғорурлығы. ...1
**Янышев Фәнис.** Милләттең ҡаһарман улы. ...5

**● ЯҘМЫШТАН ҺЫҘМЫШ ЮҠ**

**Шарапов Ишмөхәмәт.** «Ошо йырым булыр уҡаһы». ...4

**● БАШҠОРТ ЙЫЛЪЯҘМАҺЫ**

**Ғафаров Марат.** Әйләләр тарихына бер ҡараш. ...3

**● АУЫЛДАРЫБЫҘ ТАРИХЫ**

**Хужин Мәхмүт.** Юрматының пайтәхете. ...9

**● РУХЫБЫҘ ТАМЫРҘАРЫ**

**Ҡолмөхәмәтова Миләүшә.** Ҡәғбә кеүек уның һәр ташы. ...11
**Хәлитова Миңйыһан.** Ҡояш – баш остарымда. ...11

**● РУХИ ХАЗИНАЛАР**

**Алтынбаев Рәнис.** Ҡатай башҡорттары фольклоры. ...8
**Солтангәрәева Розалия.** Эпосын һөйләгән халыҡ һайыҡмаҫ. Заятүләк менән Һыуһылыу. Эпос. ...10
**Шәрипова Зәйтүнә.** Мәғрифәт усағының яҡтыһы *(Стәрлебаш мәҙрәсәһенә – 300 йыл).* ...10

**● РУХИ ЫНЙЫЛАРЫБЫҘ**

**Яковлев Лео.** Тормошо тураһында Ғүмәр Хәйәм үҙе һөйләгән бәйән. ...7

**● ӨМӨТЛӨ ҠӘЛӘМ**

**Ҡаһарманова Миләүшә.** Ситса күлдәк. Хикәйә. ...2
**Мараҡанова Ләйсән.** Күк сәскәләр. Хикәйә. ...1
**Шакирова Линиза.** Аға һыуҙар ҡиблаға... Хикәйә. ...7
**Әхмәтйәнова Мәүлиҙә.** Әлпе юғалған йыл. Хикәйә. ...4

**● ИМАН НУРЫ**

**Ғиззәтуллина Рәшиҙә.** «Урал батыр» – Ҡөрьән аяттарында. ...4
**Шәһәр Шәриф.** Ғасыр сәғәҙәт йәки Бәхетле быуат. ...5

**● ЗАМАН ҮӘ ЗАМАНДАШТАР**

**Дауытов Хәбир.** Туҡһанда ла һалдат. Очерк. ...5
**Исҡужин Айрат.** Минең университеттарым. ...2
**Ҡолмөхәмәтова Миләүшә.** Күп яҡлы талант эйәһе. ...2

**● СӘХНӘ ӘҪӘРҘӘРЕ**

**Наил Ғәйетбай.** Ҡултамға йәки Түрә ҡабул итмәй. Сатирик комедия. ...7
**Солтанов Йыһат.** Сөйөмбикә һылыу. Драма-хроника. ...12

**● ДИН ҺӘМ ФӘН**

**Күзбәков Фәнил, Регина Молоданова.** Йән болаһы. ...10

**● ЖУРНАЛ УҠЫУСЫЛАР ИЖАДЫ**

**Ғайсина Рәсимә.** Хәтирәләр. Шиғырҙар. ...6
**Дәүләтбаева Мөнирә.** Йөрәгемдә. Шиғырҙар. ...9
**Сабирйәнов Зөфәр.** Ҡоштоң пар ҡанаттары. Шиғырҙар. ...12
**Сәхипова Земфира.** Робағиҙар. ...12
**Хөснөтдинов Фәнил.** Төштәремә кер һин. Шиғырҙар. ...6
**Шәрипова Флера.** Үкенерлек түгел. Шиғырҙар. ...9

**Яҡшығолов Фәрит.** Рухи көсөм. Шиғырҙар. ........................................12

*Башҡортостандың халыҡ шағиры Рәми Ғариповтың тыуыуына 80 йыл*

**Бикбаев Рауил.** «Был донъяның иркә улы булып...» Шиғыр. ..........................2
**Ғәлимова Римма.** «Аҙ-маҙ һинең менән көрешкәне...» Шиғырҙар. ...........4
**Күзбәков Фәнил.** Яу саптың. Шиғыр. .......................................................................2
**Ҡужабәкова Зилиә.** Хат. ......................4
**Рәмил Йәнбәк.** Рәмигә хат. Шиғыр. .......................................................................2
**Хәлфетдинова Гөлнара.** Тереһыу. Шиғыр. Фото-хәтер. ....................5

*1812 йылғы Ватан һуғышына – 200 йыл*

**Ғәзизов Радик.** Көнгәк. Шиғыр. ........7
**Зинуров Рафаэль.** Башҡортостан юлы. Эпик поэманан өҙөк. .................. 4
**Йәнғәлин Әхмәт-Гәрәй.** Аямаған йәнен, түккән ҡанын. ..................................7
**Йәнғәлин Әхмәт-Гәрәй.** Ҡыпсаҡтар ил һағында. ..............................................11
**Йыһаншин Сабир.** Тарихтың өнһеҙ шаһиттары. .............................................11
**Фазлыев Сабит.** Бонапарт ишеткән оран. Хикәйәт. ......................................3
**Ярмуллин Азат.** «...Парижды ла күрҙек беҙ». ......................................................4

*Башҡортостан автономияһы иглан ителеүгә – 93 йыл*

**Зарипов Әлим.** Һағыҙаҡтар ояһы. .....3

*Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты ойошторолоуға – 80 йыл*

**Ғайсина Фәнирә.** Халыҡ хәтерендә – Хызыр Ильяс. ..........................................5
**Нәҙерғолов Миңлеғәли.** Үткәндәрҙе байҡап, киләсәкте уйлап. ......................5
**Нәҙершина Фәнүзә.** Ҡаһарманлыҡ йылъяҙмаһы. ...........................................5
**Хөсәйенова Гөлнур.** Башҡорт халыҡ ижадында ҡатын-ҡыҙ матурлығы. .......5
**Юлдыбаева Гөлнар.** Ырымбур башҡорттарының рухи хазиналары. ...........5

*2012 – Имен бала саҡ һәм ғаилә ҡиммәттәрен нығытыу йылы*

**Хужин Мәхмүт.** Бала күңеле – аҡ ҡағыҙ. ............................................................6

**«Ағиҙел» ҡунағы**

**Нуриев Рөстәм.** Йәшәү мәғәнәһе – игелек ҡылыуҙа. .......................................7

*2012 – Рәсәйҙә тарих йылы*

**Әкрәм Бейеш.** Башҡорт халҡының сығышы. ....................................................8

*«Ағиҙел» гә – 90 йыл*

*Нәфис әҙәбиәт: тормош талабы, хыял, ысынбарлыҡ.*

**Күзбәков Фәнил.** Юғары рухиәт яҡтылығында *(Ноғман Мусин һәм Наил Ғәйетбай менән әңгәмә).* ..............................9
**Күзбәков Фәнил.** Үткәнебеҙҙе бөгөнгөгә ялғап... *(Мәүлит Ямалетдин менән әңгәмә).* ........................................................10
**Күзбәков Фәнил.** Ижади бойондороҡһоҙлоҡ... Мәңгелек проблемамы? *(Дамир Шәрәфетдинов һәм Әхмәр Ғүмәр-Үтәбай менән әңгәмә).* ............................11
**Күзбәков Фәнил.** Дәүер көҙгөһө лә, дәүер һулышы ла – әҙәбиәт *(Таңсулпан Ғарипова, Фәрҙәнә Аҡбулатова менән әңгәмә).* ......................................................12

● **«АҒИҘЕЛ» ЖУРНАЛЫНЫҢ 2012 ЙЫЛҒЫ ЙӨКМӘТКЕҺЕ**
12

● **«АҒИҘЕЛ»ГӘ ХАТТАР КИЛӘ**
2, 6, 7, 11

● **ӘҘӘБИ-МӘҘӘНИ МӨХИТ**
1, 2, 3, 4, 5, 6, 7, 8, 9, 10, 11, 12

● **ЖУРНАЛДЫҢ 2012 ЙЫЛҒЫ ЛАУРЕАТТАРЫ**
12

* * *

Бөйөк башҡорт шағиры, мәғрифәтсеһе Мифтахетдин Аҡмулланың тыуған төйәге Туҡһанбай ауылында заманының данлыҡлы улдары – уҡымышлы, указлы муллаларҙың ҡәберенә билдә ташы ҡуйылды.

Ҙур тулҡынланыу менән Ҡырғыҙ-Миәкә мәсете муллаһы Ирек хәҙрәт Шаморатов Ҡөрьән-Кәримдән аят уҡығас, билдә ташы ҡуйылған имамдар тураһында мәғлүмәт тыңланды.

Улар икәү. Береһе – Дәүләтша Ғилман улы Имашев 1882 – 1898 йылдарҙа Туҡһанбай мөхтәсебендә имам-хатиб һәм мөғәллим булған. Ҙур ҡарағай бүрәнәләрҙән мәсет, мәҙрәсә һалдырған. Аҡмулла мөнәжәттәрен халыҡҡа еткергән. Дәүләтша Аҙнай ауылында донъяға килгән. Данлыҡлы Имашевтар нәҫеленән. Икенсеһе – мулла Шәйхетдин Динмөхәмәт улы Динмөхәмәтов. Ул Мифтахетдин Аҡмулла ижадын өйрәнеүселәргә иң ҡәҙерле кешеләрҙең береһе. Халҡыбыҙҙың ҡаһарман улы, күренекле шағир һәм публицист, күрше Айыт ауылы егете Фәтих Кәрим 1928 йылды Туҡһанбайға килеп, мулла Шәйхетдин Динмөхәмәтов менән һөйләшеп, «Безнең юл» (хәҙерге «Ҡазан утлары») журналында Аҡмулланың биографияһын баҫтырып сығара.

Мәрмәр билдә-таштарҙы ҡуйыуҙы Мифтахетдин Аҡмулла музейы хеҙмәткәрҙәре ойошторҙо, ә финанс ярҙамды Фәһимә Латипова, Зәбиҙә Зәкиева, Сәйҙә һәм Нәби Ниғмәтуллиндар, Ғәҙелбаныу һәм Әнүәр Ямалетдиновтар, Фәнзил Зәкиев, Шәүкәт Ғәйнетдинов һәм Туҡһанбай ауылы халҡы күтәрҙе.

***

21– 24 ноябрҙә Ҡаҙағстандың баш ҡалаһы Астанала төрки донъяһы журналдары мөхәррирҙәре һәм вәкилдәренең V конгресы үтте. Конгреста донъяның 15 иленән 40-ҡа яҡын кеше ҡатнашты. Әҙәби журналдарҙың проблемалары, уларҙың ижади йүнәлештәре хаҡында һүҙ барған бындай осрашыуҙар быға тиклем Төркиәлә, Кипрҙа, Әзербайжанда үткәйне. Башҡортостандан конгреста ТЮРКСОЙ-ҙа эшләүсе Башҡортостан вәкиле Әхәт Сәлихов, «Аҡ торна» халыҡ-ара тәржемәселәр бәйгеһенең жюри ағзаһы Марсель Сәлимов, «Ағиҙел» журналының яуаплы секретары Гөлназ Ҡотоева ҡатнашты.

Йыйында төрки донъяһында «Йыл кешеһе» тип иғлан ителгән яҙыусы, Әзербайжан Яҙыусылар берлеге рәйесе Анар Рзаев тәбрик ителде. Һәр илдән килгән журнал вәкилдәренең сығыштары тыңланды. Конгреста ҡатнашыусылар Ҡаҙағстанда нәшер ителгән «Жулдыз» журналының ойошторолоуына 90 йыл айҡанлы «Түңәрәк өҫтәл»дә баҫманы юбилейы менән ҡотланы.

Киләһе конгресс Ҡазан ҡалаһында үтәсәк, тигән ҡарар ҡабул ителде, «Йыл кешеһе» итеп Ҡаҙағстан яҙыусыһы Тулен Аптек иғлан ителәсәге билдәләнде.

***

Евразия Яҙыусылар берлеге һәм «Ағиҙел» журналы Мәхмүт Ҡашғари исемендәге II халыҡ-ара хикәйәләр бәйгеһе иғлан иткәйне. Редакцияға ҡыҫҡа ваҡыт эсендә 29 авторҙың эше килде. Ҡайһы берәүҙәр 2-шәр хикәйә ебәргән. Тәүге бәйге менән сағыштырғанда, был юлы конкурстың талаптары теүәл үтәлгән.

Ниһайәт, бәйгегә йомғаҡ яһалды.

**I урынға** – *"Фәрештәм минең" хикәйәһе өсөн* **Тәскирә ДАЯНОВА;**

**II урынға – Сәүиә БИКМӨХӘМӘТОВА** *("Сәфәртуй яланы");*

**III урынға Мәхмүт ХУЖИН** *("Яттар мөһәрө")* лайыҡ булды. Дәртләндереү премияһы *"Ил сигендә йәшәгән ҡарттың аты юғалды" хикәйәһе өсөн* Нияз Алсынбаевҡа биреләсәк. Еңеүселәрҙе ихлас

күңелдән тәбрикләйбеҙ, ижад ҡомарҙарының һүрелмәүен теләйбеҙ. Декабрь аҙағында уларға вәғәҙә ителгән бүләктәр тапшырыласаҡ.

***

Яңауыл төбәк яҙыусылар ойошмаһының асылыуына 20 йыл тулды. Юбилей айҡанлы 29 ноябрҙә ҡаланың музыка мәктәбендә тантаналы кисә булды. Кисәгә ойошма берләштергән район, ҡалаларҙан әҙиптәр, әҙәбиәт һөйөүселәр, мәҙәниәт һәм мәғариф хеҙмәткәрҙәре, матбуғат дуҫтары йыйылды.

Ойошманың яуаплы сәркәтибе Фәрит Суфияров, ошо йылдар эсендә башҡарылған эштәр хаҡында байҡау яһап, телмәр тотто, район хакимиәте башлығы урынбаҫары Зикаф Хужин тәбрикләү һүҙе әйтте.

Ҡотлауҙар менән Башҡортостан Яҙыусылар союзы идараһы рәйесе Риф Тойғонов, әҙиптәр Азат Мағазов, Рәшит Низамов, Риф Мифтахов, Рәдиф Тимершин, Әмир Әминев, Нияз Сәлимов, урындағы ижад әһелдәре сыҡты.

Сара район һәм ҡала сәнғәт һәүәҫкәрҙәренең концерт номерҙары менән аралашып барҙы. Фойела төбәктә йәшәп ижад иткән яҙыусы, шағирҙарҙың китаптарынан, әҫәрҙәре нәшер ителгән журналдарҙан торған йөкмәткеле стенд-күргәҙмә лә ойошторолғайны.

Иртәгәһенә әҙиптәр ҡаланың башҡорт гимназияһында уҡыусылар, уҡытыусылар менән осрашты.

* * *

16 ноябрҙә Силәбе өлкәһенең Сосновка районы Һаҡкол ауыл мәҙәниәт йортонда тантаналы рәүештә төбәктә рухиәтте әйҙәүселәрҙең Ғәлимов Сәләм исемендәге премия лауреаттары билдәләнде.

Сосновка районы Силәбе өлкәһенең, Арғаяш һәм Ҡоншаҡ райондарынан һуң, башҡорттар күпләп йәшәгән төбәге булып һанала. Элеш, Тәгеш, Һолтай, Шишмә, Мамай, Һаҡкол һ.б.,– исемдәре әйтеп тороуынса, башҡорт ауылдары. Сиреүсе урта мәктәбендә туған телде уҡытыу буйынса өҙлөкһөҙ эш алып барыла. Былтыр башҡорт әҙәбиәте классигы Ғәлимов Сәләмдең тыуыуына 100 йыл тулыу айҡанлы район хакимиәте әҙәбиәт өлкәһендә премия булдырып, өс номинация буйынса рухиәтте үҫтереүселәрҙе дәртләндергәйне.

Быйыл иһә Һаҡкол мәҙәниәт йортонда ойошторолған тантаналы сара икеләтә байрамға әйләнде. Беренсенән, ауыл халҡы мәҙәниәт йортона заманса капиталь ремонт үткәндән һуң тәүләп аяҡ баҫты, икенсенән, хәҙер инде икенсе тапҡыр Ғәлимов Сәләмдең яҡташтары уның исемендәге премия тапшыралар.

Район хакимиәте башлығы Владимир Котов, тантаналы сараны асып, был мәҙәниәт йортонда берҙәм һәм шат тауыштарҙың бер ҡасан да тынмауын теләне. Башҡортостан Республикаһының Силәбе өлкәһендәге даими вәкиле исеменән матбуғат секретары Мөхәммәт Хәбиров район һәм ауыл хакимиәте етәкселәренә башҡорт мәҙәниәтен үҫтереүҙә булышҡандары өсөн Рәхмәт хаттары тапшырып, бында Сәләм шиғырҙары көслөрәк яңғырауын теләне. Шулай уҡ вәкиллектең Рәхмәт хаттарына Сосновка район мәҙәниәт бүлеге етәксеһе Татьяна Маркина, Магнитогорск ҡалаһынан килгән шағир-композитор Азамат Усманов, шағирә Бибикамал Шәйдуллина лайыҡ булды. Азамат Усманов музыкаль бүләк – Сәләмгә бағышланған йырҙарҙы башҡарҙы, һүҙ маһиры Алевтина Вәлиева ватансылыҡ хаҡында шиғырҙар уҡыны. Район үҙешмәкәр коллективтары матур сығыштары менән байрамға йәм өҫтәне.

Ғ. Сәләм исемендәге премия быйыл да өс номинация буйынса тапшырылды. Художестволы әҙәбиәт буйынса Магнитогорск ҡалаһында йәшәүсе шағирә Фаиза Мәғәсүмова премияға «Серем итә аҡ болот» (Өфө, Башҡортостан «Китап» нәшриәте, 2012) исемле китабы өсөн лайыҡ булды. Тыуған яҡты өйрәнеү номинацияһы Сиреүсе мәктәбе директоры Әлфиә Ҡотлоғужинаға – топонимик материалдары һәм Мөхәмәтҡолой Көсөковҡа Арғаяш районы Сәғит ауылында һәйкәл асыуҙы ойошторғаны өсөн бирелде. Публицистика номинацияһына «Сосновская нива» район гәзитенең мөхәррир урынбаҫары Владимир Бреднев лайыҡ булды.

* * *

1 ноябрҙә Салауат дәүләт драма театрында Башҡортостандың халыҡ шағиры Рауил Бикбаевтың ижад кисәһе булды. Осрашыуҙы театрҙың директоры, Башҡортостандың атҡаҙанған сәнғәт эшмәкәре Наилә Сәфәрғолова-Байкова асты.

Шағир шиғырҙарын һәм поэмаларынан өҙөктәр уҡыны, халыҡтың, бигерәк тә уҡытыусыларҙың бик күп һорауҙарына яуаптар бирҙе. Кисәлә уның һүҙҙәренә яҙылған йырҙар яңғыраны, «Илемдә илемде һағынам» фильмы күрһәтелде. Зәйнәб Биишева исемендәге «Китап» нәшриәте китап һатыу ойошторғайны.

* * *

2 ноябрҙә Башҡорт дәүләт университетының студенттары, «Шоңҡар» әҙәби түңәрәгенә йөрөүселәр менән Рауил Бикбаевтың ихлас осрашыуы булды. Шиғри тантанала Башҡорт дәүләт университеты профессоры Зәйтүнә Шәрипова, доцент Зәки Әлибаев ҡатнашты. Рауил Бикбаев факультетҡа әҫәрҙәренең биш томлыҡ баҫмаһын бүләк итте.

* * *

Башҡортостан Яҙыусылар союзы идараһында сираттағы әҙәби кесаҙна уҙғарылды. Сарала халҡыбыҙҙың арҙаҡлы шәхесе, ғалим һәм шағир, педагог, Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты Рәшит Шәкүр үҙенең шиғырҙарын уҡыны. Ҡәләмдәштәре юғары наградаға лайыҡ булыуы айҡанлы уны ихлас тәбрикләне.

* * *

11 – 13 октябрҙә Рәсәй Фәндәр академияһы Өфө ғилми үҙәгенең Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты ғалимдары Миңлеғәли Нәҙерғолов, Гөлнур Хөсәйенова һәм Сибайҙан Рөстәм Шәйәхмәтов Екатеринбург ҡалаһында уҙғарылған «Урал әҙәбиәте: тарих һәм хәҙерге заман» тигән VII халыҡ-ара фәнни конференцияла ҡатнашты. Был форумдарҙың төп маҡсаты – күп томлы «Урал халыҡтары әҙәбиәте тарихы»н әҙерләп донъяға сығарыу. Ошо коллектив хеҙмәттең һүҙ сәнғәте үҫешенең боронғо дәүерҙәрҙән алып XVIII быуат аҙағына тиклемге тарихын үҙ эсенә алған беренсе томы декабрь-ғинуар айҙарында уҡ нәшер ителер, тип көтөлә. Унда башҡорт әҙәбиәте тарихы ла үҙенең лайыҡлы урынын алған.

* * *

Салауат Рәхмәтулланың 70 йәшлек юбилейына арнап Ауырғазы районының Солтанморат ауылы мәҙәниәт йортонда әҙәби-мәҙәни кисә уҙғарылды.

Башҡортостан Яҙыусылар союзы идараһы рәйесе урынбаҫары Фәрзәнә Ғөбәйҙуллина Салауат Рәхмәтулланы ҡотлап, Яҙыусылар союзының сәләмен тапшырҙы. Кисәлә Башҡортостандың халыҡ шағиры Марат Кәримов, Зәйнәб Биишева исемендәге «Китап» нәшриәтенең балалар әҙәбиәте бүлеге мөдире, шағирә Әлфиә Әсәҙуллина, Башҡорт дәүләт педагогия университетының әҙәбиәт кафедраһы мөдире, филология фәндәре докторы Рәиф Әмиров, «Ҡыҙыл таң» гәзите редакцияһынан шағирә Фәниә Ғәбиҙуллина, журналист Фәрит Фәтҡуллин, «Толпар» журналының бүлек мөхәррире Мөнир Вафин, Стәрлетамаҡтан драматург Кәбир Аҡбаш, шағирә Римма Ғәлимова, Асия Яппарова, Күмертауҙан Закир Әҡбәров, Кинйәғәли Абдуллин ҡатнашты. Шағирға арналған кисә үҙешмәкәр сәнғәт оҫталарының сығышы менән аралаштырып алып барылды. Бында яҡташтары шиғырҙарына яҙылған йырҙар ҙа яңғыраны.

* * *

Матбуғатҡа яҙылыу мәсьәләләренә бәйле, шағирҙар Фәнил Күзбәков, Рәмил Йәнбәк Ейәнсура районының үҙәк китапханаһында (директоры – Н. Ф. Кәримова), Исәнғол ауылының башҡорт гимназияһында (сара өсөн яуаплы – А. М. Уразаева), Абзан (директор урынбаҫары – Г. Н. Бикбулатова), Муйнаҡ (директоры – Д. Ф. Аҙнағолов, ярҙамсыһы – Г. Ҡ. Ҡотошова), Ибрай (башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы – З. Х. Аҡбулатова) урта белем биреү мәктәптәрендә, Көйөргәҙе районының Рәшит Солтангәрәев исемендәге Яңы Таймаҫ урта белем биреү мәктәбендә (директоры – Ф. Х. Ҡобағошов) уҡытыусылар, юғары синыф уҡыусылары, китапхана хеҙмәткәрҙәре, әҙәбиәткә, милли рухиәткә битараф булмағандар менән осрашыуҙар үткәрҙе. Сарала ҡатнашыусылар, бөгөнгө көнүҙәк проблемаларҙы хәл итеүҙә матбуғаттың алыштырғыһыҙ роль уйнауын билдәләп, ваҡытлы баҫмаларға әүҙем яҙыласаҡтарына ышандырҙы. Һөйләшеүҙәр әңгәмә рәүешендә барҙы, һорауҙар бирелде, баҫманы уҡымлыраҡ итеү йәһәтенән кәңәштәр яңғыраны.

* * *

Болгарияның Габрово ҡалаһында бынан ҡырҡ йыл элек Юмор һәм сатира

йорто асылғайны. Шунан бирле бында төрлө илдәрҙең, шул иҫәптән Башҡортостандың, юмористары менән дә бәйләнеш ныҒый, ете меңгә яҡын гәзит-журналдар фондында беҙҙең «Һәнәк» тә бар.

Габрово фестивалендә иң йыш ҡатнашыусы, әлбиттә – халыҡ-ара «Алеко» конкурсы һәм С. Михалков исемендәге премия лауреаты Марсель Сәлимов. Был юлы әҙиптең рус, болгар, башҡорт телдәрендә сыҡҡан «Дуҫлыҡ китабы»ның исем туйы уҙғарылды. Кисәлә Юмор һәм сатира йорто директоры Татьяна Цапкова, «Башҡортостан – Болгария» дуҫлыҡ йәмғиәте етәксеһе Ярослав Шредер, Рәсәй һәм Бойондороҡһоҙ дәүләттәр берләшмәһе кәңәшсеһе Колье Колев, Габрово учреждениелары вәкилдәре сығыш яһаны, ә Марсель Сәлимов болгар ҡәләмдәштәренә (оҙаҡ йылдар хатлашҡан һәм тәүләп күрешкән Недялка Тодорова ханым да залда ине) бәйле күңелле иҫтәлектәре менән уртаҡлашып, әҫәрҙәрен өс телдә уҡыны, республикабыҙ хаҡында һөйләне.

* * *

Башҡортостандың халыҡ шағиры, күренекле йәмәғәт эшмәкәре Мостай Кәримдең тыуған көнөн, 20 октябрь, йыл да хәтер көнө итеп билдәләү матур традицияға әйләнде.

Был көндө төшкә тиклем Өфөләге мосолман зыяратында уның ҡәберенә сәскәләр һалынды.

Ә Өфөлә, әҙип ғаиләһе менән йәшәгән Энгельс урамындағы 5-се йортҡа ҡуйылған таҡтаташ эргәһендә, шағирҙың төрлө быуын ҡәләмдәштәре, яҡташтары һәм уҡыусылары йыйылды.

Хәтер көнөнә арналған митингыны асып, БР Хөкүмәте Премьер министры урынбаҫары Салауат Сәғитов Мостай Кәримдең оло әҙәби мираҫы, уның һәр быуын өсөн ҙур әһәмиәте хаҡында һөйләне.

Бында шулай уҡ Өфө ҡалаһы хакимиәте башлығы урынбаҫары Марат Ғәлиуллин, Киров районы хакимиәте башлығы Динар Хәлилов, Шишмә районы хакимиәте башлығы Флүр Үрәзмәтов, С. Юлаев исемендәге дәүләт премия лауреаты, шағир Ирек Кинйәбулатов, шағирҙың ҡыҙы Әлфиә Кәримова һәм башҡалар сығыш яһаны, уҡыусылар шағирҙың шиғырҙарын башҡорт һәм урыҫ телдәрендә уҡыны.

Хәтер кисәләре Өфөләге М. Кәрим исемендәге гимназияла һәм Шишмә районының М. Кәрим исемендәге Келәш урта мәктәбендә лә уҙҙы.

* * *

Башҡортостан Яҙыусылар союзы идараһы рәйесе Риф Тойғонов етәкселегендәге бер төркөм әҙиптәр – Ғәлим Хисамов, Георгий Кацерик, Фәнил Күзбәков, Рәмил Йәнбәк, Светлана Ғафурова – Күгәрсен районында булып ҡайтты. Тәүҙә улар Йомағужала Башҡортостан Республикаһының халыҡ шағиры Александр Филипповтың тыуыуына 80 йыл тулыуға арналған хәтер кисәһендә ҡатнашты. Уны район хакимиәте башлығы Фәрит Мусин асты һәм йылы иҫтәлектәре менән уртаҡлашты. Артабан Риф Тойғонов, Георгий Кацерин, Рәмил Йәнбәк, Светлана Ғафурова, әҙиптең яҡындары һәм яҡташтары сығыш яһаны.

Төштән һуң Тәүәкән ауылы мәҙәниәт йортонда күгәрсендәр яҡташ шағир Рәмил Йәнбәктең 60 йәшлек юбилейы айҡанлы байрам үткәрҙе. Район хакимиәте башлығы Фәрит Мусин юбилярҙы ихлас ҡотланы, бүләктәр тапшырҙы. Р. Йәнбәкте шулай уҡ бергә килгән ҡәләмдәштәре, ауылдаштары, уҡыусы балалар тәбрикләне. Йырсылар Ғәзим Ильясов, Мәҙинә Рәхмәтуллина, башҡа артистарҙың сығышы кисәгә йәм өҫтәне.

* * *

Башҡорт дәүләт университетының Бөрө филиалында «Ағиҙел» журналы хеҙмәткәрҙәре менән осрашыу уҙғарылды. Студенттар алдында баҫманың баш мөхәррир урынбаҫары Рәмил Йәнбәк, бүлек мөхәррирҙәре Фәнил Күзбәков, Сабир Шәрипов сығыш яһаны. Улар журнал хаҡында һөйләне, уны таратыу мәсьәләләренә туҡталды. Йәштәр «Ағиҙел»де даими уҡып барыуҙарын белдерҙе, һорауҙар бирҙе.

Әҙиптәр шулай уҡ үҙ әҫәрҙәрен уҡып ишеттерҙе, теләк һәм тәҡдимдәрен әйтте.